# Ағиҙел

**Өфө,
ноябрь
2010**

**11(1051)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.11. 2010. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 650 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0151.10.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2010 (11,1051)**

## БЫЛ ҺАНДА:


ШИҒРИӘТ

**Мәхмүт Һибәт.** Миләшһеҙ йәй. Ш и ғ ы р ҙ а р. ......................5

**Рауил Шаммас.** Көҙгө бөрөм – йәшәү серем.
Ш и ғ ы р ҙ а р. ......................................................................12

**Мөхәммәт Закиров.** Таныуҙары ҡиммәт.
Ш и ғ ы р ҙ а р. .....................................................................22

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Гөлнур Яҡупова.** Ҡатындар. Т р и л о г и я.
Бер һөйгәнем өсөн. Икенсе китап. *Дауамы.* ..........................31

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Зиннур Ураҡсин.** Рәссам. П о в е с т ь. ................................79

ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Мостай Кәрим.** Көндәлектәр. *Дауамы.* ..............................101

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?
**Фәнил Күзбәковтың Факиһа Туғыҙбаева, Йомабикә Ильясова** менән әңгәмәһе. ................................................125

**Суфиян Поварисов.** Драматургтың рухиәте. ....................141

*2010 – Уҡытыусы йылы*

**Сабир Йыһаншин.** Мәғарифтың элекке данын
ҡайтарайыҡ. .......................................................................149

ПУБЛИЦИСТИКА

**Яҡуп Шәмсетдинов.** Йондоҙло ғүмер. ...............................160

**Мәхмүт Хужин.** Ә һеҙ ваҡытлы матбуғатҡа
яҙылдығыҙмы? ....................................................................176

БАШҠОРТ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ

**Рәлис Ураҙғолов.** Аҫабалар һәм Аксаковтар. ....................179

«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА И ПОЭЗИЯ

**Махмут Хибат, Равиль Шаммас, М. Закиров**. *Стихи*.
**Г. Якупова.** Женщины. *Трилогия*. Ради единственной любви. Вторая книга. *Продолжение*.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**З. Ураксин.** Художник. *Повесть*.

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Мустай Карим**. Дневники. *Продолжение.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

Является ли литература учебником жизни? Интервью
**Ф. Кузбекова** с **Ф. Тугузбаевой, Ю. Ильясовой.**
**С. Поварисов.** Духовность драматурга.

*2010 – год учителя*

**С. Зиганшин.** Вернем былую славу народного образования.

ПУБЛИЦИСТИКА

**Я. Шамсутдинов.** Яркая жизнь.
**М. Хужин.** А вы подписались?

ЛЕТОПИСЬ БАШКИРА

**Р. Уразгулов.** Вотчинники и Аксаковы.

ПИСЬМА В “АГИДЕЛЬ”

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Мәхмүт
ҺИБӘТ

# МИЛӘШҺЕҘ ЙӘЙ

## Ҡорос батыр тураһындағы риүәйәт

*Бер күк, ҡояш аҫтындағы*
*Зәй — Сөн буйы илендә*
*Ул иң ғәййәр яугир ине,*
*Ҡот ине һәр һүҙендә.*

*Ут ине, иң-иң аҫаба*
*Башҡорт ине ерендә.*
*Ул барҙа йорт, ҡор ҡаҡшаһа,*
*Яуыз ятты гүрендә.*

*Ҡаҡшатыусы яуыздың ул*
*Үҙен киҫеп ауҙарҙы.*
*Вәхшәт ауҙы, вәхшәт тыуҙы,*
*Илдә тиңһеҙ яу барҙы.*

*“Яңы йәлләт йән-хистәге*
*Утҡа ла хужа булмаҡ —*
*Суҡындырмаҡ инде илде,*
*Көрәшем минең — иң хаҡ!” —*

*Тиеп оран һалды йортҡа,*
*Һәм уның ауылынан*
*Берәүҙе лә суҡындыра*
*Алманы көс. Яңынан.*

---

*Мәхмүт Һибәт (Мәхмүт Һибәт улы Уразаев) 1936 йылда Ейәнсура районы Ғәббәс ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Башҡортостан радио комитетында, республика ваҡытлы матбуғат баҫмалары редакцияларында эшләй. Шиғырҙары, поэмалары, хикәйәләре, драмалары киң ҡатлам уҡыусыларға яҡшы таныш. Тиҫтәгә яҡын китап авторы.*

*Атылыр уҡ булды һаман*
*Ҡорос батыр — ил ире.*
*Мин — нур, ти ул, йәшәп үләм,*
*Тыуып булмай бит кире...*

*Сөн буйының сың-көйҙәре*
*Тулъан ине эңергә,*
*Ошо яҡтың сал бабайы*
*Бирелгән саҡта һүҙгә.*

*Миңә минең сал олатам*
*Нисек һөйләгән уны,*
*Шулай еткерҙем һиңә лә,*
*Тине ҡартым — Сөн улы,*
*Риүәйәттәр — ил тулы.*

## *Күс балының татындайҙыр*

*Артымдан үртле шом түгел,*
*Артымдан көн, йәм ҡалһын,*
*Тиеп йәшәнем мин ерҙә,*
*Тик гонаһ туны — ҡалын.*

*Уны тишеп сыъа алмаҫ*
*Кеүек таң нуры, ҡалҡып.*
*Ә таңһыҙ көн ҡабатланмаҫ,*
*Кис баҡмаҫ, моңо һарҡып.*

*Донъяның сере илаһи,*
*Ҡото — күк утындайҙыр.*
*Үҫкән аъас та бит — даһи,*
*Һәм ҡот — нәҡ тулҡындайҙыр.*

*Шулар булды бит хайәтем,*
*Хайәтем ҡалмаҫ етем:*
*Хис-моңомдо аяу иттем,*
*Мәлдән мин таң өлгөрттөм.*

*Изге ҡабатланыу, тимәк,*
*Тамырлы минең өсөн.*
*Өлкәр түгел тишек иләк,*
*Ер һаҡлар ҡорттар күсен.*

*Күс балының татындайҙыр,*
*Тим мин, йәшәүҙең йәме.*
*Артымда үртле шом түгел,*
*Ҡалыр мәл-тулҡын сәме.*

## Миләшһеҙ йәй

*Миләшһеҙ йәй кәләшһеҙ өй*
*Кеҫек тойолдо миңә.*
*Ярты-йортолоҡ — зәғиф көй,*
*Шатлыҡ килтерер, тимә.*

*Миләшһеҙ йәйҙе ҡош тубы*
*Аңлайҙыр тәрәнерәк.*
*Уларҙың, килһә йыл уңай,*
*Көйҙәре аһәңлерәк.*

*Өй түрендә лә — шулайҙыр,*
*Тик һәр йылын кирегә,*
*Ҡытлыҡҡа ер-күк бормайҙыр,*
*Юҡлығын барлыҡ еңә.*

*Миләшһеҙ йәй көйһөҙлөгө —*
*Кәләшһеҙ өй көйөлөр.*
*Уның нурһыҙ, серһеҙ күге,*
*Унда йән гел көйөнөр.*

*Кәләшһеҙ өй генә — борсоу,*
*Унда һәр мәл кирегә,*
*Көйһөҙлөккә, түлһеҙлеккә*
*Ҡоролған кеҫек, шиңә.*

*Изге донъяның ваҡытын*
*Үлтереп йәшәй унда*
*Кәләшһеҙ улан — буш алтын,*
*Тоймай ҙур гонаһын да.*

*Миләшһеҙ йәй ни генә, йә,*
*Был гонаһ ҡаршыһында?*
*Йәндәрҙә бушлыҡ киңәйһә,*
*Көн ҡалыр ниндәй һында?*

## Күк көҙрәте

*Ай, аяҡһыҙ яла яман:*
*Мине ялманы ул тамам.*
*Туғыҙ баллы ғәрәсәт ул,*
*Тау иңрәтер йәрәхәт ул.*

*Яласыға ине татлы,*
*Ҡындың эсе ине яҡты.*
*Ул — тарлыҡтың бер яҙаһы.*
*Дуҫтыр уға гүр ыҙаһы.*

Яла уъы уъа — алла,
Тик ҫре юҡ уның алда.
Кукте ергә йығып туймай,
Көн тиреһен тунай-тунай.

Ул тын алмай шунан башҡа.
Хис-тат әйләнһен, ти, ташҡа,
Һәр кемдең, ти, ҡатһын йәне,
Ҡаҡ тынлыҡ, ти, йәшәр бушҡа...

Кук ҡөҙрәтле, ер — ҡөҙрәтле,
Шул ҡөҙрәтте ул онотто.
Үр йөҙөнә төкөргәйне,
Яласыны йәшен һуҡты.

## Ҡаяла сакта һине хәтерләҫем

Ҡая ъоррлыъын һанламаным,
Ҡая остарында ҫҫһәм дә.
Кугемдәге сәйер таң шикелле,
Һин балҡының ҡайнар хисемдә.

Мин ынтылдым тойъоң ҡаяһына,
Бейегәйә генә ул барҙы.
Артыҡ ъорурлыъың айыръандыр,
Бергә ҡушмай, беҙҙең юлдарҙы.

Ҡая ъорурлыъын һанлар инем,
Үҫһәм ҡабат ҡая осонда.
Ҡул шикелле кутәрелгән һынташ,
Минең йәшем — уның усында.

## Йыһан — сурәм

Тау урҙәре һынап ҡарай.
"Йыһан — тәңрем, йыһан — сурәм", —
Шулай йырлап килә малай,
Шулай йырлап аъа Һурәм.

Бала саъым, тәуге юлым
Оло донъя буйлап киткән.
Шулай мине тартты алъа,
Кур, болон, тип, биҙәк сиккән!

"Утлы орлоҡ — йондоҙ һипкән
Бейек ҡыйыъы донъяның,
Хистәрҙе ул урле иткән" —
Гел шул ауаз килде куктән.

*Мин әле лә сыҡһам юлға:*
*“Йыһан — тәңрем, йыһан — сүрәм”, —*
*Тиеп көйләп, баҫам алға,*
*Юл еткерә яңы таңға.*

***

*Мине өҙгөләне юғалтыуым ғүмерем буйына,*
*Өҙгөләй, туҡмай алмаҫ ине улай иң тос һуйыл да.*

*Ниндәй серҙәрҙе йотоп, тын, тын ҡалдың һин был йыһанда.*
*Иң менән үр, нур менән моң ҡауышып, ҡайнап торғанда?*

*Рәнйеү, ҡаза ғынамы һәр юғалтыуҙың да яҙаһы?*
*Ә, бәлки, был юғалтыуым — табыштыр? Хис мин ҡуҙҙағы.*

*Фәһеме биҙҙермәҫ наҙ һағышы бит мин мең өҙөлөр,*
*Әйт, тойһаң минең был һағышымды, таңыңа. Таң һиҙгер.*

## Ысынлыҡ

*Инде сумам ысын тормошҡа мин,*
*Ысын көн тулҡыны эсенә.*
*Был тормошта мыҫҡыл хәстәр булып,*
*Ҡара яҡмай һинең хисеңә.*

*Был тормошта еңел бер ни ҙә юҡ,*
*Таш һөйрәгән кеүек аҙым да*
*Ялған бәхет күбегенән татлы,*
*Саткың шиңмәй тынһыҙ, тар ҡында.*

*Был тормошта офоҡ бейеклеге*
*Ғаләмдәге кеүек иркле.*
*Ысын кеше йәшәгәндә генә*
*Ҡояш — ихлас нурлы, ер — күкле.*

*Ысын кеше — ышаныстың үҙе,*
*Ынтылыштың үҙе, таң һымаҡ.*
*Офоғома бағып, бер һыҙғырһам,*
*Осоп килер төҫлө арғымаҡ.*

*Ул күктәргә мине генәме ни,*
*Донъям хозурлығын күтәреп,*
*Эҙҙәрендә шәфәҡ балҡытырҙай,*
*Ысынлыҡ, тип Ерҙең күсәре.*

*Ҡемдер әгәр ошо ысынлыҡты*
*Йолҡоп алыр булһа йәнемдән,*
*Ялған бер мәле лә юҡ көн кеүек,*
*Йөҙ йәшермәм ерҙән, илемдән.*

## Ит һин азат

Таң шикелле тәңрең булһын,
Ер-күк булһын өйрәтеүсең.
Ҡот юҡ ерҙә юл юҡ, юл тын,
Үр күтәрмәҫ, көйрәтер өн.

Яҡшылыҡҡа килмәҫ мәлдәр,
Бәрәкәте ҡалмаҫ көндөң.
Ырыҫлылар ғына тиңдәр
Ҙурлауына аҡ ғүмерҙең.

Ҡот-ырыҫҡа тулған ерҙә
Бар кеше лә, бар йәшәү ҙә,
Инаныу ҙа таңға, сергә,
Гонаһ ҡыуылғандай гүргә.

Шундай илде ит һин ижад,
Тылсым булһын был йәшәүҙә.
Фажиғәнән ит һин азат
Үҙеңде, тим, иң-иң тәүҙә.

Ризалыҡ-нур ал һин таңдан —
Изгелектәр тыуған юлдан.
Уралҡай бит түгел туҙан,
Үҫтермәҫ ул зәғиф улан.

Таң шикелле тәңрең булһын,
Ер-күк булһын өйрәтеүсең.
Улар бирер йөрәк көсөн,
Хис ҡабынмай үртәр өсөн.

## Софоклға

О, Софокл! Саф аҡыл һин,
Сүгә белмәҫ хисең салдыр.
Илдәр күген күтәрәһең
Йәш нур менән көсөң шулдыр.

Һин бар ерҙә ике ҡояш —
Бер офоҡта, бейеклектә.
Йондоҙҙар ҙа өнһөҙ, серһеҙ,
Йә ни бар һуң илһеҙ күктә?

Фажиғәләр һөрөмөнән
Юғарыраҡ һәр саҡ һүҙең.
Һәр ғасырҙың йөрәгенә
Ваҡыт сере булып керҙең.

## Кинйәнең илгә биргән һорауы, яуға калкыуы тураһындағы риүәйәт

*Тыуанһыҙ юл — үлектер,*
*Юлһыҙ йән — буш сүллектер.*
*Бушлыҡ тигән кук — ҡөҙрәт,*
*Уға нимә һуң сиктер.*

*Ыҙаһыҙ йәм, көн юҡтыр,*
*Көнөң терәге уҡтыр,*
*Кәрәк икән — ҡылыстыр,*
*Аяулы ҡуҙаҡ — суҡтыр.*

*Хужаһыҙ, йәл ил булыу*
*Ҡыймаймы ир намыҫын?*
*Ҡасан донъя маҡтаған*
*Зәғифләгән аң ыҫын?*

*Дөмәй менән Алдарҙың*
*Ғәйрәте булған таңдай.*
*Түлен ҡырһаң ҡамыштың,*
*Ул да ҡәһәрһеҙ аумай.*

*Хужаһыҙ, йәл ил булыу —*
*Бармы шунан ҙур хурлыҡ?*
*Әсә ҡалдырамы ни*
*Үҙенән нур туңырлыҡ?*

*Язаһыҙ юҡ бер ни ҙә,*
*Ер, ғәләм рәнйегәндә,*
*Хисең шат йылмайырмы?*
*Йылмайыр ялған бәндә.*

*Ғаләмдә үндай ялған,*
*Ундай шашыныу юҡтыр.*
*Иргә ирлек ҡайтарған —*
*Ил-ергә тиң ырыҫтыр.*

*Илгә ил, ырыҫ хужа,*
*Таң ул оҡшаһын тыуға.*
*Бына шуның хаҡына*
*Күтәреләм мин яуға.*



**Рауил Шаммас**

# ҠӨҘГӨ БӨРӨМ – ЙӘШӘҮ СЕРЕМ

## *Ғәжәпһенмә*

*Ауыр ҡайғы килгән саҡта әгәр*
*Күҙҙәремдә йәштәр тапмаһаң;*
*Башты түбән эйеп ҡатып ҡалмай,*
*Теште ҡыҫып алға атлаһам,*
*Юҡ, рәнйетмә мине, таш бәғер, тип,*
*Тормош үҙе шулай өйрәтте.*
*Баш эйməҫлек итеп ҡайғы алдында*
*Таштан ҡаты итте йөрәкте.*

*Кескәй ҡыуаныстар килгәндә лә*
*Күҙҙәремдә йәштәр күренһә,*
*Таңғы ысыҡ кеүек ике тамсы*
*Керпегемә ҡушылып үрелһә,*
*Ғәжәпһенмә һис тә – һәр шатлыҡты*
*Шулай тоям, шулай кисерәм,*
*Ҙур ҡайғыға башты эймәһәм дә,*
*Кескәй шатлыҡтан да иҫерәм.*

*Ғәжәпһенмә, мине кесе йәштән*
*Тормош үҙе шулай өйрәтте:*
*Ерҙең наҙын нығыраҡ тойор өсөн*
*Йомшаҡ итте минең йөрәкте.*

---

*Рауил Шаммас (1930) – Стәрлебаш районы Хәлекәй ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтының филология факультетын тамамлай. Мәктәптә, район гәзите, "Ҡыҙыл таң" гәзите редакцияларында, "Китап" нәшриәтендә, Яҙыусылар союзы аппаратында эшләй.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 80 йәше менән ихлас ҡотлайбыҙ, ижад ҡыуаныстары теләйбеҙ.*

## *Әсә һәм бала*

*Бала йоҡлай.*
*Әсә эскә уҙа*
*Баҫып ҡына аяҡ осона.*
*Себен осһа безләп өйҙә,*
*Әсә:*
*“Ул уяныр“, — тиеп борсола.*

*Тәҙрәләргә ҡуя пәрҙә ҡороп,*
*Төшмәһен тип ҡояш нурҙары.*
*Ҡояш нурынан да йомшағыраҡ,*
*Йылыраҡ шул әсә ҡулдары.*

## *Һөйөү һүҙе*

*Мин тыуғас та, ҡояш көлә-көлә*
*Бишегемә эйелеп ҡараған.*
*Тормошто һөй, тиеп, наҙлай-наҙлай,*
*Сәстәремде һыйпап тараған.*

*Зәңгәр күгем үпкән күҙҙәремдән:*
*“Төҫөм һиндә, — тигән, — онотма“.*
*Һандуғастар әйткән тәҙрә аша:*
*“Йырлап йәшә, — тигән, — бойоҡма“.*

*Төндәрендә ай ҙа юрған итеп*
*Нурын япҡан, әйткән: “Өшөмә“.*
*Йоҡлаһам да, янда һаҡлап торған,*
*Йылмайғанмын уға төшөмдә.*

*Минең менән бергә аунап үҫкән*
*Болондарҙа шаян сәскәләр.*
*Шулар бары ла минең күңелемә*
*Һөйөү орлоҡтары сәскәндәр.*

*Шуға, ахыры, яҡты ҡояш нурын*
*Ҡара болот килеп ҡаплаһа,*
*Йөҙҙәремә күсә ҡараңғылыҡ,*
*Көлөп торған сәскә тапалһа,*
*Гөлдөң күҙҙәренән йәштәр тамһа,*
*Минең йөрәгемдән ҡан тама.*
*Улар көлөп торһа,*
*Йырлап торһа,*
*Минең өсөн донъя — тантана.*

*Кешеләрҙең йылы ҡарашында*
*Ҡояш ҡайнарлығы бар һымаҡ,*
*Күңелдәрҙә ятҡан яҡшылыҡтар*
*Сәскәләге татлы бал һымаҡ.*

*Таштарҙы ла хатта иретер һымаҡ*
*Кешеләрҙең йылы ҡарашы.*
*Кешеләрҙең ошо саф ҡарашын,*
*Күңелдәрҙә ятҡан бал кәрәҙен*
*Бөтә Ер шарына өләшә-өләшә,*
*Эх, бараһы ине, бараһы!*

## Бер минут

*Бер ҡараһаң, кеше ғүмерендә*
*Нимә генә инде бер минут.*
*Ә уйлаһаң, ошо бер минутта*
*Кеше бар донъяла, кеше — юҡ.*
*Ҡай берәүҙәр ерҙең күкрәгендә*
*Йөҙәр йылдар йәшәп китәләр.*
*Шул йөҙ йылдың бары минутында*
*Быуаттарҙан-быуаттарға барыр*
*Оло ижад бүләк итәләр.*
*Бер минутлыҡ осрашыуҙар була,*
*Күҙгә күҙ ҡараша бер минут.*
*Шул минутта ҡабынып йөрәктәргә,*
*Ғүмер буйы дөрләп йөрөй ут.*
*Шул бер минут кешене бәхетле итә*
*Йә бәхетһеҙ итә ғүмергә.*
*Шул бер минут ерҙе гөл итә ала,*
*Әйләндерә ала күмергә.*
*Бер ҡараһаң, кеше ғүмерендә*
*Нимә генә инде бер минут.*
*Ә уйлаһаң, ғүмер — үҙе бер ут,*
*Янды, һүнде ғүмер — бер минут.*

## Тел асҡысы

*Әлифба тотоп сыҡҡанда*
*Асып ауыр ишекте,*
*Әсәйемдең талғын ғына*
*Йомшаҡ тауышын ишеттем:*
*— Балам, һиңә тел асҡысы!.. —*
*Юлым шулай башланды.*
*Әсәйемдең шул һүҙҙәре*
*Гел күңелдә һаҡланды.*
*“Тел асҡысы“ ни  нәмәлер?*

*Был тынғыһыҙ йөрәкме?*
*Күңелгә гел тоғро юлдаш*
*Намыҫ тигән терәкме?*

*Ерҙең матурлығын эҙләп*
*Һөйөп баҡҡан күҙме ул?*
*Кемдәргәлер әйтеләсәк*
*Берәй йылы һүҙме ул?*

*Кешеләрҙе һөйөндөрөп*
*Һуҙылған ҡулыммы ул?*
*Осо-сите күренмәгән*
*Бормалы юлыммы ул?*

*Яҡшылыҡты яманлыҡтан*
*Айырып бирер телемме?*
*Мине үҙенең улы иткән*
*Һәм ир иткән илемме?*

*Ни булһа ла, тел аҫҡысы –*
*Бәхет аҫҡысымдыр ул,*
*Киләсәккә алып менер*
*Ғүмер баҫҡысымдыр ул.*

## *Тынлыҡ*

*Ағастарҙы ап-аҡ ҡар һырыған.*
*Тып-тын булып ҡалған бар урман.*
*Хужа бында бары тынлыҡ, тынлыҡ.*
*Үҙе бер музыка был тынлыҡ:*
*Әллә ниндәй залды шаулатырлыҡ,*
*Ҙур оркестрҙарға торорлоҡ.*

*Ҡар шығырҙап ҡуйҙы, һиҫкәндереп.*
*Ҡош һайраны.*
*Сабыр, сабыр ит!*
*Тертләп ҡуйҙы күңелем, шул тынлыҡты*
*Кемдер хәҙер тартып алыр, тип.*

*Саҡ ҡынаға сабыр! Ә унан һуң*
*Бар урманым, әйҙә, шауларһың.*
*Ҡыш көнө лә урман ҡошһоҙ түгел,*
*Әйҙә, ҡош та ярһып һайрарһың.*
*Тик әлегә, бына саҡ ҡынаға*
*Килә минең тып-тын ҡаларым,*
*Тынлыҡтан йыр-моңдар аларым.*

## *Ҡәҙерен беләһеңме?*

*Тома һуҡыр әгәр көтмәгәндә*
*Күҙен асһа аҙға, бик аҙға.*
*Ул шул минут*
*Яҡты көнгә ҡарап*
*Һуҙһеҙ ҡалыр ине бер аҙға.*

*Әүрелер ине бер рәссамға,*
*Ерҙе, күкте, донъя төҫтәрен*
*Ул һүрәтләр ине тиңе булмаҫ*
*Рәсем итеп, ташып хистәре.*

*Ишетә ҡалһа әгәр һаңғырау кеше*
*Ерҙең моңон, гөрөн, тауышын,*
*Онотолмаҫлыҡ бер йыр итер ине*
*Хистәренең бөтә ағышын.*

*Бер мөғжизә тыуып.*
*Ике ҡулһыҙ —*
*Ҡуллы булһа?*
*Улмы? Шул мәлдә*
*Баҡса итер ине был ерҙе,*
*Ә һуңынан,*
*Шатлығынан илап,*
*Һөйөп үтер ине гөлдәрҙе.*

*Ә һин мәхрүм түгел береһенән дә,*
*Бөтәһе бар: ҡулың, аяғың,*
*Күҙҙәрең бар, ишетер ҡолағың бар,*
*Гүзәллеккә тулы һәр яғың.*

*Бөтәһе бар, эйе, бөтәһе бар!*
*Уйлағаның бармы һин берәй:*
*“Ҡәҙерен беләмме һуң?”*
*Уйлаһаң бит,*
*Шул һорауҙан йөрәк тетрәр.*

## *Ҡар бөртөгө хаҡында уйланыу*

*Сихри биҙәк,*
*Ябай ҡар-күҙәнәк —*
*Ҡар бөртөгө минең усымда.*
*Һөйләшәһем килә уның менән,*
*Күптән күргән яҡын дуҫымдай.*
*Тиҙҙән ирер,*
*Тамсы йә быу булыр...*

*Ирегәнсе ғүмере бар әле,*
*Бар булмышы менән йәшәй әле.*
*Әлегә ул үҙе — ҡар әле.*

*Ҡар-ҡыҙәнәк.*
*Бөйөк тәбиғәттең*
*Ҡескәй генә ижад емеше.*
*Яңы йылдың яңы яҡты көнөн*
*Үҙе менән алып килеше.*
*Гүзәллеге ҡала ҡыҙ алдымда.*
*Рәсем булып ҡала, юйылмай.*
*Ҡала, тимәк, яңғырар бер йыр булып,*
*Һандуғастың сихри моңондай.*
*Һәр тарафты ҡалай таң ҡалдырып,*
*Аҡлыҡ булып баҡҡан донъяға,*
*Ҙур ҡояшты хатта ғашиҡ итеп,*
*Сафлыҡ булып баҡҡан донъяға.*

*Һә тигәнсе,*
*Бына ҡыҙ алдымда*
*Йылы усымда ҡарым ирене.*
*Яңы йыл таңында тик уйымда*
*Сихри биҙәк һүнмәй йөрөнө.*

*Мин үҙем дә, хәйер, Ер усында*
*Түгелме ни шундай ҡыҙәнәк?*
*Тик бер балҡып,*
*Тиҙ үк һүнеремде*
*Ул да микән шулай ҡыҙәтә?*
*Ә миңә һуң шуны уйларғамы?*
*Һүнгәнсе бит ғүмер бар ҙаһа.*
*Мин йәшәрмен, Ерҙә аҡлыҡ ҡалһа.*
*Йыр яңғыраһа ерҙә,*
*Йыр ҡалһа.*

## ***Ни мөғжизә?***

*Ҡояш алтын ижау менән*
*Шишмәнән һыуҙар эсә.*
*Ҡояш — тауҙай ут йомғаҡы,*
*Шишмә шул утҡа ҡусә.*

*Аптырарһың, ни мөғжизә?*
*Ниндәй алыҫ аралар —*
*Һәр иртәлә ошо икәү*
*Бер-береһенә баралар.*

Күк батшаһы океандарҙан
Күпме һыуҙар эсмәгән.
Ҡояш тиклем дәү ҡояшты
Ни килтерә шишмәгә?

Теш һындырыр һалҡын шишмә
Ниңә һуң күсә утҡа?
Уйлап торһаң, был хәлдә лә
Бар икән дә бер тотҡа:
Шишмә, сарсап яҡтылыҡҡа,
Утҡа бара атлығып.
Ә ҡояшты саҡырып ала
Шишмәләрҙең сафлығы.

## Көҙгө бөрөм — йәшәү серем

Яҙ-йәй биргән бөтә байлыҡтарҙы
Көҙгө ҡапсыҡтарға тултырып,
Ҡыш көткәндә мин донъяға килдем.
Тыуған көндә бына ултырып
Шиғыр яҙам.
Уйҙар юлдар урай.
Татлы уйҙар, татлы һағыштар...
Әсәм Рауза мине ижад иткән,
Изге юлға тиеп бағышла.
Әсәм теләктәре ҡабул булды:
Юлым изге, шөкөр Хоҙайға.
Атам миңә алтын аҡыл биргән —
Рәхмәт тимен иң тәү уларға.

Ҡыштарымды атлап, яҙға сыҡтым,
Яҙ-ҡыҙымды үлеп яраттым.
Күңелемә алып яҙ йәмдәрен,
Наҙҙар итеп ергә тараттым.

Һалҡын көҙөм миңә үпкәләмәҫ
Йылы яҙҙы артыҡ күргәнгә,
Көҙҙөң тымып ҡалған бөрөләрен
Япраҡ-сәскә итеп үргәнгә.

Бер уйлаһаң, яҙҙың сәскәләре —
Тантанаһы көҙгө бөрөнөң.
Көҙгө бөрөләрҙә ятмай микән
Бар асылы йәшәү серенең?!

Көҙгө бөрөләрҙе өшөтмәйсә
Яҙға тапшырамын, шикелле.
Көҙөм минең, Еңеү алып килгән
Һалдат һымаҡ, һоро шинеле.

*Яҙым-ҡыҙым килер инеме ни,*
*Сабыр, һалҡын көҙөм булмаһа,*
*Көҙгө тамырҙарым, бөрөләрем*
*Йылы яҙъа ҡулын һуҙмаһа.*

*Тыуъан көҙөм.*
*Тып-тын бөрөләре*
*Сабыр ъына көтә яҙ айын.*
*Яҙҙы яратһам да, бар наҙ өсөн*
*Көҙгә бурыслымын, моъайын.*

## *Йөрәк*

Йыртып астым күкрәгемде,
Йолҡоп алдым йөрәгемде.

**Рәшит Назаров.**

*Мин өйөмдә яңъыҙ ҡалдым, —*
*Бик тәбиъи ундай хәлем.*
*Аҙмы йырҙар бүләк итте*
*Шундай яңъыҙ ҡалъан мәлем.*

*Әле бына нишләнем мин?*
*Үҙ-үҙемә һыялмайым:*
*Өйрәтмәгән тай шикелле,*
*Йөрәк тулай, тыялмайым.*

*Ишегемде иңләп астым —*
*Сыҡтым донъя ҡосаъына.*
*Йөрәк иңләй ерҙе, күкте —*
*Ыласындай оса ъына.*

*Әйтә: «Тыныс булалмайым.*
*Бик күп тоттоң мунсаъыңда.*
*Ер урайым. Ебәрмәһәң,*
*Ташлап китәм ул саъында».*

*Китте йөрәк, осто йөрәк,*
*Утлы усаҡтаръа керҙе.*
*Яуҙа ауъан йәш һалдатҡа,*
*Шәфҡәт булып, һулыш өрҙө.*

*Тәъәм көткән ас сабыйъа*
*Үҙ киҫәген бүлеп бирҙе.*
*Ҡайнар ҡанын шишмә итеп*
*Һуъарҙы ул көйгән ерҙе.*

*Ҡауыштырҙы Саҡ-Суҡ кеүек*
*Осрашалмай интеккәнде.*
*Ауыҙлыҡлап, бикләп ҡуйҙы*
*Йәнде ҡыйыр яуыз йәнде.*

*Урап ҡайтты күкрәгемә,*
*Хәлдән тайып, тынысланып.*
*Ялҡын аша үткән ҡоштай,*
*Бөткән үҙе көйөп-янып.*

*Уттар сәсеп әйтте йөрәк:*
*«Инде риза нишләтһәң дә,*
*Бикләп ҡуйып, һүң сиккәсә*
*Көнө-төнө эшләтһәң дә».*

## Үҙ асылың

*Бер гөл итеп ергә биргән*
*Атаң-әсәң.*
*Аттымы һуң донъя йәмләр*
*Аҫыл сәскәң?*
*Был һорауҙы үҙемә бирәм:*
*«Йә, әйт, — тимен, —*
*Ошо лаһа йәшәүеңдә*
*Ниәт», — тимен.*

*Уйланамын.*
*Донъя алдай,*
*Ғүмер үҙа.*
*Уйҙарыңды, юлдарыңды*
*Алъа һуҙа.*

*Аттымы әле аҫыл сәскәң?*
*Атты ла, ти.*
*Күптәр уъа һоҡланышып*
*Баҡты ла, ти.*
*Һин ҡәнәғәт. Йәнең риза.*
*Йәм бирәһең.*
*Ә һоҡланыу ғына ергә*
*Ни бирә һуң?*

*Аҫыл сәскәң күҙ ҡамашыр*
*Ялтыр булһын.*
*Көмөш кенә түгел, хатта*
*Алтын булһын —*
*Йәшәү ниәтең ошо ғына*
*Түгел дәһә.*

*Орлоҡ тиеп тиреҥ-ҡаныҥ*
*Түгелмәһә,*
*Төп ниәтеҥ үтәлмәйсә*
*Ҡала лаһа,*
*Төп ниәтеҥ, төп асылыҥ*
*Орлоҡ таһа.*

*Орлоҡ, орлоҡ,*
*Йәшәү асылыҥ*
*Шунда ята.*
*Гөлдәр орлоҡ бирер өсөн*
*Сәскә ата.*

*Орлоҡтарыҥ тыйнаҡ кына*
*Төшә ергә.*
*Ҡабат тере бер гөл булып*
*Терелергә.*
*Тат, тәм, йәм өҫтәргә*
*Ергә, ергә.*

*Тыумаҕанһыҥ тик сәскәлә*
*Йөрөр өсөн.*
*Ә тыуҕанһыҥ ергә орлоҡ*
*Бирер өсөн.*
*Ер ҡуйынына ғүмер тамыры*
*Үрер өсөн.*

*Аҫыл сәскәҥ һоҡландырһын,*
*Ҡыуандырһын.*
*Һоҡландырһын ғына түгел,*
*Уйландырһын.*

*Был әҙәм һуҥ ғүмер тамыры*
*Үрҙеме һуҥ?*
*Орлоҕонан ер изгелек*
*Күрҙеме һуҥ?*

*Үҙ асылым?*
*Үҙ асылым*
*Шунда ята.*
*Ошо изге ниәт менән*
*Гөлөм аҫыл*
*Сәскә ата.*



**Мөхәммәт**
**ЗАКИРОВ**

## *Таныуҙары ҡиммәт*

*Әбйәлилдә ат башылай алтын*
*Тырмаһына килеп тығылғас,*
*Ҡатлы-ҡатлы һүгенеп, ағай уны*
*Йыраҡҡараҡ алып томорған.*

*Шул уҡ алтын икенсегә тырма*
*Тешен ҡырған, ҡәһәр һуҡҡыры.*
*Ағай үҙен һуккән: ҡарабыраҡ*
*Йөрөү кәрәк, күҙең сыҡҡыры!*

*Ҡайҙан белһен, алдарында донъя*
*Алтын төҫтәр менән балҡырҙы.*
*...Табыуҙары анһат булғанда ла,*
*Таныуҙары ҡиммәт алтынды.*

***

*Бер ҡараһаң, бәхетле лә кеүек*
*Һинең менән бергә саҡта беҙ!*
*Тик икебеҙ ике хәҡиҡәт беҙ,*
*Тик икебеҙ ике хата беҙ.*

*Ниһайәт, мин азат “Был донъяла*
*Ниңә йәшәйем?” тигән ҡанундан.*

---

*Мөхәммәт Закиров (1950) Ҡариҙел районы Дәүләт ауылында тыуып үҫкән. БДУ-ны тамамлай. Ғүмере буйы журналистикаға хеҙмәт итә. Әле “Ҡыҙыл таң" гәзите редакцияһында эшләй.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 60 йәше менән ихлас ҡотлайбыҙ!*

*Матурлыҡҡа элеккесә түгел,*
*Һораузарһыз ғына табынам.*

*Тоям ҡайтмаç өсөн үткәнлеген*
*Ҡабатланмаç һәр бер мизгелдең.*
*Аты тоттормаған малай кеүек,*
*Тоталманым ваҡыт тезгенен.*

*Алышына йылдың дүрт фасылы,*
*Ә офоҡта шул уҡ болоттар...*
*Ҡәзерлерәк була бара һаман*
*Һинең менән бергә минуттар.*

*Бер ҡараһаң, бәхетле лә кеүек*
*Һинең менән бергә саҡта без.*
*Айырылмаç ике хәҡиҡәт без,*
*Тик ҡушылмаç ике хата без.*

***

*Яндыраһым килә мөхәббәтте —*
*Һаман һызлап торған ярамды.*
*Ул һызлау за юҡҡа сыға икән,*
*Унан һуң мин иçән ҡаламмы?!*

*Ул һызлау за юҡҡа сыға икән, —*
*Ҡан — йөрөштә, күкрәк тын ала, —*
*Мөхәббәтһез ҡалған йөрәк нишләр,*
*Унан кем мин яҡты донъяла?*

*Онотор һоң. Эйе, был донъяла*
*Мине онотоу ғына — ерунда.*
*Ҡатын-ҡыз ул хатта үзен юя*
*Крутойыраҡ ирзең ҡулында.*

*Майзай эреп, сыға һымаҡ юҡҡа*
*Матурлығы сыҡҡан наззарзан.*
*...Ә бәхеттең тик язғаны язған,*
*Язмағаны — мәңге язмаған.*

***

*Ғаләм — мәңгелек сер.*
*Керпек ҡаҡҡан ара —*
*Аҡыл етмәç ваҡыт үзғаны.*
*Ҡояш төшкән ҡырау өçтәрендә*
*Емелдәшә йондоз тузаны.*

*Ер ул ирҙәр кеҫек, —*
*Йән өшөткөс бушлыҡ, —*
*Йота ниндәй уттар — кем белә?*
*Ҡырау түгелдер был,*
*Сәстәренә*
*Сал яғылған ерҙең был төндә.*

## Көҙгө

*Нисек булһаҡ, үҙебеҙгә шулай*
*Ул күрһәтә ине үҙебеҙҙе.*
*Көтмәгәндә, төшөп "ә" тигәнсе*
*Селпәрәмә килде шул көҙгө.*

*Киҫәтергә алдан теләнеме —*
*Ә теләһә, ҡайҙан ул һиҙгән?*
*Мөхәббәт тә, серле көҙгө һымаҡ,*
*Селпәрәмә килде — бер һүҙҙән.*

*Өҫтөн ине хәсрәт, ваҡлыҡтарҙан,*
*Хатта йәштән, хатта ваҡыттарҙан.*
*Һаҡһыҙ бер һүҙ...*
*Көҙгө йыймаҡ булам,*
*Гүйә, сәселеп ятҡан ватыҡтарҙан.*
*Йыймаҡ булам...*

## Яуап урынына

*"Ҡылысҡа ҡунған һандуғас" тигән шиғыр китабым хаҡында бер шағирә, Мөхәммәт ул ҡылысҡа ҡунған һандуғас түгел, ҡылысҡа ҡунған ҡарға, тип әйткән, имеш.*

*Тиреҫ өйөмөнә ҡуна,*
*Ҡылысҡа ҡунмай ҡарға.*
*Ҡылысҡа ҡуна һандуғас*
*Яҙмышы саҡырғанда.*

*Шундай булғанға яҙмышы,*
*Башҡаны һайлай алмай:*
*Кәрәк йәшәү, үлем сиге —*
*Шунһыҙ ул һайрай алмай.*

*Хәйер, һандуғастың ҡайҙа*
*Һайрауы мөһим түгел.*
*Ә ҡылысҡа ҡундың икән,*
*Һайрамай мөмкин түгел.*

***

*Етмәгәнме ике тәҙрә, тиеп*
*Ҡатын йәнде ҡыйған сағында, —*

*Үҙемдекен иттем.*
*Тәҙрәһеҙ булһын, имеш,*
*Шағир өйө ҡояш яғында.*

*Ул тәҙрәнән йәйге таңдар тула,*
*Ҡыҙара ла өлгө ситендә.*
*Ҡояш нуры,*
*Ярышып минең менән,*
*Шиғыр яҙмаҡ дәфтәр битендә.*

***

*Ҡай арала йәй ҙә үтте:*
*Алда — ҡыш, яҙҙар йыраҡ.*
*Шәрә ергә томанлы күк*
*Һыйына иламһырап,*

*(Мин һиңә һыйынған кеүек)*
*Әллә күк, әллә томан?*
*Әллә мин дә шул томанмы —*
*Әле бар, бәлки, булмам.*

*Килгән — китә. Бары ла бөтә.*
*Юҡ һораусарға яуап.*
*Тойһамсы ирендәреңдә*
*Йәй тәмен.*
*Һуңғы ҡабат.*

***

*Шиғырым фекере сыҡты юҡҡа — тоталманым.*
*Ҡайҙан килеп ҡайҙа китте — юҡтыр бер эҙ.*
*Табармынмы, табалмаммы? — әйтеү ҡыйын,*
*Уйҙар, уйҙар... ғәләм кеүек икһеҙ-сикһеҙ.*

## *Кемгә – ҡартлыҡ, кемгә – шатлыҡ*

*Башланып ҡына торамы*
*Иртәнге эш сәғәте, —*
*Телефондан шалтыратыу*
*Уның бөтә ғәҙәте.*

*— Нисек хәлдәр? Кәйеф шәпме,*
*Нисектәр йоҡланың? — ти.*
*Һин араҡы эсә инең,*
*Кит унан... Туҡтаның? — ти.*

*Һаман аҡыл өйрәтмәксе*
*Минең элекке түрә, —*
*Бүрене бүрәнә түгел,*
*Телефон аша күрә.*

*Был һәр көндө ҡабатлана:*
*Юҡтыр иртә, юҡтыр кис.*
*Һораным:*
*— Ниҙәр ҡыраһығыҙ?*
*— Китап уҡыйым.*
*— Һеҙгә нисә?*
*— Һикһән биш.*
*— Ә йәш саҡта?—*
*Тиеп һорарға баҙҙым.*
*— Йәш саҡтамы? — тине тырә,—*
*—Йәш саҡта үҙем яҙҙым.*

***

*Ҡәҙерле ниңә бәхеттең*
*Булғандан булмағаны,—*
*Үкендерә гонаһтарҙың*
*Ҡылғандан ҡылмағаны.*

## *Ә бер киттем ни бары*

*Толомона ҡайындарҙың*
*Ҡағылды көҙҙөң тыны.*
*Һары һағышҡа төрөнгән*
*Яҙғы ҡайынҡай һыны.*

*Йыраҡтарҙа, офоҡтарҙа*
*Болоттар ҡатлы-ҡатлы.*
*Мин шул офоҡтар артында*
*Тыуған яҡ, бала саҡлы.*

*Ҡайтып килә шул саҡтарға —*
*Нисәнсе ҡабат икән?*
*Тыуған яҡҡа ҡайтҡан саҡта*
*Уйҙар ҙа ҡанат икән.*

*Саҡырғандай еләк йыйған*
*Аҡ ҡайынлы урманы.*
*Бар ғүмерем буйы ҡайтам,*
*Һаман ҡайтам, —*
*Ә бер киттем ни бары.*

***

*Атай һалған йорттан*
*Үҙем һалған йортҡа ҡәҙәр,*
*Гүйә, тоташ ғүмер үткән.*
*Ниңәлер мин һалған йорт та*
*Атай һалған йортҡа оҡшаш.*
*Өс тәҙрә:*
*Ҡайһынан*

*Баҡһаң да —*
*Ҡояш!*
*Зәңгәр күктә*
*Аҡ болоттар*
*Көтөү-көтөү.*
*Ҡыйындыр ҙа кеүек*
*Ул болоттарға*
*Минең тәҙрәнән*
*Күренмәйсә үтеү.*
*Ә төндәрҙә,*
*Әллә уҙған ғүмер,*
*Әллә тыуар йылдар хаҡына,*
*Йыһан сәләмеләй,*
*Баш осонда*
*Йондоҙ атыла.*
*Атай һалған йорттан*
*Үҙем һалған йортҡа ҡәҙәр*
*Ғүмерҙәрҙә үҫкән ел — әсе.*
*Үҙем һалған йорттан*
*Атай һалған йортҡа*
*Килә ҡайтаһы.*

## Бер осраштыҡ

Зөлфәткә

*Ямғыр яуа. Уның яуғанына*
*Һөйөнгәндәй, тиле, мин тағын,*
*Бысҡы, үҫкештәрем ситкә атып,*
*Ҡулға алдым, Зөлфәт, китабың.*

*Иртә, иртә. Ҡалдыҡ һиҙмәйсә,*
*Ҡай арала шундай арының һин?*
*Шиғриәткә шаулап ингәнеңдәй,*
*Шаулай-шаулай китеп барҙың һин.*

*Хәбәр килде. Һуңғы тантанаңда*
*Булмаған бер кеше Аҡ йорттан.*
*Ҡурҡыу белмәҫ намыҫ менән тыуған*
*Шиғриәтме һинең ҡурҡытҡан?..*

*Туғанына ярамай тура әйткән:*
*Чиновниктар беҙгә туғанмы?*
*Күҙгә күренмәгән элмәк менән*
*Һулышыңды улар быуғанды*
*Кемдәр белһен, кемдәр аңлаһындар.*
*Турә,*
*Ҡай осорҙа ла,*

Ҡойроҡ болғағанды ярата.
Болғамайһың икән, башҡа ҡараш,
Айырым фекер һиңә ҡарата.
Гүзәл дауыл... Күңелдәргә аштың
Әллә шундай дауылдар тына?
Ни өсөндөр биреп бармайҙар ул
Халыҡтыҡын — халыҡтыҡына.
Ә барыбер халыҡ шағиры һин.
Был исемде бирмәгән өсөн.
Шиғырың менән сафландырҙың йәнде
Ғүмер ике килмәгән өсөн.

Был баҙарҙа шағирҙар ҙа һатыла.
Ҡиммәткәрәк һатылыу модала.
Хыянатһыҙ шиғыр ихласлыҡҡа
Хыянаттан, ғәрсел, юғала.

Ләкин һатылмаҫ алмаздар бар, —
(Һатылғандың ҡиммәт икеле) —
Уҙған быуат баштарынан беҙгә
Иҫән еткән Туҡай шикелле.

Белмәйем, беҙҙе ҡасан осраштырыр
Мәңгелектең ҡабат юлдары?
Бер осраштыҡ. Бер шиғырымды тыңлап,
Бер һүҙ әйткән инең ни бары.

## Йәшлектең үҙенән

Әй, Бағаҙы! Аҡ ҡайынлы тауҙар,
Таштар ярып сыҡҡан шишмәләр...
Тауҙар араһында, офоҡтарһыҙ —
Таңдар атһа, кистәр етһәләр,

Ташҡа баҫып, шишмә күҙҙәренән
Һалҡын һыуҙар эстем ҡуш услап.
Кис эңерен таңдар зәңгәренә
Тоташтырып янды, әй, усаҡ.

Ҡайындарҙың аҡһыл һындарына
Төн ҡанаты, талып, һыйынды.
Тау артынан төнгө күккә ҡалҡҡан
Ай нурына донъя ҡойондо.

Ниҙәр булыр ине бөгөнгөнән
Шул төн ҡуйынына ҡайтҡанда.
Күләүҙәрең сыңлай ташлы һыуҙа,
Аяҡ аҫта баҫма сайҡала!

*Һыу өҫтөнә тейеп-тейеп ала*
*Һығылғанда — аҫты баҫманың.*
*Ул бит башҡа бер кемдеке түгел,*
*Ул баҫмаһы һеҙҙең баҡсаның.*

*Уҙған ғүмер, гүйә, уҙмағандай —*
*Беҙҙең йәшлектең һин үҙенән.*
*Алаһыңдыр кеүек һыуҙар,*
*Мин ҡуш услап*
*Һыуҙар эскән шишмә күҙенән.*

***

*Бурандарҙа аҙашаһы ине*
*Хыял ирешә алмаҫ ярҙарҙа.*
*Бәлки, буран алып барып сығыр*
*Йәшлек тигән ҡайтмаҫ таңдарға.*

*Аяҡ аҫтарында ер убылып,*
*Йотҡан саҡта күктәр айҙы ла, —*
*Һөйәләһе ине элеккесә*
*Юлдар сатындағы ҡайынға.*

*Тойор инем, бәлки, бурандарҙың*
*Йәнде сафландырыр дауаһын.*
*Бер һулайһы ине күкрәк киреп*
*Шул йәшлектең бары һауаһын.*

*Аҙаштырмаҫ, өмөт саҡырыр,*
*Бәлки, йәшлек үҙе тап булыр.*

## ***Һин кем булдың әле тормошомда?***

*Киләсәккә артыҡ ашҡындыҡ шул,*
*Офоҡтарға инеп күмелдек.*
*...Һин кем булдың әле тормошомда —*
*Йырҙарыма килеп инерлек?*

*Бәхет — киләсәге барҙар өсөн,*
*Бәхет була алмай үткәндә.*
*Ҡараштарың яҡтыһында батам*
*Йәшлектәге зәңгәр күктәргә.*

*Ахырыһы, айырым йәшәй алмай*
*Минең бәхет һинең бәхеттән.*
*Был тормошта һинме минең көткән,*
*Был тормошта минме һин көткән?*

*Нисек булһаң, шулай ҡабул итәм,*
*Нисек булһам, шулай ҡабул ит.*
*Башҡа бер ҡасан да мәңгелектә*
*Ҡабатланмаҫ — беҙҙең ғүмер бит.*

*Киләсәккә артыҡ ашҡындыҡ шул,*
*Офоҡтарға инеп күмелдек.*
*Һин кем булдың әле тормошомда —*
*Йырҙарыма килеп инерлек?*

***

*Тауҙарға мин башты ҡуйып ятам,*
*Аҡ болоттар яба юрғанын.*
*Мин йыраҡтан — мәңгелектән киләм,*
*Мәңгелеккә илтә юлдарым.*

*Күктәремде шәфәҡ алһыулатты,*
*Күкрәгемде йыуа океан...*
*Йондоҙҙарҙың күккә һыймағаны*
*Минең күҙҙәр ҡараһына һыйған.*

*Йөрәгем дә талды. Ҡулдарымда*
*Әле һабан да юҡ, ҡылыс та.*
*Дауылдарҙа тынлыҡ ник эҙләнем,*
*Дауыл эҙләнем ник тыныста?*

*Дауылдарҙа дауыл һораны йән,*
*Тик унда ла тынлыҡ тапманы.*
*Табыр кеүек, ҡаҙыр кеүек инем*
*Мин мәңгелек тигән ҡапҡаны.*

*Аҡылдарҙан яҙыр сиккә еттем,*
*Йәшәүҙән мин, ахыры, туялмай.*
*Асылымда өмөт йәшен түгә,*
*Аҡылымда йылан оялай.*

***

*Мин барына шөкөр ҡылам хәҙер:*
*Көтмәмен дә кеүек артығын.*
*Йыуатырға теләпме, көҙ аяҡ*
*Аҫтарыма һибә алтынын.*

*Көлөп, матур ҡағыҙ һуҙҙы бер ҡыҙ*
*Алтын кибетенән уҙғанда.*
*Ник кәрәк ул миңә, алтын үҙе*
*Аяҡ аҫтарымда туҙғанда?..*

*Алтын осһоҙланған.*
*Их, сибәр ҡыҙ,*
*Мин барыбер уны алалмам.*
*Әле лә бит алтындарға түгел,*
*Серле ялҡындарға алданам.*

**Гөлнур**
**ЯҠУПОВА**

# *ҠАТЫНДАР*

ТРИЛОГИЯ

## *Бер һөйгәнем өсөн...*

**Икенсе китап***

24

Толпарлының йөрәгенең антеннаһы барҙыр. Телевизорҙыҡы, радионыҡы һымаҡ. Хәйер, көслөрәктер, һиҙгерерәктер – тотош илдең, хатта ки планетаның тын алышын тоя, тотоп ала был антенна. Апрель аҙағында ауылыбыҙҙы алыҫтағы фажиғә тетрәтте, йөрәгебеҙгә килеп ҡағылды ул.

Ташкентта ҡот осҡос ер тетрәү булған, Урта Азияның беҙгә борондан таныш, туғандаш ҡалаһының өстән бер өлөшө харабаға әйләнгән. Бөйөк, гүзәл, ҡунаҡсыл Ташкент! Ауылыбыҙҙың нәҫелдәше ләһә Үзбәкстан, унда Толпарлы ҡыҙҙары килен булып төшкөләгән, уларға үзбәк кейәүҙәр «Севимли» (һөйөклөм)тигән. Унан беҙгә һуғыш йылдарында Үзбәшкә Рухия апай әйләнеп ҡайтҡан, Харьковтан эвакуацияланған ике мәрйә ҡыҙын эйәртеп... Был – күңелгә иң беренсе булып ҡағылған тойғо, ҡандаш туғанлыҡ ауазы. Ә бит, ихластыр ки, толпарлылар СССР тигән оло Ватаныбыҙҙың һәр мөйөшөн ғәзиз итеп, үҙ итеп ҡабул иткән. Ауыл тигәс тә, ул үҙенең айырым бер утрауҙа, бәйләнешһеҙ яңғыҙлыҡта йәшәмәгәнен, ә Ер шарында, Йыһанда бар ителгәнлеген ап-асыҡ аңлай, кендек берлеген тойоп йәшәй ҙәһә!

Эйе, иң башта Азияға (ул яҡты шулай дөйөмләп әйтергә күнеккәнбеҙ) киткән туған-ырыу барлап сығылды, кемдең ҡайһы тештәрәк көн итеүе күҙалланды. Артабан иғтибар Ташкентҡа ябырылған ҡазанан ҡотолоу өсөн хөкүмәттең ниндәй саралар күреүенә, партия етәкселәренең телмәрҙәренә күсте. «Ташкентты ҡайтанан төҙөргә» тигән ҡарарҙы толпарлылар һағайып ҡабул итте: ҡала әллә тотош һәләк булғанмы? Һуңғараҡ, ул тарафтарҙан хаттар килеп, Башҡортостандан барған төҙөүселәр аша хәбәрҙәр ишетелеп, хәлдең ундай уҡ кимәлдә булмауы асыҡланды, әммә «өстән бер өлөшө» тигән һүҙ дөрөҫ икән – аһ...

*Дауамы. Башы 10-сы һанда.

Барлыҡ ил көсө менән тергеҙелде Үзбәкстандың баш ҡалаһы. Мәскәү, Ленинград кеүек ҡалалар – тотош урамдар, союздаш республикалар ҙур-ҙур биҫтәләр төҙөгән, автономиялар йөҙәрләгән йорттар һалған. Әллә беҙ, толпарлылар, ситтә ҡалдыҡмы? Колхоз үҙенсә ҡатышҡандыр, ите-майы, шәкәре менән – шигем юҡ, ә мәктәп балалары Ташкент өсөн мискә-мискә ҡайын һуты йыйып тапшырҙы, әҙме-күпме, кейелгәнерәктәрен дә ҡушып, кейем-һалым да ебәрҙек – урамда ҡалған кешеләргә тәү мәлдә ярап ҡалыр ҙаһа. Татар әбекәй оҙон салғыйлы бишмәт тегеп килтергәс, хихылдарға тотонһаҡ, үзбәктәр эҫе көндә лә һырма сәкмән кейеп, йөрөй, шулай ҡояш үтмәй, тигәс, аптырап ҡалдыҡ. Аҙаҡ барыбер эс тырнап көлдөк: көйҙөргөс эҫелә бишмәт кейеп кәтмән менән ер эшкәртеп йөрөгән үзбәк ирекәйен күҙ алдына килтерәбеҙ ҙә…

Ә бер көндө, пионерҙарҙың йәйге каникулын ойоштороу планын төҙөп ултырғанда, ҡылт итеп иҫкә төштө: аулаҡта селтәр энәһе менән сүре ебенән теүәтәй бәйләргә өйрәнгәйнек. Үҙем бәйләгәнде Бүреһуҡкан олатайға бүләк иткәйнем, ул, ҡалай йәпле, йәй кейерем, эҫе ҡабып бара хәҙер башыма, тип һөйөнгәйне. Рәхәт кенә, тиҙ генә ундай теүәтәйҙе бәйләүе. Пионеркаларымды өйрәтәйем дә, үзбәк ағайҙарға посылка һалайыҡ әле! Шул минутта ҡыңғырау шылтыраны. Уйымды директорға еткерәйем тип коридорға сыҡтым. Уҡыусыларҙың ҡамап алғанын һиҙмәй ҙә ҡалдым. Улар менән бергә, ташҡынға эләккән юныҫҡылай, зыр өйрөлгәндә, ташҡын ҡапыл икегә айырылды – Сәкинә апа үҙе ҡаршыға килә ята икән, тымып ҡалған бала-саға араһынан йолҡоп алды ла мине кабинетына әйҙәне.

Уф, ошо апаға мәңге ир сыҡмаҫ! Тиктомалдан шундай уй индесе башыма? Әйтерһең, ул минән ир таптыра. Таптырһа ла, артыҡ берәү ҙә юҡ ауылда. Булғаны ла – йә бабай-һабай, йә ҡалаға ҡасып киткән ҡыҙҙарын һағынып, машина-тракторының кабинаһына Софи Лорен һымаҡ һылыу актрисаларҙың портретын йәбештереп ҡуйып йыуаныусы йәш егеттәр. Ул һүрәттәрҙе «ҡағыҙ кәләштәр» тип атап та ҡуйҙылар инде ауылда.

Киҫкен хәрәкәттәр яһап, ҡулдарын өҙә һелтәп, ниндәйҙер ҡаршылыҡты, мәҫәлән, көслө елде, буйһондорғандай, күкрәген ҡалҡандай итеп ҡуйып, башын текә тотоп атлай Сәкинә апа. Тауышы баҙыҡ, талапсан. Өҫтөндә һәр саҡ ирҙәр пинжәге, төймәһе генә уңға ҡайтарып баҫылған. Ҡатын-ҡыҙҙа нескәлек, нәзәкәтлек көҫәгән ир-атты юрамал биҙҙерергә иткәндәй уның килеш-килбәте, холоҡ-фиғеле. Ә бит беләм: эстән йомшаҡ күңелле үҙе. Күрәм дәһә, уҡыусыларға ҡәтғи мөғәләмәлә булһа ла, һәр ҡайһыһы өсөн борсола, хәстәрле әсәләй ҡурсалай. Бына әле лә шул йәһәттә уйланған икән:

– Нурия, әллә Менәүәрәне педучилищеға ебәрәйекме быйыл, һигеҙҙән һуң?

– Салпаның ҡәйнәһе вафат булған, үҙенең әсәһен Таллыға күсереп алып ҡайтмаҡсы, тип ишеткәйнем…

– Ә Менәүәрә унда ҡабат бармаясаҡ, шулаймы? Ҡыҙ баланы бында ла, яңғыҙын бер өйҙә, ҡалдырып булмай, шулаймы?

– Уның бер әтнәкәһе бар, апа…

– Математика уның әтнәкәһе, беләм. Күҙемде йомам да «бишле» ҡуям, әгәр училищеға барһа. Шулай итһәк, һигеҙенсене шау «бишле»гә бөтөрөп, Грамота аласаҡ һәм имтиханһыҙ уҡырға инәсәк.

– Ахыр сиктә барыбер филфакка барасаҡ, нимәгә уға математика? – Әйттем дә, шым булдым: уйындағын хәбәргә әйләндергәнсе мейеһе аша ике ҡат уратырға кәрәк минең ишегә! Ярай ҙа ярҙамсы фекер тиҙ килә үҙемә: – Хәйер, Әмин абый, математика – шиғырҙың формулаһы, ти… –Шулайыраҡ шымартып ҡуйҙым.

– Һәр хәлдә высший математика уға кәрәкмәç. Ә бына әҙәп һәр саҡ, һәр кемгә мотлаҡ, Нурия! Нишләп әле һин әсәң йәшендәге кешене ҡушаматы менән йөрөтәһең?

– Салпа апайҙымы?

– Әтеү. Исмаһам, “апай”ын ҡушып әйт шулай. Ниндәй үрнәк алыр һинән пионерҙарың, ә?

Дөрөç һүҙгә яуап юҡ – өндәшмәнем. Салпаға ла мөнәсәбәтем үҙгәрә төшкәйне. Менәүәрәһенең шиғырҙары гәзиттәрҙә сыға, ауыл клубында һәр концертта уға “йәш шағирәбеҙ” тип һүҙ бирелә башлағаны бирле, ысвикла бисәләренән ишетеүемсә, йөҙөнә нур ҡунған, тиктомалға ирешеп йөрөмәй, ти ҙәһә.

Сәкинә апа, ошоноң менән һүҙ бөттө тигәнде аңлатып, өçтәл артына инеп ултырҙы ла, алдына ниндәйҙер бер журналды асып һалып, шуға текәлде. Мин дә теге уйымды әлегә әйтмәй торорға булдым, башта бәйләргә кәрәк тәһә теүәтәйҙәрҙе, бәс.

Дәрес менән тәнәфес араһындағы һиллектән файҙаланып, пионер бүлмәһен эстән бикләп алдым да уйға баттым. Салпа үҙгәргән? Кеше нисә ҡат һәм ни сәбәпле үҙен үҙе үҙгәртә ала икән? Алтылағы – алтмышта, тигәне лә бар. Бәй, кем әйткән әле алты йәшендә үк ул, Сәғүрә апай, Салпа булған, тип? Тәүге мөхәббәтен юғалтыу аянысынан әйләнгәнме Салпаға? Шулайҙыр. Етмәһә, ире уçал тура килгән. Ҡәйнәһе лә… Һәм бына, ниһайәт, был ҡатындың күңел күгендә йондоҙ ҡалҡҡан – Менәүәрә! Һөйгәнем ташланы, тип ултырып ҡалһа, иргә бармаһа, табыр инеме ни шул һәләтле баланы? Ана, кеселәре лә апайҙарына ҡарап тартыла, яҡшыраҡ уҡырға тырыша. Кем балалары – Сәғүрәнеке. Әсәлек ғорурлығы уянды, тормошта тоталҡаһын тапты ул.

Ә мин барыбер яратмаған кешегә кейәүгә бармам… Асылымдағы “үҙем”дәрҙең бөтәһе лә ҡаршы быға – хатта иң күндәм, иң йыуаш “үҙем” дә. Ана, Сәкинә апа кемдән кәм? Үлмәгән дәһә ирһеҙ?!

Шул саҡ тағы ҡыңғырау шылтыраны, мәктәп иҙәне, барабанға оҡшап, дөңгөрләгөн килде. Уйҙарым тырым-тырағай таралды.

Әкиәт батыры алдында өс юл торған, ти: уңға барһаң, уңырһың; һулға барһаң, уңмаçһың; алға барһаң, һәләк булырһың – шулай шикелле. Мин дә үҙемде юл сатында торғандай хис итәмсе. Туҡтауһыҙ нимәнелер хәл итергә, һайларға, яуап табырға тейешмен. Әсәйемдең яҙмышы мине һынаманымы ни? Ә Кәбир?! Тормош гелән генә берәй әтнәкәһен тыуҙырып тик тора. Әйткәндәй, «әтнәкә» беҙҙә колхозда ветеринар булып эшләп киткән урыç Никитиндан ҡалған. Малһаҡ кеше булған, тиҙәр, мал йәнле, тимәк. Берәй малҡай ҡазаланһа, бәғзе белгес һымаҡ, «ит комбинатына!» тип ҡул һелтәп ҡуймаған, ә дауалау яғын ҡараған. Тоҡомло малға бигерәк тә һаҡсыл булған, операция яһап хитланһа хитланған – ҡотҡарып ҡалырға тырышҡан. Күк юрға тоҡомонан һайҙаҡ ҡолон бәләгә юлыҡҡан бер мәл – ялан кәртә аша һикергәндә бәкәлсәй һөйәген имгәткән. Никитин ҡолонҡайҙы оҙаҡ ҡына тикшергән: бәкәленә күҙ һалғас та хәлен аңлаған инде, ә һаман ҡолаҡтарын һыйпап, муйынын һыпырып иркәләп, ялынҡойроғон һелкетеп, яңаҡтарын тотҡолап бер була икән. Үҙе “однако” ти ҙә ҡабатлай, тел сартлата, һоҡланыуын белдерә, ти. Шунан ҡолоҡайҙы яçы ҡайыштар менән ҡорһағынан уратып алып, аҙбар өрлөгөнә аçып ҡуйырға ҡушҡан да, бәкәленә ике яҡлап ҡабыҡ ҡуйып, сепрәк менән бәйләгән. Күпмелер ваҡыт Күк юрға тоҡомо шулай аçралған, йәрәхәтен борсомағас ни, тиҙүк йүнәлгән…

Эйе, әтнәкәләре күбәйҙе минең өсөн тормоштоң. Бәләкәй саҡта уларҙы өлкәндәр елкәһенә өйөп тик торғаным икән. Ә хәҙер, өлгөрөп еткәсем, үҙемә ҡала

килеп тыуған һәр хәлде яйлау. Һуңғы арауыҡта мейемдә үтә лә сетерекле мәсьәлә уралды, шуның сиселешен таба алмай ыҙаландым. Һөнәр һайлау мәсьәләһе. Ололар һүҙенә ҡолаҡ һалһаң, яратҡан һөнәреңде табыу тормош юлдашыңды дөрөҫ һайлауға бәрәбәр, ти. Һөнәрен ғаиләһенән, һөйөклө ҡатынынан, алма кеүек балаларынан да өҫтөнөрәк ҡуйған кешеләр ҙә бар икәнен беләм әле мин – атайым шулай итмәнеме ни?! Ярай инде... Мәктәптә бер йыл эшләп, үҙемде самалап ҡараным даһа – уҡытыусылыҡ ҡулымдан килер һымаҡ. Ниндәй фәнгә туҡталырға, тип аптырайым. Хыялсан асылым әҙәбиәткә өндәй ҙә, Мәнәүәрәнең шиғырҙарын уҡығандан һуң ғәйрәтем сигеп торасы. Хәйер, тел һәм әҙәбиәт уҡытҡан һәр кемгә шағир булырға тимәгәндер? Тарих фәне бәләкәйҙән ылыҡтыра, тик үҫкән һайын уға дәғүәләрем арта: алдаҡсылығы килә лә сыға. Тарих үҙе ғәйепле түгел, ғәмәлдә ул үҙгәрмәй ҙәһә, уны китапҡа яҙыусылар алдаша. Әммә балаларға күрәләтә бушты һөйләп тороу минән булмаҫ. Биология, ботаника ҡыҙыҡһындыра ла, әлеге химиянан имтихан бар икән ул факультетта. Әтнәкә... Моғайын, географияны һайлармын. – Уҡыусыларымды глобус буйлап та донъя гиҙҙерермен – хыялдарын беҙҙең Аҡбейектән дә текәрәк Гималай түбәләренә үрләтермен, диңгеҙҙәрҙә йөҙҙөрөрмөн! Үҙ илебеҙҙә баш ҡалабыҙҙы һуғарған данлы Ағиҙелдән тыш тағы ике ҙур йылға аҡҡанын да йүнләп белмәй ултырғанбыҙ, әлдә Әлфиә апа килеп юлыҡты мәктәбебеҙгә, Ҡариҙел, Күгиҙел (Дим) хаҡында һөйләне. Әллә ҡайҙағы Нил йылғаһының Аҡ Нил, Зәңгәр Нил тигән ҡушылдыҡтары бар, тип өйрәнәбеҙ, ә үҙ Иҙелдәребеҙ хаҡында бигүк хәбәрҙар түгелбеҙ, имеш.

Ауылымдың кендеге Оло йыһанға бәйләнгәнлеген, уның айырылғыһыҙ бер өлөшсәһе икәнлеген күҙаллап, зиһенемдә сәмләндергән, күңелемде ымһындырған сикһеҙ тарафтарҙы байҡап сығырҙай булып ҡанатландым да һайланым: география! Оҙаҡҡа һуҙмай, документтарымды Башҡорт дәүләт университетының ситтән тороп уҡыу бүлегенә алып барып та тапшырҙым.

* * *

Мин Өфө урамдарын тапағанда Толпарлымда әллә күпме ваҡиғалар күстәрелгән. Телдән төшмәгәне, иң мауыҡтырғысы шул: Әнкәләр осоноң тарихын яңыртып, һуғыш осоронда беҙҙә йәшәп киткән мәрйә апайҙар ҡунаҡҡа килеп сыҡҡан. Берәүһе егет ҡорона кергән улын да эйәрткән, ти. Их, ҡайтып өлгөрмәнем! Әүәл үҙҙәре йәшәгән оста булғанғалыр, Фариза еңгәмдәргә төшөп, бер тәүлек кенә тороп киткәндәр. Ә күпме хәтирәләр аҡтарылған, серҙәр асылған! Был апайҙарҙы белгән һәр кем нимәнелер иҫләй, өҫтәй, тулыландыра, мин, ғәҙәтемсә, берәй ҡасан яҙылыр бәйәнгә тип, һаплап алған ебемә теҙә барам уларҙы, теҙә барам.

...1943-төң ҡара туңғағында ауылға, ике ҡыҙ баланы эйәртеп, илле йәштәр самаһындағы ҡатын килеп инә. Аяҡтарында – башы тишек, үксәһе асыҡ сандали, өҫтәрендә – ялтыры беленмәҫлек булып иҫкергән атлас күлдәк өҫтөнән камзул һымағыраҡ еңһеҙ кофта, баштарында – яулыҡ, ҡулдарында – төйөнсөк, ти. Оло ҡапҡа яғындағы Келәт тыҡрығындағы тәүге өйгә ишек ҡағалар. Индерәләр. Өйҙәгеләр быларҙың кейем-һалымына, көнгә тутланып янған биттәренә ҡарап, үзбәктәргә оҡшатып ҡарап торған арала, ҡатын: "Танымайһығыҙҙыр шул, мин дәһә", – тип сеңләп ебәргән. Бынан егерме биш йылдар элек Үзбәкстанға кейәүгә сығып киткән ауылдаштары, имеш, – Үзбәшкә Рухия. Шул осор Ташкенттан килеп, бер нисә ҡыҙҙы кәләшлеккә алып киткән булған үзбәк егеттәре. Шунан бирле ул тарафтарға юл бикләнмәй, әйтәгүр. Юҡ-юҡ тигәндә лә кемдер яусылап килеп, ҡыҙҙарыбыҙҙы әүрәткеләп эйәртеп тора Азияға.

Рухия менән ҡыҙыҡайҙарҙың аяғына йөн ойоҡ кейҙереп, иңдәренә мамыҡ шәл ябып, ҡайнар сәй эсерәләр, мунса яғып индерәләр. Улар йылы яҡтан килгән бит инде, өҫ-баштары бик йоҡаҡ. Күрше-тирә хәстәрләгән: кем төпләнгән бый-ма, кем бишмәт биргән – ҡыш еткән дәһә. Шунан Рухияның арғы остағы, инде вафат ата-әсәһенән ҡалған өйөн барып ҡарағандар: байтаҡ эйәһеҙ тороп ҡот-һоҙланған, ҡаралтылары туҙған, әммә, ары-бире йүнәлткеләһәң, мейесенең торбаһын һылап алһаң, йәшәрлек, ти. Кешенең урам-ҡаралтыһына тейеп бар-майҙар беҙҙә. Ауыр ваҡыт булһа ла, толпарлылар был өс йәнде аяп, ҡышҡылыҡ утын хәстәрләп, шул өйгә урынлаштыра.

Ҡыҙыҡайҙар Үзбәкстанға ҡырҡ беренселә үк Харьковтан эвакуацияланып, Рухияға фатирға индерелгән мәрйәнең балалары икән. Юлда уҡ сиргә һабыш-ҡан әсәйҙәре ай ҙа үтмәй донъя ҡуйғас, хужабикәнең күҙенә ҡарап ҡалғандар. Толпарлыға килеүгә, ҡыҙҙарҙың өлкәне Анькаға – ун ете, кесеһе Фроськаға (тулы исеме – Ефросинья) ун биш йәш тулған. Беҙҙекеләр, әлбиттә, уларҙың исе-мен шундуҡ үҙҙәренсә йәпләштереп үҙгәртә: Әнкә менән Фрүзкә.

Ана шул ҡыҙҙар сәбәпсе булған әүәлге Арғы остоң «Әнкәләр осо» тип аталып китеүенә. Белеүен беләинем был хаҡта, шундай сәйер атаманы төпсөнмәй ҡа-ламмы ни, әммә тулыраҡ мәғлүмәт бына хәҙер генә өҫтәлде минең хәтер тоҡсайыма.

Рухия инәйҙең, Ташкенттың үҙендә үк булмаһа ла, шунан алыҫ түгел ҡыш-лаҡта ярайһы бөтөн донъяһы булған. Алма, хөрмә, өрөк ағастары уртаһында, яҙ етһә – сәскәгә, көҙ етһә, емешкә күмелеп ултыра ине йортобоҙ, тип һөйләгән. Ире ҡырҡҡа ла етмәҫтән вафат булған. Ҡыҙын Ҡырғыҙстандың Ош ҡалаһында йәшәгән үзбәк егетенә кейәүгә биреп ебәргәс, улы менән көн күргән. Уныһы мединститутта уҡып йөрөгән еренән һуғышҡа алынған, ялан госпиталендә хеҙ-мәт иткән. Фашистар госпиталде белә күрә бомбаға тотҡан... Ҡара ҡағыҙ кил-гәс, инәй иленә ҡайтырға хәл иткән, әлеге ҡыҙыҡайҙар ҙа эйәргән. Ике йыллап бергә йәшәгәс, эҫенгәндәр инде бер-береһенә. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рухия инәй тыуған төйәгендә рәхәт сигә алмай, шул ҡышты уҡ үпкә сиренә тарып донъя ҡуя. Йылы яҡҡа ҡулайлашҡан булғандыр, юлда уҡ көҙгө һыуыҡ елегенә үткәндер. Әнкә менән Фрүзкә бирешмәгән, йәшлек һерелеге һаҡлағандыр. Улар шул өйҙә йәшәп ҡалған, колхоз эшенә йөрөгән, апаруҡ башҡортса һөйләшер-гә оҫтарған. Килгәндә үк телде әҙ-мәҙ белгән улар, Рухия инәй ҙә өйрәткәндер, әйтәгүр, үзбәктәрҙең лөғәте лә беҙҙекенә яҡын.

Ҡырҡ өсөнсөнөң ҡышы үткән, йәйе еткән. Әнкә менән Фрүзкәне тауҙағы са-бынлыҡҡа эшкә ебәргәндәр. Ун алты-ун ете йәшлек бер төркөм үҫмер, биш-ал-ты ҡатын һәм шул ике ҡыҙ ҙа, уларға салғы яныуҙан башлап кәбән ҡойоуға тик-лем эш мәнеһен өйрәтергә тейеш таһыллы ике ҡарт – колхоз малына бесән әҙерләргә тәғәйенләнгән бригада шуларҙан ғибәрәт.

Тап шул йәйҙә Фрүзкә Фәйрүзәгә әйләнә. Ошо хаҡта күңелемдә ҡисса яҙыла...

... – Көмөш кенә йөҙөк Фәйрүзә ҡаш... – тип көйләп ҡуйҙы егет, һуңғы ҡосаҡ бесәнде һәнәгенә сәнсеп алып кәбән башына һелтәгәс. Өҫтә кәбәнде ослап бөтө-рөп кенә торған ҡыҙ, исеменә ауаздаш һүҙҙе аңғарып, үҙенсә йүнәтте:

– Фроська, Фрүзкә...

– Күҙҙәрең фәйрүзә ташы кеүек зәңгәр...

– Фәйрүзә?

– Эйе, шундай аҫыл таш бар.

– Мин – Фәйрүзә? Мин – аҫыл таш?! Драгоценный камень? Голубой... Би-рюза, что ли?

– Бирюзаһын не знаю, Фәйрүзәһен – знаю! Һин, Фәйрүзәм, зәңгәр күҙем, аҫыл ташым!

Аһ, был йәшлектең ашҡыныулы тиҙлектәре – атылған уҡтан осҡорораҡ, ҡапыл ялтлаған йәшендән етеҙерәк. Фәйрүзә, ҡайҙа барып төшөрөн уйлап-самалап та тормай, шыуып төшөп китте кәбән түбәһенән һәм... туп-тура егеттең ҡосағына барып инде. Табаны аҫтынан ер ҡайҙалыр шыуып киткәндәй тойолдо... Әле генә эш сәмендә янған йәш тәндәрҙән бәреп сыҡҡан тир тыны, сәскәле аҡлан һулышын юғалтып өлгөрмәгән бесәндең хуш еҫенә ҡушылып, башты әйләндерҙе... Тәкәтен юйған ирендәр ҡауышты – гүйә, аң юйылды...

– Ирендәреңдән бешкән еләк тәме килә, Фәйрүзәм!

– Аҡман...

– Ғашиҡ булдым һиңә, аҫыл ташым... Яратам... Люблю!

– Аҡман... Ә ниңә һине Аҡман Ҡара тип дразнить итәләр?

– Ҡарасман булғанға. Сәсем ҡара ыҫмала кеүек, битем – үҙең күрәһең, сөгөн ҡара – как чугун.

– Уф, улям! Смола, чугун – уф, со смеху улям!

Аҡман менән Фәйрүзәнең көлөүе яҡындағы әрәмәлектә һайрашҡан ҡоштарҙы һиҫкәндерҙе: бер мәлгә шымып ҡалдылар ҙа, хәүеф юҡлығын шәйләп, тағы ла дәртлерәк сутылдашырға тотондолар...

Әнкә, һеңлеһен күпме генә ҡурсалаһа ла, уның күңеленә мөхәббәт ҡошо оялағанын һиҙмәй ҙә ҡала. Бурҙы күҙәтсе еңмәй, тиҙәрме әле? Юҡ, улай әйтеү гонаһ булыр ине Фәйрүзәләр тәңгәлендә. Һөйөүҙәрен кеше күҙенән йәшерергә тырышһалар ҙа, бер кемдән дә урламағандар ҙаһа ул илаһи хисте! Ун етеһе саҡ тулып килгән егет, ун алтыһына киткән ҡыҙ – йәшергәндәр шул, асыҡтан-асыҡ ғишыҡ тотошор хәлдәләрме? Фәйрүзә, ни генә тимә, сит милләт балаһы, йәше лә етмәгән кәләш булырға.

Ғишыҡ уты, бер ялмап алһа, йәшеңде һорап тормай шул! Бесән артынан ураҡ өҫтө етә. Эштә арманһыҙ булһалар ҙа, осрашырға ваҡыттары табыла, дәрттәре һүнмәй. Ярты төн уртаһында, арып-талып йоҡлаған ауылдың ҡолағына Әнкәнең: “Фроська, кайт, Фроська!”– тип асырғанып ҡысҡырған тауышы килеп ингеләй...

Фрүзкә күҙгә күренеп йыуанайа башлағас ҡына халыҡтың иҫенә төшә Әнкәнең һөрәнләүҙәре. Кем тейҙе икән был балаға, тип аптырашалар ҙа күнәләр – нишләһендәр, нишләтһендәр? Малай тыуа. Еңеү көнө айҡанлы байрамға, кәнсәләр алдындағы майҙанға Фрүзкә малайын күтәреп бара. Әлбиттә, көн ниндәй генә бөйөк, ҡайһылай ғына тантаналы булмаһын, уны ла күҙгә элмәй ҡалмайҙар: кемгә тартҡан? “Һуйған да ҡаплаған сиған балаһы”,– ти кемдер. Был һүҙгә кинәнеп ышаналар, үҙҙәренекенән сүп оса сөнки. Ә сиғандар, арбаларына тейәлеп, ысынлап та Толпарлы аша үткеләй һәр заманда ла. Айыусы һыртында аҙналап туҡтап та киткеләйҙәр. Ат кешнәүе, тимер сүкелгән һандал тыңҡылдауы, усаҡ төтөнө ауылды тертләтеп алһа ла, сиғандар әйбер сәлдереп, күҙ бәйләп йөрөмәй-йөрөүен. Толпарлыларҙың иң ҡурҡҡаны – балаларҙы урлап алып китмәһен былар, шул яҡлап алама дандары сыҡҡан бит – әллә хаҡ, әллә нахаҡ. Бәс, ана, Фрүзкәгә үҙҙәре бала ҡалдырып ҡасҡан?!

Ике йылдан, сиған арбаһынан төшөп ҡалған ҡара бөҙрә сәсле малай Толпарлы урамдарын бер итеп йүгереп йөрөй башлағанда, Әнкә менән Фрүзкәне һуғыштан иҫән ҡайтҡан атайҙары – ялтас башлы, ерән һаҡаллы урыҫ Харьковҡа алып ҡайтып китә: эҙләгән, Үзбәкстанды ҡыҙырып йөрөп сыҡҡан, беҙгә килеп тапҡан.

Һәм бына, күпме ғүмерҙәр үткәс, Әнкәләр тағы килгән беҙҙең ауылға. Һағынғандарҙыр, рәхмәт әйтеп, баш эйеп киткеләре килгәндер ауыр йылдарҙа һыйындырған был төйәккә – үҙҙәре лә шулай аңлатҡан сәфәрҙәренең сәбәбен. Тағы ла

бер мөһим әтнәкәне лә был юлы ауыл төшөнмәй ҡалмаған: Фрүзкәнең улы Арсен тас ҡына һигеҙ ҡыҙлы Аҡман Ҡара ағайҙың йәш сағына оҡшаған, ти. “Бына кемдең арбаһынан төшөп ҡалған икән был егет!”– тип толпарлылар бот сапҡан. Аҡман Ҡара ағайҙың Фариза еңгәмдәргә барып, ыҫмала ҡара сәсле улын, зәңгәр күҙле Фәйрүзәһен күрергә баҙнаты етмәгән, бәлки, хәләл ҡатынының күңелен яраларға теләмәгәндер. Әммә Әшрәфтең мотоциклына ултырып Оло юлға сығыуы, туҡталышта Өфөгә үтә торған автобусты көтөп торған ғәзиз кешеләре менән күрешеп, әҙме-күпме һөйләшеп ҡалыуы минең өсөн сер түгел. Башҡа берәүгә лә был хаҡта әйтмәҫкә тип Әшрәф менән һүҙ бирештек. Тик… был хәбәр ауылға барыбер таралды. Беҙҙән сыҡманы лаһа? Әлеге лә баяғы – Толпарлының өсөнсө күҙе асылған сағы булғандыр…

– Аҡман Ҡара ағай автобус артынан әллә күпме йүгерҙе лә юл ситендәге үләнгә тәгәрәп иланы, – тине Әшрәф.

– Беләм унда ниндәй үлән үҫкәнен – саңға туҙған кесерткән дә сәнскәк… Уларҙың сағыуын да, сәнсеүен дә тоймағандыр шул ағаҡай.

– Мин дә иланым, уның ыңғайына. Һөйгәнеңдән айырылыуҙан да ғазаплыраҡ хәл юҡ…

Әшрәфтең һүҙҙәре йөрәгемә шырауҙай ҡаҙалды. И, дуҫҡайым, был донъяла һине минән дә яҡшыраҡ аңлаған тағы кем бар икән?!

Фәйрүзә – Ефросиньяның яҙмышы минең тәьҫораттарыма ғына түгел, ә Урал армыттары итәгендә ятҡан башҡорт ауылы Толпарлының тарихына мәңгелеккә үрелде. Ҡасан да бер тағы аяҡ баҫырмы ул беҙҙең тупраҡҡа, юҡмы – Хоҙай Тәғәлә генә белә. Оло юлда хушлашҡанда, Арсен Аҡман Ҡара ағайға ҡул биргән дә «атай» тип әйткән… Бер генә һүҙ. Бәлки, башҡортса аңлаған, ҡанына һеңгән берҙән-бер һүҙелер был уның? Ә ниндәй бөйөк, ҡөҙрәтле, рухыңа терәк булырлыҡ көскә эйә ул һүҙ!

Ата менән ул, моғайын, хатлашыр ҙа был осрашыуҙан һуң, осрашыуҙары ла ихтимал: Харьков ни үҙебеҙҙең Советтар Союзы лаһа. Эйе, алыҫ-алыҫтарҙа, картанан ҡарап ҡына күҙалларлыҡ ул ҡалала беҙҙең нәҫел особоҙ бар хәҙер: Толпарлының кендеге ҡайҙарға ғына берекмәгән дә, кемдәрҙе генә үҙенең ҡайнар ҡаны менән һуғармаған!

* * *

Мәүлиҙә – йәйге каникулда, унан тынғылыҡ юҡ ошо осор. Толпарлының һәр урамын урап сыҡтыҡ, Әнкәләр осондағы бүрәнәлә, усыбыҙға үгеҙ йөҙөк йомоп, шып-шым ғына Ҡарауылтауға ҡарап ултырҙыҡ, Күрәнлене кистек, күрән ҡыяҡтарына балтырҙарыбыҙ сыйылып бөттө. Толпарсыҡҡанда һыу индек. Берсә көлөп, берсә һағышланып, сорлауыҡ уйнап үҫкән бала саҡты, иҫәр Әсәндең әүлиәлеген, йәшенле йәйҙә һәләк булған ете апайҙы, Артурҙың хатын – бөтәһенбөтәһен ҡат-ҡат иҫләп тергеҙҙек. Ниндәй ҙур бәхет икән ул тоғро әхирәтең булыу, уға йөрәк төпкөлөңдә йәшереп, бикләп ҡуйған серҙәреңде лә шикләнмәй, тартынмай асып һалыу! Беҙ, гүйә, бер-беребеҙҙең күңел баҡсаларына экскурсияға йөрөйбөҙ: улар оҡшашҡан, әммә һәр ҡайһыһы үҙенсә – ҡабатларлыҡ, күсермәһен алырлыҡ түгел. Мәүлиҙәнең баҡсаһында атаҡлы Дон, Донец йылғалары тулҡындары шаулай, “Киевская Русь, князь Игорь” тигән тарихи орандар шаңдауы килеп-килеп аңды һиҫкәндерә, яугир ҡыпсаҡ рухы һирпелә… «Тарихтың «половцы» тигәне ҡыпсаҡтар икән дә ул, ҡыҙый», – ти Мәүлиҙә. Һәм беҙ, уҡыған-белгән хәлебеҙсә, ҡаһарман ҡәрҙәштәребеҙҙең донъяла ҡалдырған эҙҙәрен байҡап, шул хаҡта һөйләшеп китәбеҙ ҙә зиһенебеҙ әлегә аса алмаған ишектәр алдында сараһыҙҙан туҡтап ҡалабыҙ… Татар әбекәйҙең: «Әтиемнең нәселе

кыпчаклардан, күп гасырлар әүвәл алар, бер төркем дала кыпчаклары, Кырымга килеп юлыккан да шунда тамыр җәйгән. Телебездә һаман сакланган кайбер җөмләләр…» – тип һөйләгәне хәтерҙә ҡыймырлап ҡуя ошо йәһәттә. Бәғзе мәлде уның «жок-жок», «жакыным» тип ҡаҙаҡсараҡ әйтеп һалыуы ҡыпсаҡтар мираҫы микән? Бәс, ул төптө башҡорт буламы әтеү?!

Мәүлиҙәнең баҡсаһында иң батыры, иң матуры, әлбиттә, ул – Олексий. Уныҡындай ебәк бөҙрәләр башҡа берәүҙә лә юҡ, ә ҡулдары шундай наҙлы икән… Ә тауышы, ти, йөрәккә берсә ҡайнар ут булып, берсә татлы бал булып яғыла…

– Армияға оҙатҡанда Фатих минән күҙен алманы. Ниңә шулай ҡыланды икән? – тип әхирәтемә еткерҙем иләҫ-миләҫ һиҙемемде.

– Һин үҙең ҡыланаһың, Нурия! Белмәмешкә һалышаһың!

– Беләм дә, белмәйем дә. Һөйәм дә, һөймәйем дә...

– Кит, ҡыҙый, юҡҡа өҙгөләнмә, ысын мөхәббәт килһә, белмәй ҡалмаҫһың!

– Ә килмәһә?

– Абау! Олексийҙы осратмаһам, нишләр инем?!

– Башҡаны осратыр инең.

– Башҡаны? Ауыҙыңдан ел алһын, тәүбә-тәүбә!

– Шул тиклем дә инанып әйтәһең? Көтмәгәндә бер-берәү табылып, уны Олексийҙан да нығыраҡ яратып ҡуйһаң?

– Бушты һөйләмә!

– Уф, ҡыҙый, Әсмә менән һиңә килде лә ул мөхәббәт, мин генә өлөшһөҙ ҡалдым әллә?

– Донъяла һәр кемдең үҙ тиңе, бер бөтөн булып берегер яртыһы бар, ти.

– Өлөшөңә төшөр көмөшмө? Баҡыр булһа?

– Ә алтын булһа?!

Шулай берсә етди, берсә еңел-елпе хәбәрҙәр һөйләшеп йөрөп, әсәйҙәребеҙгә сөгөлдөр эшләшеп, башҡа донъя мәшәҡәттәренә сорналып, йәйҙең үткәнен дә белмәй ҡалдыҡ. Әлдә Әсмә янына барып әйләнергә өлгөрҙөк. Ул ашнаҡсылыҡҡа уҡып сыҡты-сығыуын, әммә эшкә урынлашмай тора, армиянан ҡайтасаҡ Артурҙы көтә. Урманда ҡалмаҫтар, моғайын, ҡайҙалыр барып урынлашырҙар – Себергә, Тубыл ҡалаһына, китеүҙәре лә ихтимал. Айыусыла кеше әҙ ҡалған хәҙер, әбейле-бабайлы бер ғаилә, яңғыҙ ҡарсыҡ һәм Әсмә. Магазинға ла Саҡмайылғаға йөрөйҙәр, унда колхоз малы үрсене, ултыраҡланып йәшәүселәр артты. Туранан өс саҡрымлап барҙыр, алыҫ түгел, тик атларға уңайһыҙ – юлдың бер өлөшө, был тирәлә һаҡланып ҡалған затлы ҡарағастарҙы тиктәҫкә киҫмәҫ өсөндөр, ҡороған йылға үҙәненән һалынған, ташлы-тошло. Ауылға атама биргән йылғаның матур исеме лә саҡма таштары ғына ҡалған шул хәҙер…

Айыусыға Әшрәф беҙҙе мотоциклына ултыртып алып барҙы. Ул тәгәрмәсле тырылдаҡтың да үҙ тарихы бар. Сәмиғуллинға эшенән яңы мотоцикл биргәндәр, иҫкеһен, йөрөрлөгө ҡалмаған, тимерлеккә ырғытһаң да рөхсәт, тигәстәрен, Әшрәфкә биргән: “Ошо металлоломды эш итеп ала алһаң, һинеке”, – тип.

Ҡулынан килгән Әшрәфтең: йөрөп ята мотоциклы, кеше ултыртырға, ваҡ-төйәк әйбер һалып ташырға йәшниге лә бар. Колхоз тракторын үҙ йомошоңа ҡыуып һүҙ ишеткәнсе ни, ярап ҡалды, тип ҡыуана дуҫыбыҙ. Барышлай туҡталып, Әшрәф ҡороған йылға тирәһенән, һайлап йөрөп, бер нисә таш йыйып алды. Мәүлиҙә менән бер-беребеҙгә аптырашып ҡарашҡанды күреп, кәрәк таштың ауырлығы юҡ, тип кенә ҡуйҙы. Ысынлап та, барып төшөү менән кәрәге тейҙе: ауылдағы моторлы электр станцияһын һүтеп алып киткәндәр, шырпылары бөткән дә ни ут яға, ни шәм яҡтырта алмай ултырғандар.

Әшрәф, теге сәкмә таштарҙы бер-береһенә бәргесләп, һыҙа һуғып, осҡон сығарҙы ла сыра тоҡандырҙы, усаҡ терелтте. Торбанан сыҡҡан төтөндө шәйләптәр, ике ҡарсыҡ һоҫҡо тотоп килеп етте – ут алырға.

Ә беҙ дуҫыбыҙ өсөн ғорурландыҡ, уға арҡаланып, уның егетлеген танып, нимә әйтһә лә, күндәм генә баш ҡағып торҙоҡ.

Күңелем болоҡһоно, башыма «Бер һөйгәнем өсөн…» тигән һүҙҙәр инде лә сыҡмай йөҙәтте. Ҡатын-ҡыҙға ғына ҡағылмайҙыр ҙаһа ул мәҡәл? Ана нисек өлтөрәй Әшрәф, бер һөйгәне өсөн таштан хатта ут саға.

«Бер һөйгәнем өсөн… Бер һөйгәнем өсөн…» Мөхәббәт шулай түләтәме икән ни гелән?! Ниңә шарт ҡуймай ғына, ҡорбан һорамай ғына бәхетле итеп ҡуймай һуң ул? Шартын да, ярай, үтәр инең, әгәр һөйгәнең үҙеңә яҙһа. Әшрәф бит ут сағыу ғына түгел, таштан йүкә лә һуйыр ине, биллаһи, Әсмә хаҡына, тик – өмөтө буш…

Тиҫтер ҡыҙҙарҙан ауылда бер яңғыҙым тороп ҡалдым. Нисек шулай килеп сыҡтылыр? Мәктәпте ун дүрт ҡыҙ, туғыҙ егет тамамланыҡ, Әшрәф тә мин һерәйеп йөрөйбөҙ. Егеттәр, ярай, армияла, ә ҡыҙҙар һуң? Кемдәрелер уҡырға инде, кемдәрелер, ысвикла бисәһе булмайым тип, ҡалаға олаҡты. Беҙҙән алдағылар ҙа шулай иткән – һөҙөмтәлә ауыл тулы буйҙаҡ егеттәр, ә ҡыҙҙар юҡ, ҡара эштән ҡурҡып ҡасҡандар. Ир-атҡа, исмаһам, шофер, механизатор һымаҡ ауыл ерендә мәртәбәле һөнәрҙәр бар, ҡатын-ҡыҙға иһә – ферма ла сөгөлдөр баҫыуы. Күпме генә еңелләшһә лә, сөгөлдөрҙәге эш, көҙгө бысраҡ етһә, һине барыбер бисураға әйләндерә. Сәскә кеүек йәш сағында кемдең бисура булғыһы килһен?

Осалар ҡыҙҙар, ҡалаға осалар… Унда, йәнәһе, уларҙы аҡ ҡалас көтә. Ә ҡалғаны, мөһимерәге, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ бәхете – ғаилә, ҡотло донъя көтәме? Бик көтөп тормай икән шул. Үҙемдән өлкәнерәктәрҙе барлап сыҡтым: дөйөм ятаҡта йәшәйҙәр, кейәүгә сыға алмайҙар, йыйған мөлкәттәре – бер сумаҙан сепрәк. Бәс, ҡала егеттәренә ҡала ҡыҙҙары бөткәнме? Беҙҙекеләр ултырып ҡала ҡыуарып… Ә бит әлеге көндә – һанап сыҡтым – Толпарлыла бына тигән егермеләгән егет кәләш тапмай яфалана. Һөнәрҙәре бар, күптәре нәҫел-нәсәбенә таянып, өмә яһап йорт та күтәрткән, ә күҙләргә йәр юҡ. Йөрөйҙәр ҡағыҙ кәләштәргә ҡарап йыуанып.

Һуңғы биш-алты йыл эсендә генә олоғара бәлә хасил булған даһа ауылда. Яңы ғаиләләр ҡоролмағас, балалар тыумаҫ, быуындар алмашынмаҫ… Мәктәптә кем уҡыр?

Башыма ут ҡапты ошо уйҙан. Бығаса иғтибарламағанмын, һуҡыр, һаңрау булғанмын, гүйә, – дөрөҫөрәге, ошо хәлдәрҙе күреү, аңлау халәтенә өлгөрөп етмәгәнмен! Үҙемде, аҡыллы, вайымлы, тип йыуанып йөрөгән булам, мөхәббәт көҫәп бәргеләнәм, ә кешелектең кесе йыһаны, кендеге тип аңғарған төбәгемә ниндәй ҙур бәлә янай!

* * *

*Мин-мин – ҡыңғырау, Дэн-Дэн – һаңғырау…*
*Мин-мин – ғашиҡмы? Дэн-Дэн – ашыҡма!*

Мәктәпкә ремонттан һуң пионер бүлмәһен йыйыштырырға тип китеп барам – ике көндән 1 сентябрь. Эргәмдә һикерә-атлай, үҙенсәниҙер мығырҙап Менәүәрә килә, ярҙамлашам, тигәс, эйәрткәйнем. Уның шулай көйләберәк, ярым шыбырлап, шиғырына рифма эҙләп хитланыуы миңә һис сәйер түгел, хыялға бирелеп китһәм, үҙем дә уның һыңарымын. "Ғашиҡмын … Дэн-Дэн"… тигәненә ҡолағым улай ҙа ҡарп итеп ҡалды: минең Динис туғаным даһа ул Дэн?! Әллә

уға күҙе төшкәнме Менәүәрәнең? Һы… Ҡапыл башымда борхоп тиҫкәрелек бураны туҙғыны: ә тиңме әле ҡыҙ беҙҙең егеткә, тәҫ бирерме нәҫелебеҙгә?! Ихтыяр көсөм менән тиҙ генә баҫтым был туҙанды, әлбиттә. Әммә үҙемә үҙем хайран ҡалдым. Әйтерһең, килен төшөрөргә торған һынсыл ҡәйнәмен… Менәүәрә һымаҡ илгәҙәк, һәләтле ҡыҙыҡай эләкһә әле Денисҡа, тиәһе урынға.

– Һин-һин – ашыҡма! – тинем дә, серен сискәнемде аңлатып, Менәүәрәгә мут ҡараш ташланым.

– Нурия апай! Әллә беренсе мөхәббәт уты ҡапты миңә? – Эскерһеҙлеге менән арбай ҙа ҡуя мине ошо ҡыҙыҡай.

– Ә Мөҙәрис? Туҙға яҙған һөйөү хаты?

– Эйе… Тик ул минең ике ятып бер төшөмә лә кермәй, ололар әйтмешләй. Дуҫ малаймы – дуҫ малай, йөрөй шунда әллә нимәләр уйлап сығарып. Ә Дэн… Дэн! Каникул һайын Толпарлыға килерме икән? Әллә берәй ҡала ҡыҙына әүрәрме? Уф, Нурия апай, башымдан сыҡмай шул һонтор.

– Муйынына аҫылынырға йәпле, һин уның ҡултыҡ аҫтынан ғына.

– Йүгереп барып муйынына аҫылынырҙай булып китәм, ысын. Ярамағанын беләмсе. Ояты ни торор, шулай ашҡынһаң? Абау…

– Ә һин хистәреңде шифырға түк, Менәүәрә. Әллә ысын, әллә юрый әле тәүге мөхәббәт тигәнең, ул үтер-китер – шиғырың ҡалыр.

– Үтер микән? Һинеке үттеме?

– Белмәйем…

– Әлеге көндә нишләй икән ул битломан, Денисты әйтәм?

– Уҡырға төшөргә әҙерләнәлер, нишләһен.

Оҙаҡ ҡына һөйләшмәй барҙыҡ. Менәүәрә ни хаҡында уйлағандыр, минең уйым океан арьяғына сығып китте был юлы.

Динис йәйге каникулда американдарҙың “Битлз” тигән ансамбленең йырҙары яҙылған пластинка килтергәйне.

– Өфөлә – битломания, – тип аңлатты. – Ошоно итәк аҫтынан һаталар, 25 һумға алдым, атайым нисек тотторҙо ул аҡсаны – үҙем дә аптырайым. Өйҙә генә тыңлайһың, урамда эт һуғарып йөрөмәйһең, тип строго-настрого әйтте. Вот так, шундай алтын пластинка был.

– Бәс, беҙҙә сыҡҡан даһа, ниңә йәшереп ҡыланалар? – тинем, пластинканың тышындағы яҙыуҙы күргәс: өҫтәрәк “Музыкальный колейдоскоп”, аҫтараҡ “Девушка”, музыка и слова народные, квартет “Битлз” тип яҙылған. Йырҙың ҡыҫҡаса русса тәржемәһе лә бирелгән, бер егетте мөхәббәте менән арбаған ғорур ҡыҙ тураһында икән…

Уф, тиҙерәк тыңлағы килә быларҙы – Дэн фотоларын да килтергән: өс егет гитарала уйнай, дүртенсеһе арттараҡ барабан ҡаға. Өйҙә пластинка ҡуйып уйнатҡыс юҡ, пионер бүлмәһенән проигрывателде алып торҙом. Әллә ниндәй тыйылған сер ҡоршап алды лаһа күңелде, бәй…

Тыңланыҡ. Мәүлиҙәне, Менәүәрәне, Гөл менән Әлде саҡырғайным. Игеҙәктәр ҙә шунда инде, өләсәйем дә – ҡайҙа сығып китһендәр. Даң-доң, зың-зыр музыкаға ҡапылда һиҫкәнһәк тә, ҡолаҡ тиҙ өйрәнде, сәйер тойолған моңло тауыштар һәр күҙәнәккә үтеп инде, һәм сит телдә яңғыраған йыр, үҙ ҡосағына алып, өйөрөлтә башланы. Камила менән Әл иҙән уртаһына төшөп, бер-береһенә тотоношмай ғына, музыка ритмына һелкенеп бейей, Гөл яурындарын һелкетә, Менәүәрә хыялға сумған, Камилдың йәшел күҙҙәрендә йәйғорло осҡондар уйнай, өләсәйем шул тиклем дә шәп тауышҡа ыжламай йоҡлап ултыра, яҫтығына арҡа терәп. Ә мин… Ә мин һуштан яҙыр сиктәмен. Әллә ниндәй таныш түгел ҡөҙрәте

бар был сит моңдоң! Эйе, тетрәндергес “Зөлхизә” лә, аянныслы “Ашҡаҙар” ҙа, ирҙәрҙе илатырлыҡ “Буранбай” ҙа түгел; эйе, тауышы Ҙур Иҙелдәй (Волгалай) ҡөҙрәтле, тәрән һәм оҙон тынлы Зыкина, моңо менән дә, һыны менән дә хайран итер Магомаев, үҙебеҙҙең мәшһүр Мәғәфүр ағайыбыҙ бар, ә “Битлз” егеттәре барыбер әҫәрләндерҙе, иләҫләндерҙе. Һәр кемде үҙенсә бер халәткә индерҙе, үҙенсә йоғонто яһаны. Ғәжәп… Күрәһең, моңдарҙың тәьҫири көсөндә уртаҡлыҡ бар, уларҙың тамырҙары ҡайҙалыр тәрәндә, бер сығанаҡталыр.

Динис ҡайтып киткәс, атайыма хат яҙҙым. Үҙ ғүмеремдә тәү тапҡыр әйбер һораным: “Битлз” пластинкаһын. Бөтә СССР “битластар” тип атала башлаған яңы музыка менән һаташа икән, толпарлылар кемдән кәм?! Бигерәк тә Джон Леннон менән Пол Маккартниҙы яҡын күрҙек. Төҫ-баштары менән улар дүртеһе лә игеҙәктәр кеүек – ҡара костюм, аҡ күлдәк, ҡара галстук, еткән сәс – тауыштарынан айырабыҙ.

Битластарҙы ауылға “индергәнем” өсөн эләкмәй ҡалманы миңә, әлбиттә. Сәкинә апа өйгә килеп, өҫтәл төйөп әрләне, әйтерһең, мин – дошман шпионына юл асҡан һатлыҡ йән. Үҙем дә шөрләп ҡуйҙым: кем белә ул капиталистарҙы…

Ике аҙна уҡығас, өлкән синыфтарҙы, ғәҙәт иткәнсә, сөгөлдөрсөләргә ярҙамға сығарҙылар. Шуны аңғарҙыҡ әле: колхоз, планда күрһәтмәй генә, сөгөлдөрҙө артығыраҡ сәсә икән. Звеноларға тигеҙ итеп өҫтәп бүленгән, ти, ул майҙан, әммә көҙ етһә, һәр кем үҙенекен ҡайғырта, татлы тамырҙарҙы ҡар күҙе төшкәнсе шәкәр заводына оҙатып ҡалырға тырыша. Артығына иһә ҡул етһә – тотонорҙар. Шуны аңлап, Аҡназар ағай йылдың-йылы мәктәпкә көс төшөрә.

Баҫыуҙың иң арғы осонда ул майҙан, тикшереү-фәлән килһә, күҙгә салынып бармайҙыр. Беҙҙе, ярай ҙа, машина менән алып баралар, алып ҡайталар. Будка бар, эсендә оҙон өҫтәл, эскәмйәләр хәстәрләнгән, бер мөйөштә – гәзит өйөмө. Сәғәт ун икеләрҙә төшкө аш килтереп ашаталар, өстәрҙә эш тә бөтә. “Тырышып эшләгеҙ, понимаете ли, былай ҙа төш башынан һыпыртаһығыҙ!”– тип мыжып, Искәндәр ағай килеп киткеләй эргәбеҙгә. Беҙҙең ыңғайға тамаҡ туйҙырып ала ҡай саҡта. Ысвикла бисәләре ризыҡты әүәлгесә үҙҙәре менән йөрөтә, төркөм-төркөм булып, гәп һата-һата сәй эсәләр. Бер үҙе бер арый көйшәп ултырыусылар ҙа юҡ түгел.

Иң башта беҙҙең остағы татлы тамырҙарҙы күтәрттереп өйҙөрәләр. Ярымйорто булһа ла таҙартылғанды еренә еткереп эшкәртергә лә машинаға тейәп оҙатырға ҡала. “Производственный травманан һаҡлағыҙ балаларҙы, башты Себер ебәрерҙәр, елки-палки! – тип уҡытыусыларҙы киҫәтеп кенә тора әлеге Искәндәр ағай. – Бергә яуап бирербеҙ, если что, понимаете ли…”

Төштән һуң мәктәп йыйыштырыусылары, ауыл Советы, почта хеҙмәткәрҙәре эшкә килә әлеге артыҡ майҙанға. Улар, бала-саға менән ҡушмағыҙ, айырым өлөш бүлеп бирегеҙ, тип ныҡышҡас, шулай иткәндәр. Сәмәй ҡортҡа ла сыҡҡан сөгөлдөргә. Теге хәлдәрҙән һуң ул милиция участкаһында эшләй. Иҙән йыуыусы ла, Сәмиғуллин саҡыртҡан кешеләргә фарман ташыусы ла, ул юҡта (әллә нисә ауылға бер участковый бит) телефон төбөндә ултырыусы ла – бер үҙе. Хәтәр эре йөрөй башлаған, минең блат көслө, бәйләнеп ҡарағыҙ, мин власть кешеһе, тип фәстерә, ти, элекке гонаһтарын иҫенә төшөрә башлаһалар.

Әйткәндәй, Гөлбикә апай ҙа шул планға инмәгән сөгөлдөрҙө сығара. Аҡназар ағай уны ҡартәсәйем урынына эшкә алды. Теге әшәке ҡылығы өсөн ғәфү үтенеүе микән? Ни тиһәң дә, аҡсалы, сәғәтле эш.

Әшрәф менән һөйләшеп алабыҙ бер арала, уның “Беларусы” иртәнән кискәсә

баҫыуҙан сыҡмай. Һуңғы тапҡыр күрешкәндә Әсмә яғынан килгән хәбәрҙе еткерҙем: Артур дембель алдынан ғына хәрби госпиталгә эләккән. Һынап ҡараным – йөҙөнә кинәнеү ғәләмәте сыҡманы, киреһенсә, борсолоп китте кеүек.

– Йәй башында уҡ ҡайтырға тейеш ине шул, – тине дуҫым. – Әйтәм, тотҡарланды…

Үҙемә оят булып китте: нимәгә уны һынап маташам, эскерһеҙ икәнен әллә белмәйемме?! Ҡатындарҙың эсе ҡат-ҡат, ҡырҡмаһа ҡырҡ ҡат, тигән ҡатмарлыҡ йоҡҡан, ахырыһы, миңә лә?

Әсәйем быйыл үҙҙәре бер звено булып ойошҡан Таллы апайҙары араһына инде. Дөрөҫ тә, ылыҡһын уларға, ситкә тибәрелмәһен. Хәйер, таллылар беҙҙекеләрҙе үҙ итә ул, ҡоҙа-ҡоҙағый булышып йәшәйҙәр әүәлдән, туғанлашып бөткәндәр. Көн дә булмаһа ла, төштән һуң әсәйемә ярҙамлашам. Бер нәмәгә иғтибар иттем әле: әсәйемдең йөҙө йонсоуыраҡ, кәүҙәһе тулыланыбыраҡ киткәндәй. Самат ағай ҙа кис һайын ат һалдырып уны алырға килә, арбаһына ипләберәк, йомшағыраҡ урынға ултыртырға өтәләнеп тора. Кеше ыңғайында машина кузовында ҡайтһа ла була инде, бигерәк бынау әсәйем, ирем бар, тигәс тә. “Ир” тигән һүҙгә фекерем эләкте лә, башым эшләп китте: йөклө бит әсәкәйем, бөтә ҡиәфәте шуны әйтеп тора!

Өләсәйемә еткерҙем был яңылыҡты иң башта. «Һапамды…» – тине лә шымып ҡалды. Моғайын, үҙенең хәтер урманына инеп китте. Унда, таныш һуҡмаҡтарҙа, күптән вафат Төхвәтулла бабайы, һуғышта башын һалған уландары, Абдрахманы осрайҙыр... Ниһайәт, иҫе бөгөнгөгә ҡайтҡас, мин ятлап бөткән тәкрар ҡабатланды: «Әлдә тапҡаным Гәүһәремде, ырыуҙан ҡалмаҫ борон, мына лаһа уның үҙенән генә түгел, балаларынан изгелек күреп ултырам олоғайған көнөмдә». Өләсәйемдең тауышында һөйөнгәне, өнәгәне ап-асыҡ һиҙелде.

Ҡартәсәйемә лә белгерттем әлеге хәлде – ғәҙәти ваҡиға тип ҡабул итте. Уның күңеле һуңғы араларҙа тынысланып тора, сөнки Шәрифә апайымдың малайҙары тәртәгә ингәндәй, атайымдан да хат-хәбәр өҙөлмәй. Киләһе йәй килеп сығыр Баязитым, ти. Ҡайтыр, тимәй. Өс-дүрт йылға бер күренеп киткеләй атайым улай ҙа. Ә ул ебәргән посылка йәшниктәренән күпме сыйырсыҡ оялары, ҡоштарға ем тағараҡтары эшләнгәндер ауылда – кем һанаған?

Донъя шундай итеп ҡоролған: туҡтауһыҙ хәрәкәт бара, тыуым менән үлем нисбәтенең тигеҙлеге атҡарыла, миҙгелдәр үҙ сиратынан яҙлыҡмай алмашына. Һәм был, әлбиттә, һис шикһеҙ, Юғары аң тарафынан даһи камиллыҡта уйланылған, яйға һалынған, ҡанун дәрәжәһенә еткерелгән. Ә шул донъяны көтөү, уға яраҡлашыу, көнкүреш тәңгәлендә нимәнелер яйлау, үҙгәртеү, уйлап табыу әҙәм балаһының иркенә тапшырылған.

Һәр көндөң үҙ төҫө, үҙ хәстәре, үҙ мәшәҡәте бар. Бөгөн, мәҫәлән, бәшмәк көнө. Аҡбейек аръяғындағы уҫаҡлыҡта һылыу бәшмәк дәррәү үҫә, ҡышҡылыҡҡа тоҙлаһаң, бәлеш эслегенә шәп була, ит тәме килә бит унан. Билмән эшләп тә ашайбыҙ, бәрәңге ҡушып табала ла ҡурабыҙ – ризыҡ инде, нитһәң дә.

Шуны белгәс, мәле етеү менән, халыҡ уҫаҡлыҡҡа эркелә. Мин дә, игеҙәктәрҙе өгөтләп, тоҡ тотоп, бысаҡ алып, шунда йүнәлдем. Тауға күтәрелгәс, ауылыбыҙға шым ғына ҡарап торҙоҡ: йорттары бынан бәләкәс кенә булып күренә.

– Ана Таллы, әсәйемдәрҙең өйө… – тип ҡуйҙы шул саҡ Камил төшөнкөрәк тауыш менән. Ошо балаларҙың өс өйө бар хәҙер – яҡшымы был хәл, түгелме? Бер ҡатлы ғына яуап биреп булмай… Шунан, ауылға арҡа ҡуйып, уҫаҡлыҡ яғына боролоп баҫтыҡ та өсәүләп “аһ” иттек: тау итәгенә оло балаҫ йәйгәндәрме ни – шау алтын ул балаҫ, төшлөккә үрләгән ҡояш нурында йылҡылдап ята –

уҫаҡтар һары тәңкә-япраҡтарын ҡоя ғына башлаған мәл. Аҡбейектең был яҡ һырты һөҙәгерәк, йүгерешеп төшөп киттек алтын балаҫҡа табан. Ике көн элек кенә еңелсә ямғыр яуып үткәйне, шунан һуңдыр – бәшмәктәр тыптырлашып үҫкән, ояһы-ояһы менән ултыралар.

– Иң һылыуҙарын, бәләкәстәрен генә киҫегеҙ! – тип бойорҙо ла Камила эшкә лә тотондо. – Ҡарт бәшмәк ҡортло, серегән була. Ә тәтәй генәләрен тоҙлаһаң, банка быялаһы аша шундай матур булып күренәсәктәр.

– Өлгөр инде, белекле инде, и туғанымды! – Маҡтау май булып бата уға. Камил, йәшкелт күҙҙәрен йылмайтып, ҡолағына киртеп йөрөй беҙҙең һүҙҙе. Бәшмәкте тап-таҙа итеп, бер тигеҙен генә һайлап йыя ул, ҡайтҡас берәмекләп барлап тораһы ла түгел.

– Бәшмәктең күплеге! Иртәгә лә киләйек, Лираны ла эйәртәйек, – тине Камила, эшен туҡтатмай ғына: ҡулындағы бысағы ялт-йолт итеп тора, күҙ ҙә эйәрмәй.

– Ғаян ағайымды ла, – тип өҫтәне Камил һәм, турайып баҫып, маңлайына ҡулын ҡуйып, минут һайын ҡайнарлана барған ҡояшҡа ҡараны: – Йәйге селлә тиерһең. – Ғәжәп иттем, туғанымдың күҙҙәре ошо минутта әллә ҡояш нурынан, әллә алтынға мансылған ошо мөхиттән гәрәбә төҫөнә ингәйне.

Ҡапыл атайым иҫемә төштө, шәүләһе өрлөктә сағылған сейә япраҡтарын уның күҙҙәренә оҡшатып, һағыныуымдан һаташыр сиккә етеүҙәрем, тауҙарҙан шаңдып әйләнеп ҡайтҡан ҡайтауаздай, йөрәгемде тетрәндерҙе. «Күпме мөмкин, күпме шулай мөмкин һыҙланырға!» – шулай тип ҡысҡырғым килде. Ҡысҡырһам, һауа һелкенер, уҫаҡтарҙа саҡ-саҡ эленеп торған алтын тәңкәләр шауҙырлап ҡойолоп төшөр ине.

Юҡсы, ҡысҡырмайым, күңелем һөрәнен генә ишетәм. Үҙем генә ишетәм… Ә уҫаҡ япраҡтары баҫалҡы ғына иҫкән елгә лә, хатта шыбырлап һөйләшкән тауышҡа ла өҙөлөп төшөп тора, төшөп тора.

Шул мәл, ҡотто осороп, Камила сайылдап ебәрҙе: уф, ни булды?!

– Ҡыуаҡ артынан ҡапыл бер терпе килеп сыҡты, үҙе әллә ниндәй тауыш сығара, бышҡырған кеүек, – тип һеңлем эргәмә йүгереп килде.

– Терпе эңерҙәрәк сыға сысҡан ауларға, ти торғайны Бүреһуҡҡан олатай, быныһы һинән шөрләп бышҡырғандыр,– тинем дә ергә тәгәрәп көлөргә керештем. Игеҙәктәр ҙә ҡушылды: беҙҙең яңғыратып көлөшөүгә, өҫтөбөҙгә алтын тәңкәләр яуҙы. Эйе, көҙҙөң матурлығы бәллүрҙәй нескә, ҡоралайҙай өркәк был мәлдә.

Был ниндәй көн булды?! Илаһи ҙа, һағышлы ла, уйлы-моңло ла. Ҡартәсәйемә лә биҙрәгә тултырып бәшмәк алып барғайным, ул тиктомалға: «Ҡатын ҡырҡтан уҙған, уҡаһы ҡойолған…» – тип һөйләнеп йөрөйсө? «Уҡа»ға сибәрлек, йәшлек мәғәнәһе һалынғанын белһәм дә, юрамал һораған булдым: «Кемдең уҡаһы ҡойолған, йыйып алһын да кире баҫып ҡуйһын, бәс». Өҫтәлгә күҙ һалғас, аңланым: ҡартәсәйем фотолар ҡарап ултырған, ана, йәшел бәрхәт тышлы альбом асылған көйө ята. Шул асыҡ битенә күҙ һалдым: фотола атайым менән әсәйем баҫып тора, ҡартәсәйем артлы ултырғыста ултыра, яулығын сөйөп ябынған, иҙеүенә ваҡ-ваҡ аҡ төймәләр теҙелгән күлдәк кейгән, аяғында үзбәк галошы. Атайым армияға китер алдынан ғына төшкәндәр, беләм. Әсәйемдең күлдәге ҡорһаҡ тирәһендә ҡабарыбыраҡ тора: кесе йыһандағы миңә дүрт ай самаһылыр… Үҙенең шул саҡтағы төҫ-башына ҡарап әйткәндер ҡартәсәйем, уҡа ҡойолған, тип? Фоторәсемдә уға теп-теүәл ҡырҡ йәш, минең иҫәбемсә. Һылыу йөҙ, ғорур һын-ҡиәфәт, төҙ танау, яҡты маңлай… Үҙ баһамды яҡшы беләм, тип әйтә һымаҡ уның һәр һыҙаты.

– Әлдә Аллаһ Тәғәлә шул бәхетте инселәгән беҙ ҡатындарға, уҡаң ҡойолһа ла, әрәм булмай, ҡыҙ балаңа, ҡыҙың булмаһа, ейәнсәреңә мираҫ булып күсә. Бына лаһа, ҡолоҡасым, һиндә – минең маңлайым, танауың да ҡырласланды – беҙҙең нәҫел мисәте, ә күҙҙәремдең төҫө – Камилала.

– Бөгөн көн нишләптер моңһоуыраҡсы, ҡартәсәй, гелән ғүмер хаҡында уйландыра ла тора?

– Көҙ, ҡолоҡасым, көҙ… Уның һағышы һарыла күңелгә…

25

Эштән ҡайтып килә инем, Зөмәрә апай бер ыңғай өс конверт, бер открытка килтереп тотторҙо! Мәүлиҙә әхирәтемдең хатын уҡығас, әллә нисә сәғәт йоҙроғомдо йомарлап йөрөнөм. Берәй нәмә тотайым йә эшләйем тиһәм, – йоҙроғомдо саҡ яҙып алам, шулай көсөргәнәм. Әхирәтемде унда рәнйетәләр икән, битәрләйҙәр! Олексий бер ялында уны ҙур ғына ҡасабала йәшәгән атаәсәһенә ҡунаҡҡа алып ҡайтҡан да, шунда…

«Атаһы Алешаға оҡшаған, мыҡты кәүҙәле, алсаҡ сырайлы ағай, – тип яҙа Мәүлиҙә. – Әсәһе һылыу йөҙлө, беҙҙең Әсмә һымағыраҡ эре һөйәкле казачка, үткерлеге күҙенә, тәкәбберлеге йөҙөнә сыҡҡан. Уның эргәһендә минең әсәйем күшеккән тауыҡ инде… Северный Донец тигән йылға аға ул тирәлә, шуны барып ҡараныҡ, ай-һай, ҙур һыу. Дондан ҡайтышыраҡ, тиҙәр. Был яҡтарҙа, ҡыҙый, ҡайҙа күҙ ташлама, шунда шахта, шахтерҙар поселогы, күмер тейәгән вагондар йөрөгән тимер юлдары. Ерҙән дә, һауанан да, кешеләрҙән дә күмер еҫе килә… – Ошо урында минең танауыма ла шул еҫ бәрелгәндәй булды, сөскөрөп ҡуйҙым хатта. Шулай ул мин, уҡығанымды кисереп алам да китәм. Аҙаҡтан ғына өҫтәп ҡуйған әхирәтем теге мине йоҙроҡландырған хәбәрҙе. – Ҡыҙый, һиңә генә әйтәм, – тигән, – ҡайтҡас, бер көн уҡыуымды ҡалдырып, бүлмәмдә шаңҡып яттым, башыма һуҡҡандай булды Алешаның әсәһенең һүҙе. Милләтемде һорағас, әйткәйнем, башҡорт, тип, ултыра төштө лә: «Басурманка, дикарка!» – тине. Ҡысҡырманы ла, ҡыуманы ла, ә тәбиғи бер тауыш менән әйтте, бармаҡ төртөп.

– Дарья, басурманы канули в лету, – тине ире, үҙенсә мине яҡланы, шикелле. Әйткәндәй, ул украин түгел, урыҫ икән, Куйбышевтан килгән бында, шахтаға. – Башҡортостанды беләм, Өфөлә булғаным бар, унда башҡорттар, татарҙар йәшәй, урыҫтар ҙа күп, – тигәйне, ҡатыны тағы өҫтәне:

– Татары-монголы – те еще басурманы!

Алеша әсәһен үҙенсә тынысландырырға тырыштымы, атайымдың уҡытыусы булып эшләүен әйтте. Апай үҙе бухгалтер икән.

Нурия! Беҙҙе шулай бер-беребеҙҙән биҙҙереп ҡуйыр микән ул һылыу казачка?! Бирешмәйәсәкмен! Көрәшәсәкмен, белеп ҡуйһын, иветә?»

– Иветә! – Хатты уҡып бөткәс, шулай тип ҡысҡырҙым йөҙҙәрсә саҡрымдағы әхирәтемә, йоҙроҡтарымды төйнәп һикереп торҙом…

Открыткаһы Динистан ине, һуңлабыраҡ булһа ла тыуған көнөм менән ҡотлаған. «Ҡышҡы каникулда киләм, Илдарҙы «на лопатки положу, – тигән. Еңә, йәнәһе. Еңһәсе – миңә лә дан, туғаным даһа. – Нурка, салям Варьке», – тип ҡуйғансы иң һуңында. Нуркаһы, ярай, мин, ти (бына ағас тел малай!), ә Варькаһы кем һуң? Баш ватылды шуны уйлап. Ниһайәт, таптым һымаҡ: әллә Менәүәрәме? Мунавара – Варька?

Сит илдән килгән хат – Сабирҙан, ул армияға быйыл алынды, ГДР-ҙа хеҙмәт итә. Иҫе китеп тасуирлаған ундағы халыҡтың бөтмөрлөгөн, урамдарҙағы таҙалыҡ-тәртипте – Берлинды күрһәтеп йөрөткәндәр икән. Ғәжәп, ти, ул ҡала: таш

стена менән икегә бүленгән, теге яҡта – капиталистар. Һы, ҡайҙа ла шул уҡ немецтарҙыр инде, беҙҙең илебеҙгә баҫып ингән фашист тоҡомдары?

Таныш түгел ҡул менән яҙылған конвертты кис еткәс кенә астым, уның эсендә ниндәйҙер шомло хәбәр ятҡанын һиҙенгәндәй. Асһам – «Артур исеменән яҙам» тип, миңә бер шәфҡәт туташы сәләм күндергән. Әллә ул егет, минең әхирәтемде ташлап, башҡаға күҙ һалғанмы? Ҡарһаланып күҙ йүгертә һалып сыҡтым хатҡа. Ҡойолоп төштөм. Һүҙ хыянат хаҡында ғына барһа, еңелерәк булыр ине… Артурҙың хәле бик аяныс икән. Һаман госпиталдә ята. Теге медсестра аратирә үҙенең һүҙҙәрен дә ҡыҫтырып ебәргән: “Армияла төрлөсә була, был егет һымаҡ инвалидҡа әйләнеп ҡайтыусылар бар, – тигән. – Бөтә ағзаһы теүәл, тик хәрәкәт итә алмай, бәлки, әкренләп аяҡҡа баҫыр, мөғжизәләр юҡ түгел дәһә…”

Артур исеменән яҙылған өлөш ҡыҫҡа ғына: “Асенька, цветочек мой лесной, нашим мечтам не суждено сбыться. Не судьба… Я – инвалид. Еще родителям не сообщил, боюсь, у мамы слабое сердце. Но придется сказать правду, они меня, наверное, заберут. Не знаю, как смириться с тем, что стану обузой моим родным. Прощай, любимая. Прости”.

Үҙемә яҙылғандай ауыр ҡабул иттем был хатты. Төн йоҡламай сыҡтым. Әсмә ошо ауылда йәшәһә, түҙмәй, йүгереп барып етер инем янына. Иртәгә, берәй сәбәп табып, эштән һорап китермен микән Айыусыға? Әллә хатты бирмәҫкә лә ҡуйырға? Яҡындары барып алыр, Әсмә, көтөр-көтөр ҙә төңөлөр егетенән? Юҡ, мәңге төңөлмәйәсәк! Бер һөйгәне өсөн йәнен бирерҙәй ҡыҙ бит ул. Эҙләр, табыр, аманатҡа хыянат иткәнемде белер. Артур ҙа бит тоғро әхирәтлегемә ышанып яҙҙырған хатын, Әсмәгә ҡапыл бәрелмәһен ҡурҡыныс хәбәр, типтер, мине ҡалҡан иткән. Тимәк, Әсмәнең уға ҡул һуҙырына өмөтләнә? Уф, Хоҙайым! Ҡайһылай ҙа ауыр һынау алдына баҫтырҙың мине... көтмәгәндә!

Таң менән, мал-тыуарҙы тәрбиәләрҙән алда уҡ, Әшрәфтәргә йүнәлдем: ул эшкә иртә йөрөй, тотоп ҡалырға кәрәк. Ҡапҡаһынан сығып та килә ине шул, колхоз гаражына табан ҡушар атланым. Хатты уҡыттым. Ҡулдары дерелдәп китте.

– Әллә тапшырмаҫҡа быны? – Эсемде тишеп килгән ошо һорауҙы уға ла бирҙем. Юҡ, уны һынар өсөн түгел, ә үҙ фекеремде анығларға теләп.

– Нурия, хәҙер минең бөтөнләй өмөтөм ҡалманы, – тине Әшрәф. – Артур һаусәләмәт ҡайтһа, мөхәббәтем өсөн көрәшергә әҙер йөрөй инем, ә хәҙер – юҡ… Әсмә унан баш тартмаясаҡ. Мин дә нисек алышайым шул хәлдәге егет менән?

– Хатты Әсмәгә бирмәҫ тә ҡуйырым… – Тауышым шым ғына сыҡты, улай итмәҫемә ныҡлап ышандым даһа. Әшрәф был һүҙемде иғтибарһыҙ ҡалдырҙы (ирегеттәр ҡатын-ҡыҙҙың бәғзе хәбәрен ишетмәй ҙә ҡуя ул).

– Төшкө ашҡа ҡайтам, шунда Айыусыға барып әйләнербеҙ, тиҙ генә. Зәп бара, эш тығын, – тип ҡырҡа ғына әйтте лә шәп-шәп атлап китте лә барҙы дуҫым, мине ташлап. Һы…

Мәктәптә ике-өс сәғәт ҡыялдым да, Сәкинә апанан рөхсәт һорап, Айыусыға йыйындым. Сәбәп уйлап сығарып торманым, өләсәйем сирләп тора, тиһәм дә булыр ине – тимәнем, йә көфөр булырмын, апаға дөрөҫөн әйттем. «Ай, бисура…» – тип ихластан борсолоп алды. Ә мин Әсмә әхирәтемдең Яңы йыл кисәһендәге мажараһын иҫемә төшөрҙөм, әммә көлөп ебәрә алманым… Апаны әйтәм, таныған икән теге юлы “бисура”ны?

Мәктәптән ҡайтышлай магазинға һуғылдым. Сәхи ағайҙан, Айыусыға барам, донъя кәрәк-ярағы, күстәнәскә нимәләр бирегеҙсе, тип дөйөм генә әйткәйнем, шүрлеккә теҙеп һалды: сәй, шәкәр, ярма, тоҙ, шырпы, һабын (быныһын онотор инем әле), ике ҡап ҡаҙаҡ – шунан башҡаһын тотош алдым. “Кәрәсин-фәләнен

Әшрәф үҙе алып барыр, механизаторҙарға иген дә биргәндәр...” – тип мине аптыратып та ҡуйҙы һатыусы. Белә инде бөтәһен, Әшрәфтең Әсмәне яратыуын да – кешеләр магазиндан тауар ала, алмашҡа, аҡсаға ҡушып, мәғлүмәт тә ҡалдырып китә. Ғәҙәт...

Әсмәгә барғас, теге ҡаҙаҡтарҙы алмауыма үкендем: бик кәрәк икән бында. Айыусыны күп тигәндә өс айҙыр күрмәүемә, шул арала бында, әйтерһең, ғәрәсәт булып уҙған. Иң арыу өйҙәрҙе хужалары йә һүтеп һатып ебәргән, йә үҙҙәре яңы ергә күсереп алып киткән. Был төбәктәге ҡаралтылар яҡшы ағастан: ҡарағайҙан да йүкәнән һалынғанын алыҫыраҡ ауылдарҙа ла беләләр, тиҙүк ташып бөткәндәр. Мейестәре генә һерәйеп ҡалған, уларының да кирбесен алғылағандар. Бәғзе нигеҙҙә ваҡ-төйәк әйберҙәр, ватыҡ уйынсыҡтар ҙа ята. Һуғыш харабалары тиерһең, абау. Бер нисә иҫке барак ҡалған да теге әбей-бабайҙарҙың өйҙәре һәм Әсмәнең атаһы һалған алты мөйөшлө мөһабәт йорт. Ҡураһында һыйыры-башмағы, башҡа ваҡ мал-тыуары мөңрәшә, ялан аҙбарҙа быуаҙ бейә аяҡ өҫтө йоҡомһорап тора...

Сәй эскәс, Әшрәф, тирә-яҡты байҡап киләм тип, урамға сыҡты. Әсмә менән мин күҙгә-күҙ бағышып ултырып ҡалдыҡ.

– Артур һаман юҡ, һалдаттар ҡайтышып бөтөп бара бит инде. – Үҙе башланы һүҙҙе.

– Госпиталдә тип хаты килде, тигәйнең дәһә, шуға тоткарланғандыр. Үҙе яҙғайнымы ?

– Үҙе түгел, командиры. Ә ниңә улай һорайһың?– Әсмә һағайҙы.

– Әллә ҡаты сирләп киткән микән егетең?

– Нурия, һин нимәгә ыңғайлайһың, бер-бер хәбәр килдеме, уф!? Төшөм дә бутала ине ошо осор... Анау бараҡтарҙың тәҙрәләрен арҡыс-торҡос таҡта менән ҡаҙаҡлап ҡаплап йөрөйөм, имеш, тип күрҙем.

– Уйлап йөрөгәнһеңдер, ҡапларға кәрәк тәһә.

– Эйе, кәрәк, ҡаҙаҡ юҡ... – Әсмә ошо урында шып туҡтаны ла иңемдән тотоп һелкетте: – Әйт, Нурия! Эш ташлап, тиктомалға ниңә килдең?!

– Һындыраһың бит һөйәгемде, бынау Әсмә! Буштан-бушҡа йөрөмәйем инде... Борсолма, Артурың иҫән. Тик... Мә, хатты уҡығас, үҙең аңларһың.

Әхирәтем бер уҡып сыҡты хатты, ике уҡыны, өс... Шунан таш булып ҡатты, гүйә. Өндәшергә баҙмай ултырам эргәһендә. Ундай мәлдә башҡа рәтле фекер ҙә инмәй икән. «Сәкинә апанан һорап киттем, теге маскарадта бисура булып кейенгәнеңдә һине таныған, шуны иҫкә төшөрҙө...» – тигән булдым ахырҙа.

Әсмәнең көсөргәнеше саҡ ҡына ыҫҡындырҙы, буғай, бармаҡтары йомшарып, хат иҙәнгә төшөп китте. Артурҙың Толпарсыҡҡан ярында уҡылған тәүге хаты йөрәкте әрнетеп хәтергә төштө. Усаҡтағы ут эсенән тартып алғайны уны әхирәтем. Ана, уң ҡулының һыртында һаман эҙ бар, ныҡ бешкән урынында үргән яңы тиреһе ялтырабыраҡ тора.

– Ҡыҙый, алып ҡайтам Артурымды Айыусыға! – тине әхирәтем. Бер кем дә кире ҡаға алмаҫлыҡ итеп әйтте. – Бөгөн үк һеҙҙең менән Толпарлыға сығам, иртәгә – Оло юлға. Госпиталдең адресы бар, аҡса төйнәгәнем – яңы ғына туса һыйырҙы һаттым, картуфты тапшырҙым – йыйып йөрөнөләр.

– Алыҫ ҡына, Тажикстанда...

– Ер сиге булһа ла барып етермен. Хәйер, ил сиге инде, пограничник таһа.

– Атаһы алданыраҡ өлгөрһә, Себергә апҡайтһа?

– Уларға хәбәр итмәгән әлегә Артур, тимәк, мине көтә. – Әсмә, уйын минең менән уртаҡлаша-уртаҡлаша, ашығып юлға йыйына башланы. – Күршеләргә ҡалдырып торам инде донъяны, утын-бесән бар, ризыҡ етерлек, өсөһө бер

кешеләй булырҙар әле. Бейәне иҫән-һау ҡолонлата алһалар… Мылтыҡты ла ҡалдырам, бер-бер хәл булһа…

– Бәс, беҙ ҙә килгеләрбеҙ, булышырбыҙ, – тинем, Әшрәфкә арҡаландым инде.

– Эйе, Әшрәф ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫ. – Әсмә лә мине ҡеүәтләп ҡуйҙы. Ярата ул Әшрәфте, тик дуҫ күреп ярата, бүтәнсә түгел… – Ҡыҙый, Артурымды туҡмаған-дарҙыр, тип шикләнәм. Дедовщина тигән нәмә хәтәр тиҙәр бит армияла.

– Ул үҙе “дед” таһа, дембель?

– Әгәр белһәм кем туҡмағанын, сәсрәтә һуғыр инем шуны!

Әхирәтемдең көслө, әммә һомғол кәүҙәһенә, йылғыр хәрәкәттәренә былай ҙа һоҡланып ҡарап ултыра инем, нимә әйткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым:

– Үлтергәнсе!

Асыу, ҡәҙерле кешең өсөн үс алыу тойғоһо аңыңды тиҙ яулай шул, аҡылыңа килеп өлгөргәнсе эшләп тә ҡуйыуың ихтимал. Кисә генә бер тапҡыр ҙа күрмәгән казачка апайға йоҙроҡ төйнәп йөрөнөм, бөгөн – билдәһеҙ берәүҙе үлтерергә әҙермен? Хис-тойғо – даръя бит ул, ти ҙәһә ҡартәсәйем, ауыҙлыҡларға көсөң етмәһә, ташҡынында үҙең батаһың…

Әсмә, ниһайәт, Тажиҡстандан урап ҡайтты. Артур менән ҡайтты. Уларҙы һәр ҡайҙа хәрбиҙәр оҙатып йөрөгән. Өфөлә Башвоенкомат вәкиле ҡаршы алып, районға оҙатҡан, бындағылар – Айыусыға килтереп ҡалдырған. «Ниндәйҙер ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйҙым, «Секретно» тип мисәтләнгәндәре лә бар ине, төпсөп уҡып торорға теләгем булманы» – тип һөйләне әхирәтем аҙаҡ. Баяғы шәфҡәт туташын күрергә форсат төшкән, уныһы ҡолағына шыбырлаған: «Учениелар ваҡытынданиҙер булған, «приближенные к боевым действиям» итеп уҙғарылған улары. Хәҙер бит сик буйында ниндәй генә ҡоралға һынау үткәрмәйҙәр. Мин хәбәр ебәргәндә, ул тотлоғоп булһа ла әҙ-мәҙ һөйләшә ине, хатын үҙе әйтеп тороп яҙҙырғайны. Ә хәҙер, үҙең күрәһең… Артабан ни булыр? Алға китеүе лә бар, кирегә китеүе лә ихтимал…»

Диагнозы бик ҡатмарлылыр, ябай күҙ менән танып уҡырлыҡ та түгел, ҡағыҙын Әсмәгә биргәндәр. «Для дальнейшего лечения направляется по месту жительства» тигәне генә аныҡ яҙылған. Икенсе көнөнә үк, военкомат хәбәр иткәндер, райондан килеп еткән ике врач: «…позвоночника, так… головного мозга, так-так, …нервной системы…» – тип диагноздың йә башын, йә аҙағын ғына уҡып, шым ғына һөйләшкәндәр ҙә Әсмәгә улар менән бәйләнеш торорға, ауырыуҙың хәлендә үҙгәреш була ҡалһа, хәбәр итергә ҡушҡандар, башҡаса бер нисек тә ярҙам итә алмауҙарын аңлатып, баш сайҡағандар. Берәүһе, ҡара урман эсендәге, электр яҡтыһы, телефон да булмаған, бөткән ауылда ошондай ауыр һынауға тарыған ҡыҙ баланы ҡыҙғаныптыр: «Дочка, будет разумнее, если ты сдашь солдатика под опеку государства», – тип тә әйткән. Улар менән бергә барған фельдшер Әүхәт ағай ҙа үҙенең шулайыраҡ фекерҙә икәнлеген белдергән.

Врачтар, Артурҙы үҙҙәре менән тейәп килтергән коляскаға ултыртып, дарыу-фәлән ҡалдырып, ҡайтып киткән. Әсмә, яурынына ятҡан йөктөң ауырлығын тойоп, аҙмышына ябырылған фажиғәнең күҙенә ҡарап бер яңғыҙы тороп ҡалған.

Районға кире әйләнгән «Тиҙ ярҙам» машинаһы ҡаршыбыҙға осраны. Туҡтамай үтеп китте. Туҡтаһа ла, ни фәтүә? Тәҙрәнән ҡарап ултырған Әүхәт ағайҙың күҙҙәрендәге өмөтһөҙлөктө күреп ҡалыу ҙа күпте аңлатты беҙгә – Әшрәф менән миңә…

Аҙна араһында барып сыҡҡыланыҡ башта. Әшрәф йышыраҡ йөрөнө, төнгөлөккә ҡалып, эшенә иртәгәһенә иртән килгән осраҡтары йыш булды. Бәғзеләрҙең ләститенә лә иҫе китмәне дуҫыбыҙҙың. Хәйер, күпселек уны хупланы, ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә, кәңәш бирергә тырышты. Татар әбекәй,

кейҙерергә уңайлы тип, Артурға еңенә лә, балағына ла замок ҡуйып комбинезон һымаҡ ике кейем тегеп бирҙе: йәйгелеккә – йоҡағын, ҡышҡылыҡҡа – ҡаҙ мамығы ҡуйып һырығанын. Үҙе уйлап сығарған! Сәхи ағай «сысҡан тишкән» тип һылтап списать иткән ике тоҡто – әлеге һөйөклө Кубабыҙҙан шәкәр менән килә улар – Хәйрулла ағайға «шылдырған», ә уныһы тимерҙән бер ҡоролма эшләгән дә, тоҡтарҙы һүтеп, йәпләштереп, шуның сатырына тарттырған – ҙур зонтик хасил булған. Әсмә ул ҡоролманы ишек алдына баҫтырып ҡуя ла, үҙе эш эшләй, Артуры – коляскала, әлеге көндә ямғырҙан, епшек ҡарҙан һаҡлана, йәй мәлендә ҡояштан күләгә лә буласаҡ. Хикмәтле ул зонтик, күрҙем: күсереп йөрөтөрлөк, сатыры ысҡындырыла, еңел генә ҡаушырыла, таяғын ҡуя торған өс таған һымаҡ ҡулайламаһы алына.

– Ялан-ҡырға ла сығырға мөмкин – Артур һауа һулар, күҙ уңында булыр, – ти Әсмә. – Кем белә, бер матур көндө үҙ аяғы менән атлап та китер минең һөйөклөм… – Шул хыялы әхирәтемә көс бирәлер, сыҙап ҡына ла торорлоҡ түгел дәһә, юғиһә, уның хәлдәре!

– Әлдә Әшрәф бар, – тине бер килгәнемдә әхирәтем. – Рәхмәтем төшһөн, бәхетле булһын инде. Ана, болдорҙан колясканы төшөрөргә-мендерергә уңайлы һикәлтә һалып бирҙе, ҡапҡам ауғайны, уны баҫтырып ҡуйҙы. Өйҙәге бүлмә ишегенең тупһаларын алып ташланы, колясканы төкөтмәнән оло яҡҡа сығара алмай яфаланмайым хәҙер. Ауыр бит ул тәгәрмәсле нәмә, тимер ҙәһә, Артурҙың үҙен еңел генә күтәрәм дә ул…

Иламаҫҡа тип урттарымды тешләп ҡанатып бөтәм, Әсмәгә барһам. Артурҙың армияға киткәнсе ҡиәфәтен күрмәһәм, бер хәл – ниндәй матур, буйсан егет ине. Боттарына һылашып торған салбар, ҡыҫҡа еңле сылт ҡыҙыл күлдәк кейеп бер килгәйне Толпарлыға, Әсмәгә эйәреп. Иҫтә ҡалған. Иҫтә ҡалырлыҡ егет. Әсмә уның янында бер ҙә әзмәүер кәүҙәле булып күренмәй – бер-береһенә тап-тамандар, шуға ла иғтибар иткәйнем. Ә бөгөн… Әхирәтемдең көнө Артурҙы түшәктән күтәреп алып, мейес ҡырына Әшрәф яһап биргән тар һикегә һалып ҡуйып битен-ҡулын сайыуҙан, тәһәрәтләндереүҙән башлана. Шунан кейендерә. Ашата. Коляскаға күтәреп ултырта. Ҡыл да ҡыймырлата алмай ҙаһа егет. Исмаһам, һөйләшһә – теле лә юҡ! Госпиталдә һөйләшкән дәһә, ауырлыҡ менән булһа ла... Алға бармай хәле, кирегә китәме? Уф… Ишетә һымаҡ? Күҙендә зиһен шәүләһе шәйләнеп ҡала – һирәк, бик һирәк…

Әсмә килеп төшкәс, хәрби частан Тубылға шылтыратҡандар: мин Артурҙың кәләшемен, тип, Башҡортостандан бер ҡыҙ килгән, алып ҡайтырға даулаша, ризаһығыҙмы, тип белешкәндәр. Тотороп ҡына ебәрергә һалдат посылка түгел дәһә. Аптырап ҡалһалар ҙа, егеттең ата-әсәһе риза булған, Айыусы Тажикстандан яҡынырaҡ таһа, шунан барып алырҙар – шулай уйлағандар микән? Улдарының, госпиталдә ятҡас, сирләгәнен белгәндәр, әлбиттә, әммә, Өфөгәсә оҙатып ҡуясаҡтарын ишеткәс, кеше көнлө икәнен аңлап, Суфия апай һуштан яҙып йығылған.

Аҙналап ваҡыт үтеүгә, Рауил ағай үҙе генә килеп ингән Әсмәләргә, ҡатыны теге йығылғанынан саҡ күтәрелеп килә, ти, бисараҡай. «Пес инте пуровик түгел, мынта, Себердә, пескә ни калган», – тип әйтеүе ҡолағыма салына хатта: өҙөлөп һағынғандыр улыҡайын, йөрәк тауышы ел менән килеп етәлер Айыусыға, ишетәм, гүйә! Рауил ағай, ир кеше әле, Артурының хәлен күргәс, урманға сығып илаған. Ярай ҙа Суфияны эйәртмәгәнем, бик ныҡыша ине, врачтар тотоп ҡалды әлдә, тигән, бер ни тиклем тынысланғас. Былдай ҡайғыны ҡабул итергә, күнергә ата-әсәгә ниндәй сабырлыҡ кәрәктер, белмәйем, кисереп ҡарамағас. Кисермәһәм дә ине, Раббым! «Дуҫыңа түгел, дошманыңа бирмәһен» тигән хәсрәттер был.

* * *

Әбейҙәр сыуағынан һуң да байтаҡ ваҡыт көҙҙөң йөҙө ялтыратып йыуылған еҙ батмус кеүек көлөп торҙо. Шунан әҙ-мәҙ боҙло ямғыр күҙе төшкөләне лә, күктең иләге ондай итеп күпертеп ҡар иләргә тотондо. Иләне лә иләне. Ниһайәт, бар мөхитте ап-аҡ итте – сираттағы ҡыш килде. Шулай ҡупшы ғына көйөнсә, ҡаршылыҡһыҙ килде, ҡәҙерле ҡунаҡтай, үҙ һөймәлеге менән.

Каникулға тура килтерелгән сессияға барып ҡайттым. Шәрифә апайымдарҙа ятып уҡыным. Динис ауылға һыпыртты, унда уны ике кеше тарта: Толпарлы Ботвинниғы Илдар һәм Толпарлы шағирәһе Менәүәрә, унынса – Варька. Ҡайһыһы ныҒыраҡ тарталыр? Варька булырға торамылыр әле беҙҙең ҡыҙыҡайыбыҙ? Былары күп тә үтмәй асыҡланды: сессиям бөтөргә ике көн ҡалды тигәндә, Динис ауылдан әйләнеп ҡайтты. Танауы төшкән егеттең. Илдарҙы еңдем, ти үҙе. Тимәк, Менәүәрә менән бутҡаһы бешмәгән. Һүҙ йолҡоп ҡарағайным, өндәшмәй. Ахырҙа юрамал һораным: «Варька миңә сәләм ебәрмәнеме?» «Толпарлыла ундай исемле ҡыҙ юҡ», – тине лә Динис ҡып-ҡыҙыл булды. Әллә ныҡ ғәрләндергән быны теге ҡыҙыҡай? Үҙе тағы ошо хулиганды уйлап йөрөй. Бәс, хулиганлығы бөткәнсе минең туғанымдың. «Уҡыуына һабышты, математика класында – беренсе, тьфү-тьфү, күҙ генә теймәһен, – тип тирә-яғына төкөрөнөп ала Шәрифә апайым. Ҡартәсәйемдең диндарлығы апайыма ла күсә башлаған һымаҡ, ә миңә? Аллаһ Тәғәләгә һис бер икеләнеүһеҙ инаныуым ҡаҡшамаҫ – донъя-ғаләмде яҡынданыраҡ белгән һайын, уның кеше зиһене айҡап алмаҫлыҡ ҡатмарлы һәм серле, кеше ҡулы ҡора алмаҫлыҡ камил икәнлеген яҡшыраҡ аңлайым. Ҡартәсәйем өйрәткән доғаларҙы ихлас уҡыйым, ҡөҙрәтле көсөн тоям. Тик, ниңәлер, уларҙы ауыр минуттарҙа, хәсрәт килгәндә генә тиҙ иҫемә төшөрәм…

Ауылға ҡайтып китер алдынан бер тапҡыр Кәбирҙең ятағына шылтыраттым, үҙемдең Өфөлә икәнлегемде белгерттем. Ә нимәгә тексәйеп йөрөйөм, мине хур итеп ташлап китмәгән дәһә ул. Әсмәләрҙең яҙмышы тетрәндереп кенә ҡалманы, ҡаты итеп аҡылға ла ултыртты: бер генә дуҫым да – туғандарымды әйтеп тә тораһы юҡ – артыҡ түгел, кенә тотоп ҡыланырға. Свердловскиҙа үҫеп ятҡан Мәйсәрә һеңлемде лә ситкә тибәрмәйәсәкмен, тип үҙемде ныҡытып ҡуйҙым әле.

Кәбир менән баш ҡалалағы музейҙарға йөрөнөк. Яҡташ художниктарыбыҙ: Нестеров, Дәүләткилдиев, Лотфуллин, Домашниковтарҙың картиналарын ҡараныҡ. Уҡыған еренә лә тиҙ генә инеп сыҡтыҡ. Ғәжәп, башҡа студенттар ауылға ҡайтырға, ҡалала ҡалһа, тансы тип ашҡынып тора, ә быңдағылар – оҫтаханала, кешегә күтәрелеп тә ҡарамай, һүрәт төшөрөү менән мәшғүл. Бер бүлмәләге бикле шкафтан асып алып, Кәбир яңы эштәрен өҫтәлгә теҙеп һалды. Гелән бер үк нәмәләр төшөрөлгән кеүексе: тибендәге аттар, малайҙар. Алты малай… Саҡ ҡына арыраҡ – тирмәләр, уларҙың уҡтары күккә олғашҡан, гүйә – боронғоноң сағылышылыр. Һыбай егеттәр… Офоҡ сигендә – уҡ-һаҙаҡ аҫҡан, башына торҡа кейгән яугирҙар, мираж әллә?.. Усаҡ тирәләп ултырышҡан олпат ирҙәр, уртала – ҡурайсы, алыҫтараҡ йылҡы көтөүе юшай… Бер ситтә – хәрбиҙәр, танкылар, күктә – самолеттар… Ҡорҙан йыраҡ түгел үҫкән тарбай имән япраҡтарына ырыу атамалары, тамғалары төшөрөлгән… Бәс! Йөҙ һыҙаттары оҡшаш һымаҡ таһа был төрлө быуын ир-егеттәренең? Аттар ҙа бер төҫтәрәк, ахырыһы, Толпарсыҡҡан күленән сыҡҡан Ҡола бейә тоҡомдары, араларында Күк юрға айырылып күҙгә ташлана! Кәбир миңә ҡарап-ҡарап торҙо ла, шатланып, көлөп ебәрҙе.

– Таныныңмы? Алты малай – беҙ ҙәһә: Сабир, Фатих, Әшрәф, Әхиәр, Харис һәм мин.

– Ә былары? – Рәссам дуҫымдың идеяһын аңлаһам да, һораған булдым – аңлатһын, күңеле булһын.

– Былары ла – беҙ, беҙҙең, ир-аттың, образы. Башҡорттар образы… Триптих яҙырға хыял итәм, уртаҡ сюжетҡа ҡоролған өс полотно йәғни.

– Аңлашыла. Дәртеңә – дарман, Кәбир. Ә мин ауылымдың, дан ауылдаштарымдың образдарын бәйән итергә уҡталам. Берәй ҡасан… – Мах бирмәйем үҙемсә, миңә лә ижад ят түгел, мин дә – хыяллы асыл, йәнәһе.

– Ҡағыҙға төшөрә бар. Тәьҫоратты сағыу сағында һынландырырға кәрәк, төҫө уңмаҫ борон.

– Мин художник түгел дәһә, уй-хис, киреһенсә, эсеңдә йөрөтөңкөрәһәң, баҙыҡлана һымаҡ. Әлләсе…

Был юлы Кәбир үҙен тыныс тотто, Әнкәләр осонда осрашҡандағы кеүек ашҡынманы. Күҙҙәрендә илаһи сатҡылар балҡый ине, төшөндөм: ижад ялҡыны тоҡанған дуҫымдың йөрәгендә, буласаҡ триптих биләгән уның уй-хисен.

Минең һынап ҡарап тороуымды һиҙеп, Кәбир, ғәйепле кешеләй, әйтеп ҡуйҙы: «Сублимация энергии, тип атай педагогыбыҙ бер тойғоноң, мәҫәлән, мөхәббәттең, икенсе, шундай уҡ көслө тойғоға, мәҫәлән, ижад ҡомарына әүерелеүен…»

Ҡышҡы сессия ҡыҫҡа ғына – ун көн. Шул ғына арала ла өҙөлөп һағындым тыуған яғымды. Оло юлда, автобустан төшкәс, ауылыма йөрәкһенеп ҡарап торҙом бер арый. Ҡылт итеп уйыма килде: батша әрмеһендә сирек быуат хеҙмәт иткән олатайҙар, илен-ерен һөйгән өсөн яуға күтәрелгән, йәнтөйәгенән ел дә килеп иҫмәҫ, ҡош та осоп етмәҫ тарафтарға һөргөндә башын һалған Салауаттар, үҙем ишетеп белгән Әдисәй бабай, күреп белгән Гөлбикә апайҙар нисек кенә сыҙаны икән юҡһыныу һағыштарына?! Мин әле әҙгә генә айырылып торғанмын, ә күкрәгемдә ҡайнаған хистәргә сәсәп йығылырҙаймын.

Ана, сөгөлдөр баҫыуы, көмөш еп менән нағышланған аҡ юрған ябынғандай, ҡышҡы сағыу ҡояш нурында ем-ем килеп балҡып ята. Әйтерһең, унда бер ҡасан да тир ҙә, ҡан да түгелмәгән, ыреш-талаш булмаған, социалистик йөкләмәне үтәү өсөн көрәш уты янмаған, йәшенле йәйҙә йәндәр фиҙа ҡылынмаған. Фәрештә ҡанаты ғына ҡағылған был ергә, гүйә… Ә ниңә һуң күҙ алдыма ямғырҙа күшеккән, ирендәре күгәргән, батҡаҡҡа буялған «бисура»лар килә, ҡолағыма: «Бызмырламағыҙ, матур көндә эшләп ҡалығыҙ, понимаешь, бисәләр! Ҡар аҫтынан соҡорға итәһегеҙме ни свеклағыҙҙы, черт возьми!» – тигән ауаз сағыла? Күргәс ни, ишеткәс ни…

Уф, ҡыуанысым баллы ғына ине, әрем тәме ҡушылды. Хәйер, был – тәбиғи, гелән һөйөнөп-көлөп, шаталаҡланып ғүмер кисерергә әҙерләнеп, шуға ышанып йөрөгән кеше мин түгел. Тормош ҡатмарлы, нисек кенә уны оторға, үҙеңсә борорға тырышма, ул үҙе һине бер килеп һемәйтәсәк – ололар шулай ти ҙәһә. Әлеге лә баяғы, тишек шомаңға ултыртасаҡ, тип тә ебәрәләр. Өйрөлтөп, зыр әйләндереп тау түбәненә төшөрөп ырғытыуы етмәгән, тишек булғас, тағы нишләтә икән уныһы?!

Толпарлы ҡышҡы һиллектә ойоп-наҙланып ятҡан кеүек күренһә лә, донъя уны үҙенең ҡуласаһында әйләндереүҙән туҡтамаған, әлбиттә. Сафура һылыуыбыҙ Надымдағы бер нефтсегә кейәүгә сыҡҡан, үҙебеҙҙең яҡтыҡы, ти, Күгәрсен районынан. Ҡыҙ яғындағы туйҙа, имеш, был кейәүенә «күгәрсенем» тип әйткән Мөслимә апай, “кейәү жаным”ды оноҡҡан, йәнәһе. Уйлап сығарғандар инде,

ҡыҙыҡ өсөн, апайҙың йомшаҡ телле түгеллегенә кинәйәләүҙәре. Бибәйбә. Тағы әллә күпме эреле-ваҡлы ваҡиғалар күстәрелгән шул ике арала. Аҡман Ҡара ағайҙың ҡатыны игеҙ малай тапҡан. Ете айлыҡ булып тыуғандар, мандып ҡына китһендәрсе. Ағайҙың түбәһе күккә тейгәндер. «Бер арба бумала баш тейәп бесәнгә китте берәү. Кем ул?» – тип йомаҡ әйтешә ине әтеү бала-саға. Кемдән ишетәләр – ололарҙан. Аҡман Ҡара – үҙе лә ҡушамат, "Һигеҙ ҡыҙлы Аҡман Ҡара" тип тә өҫтәп ебәрәләр. Унығын, Фәйрүзә улын күрһәтеп киткәс, ҡуйып торғайнылар. Һәм бына – собханалла – ике малай! Арсены менән – өсәү, өс таған. Ысын булһа, йөклө сағында Аҡман Ҡараның ҡатыны әйткән, ти: малай тыуһа, теге урыҫ улынды ла таныйым, беҙҙекенә ағай кәрәк тәһә, тип. Әй, был Толпарлының теле, телеп һала. Үҙенсә ауылдың Арсенды үҙ итеүе, һыйындырырға теләүелер.

26

Әсмә ниҙәр күстәрә, Артуры ни хәлдәлер? Рауил ағай Тубылға ҡайтып киткән, Суфия апай һаман күтәрелә алмай икән – ҡыҙҙары телеграмма һуҡҡан. Әшрәф МТС-та ремонт эшендә булған, ике аҙна бармаған Айыусыға. Минең ҡайтҡанды ишетеп, үҙе инеп сыҡты, иртәгә таң менән Саҡмайылғаға юлды таҙартам, бер ыңғайҙа Әсмәләргә лә һуғылам, эйәрәһеңме, ти. Иртәнән һуңға – мәктәпкә, шул арала барып ҡалайым тип, уның тәҡдименә һөйөнөп риза булдым.

Аҙна буйы ҡутарып ҡар яуған. Саҡмайылға юлын көрт баҫҡан, ат егеп тә үтерлек түгел, малҡай ҡорһағынан батып йонсояsaҡ. Бер эҙ юҡ, Әшрәфте көткәндәр. Һәм бына киләбеҙ, океанда боҙ ярып барған карап шикелле (әйтерһең, күргәнмен ул ледоколды). Ярай ҙа юл күтәртеп һалынған, ҡар ике яҡҡа аҫҡа ишелеп төшөп тора, бер урында ғына, соҡорораҡ ерҙә, алдыбыҙға ҡабат өйөлөп бер итте. Әле алға ынтылып, әле артҡа сигенеп хитлана торғас, саҡ йырып сыҡтыҡ.

Саҡмайылғала Хәтимә апайҙарға инеп хәл белешеп сыҡтыҡ. Әсмә бында кисә төштән һуң килеп киткән икән, килмәй сараһы булмағандыр. Лавканан күп итеп шырпы, мылтыҡ яһауы, бер нисә ҡапҡан алған.

Айыусы яғына ашыҡтыҡ. Күңелгә шом һарылдысы?

– Кеше әҙәйгәс, ауылға йыртҡыстар йылыша башлаған микән? – Минең дә уйлап торғанды әйтте Әшрәф. – Күр, бәләкәй сана эҙе!

Әхирәтем бата-сума атлаған. Нишләп ҡалтағай кеймәгән? Килгән эҙенә генә баҫып ҡайтҡан, урман ҡыҙы бит, ҡағиҙәне белә: шулай итһә, атлауы еңелерәк, аҙашмай ҙа. Бульдозер көрәге, шул эҙҙәрҙе умырып алып, ҡарҙы ике яҡҡа осороп бара. Мин тәҙрәнән тирә-яҡҡа ҡарап һоҡланып киләм. Трактор ҡапыл туҡтағас, һиҫкәнеп ҡуйҙым.

Сана юлы юҡҡа сыҡҡан? Аптырап, ҡурҡынып, икебеҙ ҙә кабинанан һикереп төштөк. Төштөк тә билдән ҡарға сумдыҡ. Әшрәф Әсмәнең эҙҙәренә, үлсәгәндәй, аяғын тығып ҡараны ла: «Санаһын арҡаһына артмаҡлаған: ҡар тәрәнгәрәк өңөлгән, йөк күтәреп атлағас»,– тине.

Яңынан ҡуҙғалдыҡ. Ауылға күп булһа ярты саҡрымлап ҡалғандыр, эҙҙәренә әллә нимә булды – бер урында өйөрөлгәнме әхирәтем, ятып аунағанмы әллә?! Тракторҙы туҡтатып, был юлы моторын да һүндереп, тағы ҡарға һикерҙек. Тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалдыҡ – тып-тын. Әшрәф муйынын борғолап ҡына ҡаранып тора ине, ҡапыл бөтә кәүҙәһе менән һул яҡҡа боролдо ла ике ҡулын алға һондо, йөҙө ағарынып китте. Йә, Хоҙай! Унда, йыуан ҡороған ағас төбөндә, күбәләй булып бер ҙур, ялбыр януар ята. Айыу! Эргә-тирәһенә ҡан сәсрәгән, кәүҙәһенең аҫтындағы ҡар, йылы ҡанғалыр, ирегән дә ҡабат ҡатҡан, киртләсләнеп ҡыҙарып ҡатҡан. Үлгән, ахырыһы, йыртҡыс. Әшрәф менән ымлашып ҡына һөйләшәбеҙ: урманды шомло тынлыҡ солғаған, тауыш бирһәң, һил тертләр ҙә өҫтөңә ҡолар

кеүек. Айыуҙың янына уҡ барып тыңланыҡ – тыны юҡ. Бер тәпәйенә нимәлер эләккән – ҡапҡан даһа. Ҡайҙа ҡарама, һындырылған ҡоро ботаҡтар күренә, ҡайһылары яртылаш утта яндырылған кеүек. Бәс, ағас төбөндә, ҡапылда иғтибар итмәгәнбеҙ, бәләкәй сана ла тәгәрәп ята. Йөгө юҡ. Ағастың олонон кемдер умырып-умырып һыҙырған. Кем булһын, бынау айыуҙыр. Был ағас ҡарағай, буғай? Һөйләшеп ҡуйғандай, Әшрәф менән икебеҙ ҙә, башыбыҙҙы күтәреп, өҫкә ҡараныҡ. Ҡараныҡ та бағаналай ҡаттыҡ та ҡалдыҡ. Әсмәбеҙ ошо ғәләмәт бейек ағастың урта төшөндә, аяҡтарын һәлендереп, иҫ белмәй ултыра! Әллә йоҡлап киткән, әллә... Үҙен ултырған ботағына ҡуша бау менән уратып бәйләгән дә.

– Әсмә! – тип өндәштем шым ғына. – Ҡымшанмай ҙа. – Аська, ҡыҙый, үлдеңме әллә?! – тип ҡысҡырып илап ебәрҙем ахырҙа.

– Үлмәнемсе! Төн буйы ағас башында, айыу кире терелмәҫме, тип аңдып ултырҙым, ҡурҡып… – Ул арала Әшрәф маймыл йәһәтлеге менән Әсмә эргәһенә үрмәләп менеп тә китте.

Ағастан төшкәс, Әсмәне һәрмәп-ҡапшап ҡарайбыҙ: туңмаған да, имгәнмәгән дә. Кейеме тотош йәнлек тиреһенән тегелгән бит уның, шул һаҡлағандыр. Унан, ҡымшанмай тик кенә ултырмаған, айыуҙы өркөтәм тип, буйы еткән ваҡ ботаҡтарҙы һындырғанын һындырып, һынмағанын билендәге ыҡсым ғына балтаһы менән сабып алып, шырпы һыҙып яндырып булашҡан. Таң атып, ҡояш йылына башлағас, мәлйерәп йоҡлап киткән.

Күҙ алдыма хәтәр, үлемесле алыш килеп баҫа… Ҡалын ҡарҙан аяҡтарын көскә тартып сығарып атлап, сана һөйрәп Әсмә килә. Юлдың бер яғы киҫелгән делянка урынына ҡалҡҡан ваҡ ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған, икенсе яғында – ҡара урман. Урман ауыҙында – һирәк-һаяҡ ҡарағай, ярыш ҡына яҫы энәле ике аҡ шыршы ултыра, оҙонса тубырсыҡтары менән күҙҙе әүрәтеп; урта төштә ҡороған ағас һерәйеп ҡалҡҡан; артабан – шау ҡайынлыҡ. Бына бер мәл ҡыуаҡлыҡ яғынан иҙә баҫып килгән эре йыртҡысты шәйләп ҡалды ҡыҙҙың сос ҡолағы. Ҡараһа, ҡыуаҡтарҙы аймап, дәү айыу яҡынлаша, бына-бына юлға килеп сығасаҡ. Ҡыҙ яҡындараҡ торған ҡороған ағас яғына ашыҡты, санаһын елкәһенән төшөрөп, ҡапҡандарҙы ҡороп, алғараҡ ырғытҡыланы ла, һунар бысағын тотоп, йыртҡысҡа ҡаршы торорға әҙерләнде. Ҡасып ҡотола алмаясаҡ таһа. Уныһы, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, ҡарҙы гөрөп, һаман алға ынтыла. Һыуҙа йөҙгәндәй, ҡорһағы менән ятып, аяҡтары менән ишеп, юлды аша сыҡҡан да инде. Шул саҡ бер ҡапҡан алғы тәпәйен ҡаптырып та алды. Айыу ыңғырашып, сүкәйеп ултырҙы ла яралы тәпәйен яларға тотондо… Әсмә белеп тора: хәҙер тайыш табан ер йыртып үкереп ебәрәсәк тә үс алырға ташланасаҡ. Шуға әле, януар һыҙланыуҙан шаңҡып ҡалған бер минутлыҡ арауыҡта, үҙенә һөжүм итергә кәрәк! Һәм ул һеләүһен етеҙлеге менән айыуҙың арҡаһына һикерҙе, уң ҡулы менән елкәһенән матҡып йәбеште лә, һул ҡулына ҡыҫып тотҡан бысаҡты ҡырҡа һелтәп, тегенең ҡалаҡ һөйәге аҫтына батырҙы – йөрәгенә генә. Бына ҡасан кәрәкте уға атаһы менән һунар йөрөү, таһыл отоу, урман хикәйәттәрен тыңлау.

– Эйе, – тине Әсмә, минең күҙаллап кисереп торған урындан ғына тотоп алып. – Әлдә атайым эйәртеп йөрөткән үҙе менән, юҡһа һәләк итер ине бынау шатун. Ҡышын айыуҙар табан майын имеп өңөндә йоҡлап ята лаһа, быны, моғайын, берәйһе мәлһеҙ ҡужғытҡан, уятҡан. Әллә ҡайҙарҙан килеп сыға беҙҙең урманға мылтыҡ аҫҡан кешеләр, яңыраҡ та йөрөгәндәр, күрше бабайҙарҙа ҡунып киткәндәр. Айыу тиреһе юҡмы һеҙҙә, тип белешкәндәр. Береһе һораған, айыу ҡасан балалай, тип. Бабай һунарсы бит инде, әйткән: ҡуҙғатмағыҙ, әле улар балаламаған, тайлаҡтары менән бер өңдә йоҡлап яталар, тигән…

– Тайлаҡтары?

Бер йәшлек балалары инде, йәй еткәс, уларын айыралар. – Әсмә үҙе, бысағын ялт-йолт килтереп, айыуҙың тиреһен тунай, үҙе шулай теҙеп һөйләй. Уға ярҙамлашып мәж килгән Әшрәфтең дә ара-тирә тауышы сыға:

– Нишләп һуң сыҡтың юлға, хәүефле бит? Ҡалтағайың ҡайҙа?

– Һынды бит ҡалтағайым, аҙна элек кенә, яңыһын эшләтергә өлгөрмәнем. Ҡайтып етә инем, бынау мөстән юлымды бүлде.

– Түшкәһен алайыҡмы?

– Юҡ, кәрәкмәй. Таң атҡансы ыңғырашты меҫкен, яңыраҡ ҡына йән бирҙе, шикелле, һыуынып та өлгөрмәгән, күрәһең дәһә, тиреһе еңел тунала. Уның итен нисек ашамаҡ?

– Ярар.

Әшрәфтең тауышы ҡәҙимгесә яңғыраны был юлы. Шул тиклем тетрәнгән, Әсмә өсөн борсолған, саҡ тынысланып килә егет. Уларҙың килешле генә итеп эш башҡарыуын ҡарап торҙом да тағы үкенеп алдым: бер-береһенә иш булырға ине лә ошо икәүгә, их.

Ниһайәт, Айыусыға барып еттек. Әсмәнең иҫән ҡайтыуыналыр, әбекәйҙәр илашып алды. Бабай айыу тиреһен ҡараштырҙы. Артур иһә коляскаһында битараф ҡиәфәтендә ултыра бирҙе...

– Трофей эләктергәнһегеҙ, малатса, – тине ҡарт һунарсы. – Бик әйбәт туналмаған, иләп булыр микән? Туңғандыр шул, төн былай үтә һыуыҡ булманы, ана, әбейҙәрем дә өшөмәне, таң атҡансы ҡапҡа төбөндә Саҡмайылға юлын күҙәтеп баҫып торҙоҡ. Ауыл осона сығып аңдығайным, һин һуңға ҡалғас, ҡыҙым. Эҫерҙә әллә ниндәй ут осҡондарын да күргәндәй булдым. Мылтыҡ аттым даһа, ишетмәнеңме? Бүре-фәләнгә юлыҡһаң, өркөтәйем тигәйнем.

– Ишеттем, олатай, бүре түгел, айыу баҫты юлымды, шатун айыу. Әбейҙәрем, тиһеңме?

– Ике әбейле булдым һин ҡайтҡансы. Үҙемдеке, ҡышҡылыҡҡа беҙгә күс, утын бөтөрөп ултырма, тип күрше ҡарсыҡты етәкләгән дә килтергән. Күк мунсағым кемдәлер, минең күңелем шундалыр, тип йөрөйөммө хәҙер һеҙҙең арағыҙҙа, тиһәм, йылмайышҡан булалар.

– Ниндәй күк мунсаҡ ул? – Ҡыҙыҡһынып китеүемә бабай, кеткелдәп көлә-көлә, сәй артында һөйләрмен, тип кисектереп ҡуйҙы. Аҙағыраҡ, алдыбыҙға ҡыш уртаһында танһыҡ мәтрүшкә еҫтәре бөркөп торған ҡайнар сәй яһалған сынаяҡтар, әле генә майлы табала шажылдаған ҡоймаҡтар ҡуйылғас, вәғәҙәһен иҫләп, бәйән итеп тә ҡуйҙы:

– Борон бер байҙың – мулламы, сауҙагәрме шунда – өсмө, бишме ҡатыны булған, ти. Никах шарты буйынса, ир кеше ҡатындарын тиң күрергә, һәр ҡайһыһының һәр яҡлап күңелен күрергә бурыслы: ризыҡҡа, кейем-һалымға мохтажлыҡ кисертмәҫкә, сиратты боҙмаҫҡа.

– Сиратты?! – Әсмә менән икәүебеҙ бер юлы һорап ҡуйҙыҡ. Әшрәф мут ҡына көлөмһөрәп алды.

– Эйе, сират. Һәр ҡатындың тәғәйенле төнө билдәләнә, ире менән бергә уҙғарырға. Әммә ҡатын-ҡыҙ иркәләүгә һис туймай, үҙе генә берҙән-бер булырға теләй. Теге бай мут булған, күрәһең, яйын тапҡан ҡатындарын нисек бәхәсләштереп йөрөтмәҫкә. Бөтәһенә лә бер иштән күк төймәле матур мунсаҡ бүләк итә лә һәр ҡайһыһына: "Был тик һиңә генә, көндәштәрең күрмәһен-белмәһен, мин яныңа килгәндә генә, минең өсөн генә таҡ уны, бәғрем!"– тип юхалай. Тегеләр

шулай итә лә. Ә бай, хәйләкәр, көндөҙҙәрен, барыһы ла бергә саҡта, көйләп алғылай икән: «Күк мунсағым кемдәлер, минең күңелем шундалыр…»

Был мәрәкәлә ҙур ғына фәһем ятҡанын һиҙемләмәнем түгел, әммә туҡталып уйланырға форсат булмағас, оҙонайғандан-оҙоная барған хәтер ебенә төйөн төйнәп ҡуйыу менән сикләндем. Әсмә күршеләренә бөгәсә төндә башынан үткәндәрҙе мәғлүм итте. Әллә ҡабаттан ишеткәнгә, үтә лә ҡот осҡос тойолманы әхирәтемдең шатун айыу менән алышы. Уның урынында мин булһам, исән ҡала алмаҫ инем... Ҡалтыранып ҡуйҙым...

– Уйлағайным да, бер-бер бәләгә тарығандыр был бала, тип. – Бабай һүҙен бөгөнгөгә күсерҙе. – Саҡмайылғала ҡуна ҡалаһың юҡ, уны ҡалдырып, – тигән ыңғайына коляскалағы Артур яғына ымланы. Ярабби! Егеттең яңағынан йылтырап йәш тәгәрәй. Әллә аңлап ултыра? Инерле-сығырлы булғас, бер ингәнендә кире сығып китмәҫ тә ҡуйыр, бәлки, зиһене? Тик…Үҙ хәленә төшөнһә, йөрәге күтәрерме?!

* * *

Эйе, зырлап әйләнә донъя ҡуласаһы. Әллә, мин үҫкәс, тиҙлектәр үҙгәрҙе, шәбәйҙе? Хәҙер гәзиттәр ҙә һәр күрһәткесте әллә ҡасанғы, беҙҙең быуын күреп белмәгән 1913 йыл менән сағыштыралар ҙа һушты алалар: комбайн етештереү әлеге көндә 60-лаған тапҡырға артҡан, ти. Ул саҡта булмаған даһа комбайндар? Өләсәйемдәр шыбағас менән һуҡҡансы игенде.

Һуғыш осоронда «һатлыҡ йән халыҡтар» иҫәбендә Ҡаҙағстанға, Уралға, Себергә һөрөлгән Ҡырым татарҙарына иленә ҡайтырға рөхсәт ителгән икән, шуны Татар әбекәй ишетеп ҡалған, радиоһын, ғәҙәтенсә, көнөн-төнөн туҡтатмай бит ул. Мең хәбәр араһынан ҡолағы үҙенә ҡағылғанын тотоп ҡалған, йә, Ватаны лаһа, йәнтөйәге. Минең янға, мәктәпкә үк, килеп еткән, шул яңылыҡҡа йөрәге сыҙамай. «Юк, кайтмыйм, хәзер анда кемем бар… Әдисәемне ташлап китмим», – ти, үҙе моңһоу.

Ә күңелгә иң хуп килгәне – армиялағы хеҙмәттең ике йылға ҡалдырылыуы. Их, минең тиҫтерҙәремә эләкмәне был. Ярай инде, исән йөрөһөндәр, киләһе көҙгә ҡайтып та төшәсәктәр.

Шәхси тормошомда булған ваҡиғалар шул арауыҡта йылт-йылт итеп үтеп тора. Таллыла һеңлем тыуҙы – әсә бер, ата башҡа. Исемен Наҙгөл тип ататтылар – мәғәнәһе үҙенән үҙе аңлашыла. Свердловскиҙа тыуған Мәйсәрә туғанымды ла күрҙем – ата бер, әсә башҡа.

Пионер бүлмәһенә үҙгәрештәр индерҙем. Брежневтың портреты күптән, миңәсә үк элеп ҡуйылғайны, тик бәләкәйерәк ине: «Герой пионерҙар» тигән стендтағы һүрәттәр уныҡынан ҙурыраҡ – килешмәй ҙәһә. Район китап магазинында Леонид Ильичтың ялтырап торған олпат һүрәтен һатып алғайным. Шуны иң түргә элеп ҡуйҙым. Герой пионерҙар араһындағы Павлик Морозовҡа – беҙҙең дружина уның исемен йөрөтә – оҙаҡ ҡарап торҙом. Шул баланы йәлләйем ниңәлер. Атаңды ла дошман күреп булалыр шул?

Шыйыҡмын әле, йомшаҡмын. Тарихты тәрәнерәк буйларға тыным-тәжрибәм етмәй. Мөхәббәт офоҡтарына осорға талпынған ҡанаттарым бәйле-бығаулы. Мөхәббәт ҡанаттары… ихтыярым менән бығаулайым бит уларҙы. Ниңә?! Ниңә мин, Әсмә йә Мәүлиҙә кеүек, бер күреүҙән ғашиҡ була алмайым? Бер һөйгәнем өсөн, Әсмә кеүек, ғүмеремде бөткән ауылға, бөлгән егеткә бағышларға, Мәүлиҙә кеүек, сит республикаға сығып китергә йөрьәт иттерә алырлыҡ фиҙакәр хис мине лә урап үтмәһен ине! Мәүлиҙәһе – Мәүлиҙә инде, уның хәле түҙерлек, минең дә ҡулымдан килерҙәй, бер ҡараһаң. Ә бына Әсмә була алмауым – хаҡтыр. Әхирәтемдең халәтен үҙ ҡәлбемә индереп ҡарайым да, сыҙамай, илап ебәрәм.

Ул сыҙай. Шулай ҡаһарман йөрәкле Әсмә, шулай тоғро, шулай берәгәй! Асылымда уяулығын юғалтмаған “үҙемдәр”ҙең береһе (адвокаты) шундуҡ баш күтәрә. Нурияның күңеле лә саф, хыянатсыл түгел, ваҡсыл ниәттәр менән сыбарланмаған, ти. Йәнгә рәхәт булып китә.

Һирәкләп минең янға Әмин абый инеп сыға, Мәүлиҙәне һағынам, һине күрһәм, уны күргәндәй булам, ти. Бер ингәнендә абый әлеге лә баяғы сәйәсәт хаҡында һорау биреп йөҙәтте:

– “Правда”ны алдыраһығыҙмы һаман?

– Өләсәйемә яҙҙыралар ҙаһа,– тинем.

– Уҡыйһыңмы һуң?

– Уҡыйымсы. Үҙем “Ленинсе”не алдырам.

– Йә, нимәләр белдең, һөйләп ебәр?

Тыңлаусан уҡыусылай, уҡытыусыма яуап бирә башланым:

– Мамай курганындағы “Родина-мать” мемориаль комплексы хаҡында йыш яҙалар, фотоһын баҫалар. Шунда пионерҙарҙы экскурсияға алып барырға ине, Сәкинә апа ни тиер? Нью-Йорктағы Азатлыҡ статуяһынан ике ярым тапҡырға бейегерәк икән беҙҙең һәйкәл – ҡылыс тотоп торған Әсә һыны. Бейеклеге 52 метр, ҡылысының оҙонлоғо ғына 33 метр. Күҙ алдына килтереп ҡарағайным: Шәрифә апайым йәшәгән 5 ҡатлы йорттоң бейеклеге яҡынса 13-14 метр, ти, тимәк, һәйкәл шунан дүртләтә бейегерәк!

– “Ватан-Әсә” тип әйт әле, башҡортсалап. – Абый шулай тине лә өҫтәп ҡуйҙы: – Вучетич һәйкәлдәрҙе иҫ киткес итеп ҡоя инде ул. Волга – Дон каналындағы Сталин һәйкәленә, кителенең погонына, «Москвич» машинаһын мендереп ултыртып булыр ине, тип һөйләй торғайны күргән кешеләр. ГДР-ҙа, Трептов-парк тигән урында, совет һалдатына ҡуйылған һәйкәл дә – шул скульпторҙың эше.

– Һүрәтен күргәнем бар: һалдаттың бер ҡулында – дәү ҡылыс, икенсеһендә – ҡыҙ бала.

– Ул һәйкәлде барып күреүең шикле, ә “Ватан-Әсә” янына, моғайын, барырһың. РОНО-нан фарман килгән уҡыу алдынғылары исемлеген бирергә, шунда экскурсия ойоштороласаҡ икән.

– Трептов-паркты Сабир күргән, хатында яҙғайны.

– Берлин стенаһы тураһында әйткәнме?

– Әйткән.

– Бер халыҡты икегә айырған стена… Урталай сабып өҙҙөләр йыландың кәүҙәһен, бер уйлаһаң. Ә икенсе уйлаһаң, унда ла әҙәм балалары яҙмышы… Йә, тағы нимәләр яҙа “Правда?”

– Абый, үҙең дә уҡыйһың инде?

– Уҡыйым, мин бит – агитатор, эттәгенәһе. Һинең йәш башыңда нимәләр урала икән, шуны белгем килә әле. Йә?

– Ҡалаларҙа биш көнлөк эш аҙнаһына күсеүҙе йыш телгә алалар, уныһын беҙҙең гәзиттәр ҙә сурыта. Төҫлө телевизорҙар сыҡҡан, беҙ күрмәгәс тә…

– Ә КГБ, Андропов тураһында төптө дөрөҫөн яҙмайҙар! – Абый йәне көйөп һөйләргә тотондо. – Андроповты Политбюро ағзаһы иттеләр, Сталин заманындағы Берия һымаҡ. Брежнев үҙе матур итеп йылмайып ҡына ултыра ла ул… – Ручкаһы ҡулында булған икән, шул тәгәрәп иҙән ярығынан баҙға төшөп китте: – Сволочь! – тине абый. – Тап хәҙер ул ручканы!

– Мәүлиҙәнән хат киләме? – тигән булдым, һүҙ юҡта һүҙ итеп.

– Уныһын, ана, Рабиға апайыңдан һора ,– тине лә китеп барҙы. – Математика олимпиадаһы тора алда, хыт шул яҡшылығы бар был осорҙоң,– тигәне коридорҙан ишетелде.

Эштән һуң тура ҡартәсәйемә йүнәлдем, күңелем болоҡһоһа, уны күрмәй түҙмәйем. Барып еткәнсе әллә күпме уйҙар уралып өлгөрҙө башымда: әлдә ошо Әмин абый тарих уҡытмай, балаларҙың мейеһен бутап бөтөрөр ине микән? Бына лаһа, илдәге хәлдәр тәңгәлендә ҡаршылыҡлы фекерҙәр төйнәп китеп барам. Артабан күрермен: хаҡлымы абый, юҡмы – мейемә ойотҡо һалынды бит.

Һәр төбәктә беҙҙең Әмин абый кеүек кешеләр барҙыр, моғайын, тигән һығымтаға килдем ахырҙа. Тап шундайҙар арҡаһында, улар йоғонтоһонда халыҡтың күҙе асыҡ, ҡолағы тишек, танауы еҫ һиҙәлер? Ышанмайыраҡ тыңлаһалар ҙа, хәтерҙәренә киртеп ҡуялар, аңдарын йоҡлатмайҙар.

Килеремдә алдан белгәндәй, ҡартәсәйем түр һикеһендә тәҙрәнән ҡарап ҡына ултыра икән, зыңҡылдатып быялаға сиртте. Ингәс тә күҙемә салынды: өҫтәлдә асылған посылка йәшниге тора.

– Атайың һалған, асып ҡара әле, ҡолоҡасым, һиңә лә әйбер бар, – тине ҡартәсәйем. Үҙе, бара һалып, электр сәйнүген тоҡандырҙы. – Рәхмәт төшкөрө, Баязитым килтергәйне ошоно, анау юлы, рәхәтен күрәм дәһә, тиҙүк шажлатып ҡайнатып бирә сәйҙе, – тип һамаҡланы. Ә мин шул «анау юлы» тәүләп күргән һеңлем Мәйсәрәне иҫләнем: ҡараҡай ғына остоҡай ҡыҙыҡай, ике йәштә генә, белмәгәне юҡ үҙенең. «Ап-пай, Нур-ра ап-пай!» – тине лә, йүгереп килеп, итәгемә йәбеште. Йөрәкһенеп күтәреп алдым туғанымды! Ҡара күҙле, йәмшек танаулы – минең бәләкәй сағым инде торғаны. (Танауы төҙәйер, ә күҙенең төҫө үҙгәрмәҫ – бер Камилға ғына күскән атайымдың күрән япрағылай ҡарағусҡыл- йәшел күҙҙәренең төҫө.) Күкрәгемә ҡыҫтым Мәйсәрәне, сәстәрен танһыҡлап еҫкәнем. Ҡыланманым, йөрәгем ҡушҡанға буйһондом. Һәм бына – ҡартәсәйем атайымдың исемен телгә алыу менән, иң тәүҙә шул сабый күҙ алдыма килде, һағыныу тойғоһо үҙен ап-асыҡ белдерҙе. Һағыныуҙың ни икәнен генә айырам... Атайым һирәк булһа ла ҡайтҡылап йөрөгәс, унда әллә ни үҙгәреш күрмәнем, күҙҙәрендә әүәл шәйләнгән бойоҡ ҡараш юғалғайны – шул ғына. Ә теге апай, Мәйсәрәнең әсәһе, иҫтә лә ҡалмаған. Буйсан ғына, ҡуңыр йөҙлө ине шикелле. Хәйер, кем ул миңә – хәтергә һеңдереп торорға?!

Посылка йәшниген асып ҡараным да аһ иттем: арыш араһында үҫкән зәңгәр сәскә төҫөндәге костюм даһа, тап минең үлсәм. Кримплин тигән иң кәттә тауарҙан тегелгән. Кейеп ҡарағайным – тап-таман. И, атаҡайым, ҡайһылай ҡыуандырҙың мине, былдай затлы кейем ауылда бер үҙемдә генә хәҙер. Ҡалала эшләгән ҡыҙҙар былтырлы-быйыллы кейеп ҡайтҡыланылар ундай күлдәк-фәләнде, улар ни килделәр ҙә киттеләр. Ә Толпарлыла – мин беренсе! Кримплинды үтекләйһе түгел, йыуып эләһең дә, кипкәс, кейеп тә алаһың. Үҙенең матурлығы, килешеүе, уф! Яңы өйгә ҡайта һалып, өләсәйемдең ҙур көҙгөһөнән ҡарай һалайым!

Ишекте асмаҫ элек үк ишетеп киләм: Яңы өйҙә Камила пластинка уйната, үҙе ҡушылып йырлай: «Черный кот за углом...» Ара-тирә башҡортсалап та ебәрә: "Ҡап-ҡара, бес-бесәй..." – тип. Танса тиһәң, уны ҡуш. Эйе шул, манма тиргә батып бейеп йөрөй. Твисты һалдыра, чарлстонды ла килештерә. Тау араһында ятҡан Толпарлыға ла һайт тигәнсе килеп етә шул модаһы ла... Пластинка уйнатҡысы ла булған радиоалғысты бер ҡайтҡанында атайым алып биргәйне, ә пластинкаһы, әлбиттә, Динис туғанымдың сослоғо арҡаһында – әлеге лә баяғы "итәк аҫтынан" эләктергән. Ул ниндәй итәктер – бөтә дефицит әйбер: кейеме лә, пластинкаһы ла, хатта йорт йыһазы менән һауыт-һаба ла шуның аҫтында?

Фариза еңгәмдең улы килеп китте Ҡаҙағстандан. Тәүләп килде, бер үҙе генә. Әсәһенең матур йәшәүен күреп һөйөнгән, икенсе юлы ғаиләмде лә эйәртәм,

килененде, ейәненде күрһәтәм, тигән. Ошоғаса сителеп йөрөүен нисек аңлатҡандыр? Хат яҙыуын яҙа ине ул, беләм унығын. Тик нисек түҙмәк әсәнде шунса ғүмерҙәр күрмәйенсә?! Сит-ят иргә бауланып, сит-ят ергә сығып китте, мине ҡартайған өләсәйемә ташлап, тип үпкә тотоп йөрөгәнме? Хәҙер, аҡыл кергәс, донъяның әсеһен-сөсөһөн татығас, аңларға, ғәфү итергә көс тапҡан микән үҙендә?

Менәүәрә менән Динис ҡышҡы каникулда бөтә ауылдың күҙ алдында урам буйлап ҡултыҡлашып йөрөнөләр.

Аҡназар ағайҙың ҡыҙы Миңзифа, былтыр мәктәпте тамамлап, Әсмә уҡыған кулинария курсына ингәйне, үҙебеҙгә эшкә ҡайтасаҡ, ти. (Мәктәп эргәһендә интернат, унда ашхана асылды – күрше ауылдарҙан йөрөп түгел, ә «ятып уҡыйҙар» хәҙер, Шырмый Ихсан ағай әйтмешләй.) Шул Миңзифа үҙенең Әшрәфкә күҙе төшөүен юрамал фаш итте, халыҡ быларҙы «кейәү менән кәләш» тип һөйләп сығарҙы ахырҙа. Мәктәптә уҡығанында уҡ баҫыуға барып етә ине хатта, егетте күрергә тип. Хәҙер ҙә аҙна һайын ҡайта, ҡайтҡан һайын Әшрәфтән бер тотам ҡалмай, ҡыш уныһы гараж тирәһендә, ремонтта бит инде – шунда урала. Улай ҙа әрһеҙ ҡыҙ булыр икән. Әшрәфтең күҙен дә астырмайҙар, «рәйес кейәүе» тип үсектерәләр. Дуҫымдың ҡылын тартып ҡарағайным: «Бәйләнде бит, дегәнәк кеүек йәбеште, үлтерәйемме ни?!» – тисе…

Әйләнә ҡуласа, әйләнә... Сабир ГДР-ҙан хәрби хеҙмәттән комиссияланып ҡайтып төштө. Яраланған икән, тигән хәбәр таралды башта ауылда. Ҡот осто, һуғыш тауышы ишетелмәй ҙәһә? Баҡһаң, ошолай булған ысыны: өс хеҙмәттәше менән увольнениеға сыҡҡан, шунда, бер магазин янынан үтешләй, күреп ҡалғандар: юлдан юғары тиҙлектә машина елә, ә бер кескәй ҡыҙсыҡ тротуарҙан төшөп бара. Атаһы ҡайҙа, әсәһе ни ҡарай, тип уйлап торорға ваҡыт юҡ – Сабир баланы ҡотҡарырға атылған, иптәштәре ҡаушап торған арала. Шундай бит ул беҙҙең Сабир! Ҡыҙсыҡтың беләгенән тотоп алып, тротуарға сығарып өлгөргән, тик үҙен теге машина бәреп үткән, уң аяғына тейгән. Әлдә генә врачтары көслө икән, аяғын киҫмәй, йолоп ҡалғандар – тубығынан бөгөлмәй, ти, әммә үҙенеке, протез түгел. Күпмелер ваҡыттан бөтөнләй йүнәлеп тә китер, бәлки, медицина алға бара лаһа.

Егет үҙе һыр бирмәй әлдә. Педучилищела уға, башланғыс синыфтар уҡытыуҙан тыш, физкультура, йыр һәм музыка, рәсем дәрестәре алып барырға таныҡлыҡ та биргәндәр, иң теләгәнен – физкультураны уҡыта алмай мәгәр хәҙер. Сәкинә апа әйткән, йыр, рәсем буйынса белгес юҡ, кем тура килһә, шуға өҫтәп йәбештерә инек дәрестәрҙе, хәҙер һин уҡытырһың, тип. Баянда шәп уйнай Сабир. Балаларҙы нота грамотаһына өйрәтәсәкмен, тип дәртләнә.

Герой булып ҡайтҡан егетебеҙ, бер ҡараһаң. Район гәзитендә генә түгел, өлкә матбуғатында ла уның хаҡында яҙып сыҡтылар. Трептов паркындағы теге мөһабәт һәйкәл фонында төшкән фотоһын баҫтылар, бөгөнгө тыныс тормошта немец ҡыҙыҡайын үлемдән ҡотҡарған совет һалдатын данланылар. Тик… уланының тыныс хеҙмәттән ғәрипләнеп ҡайтыуы барыбер эсен бошорҙо Толпарлының.

Ул да булмай, тотош илде илатҡан фажиғә хаҡында ишеттек: беренсе космонавыбыҙ Юрий Гагарин ғәҙәти уҡыу-күнекмә осошонда һәләк булған. Самолеты ҡайынлыҡҡа барып төшөп шартлаған. Эргәбеҙҙә йәшәгән, күреп-белгән ғәзиз кешебеҙҙе юғалтҡандай хәсрәтләндек.

Ә ҡәҙимге “йүкә телефон” ошо осор анекдот таратыуға кәлепләшеп алды. Кемдер туҡтауһыҙ лаҡап уйлап сығарып ултыра ҡайҙалыр… Ишеткән берен үҙенсә эшкәртеп, тоҙлап-борослап ебәреүселәр иһә етерлек – Шырмый Иҡсан

үҙе генә лә ни тора! Яңыраҡ бер малай, пионер бүлмәһенә инеп, миңә Чапаев тураһында яңы анекдот һөйләп сыҡты. Имеш, комдив, ординарецы Петя, пулеметсы Анка... Һөйләйемме, апа, тигәс, һөйлә, тинем дә ҡуйҙым шул, бер ҡатлы бала-саға хәбәрелер, тиһәм. Малай дәртләнеп, ролгә инеп үк һөйләргә тотондо:

– Чапаев эргәһенә Петька йүгереп килеп ингән дә һөрән һалған: «Василий Иваныч, Анка бәпесләгән, игеҙ бала тапҡан!»

– Тапһасы? – тигән комдив, иҫе китмәй генә.

– Мин үҙемдекен барып күрҙем, һин дә…

Һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән эсен тотоп көлөргә тотондо малай, шунан йәһәт кенә сығып шылды. Аңлап етә микән үҙе нимә хаҡында һүҙ барғанын? Бынан әллә 30 йыл элек төшөрөлгән, йәшерәк быуын күрмәгән “Чапаев” фильмын ямап-ялғап, Совет Армияһының 50 йыллығына яңынан экранға сығарғайнылар, шуның әҙемтәһелер бындай аяуһыҙ ҡуйырып киткән анекдоттар.

Ғөмүмән, киноның йоғонтоһо ифрат көслө, бигерәк тә фантазияһы урғылып торған үҫмерҙәргә. Бер көндө ике малай ауыл осонда яңғыҙ ғына йәшәгән бер инәйгә баштарына ҡара капрон ойоҡ кейеп барып ингәндәр ҙә: «Фантомас ҡоторҙо!» – тип ҡысҡырғандар. (Аҙна элек кенә “Фантомас разбушевался” тигән кино күрһәткәйнеләр клубта.) Инәй һуштан яҙып йығылғас, ярай ҙа ҡурҡып ҡасмағандар, ойоҡтарын сисә һалып йәшергәндәр ҙә, битенә һыу бөркөп, иҫенә килтергәндәр, шилмалар.

Эйе, әйләнә ҡуласа...

27

Аҡман-тоҡман бурандары үтеп китеп, яҙ елдәре уйнаҡлай, ҡуйынға уҡ тығылып ҡытыҡлаша башлаған бер мәлдә: «Нурия, клубҡа сыҡ бөгөн, нимә ултыраһың сепей баҫҡан ҡаҙ шикелле, «апа» булдым тигәс тә?!» – тип ишекте шарран асып, ябыр-япмаҫтан һөйләнеп, Әшрәф дуҫым килеп инде. Аптыраным, иҫерек кешеләй ҡыланасы? Араҡы-мараҡыны ауыҙына ла алмай үҙе.

– Яба һал ишекте, өйгә һыуыҡ индерәһең! – Быймаһын аяғынан һелкеп кенә сисеп, минең янға, өҫтәл артына, килеп ултырҙы ла иңдәремдән тотоп һелкетергә тотондосо – ни булған быға?

– Фатих ҡайтты! – ти һалды Әшрәф, мин асыуланып ҡарағас.

– Отпускығамы? – тауышым ниңәлер ҡалтырабыраҡ сыҡты. Әллә тулҡынланам? Юҡсы, шатланам ғына, алты дуҫ егеттең береһе ләһә, күптән күрмәгәнем дәһә.

– Яҡшы хеҙмәт иткәндәргә генә бирәләр отпускыны, белгең килһә. – И, ошо Әшрәф, былай ҙа керһеҙ күңелле булыр икән, ҡайһылай ғорурланған Фатих өсөн.

– Әхиәр, стройбатта хеҙмәт иткәнгә микән, ике тапҡыр ҡайта һалып китте,– тинем. Йәнәһе, бер Фатих ҡына түгел минең уйымда. Бәс, кем шулайға һапларға тора әле? Һы…

– Ярар, Фатих, Сабир, мин өсәүләп килеп алабыҙ һине, берәй сәғәттән. Әҙерлән! – Шулай тине лә Әшрәф ашығып ҡайтып китте. Тәҙрәнән ҡарап ҡалдым: ҡалтағай кейгән кеүегерәк атлауына тағы иғтибар иттем. Әсмәнең уны тайыш табанға оҡшатып мәрәкәләүен иҫләнем, күҙҙәремә йәш эркелде. Их, дуҫҡайҙарым, белһәгеҙ ине, нисек өҙөлә йөрәгем һеҙҙең өсөн! Айыусыға йыш йөрөй алмайым, берҙән – ҡыш, юл өҙөк, икенсенән, Рауил ағай менән Суфия апай күсенеп килде Тубылдан, Әсмә япа-яңғыҙы түгел. Фатихтың, моғайын, уны күргеһе килер?

Бер уйға килеп инһә, әхирәтем тиҙ генә сыҡмай инде. Клубҡа әҙерләнәм: сәсемде бер үрәм, бер тағатам, ни кейергә белмәй ҡыялам, үҙем Айыусылағы

хәлдәрҙе күҙ алдына килтерәм. Бер барғанда Суфия апай һөйләп алды, кейәүе бик алама икән. «Холоҡһоҙ кешегә тура килде, нишләһен, балалары бар, йәшәй инде ҡыҙым, түҙә… Ҡатын-ҡыҙҙың яҙмышы», – тип иланы. Берсә йәнем көйөп ҡуя: шулайтып тоталар ҙа миңә сер сисәләрсе. Аҙаҡ, әйҙә, үҙемә ҡыйын була. Артур менән Әсмәне Тубылға алып ҡайтһағыҙ була лаһа, ҡалала, ни генә тимә, врачтар, көнкүреш уңайлыҡтары – урман түгел дәһә, тиеберәк әйтергә лә уҡталғайным. Әлдә ауыҙымды асып өлгөрмәнем… «Фәрештә был бала»,– тине Суфия апай, Артуры тирәһендә бөтөрөлгән Әсмә яғына ымлап. Мин дә уның һүҙен хуплап баш ҡаҡҡан ыңғайыма: «Бер һөйгәне өсөн…» – тип әйткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым.

Бер һөйгәне өсөн әхирәтем ҡара урманда йәшәргә, сатнама һыуыҡтарҙа ҡойоһонда һыу туңғанда ҡар иретеп көн күрергә, мейес ҡоромона буялырға ла риза. Эй, уныһына ғына кем дә сыҙай алыр, ә һыу һөлөгөндәй егетеңде әлегеләй йәл ҡиәфәттә күреү, уны көнөнә нисәмә тапҡырҙар ҡулыңа алып күтәреү, ҡалаҡтан ашатыу?! Һөйөп, һөйөләр генә сағыңда… Кем сыҙар, кем күнер быға?! Ғишыҡ уты, ғашиҡлыҡ ҡына ундай һынауҙарҙы еңә алмайҙыр, ысын мөхәббәт кәрәктер! Мөхәббәт үҙе генә лә әҙҙер, ә рух ныҡлығы, намыҫсан тоғролоҡ һәм башҡа бик күп күркәм сифаттар бергә ҡушылғанда ғына Әсмә булып булалыр?

Зәңгәр кримплен костюмымды кейәйем әле. Тәүләп. Сәсемде берҙән үрҙем дә, осон ғына ялпылдатып тағатып, ялтыр ҡаптырма менән беркетеп ҡуйҙым. Кәбир тота ла толомома үрелә торғайны, «үрер ҙә һүтер инем, һүтер ҙә үрер инем» ти ҙә… Уның таҡмағы. Уф, нишләп Кәбирҙе иҫләп иҫәңгерәп торам, ана, өс дуҫым килә ята, һалдат формаһы кейгәнен уртаға алғандар. Шул егет Фатихмы? Буйға үҫкән, тегеләрҙән бейегерәк. Мыҡтыланған да. «Күреп торам һеҙҙе, хәҙер сығам», тигәнде аңлатып, тәҙрә сирттем. Минән күҙ ҙә алмай күҙәтеп, эргәмдә буталған Камила топ-тойоҡтан һораны: «Һалдат ағаймы һинеке?» Бына иҫәүән ҡыҙыҡай. Шуны ишеткән Камил да, йотлоғоп уҡып ултырған китабын ҡуйып тороп, тәҙрәгә ҡапланды. Быларҙың ҡыймырлашыуына өләсәйем дә, теремекләнеп китеп: “Нурия, тим, мал-тыуарҙы бикләнеңме аҙбарға?” – тип тауыш бирҙе.

Урамға сығырға кәрәк тәһә тиҙерәк, клубта кино күрһәтеп бөтәләр был ваҡытта, бына-бына танса башланасаҡ. Сыҡтым. Күкрәгем алҡына, усым менән йөрәк яғын баҫып торҙом күпмелер минут. Тынуслана төштөм. Ә нимәгә шулай ашҡынып тибә был йөрәгем? Һы…

Фатих миңә табан бер-ике аҙым атланы ла туҡтап ҡалды. Һаман ҡыйыуһыҙлығы бар икән? Шул уй, ахырыһы, миңә батырлыҡ өҫтәне, элекке, ул белгән Нурияға әйләндем.

– Һаумы, һалдат!– тинем дә ике ҡулым менән ныҡ итеп яурындарына ҡағылдым, дөрөҫөрәге – шапылдата һуҡтым. Бәс, Фатих быны көтмәгәндер шул, әллә уңайһыҙыраҡ баҫып торған – гөрҫ итеп артына йығылды ла китте. Ҡар өҫтөнә. Әшрәф, дуҫының хәлен аңлай һалып, эргәһенә ауҙы, шаяра, йәнәһе. Сабиры мине ипләп кенә этеп ебәрҙе лә үҙе лә һуҙылып ятты. Ғәйебемде юйыр өсөн нишләргә белмәй тора инем, рәхмәт төшкөрө. Шунан көлә-көлә аяҡҡа баҫтыҡ, өҫтөбөҙҙө ҡағыштыҡ та клубҡа йүнәлдек. Мурт апрель ҡарында дүрт һындың мисәте оҙатып ҡалды беҙҙе.

Барып инеү менән ҡолаҡҡа әлеге лә баяғы “Ҡара бесәй” ритмы һарылды, күҙгә, ишек төбөндә үк, урынында баҫып сыҙамай үрһәләнгән Миңзифа салынды: Әшрәфтең беләгенә килеп тә аҫылынды. Беҙҙең килерҙе алдан уҡ белгән, тимәк. Кем әйткән? Әшрәф клубҡа бөтөнләй тиерлек йөрөмәй, һирәкләп, һинд киноһы килтерһәләр йә колхоз йыйылышы булһа ғына бара. Уныһы ярай инде,

бынау Гөл аптыратты әле мине: арлы-бирле өҫтөмдө йүнәткеләп, сәсемде һыпырғылағансы Фатихты етәкләп алды ла киттесе бер мөйөшкә?! Ҡапыл сикәмә ут бәрелде, гүйә, ҡолаҡ япраҡтарым ҡыҙып бешге. Бынағайыш… Әллә көнләшәм? Ул арала тубыҡтарым дерелдәй башланы, кримплен костюмыма күҙҙәре ҡыҙып ҡарап-ҡарап алған ҡыҙҙар күрәләр ҙәһә итәгемдең елберҙәгәнен? Тансаға төшә һалып киттем, хәлемде белгертмәҫ өсөн. Твистың шуныһы әйбәт: парһыҙ ҙа бейейһең. Ритм иркенә бирелеп, тынысландым. Эстән генә үҙемде әрләнем дә яңғыҙы ғына һерәйеп баҫып торған Сабир янына атланым. Юлымды Гөлфирә киҫте. Бер ни булмағандай, һырпаланып, ҡолағыма шыбырланы: «Харис ағайҙы һораштым, улар дуҫ бит, иветә, моғайын, хат алышаларҙыр, тинем дә…»

– Нимә ти?

– Хат яҙышабыҙ, ти, сәләм әйтәйемме, тип күҙ ҡыҫа,– тине лә үҙен көтөп торған Әл эргәһенә ашыҡты. Бергә генә йөрөй улар, апалы-һеңлеле.

Фатих Гөлгә күҙ ҡыҫҡан?! Тағы битем ҡыҙа башланы. Юҡ, былай ярамай, үҙемде ҡулға алырға кәрәк. Харисты һорашҡан, тимәк, башҡа менән ҡыҙыҡһынған, Фатих түгел был ҡыҙҙың уйында.

Кемдер артыма килеп баҫты, йомшаҡ итеп иңдәремә ҡағылды:

– Нурия, әйҙә вальсҡа! – Фатих, уның тауышы. Уның ҡулдары…

Өндәшмәй генә боролдом да туп-тура күҙҙәренә ҡараным. Уф, дыуамал мин, ниңә баҡтым шул зәңгәр күҙҙәргә?! Сумдым бит! Әллә ниндәй сихри көскә эйә Фатихтың күҙҙәре, электән тоя инем, ҡарашымды ҡасыра инем. Шөрләй инем…

Башым әйләнгәндәй булды. Ҡаршымдағы һомғол егеттең синыфташым Фатих икәненә бер ышанам, бер юҡ. Ихтыярһыҙ, һушһыҙ һымаҡ тик торам. Фатих бер ҡулымды үҙенең иңенә ҡуйҙы, икенсеһен усына алды ла көй ыңғайына ылыҡтырҙы. Әле осам, әле йөҙәм. Осҡанымда ҡолатып, йөҙгәнемдә батырып ҡуймаһын, тип ҡурҡмайым. Мине бер-берәүҙең көслө лә, наҙлы ла ҡулдары ҡурсалай. Мин – улар иркендә…

Ниһайәт, ҡолағым, күҙем асылды. Таныш моң, таныш һүҙҙәр яңыса, көтмәгәнсә яңғырап, йөрәгемә һарылды:

*Сәстәрең ҡара ебәктәй,*
*Ебәк бирәм үрергә;*
*Бик һағынъас, бик һарғайъас, Нурия,*
*Килдем һине күрергә…*

Сабир уйнай гармунда, өҙҙөрөп уйнай. Үҙе йырлай, шундай ҙа моңло икән тауышы, бығаса белмәй инем. Пионер, комсомол марштарын хор менән йырлап үҫтек бит беҙ уҡығанда, тауыш айырмай…

*Һыу буйына төшкән инем,*
*Һыу өҫтө күбек кенә;*
*Һин бит минең яҡын дуҫым, Нурия,*
*Күҙ нурым кеүек кенә…*

Аңланым Сабирҙы, барып етте минең туң башыма: Фатихтың күңелен күрмәк, уның хистәрен миңә еткермәк булып йырлаһа ла был йырҙы, үҙенең мөхәббәтен, Баймаҡ һылыуын һағынып теленәләр уның бәғере. Ә уныһы ҡайҙа йөрөй, әллә минең ошо моңло дуҫымды әҙәмгә һанамай ҡыланамы? Ғәрипләнеп ҡайтҡан, тип?! Мотлаҡ быны асыҡлаясаҡмын! Тик әлегә… әлегә мин бар донъяға урғылған серле көй ихтыярында, йәнемде-тәнемде әсир иткән ҡулдар ихтыярында…

*Бөгөлә ҡайын, бөгөлә ҡайын,*
*Матур бөгөлмәһә лә;*
*Һинең өсөн өҙөләм, бәғерем, Нурия,*
*Һиңә һиҙелмәһә лә…*

Был һүҙҙәр тамам өҙҙө үҙәгемде! Фатихтың бармаҡтары һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә дерелдәне. Уның ҡайнар усындағы бармаҡтарым (мин ҡушмаһам да!) яуап бирҙе: “Һиҙәм!”

Сабирҙан гармун Әшрәфкә күсте. Ул бейеү көйҙәрен һыҙҙыртты. Миңзифаның табандары нисек түҙәлер – тыпырҙатты ғына. Оҫта бейей, һүҙ ҙә юҡ. Кәүҙәһе матур, кейеме затлы, килешле. Дәрте баш осона сыҡҡан ҡыҙҙың. Ике күҙе Әшрәфтә, тик тегеһе башын ҡырын һалған да ҡараштарын тәҙрәгә төбәгән: шул яҡта, клуб тәҙрәһе уйылған яҡта, – Айыусы, унда – Әсмә…

***

– Ошо Нурияға хат ташып ҡына уҙа бит йәш ғүмерем, ә?! – тип һөйләнә-һөйләнә килеп инә беҙҙең урамға Зөмәрә апай, ғәҙәттә. Был юлы ла, өйгә үк инеп, ауыр йөгөн шап иттереп бер ултырғысҡа ҡуйғас, уфылдап, икенсеһенә барып ултырҙы. Әҙерәк тын алғас, гәзиттәр, хаттар менән лыҡа тулы сумкаһын асып, аҡтарына башланы: – Мына бер хат, мына тағы икәү, мына… ҡайҙа булған уныһы? Баймаҡтан ине, точно хәтерләйем, бар ине… Уф, ҡана, айран туғып бир әле, Зөлхизә инәйҙең әсе ҡатығы юҡ түгелдер.

– Йәйге селләләр шул тышта… – тип әйтеп һалһа ла, Камила, минән алда өлгөрөп, айранды килтереп тә тотторҙо почтальонкаға.

– Ҡана, үҙем эҙләйем, улайһа?– тинем, Зөмәрә апайҙы йәлләп.

– Эҙлә, тап! Һеҙҙең өсөн йөрөйөм тапанып, таштай ауыр йөк аҫып.

Ысын, күтәреп ҡарағаным бар, яман ауыр уның сумкаһы. Гәзиттәрҙе бер арый айырып һалдым да хаттарҙы ҡарарға тотондом. Табылһа ярар ине – Сабирҙан һөйгән ҡыҙының ҡайҙа эшләгәнен һораған булып, белешеп, үҙем башлап хәбәр ебәргәйнем, моғайын, яуап яҙғандыр. Тыуған районындағы бер урта мәктәптә уҡыта икән. Тоттом да шунда ебәрҙем хатты, «Учительнице Загире» тип. Исемен белә инем, фамилияһын, егет һиҙенер тип, төпсөнмәнем. Ауылда ни ҡырҡ уҡытыусы Заһира юҡтыр әле. Атаҡ! Саҡ шулай тип ҡысҡырып ебәрмәнем: Харистың почеркы – Гөлфирәгә адресланған. Кемеһе беренсе булып яҙҙы икән хатты? Ҡаҙына торғас, эҙләгәнемде таптым – Баймаҡтан шул.

– Ҡалмаған Хабаровскийы ла, Украинаһы ла... Ер шарының бөтә мөйөшөнән почта килә был ҡыҙыҡайға. – Шулай тип әллә хуплап, әллә әрләп, Зөмәрә апай китергә ҡуҙғалды, ә мин төпкө бүлмәгә инеп хат уҡырға керештем. Иң тәүҙә Баймаҡтан килгәнен астым. Фатихтыҡы көтөп торор… Мәүлиҙә лә үпкәләмәҫ… Ә был хатта, бәлки, Сабир дуҫыбыҙҙың яҙмышы хәл ителгәндер.

Егетенең бәләгә тарығанын белмәй, араны үҙе башлап өҙҙө, тип аптырауға ҡалған сағы икән Заһираның. Минең хистәремә ышанмаған, шуға йәнем көйә хәҙер, тигән. Уҡыу бөтөү менән ауылығыҙға барам, Нурия, һиңә төшөрмөн инде, тип рөхсәт һораған. Иң һуңында, бөгөн үк күргем килә лә, осор ҡанатым юҡ, һеҙ алыҫ бит, тигән һүҙҙәре менән һағыныуын да, яратыуын да белдергән. Үҙен күрмәҫ элек үк тойҙом Заһираның хәсиәтен, тағы бер әхирәтемде тапҡандай булдым. Тоттом да шул хатты Сәкинә апаға уҡыттымсы. Бер ҡараһаң, аманат инде – ярамай, икенсе ҡараһаң, унда ниндәй сер бар? Апаға мин ныҡ эҫенгәйнем, уҫаллығының тик яҡшыға, тәртипкә генә икәнлеген беләм. Йәшерен уйым да юҡ түгел, танмайым: башланғыс синыфтарҙы уҡытҡан апаларҙың береһе

быйыл пенсияға китә – эш табылһа, Заһира Толпарлыла тороп ҡалыр һымаҡ, яҙғандары ихластан булһа?

Сәкинә апа хатты уҡый башлағанда директор ине, уҡып бөткәс, тиңдәш бер серҙәшкә әйләнде лә ҡуйҙы. Бына бит ул һүҙ көсө, әттәгенәһе!

– Мәсьәлә хәҙер Сабирҙа тора,– тине апа,– ҡыҙҙы кәләш итеп алһа, бында төпләнергә күндерһә, эш әҙер: беренсе синыфтарҙы уҡытып ала ла китә Заһира. Салауат педучилищеһы шәп белгестәр әҙерләй, ана, Рәйлә апағыҙ – республикала танылған уҡытыусы. Һин дә уның класында уҡыныңмы?

– Эйе. Сабир үҙенең физик кәмселегенә күнә алмай аҙаплана, шул ғына ҡамасау булмаһа?

Сәкинә апа тағы директорға әйләнде:

– Ә һеҙ, дуҫтары, ни өсөн? Күтәрегеҙ рухын, сәмләндерегеҙ! Бар, был һиңә – комсомол поручениеһы. Үтә!

– Һәр ваҡыт әҙер! – Пионер сборындағы кеүек салют биргәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым.

Заһира июнь баштарында килеп тә төштө Толпарлыға. Күҙгә күренеп тормаһа ла, ҡанаттары бар был ҡыҙҙың – шулай фаразланы күңелем. Алдан хәбәр иткәйне – Әшрәф менән икәүләп Оло юлдан барып ҡаршы алдыҡ. Үҙенән ҙур сумаҙан тотҡан, унығы килеп ауыр – әллә бирнәһен тейәп килгән? Ярай ҙа беҙ мотоциклда, йөк күтәреп атларға түгел. Келәт тыҡрығынан, кеше күҙенә әллә ни эләкмәй генә, Яңы өйгә бара һалып индек. Сабир белмәй әле…

– Абау, был апайҙың сумаҙаны үҙе дәү, үҙе ауыр, килен һандығы тиерһең! – Камила тик тормай, минең бәләкәй саҡтағы телдәрлегем уға күскән.

– Бәлки, тороп та ҡалырым һеҙҙә… – тип ҡуйҙы Заһира. – Бер ҡатлы икән, Әсмә әхирәтем кеүегерәк. Үҙем ҡатмарлыраҡ булһам да, асыҡ кешеләрҙе яратам – ауыҙым йырылып китте, шулай ныҡ оҡшаны был ҡыҙ миңә. Уф, ысын, әллә нишләп, бала сағымдан алыҫлашҡан һайын, ҡатлана ла ҡатлана һымаҡ асылым? Барыбер туғансыллыҡ, дуҫлыҡҡа тоғролоҡ кеүек матур тойғоларым иң өҫтә ята, төпкә боҫмаған – шуға ҡыуанам. Йондоҙнамәм шулай ҡушамы – үлсәргә, ҡат-ҡат уйлап самаларға әүәҫмен әммә.

Заһираның ярты сумаҙаны китап менән тулған, имеш. Өфөлә, БДУ-лағы филфактың икенсе курсында, ситтән тороп уҡый икән, бер ыңғай шунда ла йыйынған. Ата-әсәһенә, егет менән осрашырға барам, тип әйтһенме ни, тота килеп. Бәрәкәт, бер үк уҡыу йортонда, бер үк баҫҡыстарҙан менеп-төшөп йөрөгәнбеҙ ҙәһә!

– Кискә ауыл осона тансаға сығабыҙ, таҡырға, шунда күрербеҙ Сабирҙы, – тинем, ҡыҙҙың үҙенә урын тапмай яфаланыуын күреп. – Күҙен маңлайына мендерербеҙ!

– “Топтогон”мы ул таҡыр? Салауатта, ҡала ситендә, бар ине, унда башҡорт-татар йәштәре милли уйындарға йыйыла торғайны.

– Сабир ҙа, әйтәм, топтогон, ти ҙә һөйләй.

– Бейей алмайҙыр инде?

– Баянда һыҙҙыра, вальсҡа ла төшкөләй.

– Кем менән?!

– Минең менән, бәс.

– Бәс?! Һеҙҙең яҡта ҡыҙыҡ һүҙҙәр күп…

– Һеҙҙә “ҡыҙый” тип әйтеү бармы?

– Юҡ. Әйтерем, бәс, мин дә, йәме, Нурия, ҡыҙый. – Отҡор икән үҙе.

Кейенеп-яһандыҡ та киттек топтогонға. Тәпәш кенә сәхнә ишаратына таҡта йәйелгән – унда кемдер үҙе көйләп, беҙҙеңсә әйткәндә, “быҙыбытҡа” тыпылдатып бейей. Баянсы килеп етмәгән микән? Сәхнә уратып, бейей-бейей таҡырайтылған, асфальт һымаҡ ҡатҡан ер – таҡыр ята. Беҙ барып етәрәк, кемдер баян күректәрен кирҙе. Көйгә үрелеп йыр ағылды, көслө лә, наҙлы ла ирҙәр тауышы һәлмәк моңға арбаны.

– Сабир!– тине Заһира, әҫәрләнеп. Тәүге нотанан уҡ, әле тауышы көйгә ҡушылмаҫ элек танып алды һөйгәнен, бармаҡтарын баян төймәләренә тейҙергәс тә.

*...Ник осраның, минең тормошомдоң*
*Ҙур юлында юлдаш булмағас,*
*Ник күҙемә ҡарап һөйәм тинең,*
*Күңелең башҡаларҙы уйлағас...*
*Һин онотма, дуҫтар кәрәк булһа,*
*Тәүге мөхәббәттең ялҡынын*
*Тап төшөрмәй һаҡлап йөрөтөүсе*
*Саф күңелле бирәү барлығын.*

Тын да алмай, тыҡтап тороп тыңланыҡ йырҙы.

– Һин дә онотма! – тине ахырҙа Заһира.

Күпме генә дауам итә йыр – 3-4 минуттыр, шул ғына арала бихисап кисерештәр дауылы ҡубара ул... “Мин әле һинең тәүге мөхәббәтең, һинең “ҡыҙылсаң” тип ҡуйҙы асылымдағы “үҙем”дәрҙең берейһе... Аҡылым башҡа яҡҡа бороп ебәрҙе: Кәбиргә булған хистәрең түгел микән шул ҡыҙылса? Һөйөү көтөү, йөрәкһенеү... Үҙеңде үҙең ышанғың килгәнгә ышандырыу... “Алдаҡ гөман” кеүекме? Абау, әллә нимәгә барып тоташа ошо уйҙар.

Заһира сая ҡыҙ икән. Барҙы ла баҫты Сабирҙың алдына, уныһының, мин көткәнсә, күҙҙәре маңлайына менде! Баяны-нийе менән ултырғыстан һикереп торҙо, көй ҡапыл туҡтағас, бөтәһе лә уның яғына ҡараны ла ҡатты. Әшрәф серҙе сисмәгән, әммә үҙе шул тирәлә йөрөй икән: килә һалып, дуҫының баянын һалдырып алды. Ҡулдары бушағас, Сабир ҡыҙға ҡосағын йәйҙе, ә уныһы егеттең муйынына бауланды. Баянда Әшрәф уйнай башланы – үҙенең иң яратҡан көйөн. Һүҙҙәрен эстән генә ҡабатлайҙыр:

*...Белһәң икән башҡа һис кемдең дә*
*Йөрәгемә яҡын түгелен.*
*Ниңә генә, иркәм,*
*Һиндә генә икән,*
*Һиндә генә икән күңелем?..*

* * *

Әхирәттәрем берәм-берәм кейәүгә сыға башланы. Иң тәүҙә – Әсмә. Уф, теленә йөрәгем уның өсөн, телем-телем теленә. ЗАГС-ка барманылар... Уның ҡайғыһымы? Айыусыла йәшәп ҡалған теге ике әбейле һунарсы ҡарт (уға «Хан-солтан» тип ҡушамат та тағы һалды толпарлылар, йәнәһе, гарем эйәһе булған), ғилеме бар икән, Әсмә менән Артурға никах уҡыған-уҡыуын. Гарем тигәндән, башҡортса «хәрәм йорто» тигәнде аңлата, имеш. Бәс, ундарса, хатта ки йөҙҙәрсә кәнизәк тотҡан хан-солтандарҙың ҡылығы хәрәм булмай ни булһын? Әй, беҙҙең ауыл халҡы өсөн бер ҡыҙыҡ инде ул ҡушамат йәбештереү, тел сарлау.

Әсмәнең Артур менән йәшәүенә йыл ярым уҙып киткәндер. Һәр көнө генә

түгел, һәр сәғәте, һәр минуты ғазап бит! Хоҙай түҙемдәр бирһен һиңә, әхирәткәйем. Зәңгәр шишмә һыуылай изге, таҙа күңелле, Саҡмайылғаның шырпың ебегәндә ут һыҙып бирер саҡматашылай ышанысла һин.

Яңы әхирәтем Заһира ла Толпарлыға килен булып төштө. Унын яҙмышына минең ҡыҫылышым ныҡ булды. Ураҡтан алда Сабир атаһы менән Баймаҡ яҡтарына ҡыҙ һоратырға барҙы. Мине лә эйәрттеләр.

Әшрәфтең “Иж-Планета” тигән өр-яңы коляскалы мотоциклына ултырып сығып киттек ҡыҙ яғына. Уға был затлы әйберҙе былтырғы йыл һөҙөмтәләре буйынса механизаторҙар араһында район чемпионы булғаны өсөн бүләк иткәйнеләр. «Ике цилиндрлы, 18 ат көсө бар был толпарҙа!» – тип ҡыуанып туймай шуға. Дуҫы тигәс тә, нисек ҡыҙғанмай тотторған Сабирға «толпар»ын Әшрәф? Быйыл ғинуар аҙағында ғына килтереп бирҙеләр, үҙе лә кинәнеп йөрөп өлгөрмәгән… Әшрәфтең кем икәнен белмәһәм, аптырар ҙа инем, белгәс, уның өсөн тәбиғи ҡылыҡ тип ҡабул иттем.

Еләбеҙ генә! Тирә-яҡ йылт-йылт итеп кенә күҙгә эләгеп шәйләнә. Машина үтеп китһә, саңға күмелеп ҡалабыҙ ҡалыуын, унынһы беҙгә, ауыл кешеһенә, нисшут, тупраҡ еҫкәп өйрәнгән баш. Алыҫ та икән шул – Белорет юлынан ғына күпме барырға кәрәк. Сермәндән Әбйәлил яғына боролғас, туҡтап ял итеп , Инйәргә төшөп бит-ҡулыбыҙҙы йыуып, ризыҡланып алдыҡ. Сабир Заһира яҙыпһыҙып биргән ҡағыҙҙы алдына йәйеп һалып, карта һымаҡ итеп өйрәнеп ултырҙы күпмелер ваҡыт: беренсе барыуы Баймаҡҡа. «Амангилде, Асҡар… Ауылдар уң ҡулда ҡала, – тип һөйләнде ул. – Шунан – Тубинка, Түбә инде, Рәмиевтарҙың алтын сығарткан ерҙәре… – Ҡолаҡ ҡарп итеп ҡалды был һүҙҙәргә: «Шағирҙың алтын приискыларында», тимәк? (Башҡорт сәнәғәтсеһе Рәмиевтың Дәрдмәнд тигән псевдоним алған шағир икәнлеген беләм.) Сабирға ярышлап ултырып, «карта»ны ҡарай башланым. – Түбәнең уртаһынан үтеп китәсәкбеҙ,– тип дауам итте Сабир. – Ә бына был, ялғаш һымаҡ итеп төшөрөлгәне – Талҡаҫ күле».

– Шунда, буласаҡ ҡоҙасаларҙа, туҡтап ҡуна ҡаласаҡбыҙ, иветә, улым? – Баҫылып ҡына уйға батып ултырған атаһы, ниһайәт, һүҙ ҡатты.

– Эйе. Таңдан Заһираларға юлға сығырбыҙ. Күп ҡалмай, 20 – 25 саҡрым. Көтөү ҡыуып, ары-бире итеүҙәренә барып та төшөрбөҙ. – Сабирҙың тауышындағы дәрткә, алҡынып торған өмөткә иғтибар иттем. Бер һөйгәнең өсөн ике көн саң йотоп, елгә һуғылып, мотоциклда ҡағылып-һелкенеп килеү нимә, ул ҡәҙәрем яҡты тойғолар саҡырғанда?! Ә эсемдән, ҡатын-ҡыҙ асылымдағы «үҙем»дәрҙең береһенән, быға яуап ебәрелде: «Заһираны уйла, тыуып-үҫкән төйәген ҡалдырып, ата-әсәһен, нәҫел-нәсәбенән айырылып китәсәк Толпарлыға, сит кешеләр, ят холоҡ-ғәҙәттәр араһына?!» Ул яуапты икенсе «үҙем» әллә хуплап, әллә битәрләп ҡуйҙы: «Тыуған ерҙән төшкән ер яҡын! Бер һөйгәне өсөн (әгәр һөйһә) алтмыш һөймәгәнде һөйөрмөн – үҙ итермен, күнермен, тимәгәнме ҡатындарҙың тоғроһо?!»

Ул эске тауыштар менән бәхәсләшеп ултырыр мәлме – иҫ киткес гүзәл күл буйлап китеп барабыҙ. Сабир әллә ни ҡыумай мотоциклын, ҡысҡырышып фекер алышабыҙ: күҙҙе арбаны, һушты алды Талҡаҫ. Спидометрынан ҡарап бара дуҫым, өс километрҙан аша бының оҙонлоғо, ти. Ниңәлер, бер киножурналда күргән Байкал, уның хаҡында уҡығандар иҫкә килеп төштө. Талҡаҫ уның ише булып төҫмөрләнде: саф, тәрән һәм серле.

Кисен, ҡоҙасалар менән танышып, сәй эсеп алғас, улар беҙҙе күл буйына әйҙәне. Ҡунаҡтарҙы Талҡаҫҡа күрһәтмәй ярамай – йолабыҙ шундай, тинеләр.

Беҙҙә лә бар ундай изге йола, тинек, Толпарсыҡҡан күленә барып баш эйеүҙе күҙҙә тотоп.

– Киленгә һыу юлын да шунда башларғамы?– тип һораны ҡоҙаса. Заһираның өлкән апаһы икән, түңәрәк битле, үткер ҡарашлы йәш ҡатын.

– Юҡ, Толпарсыҡҡан ауылдан алыҫ ҡына ул, ике саҡрымлап барҙыр,– тинем. – Килендәргә Биксәнәйгә юл башлайбыҙ, ҡойо һыуына.

Шул мәлде беҙ ултырған яланғас ярҙан саҡ ҡына һулдараҡ тирбәлгән ҡамыштар араһынан, ҡупшы муйындарын бөгөп, ап-аҡ ҡаурыйлы ике аҡҡош талғын ғына йөҙөп килеп сыҡты. Улар беҙҙе күрмәй микән: күҙҙәре – күлдә, үҙ һындарына һоҡланғандай, томшоҡтарын һыуға терәп тиерлек йөҙәләр. Пар аҡҡоштарҙың артынан, епкә теҙелгән уйынсыҡтарҙай, бәпкәләре эйәргән. Өнһөҙтынһыҙ ултырһаҡ та, ата аҡҡош һиҙеп ҡалды, “ыш-ыш-ш…” тигәнерәк ауаз сығарҙы, ғәзиздәрен ҡурсалай, йәнәһе.

– Ышылдыҡ аҡҡоштар, – тине ҡоҙаса, йылмайып. – Йыл да киләләр хәҙер. Брагин яуыз осоронда биҙгән булғандар…

– Кем ул Брагин?

– Әле иҫкә төшөргө килмәй, берәй ҡасан һөйләрбеҙ .

– Ҡояш байый!– тип тауыш бирҙе ҡоҙа ла, ниһайәт. Һүҙгә һаранрыраҡ, ахырыһы. Уҫал кешегә оҡшамаған, күҙҙәре көлөп кенә тора. Ана нисек һоҡланып баҡҡан күл өҫтөнә ул ағай. Бәс, унда ысын мөғжизә пәйҙә лаһә!

Бурҙат ҡыҙыл төҫкә ингән Ҡояш һуңғы нурҙарын офоҡтан йыйып алды ла күлгә ырғытты. Талҡаҫ, гүйә, уртаға киҫелде. Әйтерһең, ут эсенән һурып ҡына алынған ҡыҙыл ҡылыс күл есемен икегә айырҙы (ә шажлап боҫ күтәрелмәне!). Әкренләп, һыу өҫтөндә күпмелер ҡыҙарып ятҡас, ҡылыс йөҙө һүрәнәйҙе, сағыу төҫөн юйҙы һәм күл төбөнә сумды…

Тирә-яҡтағы тауҙарға күҙ ташланым. Ҡайһыныһы Ирәндек икән? Йырҙарҙа йырланған, әкиәттәрҙә һөйләнгән тау…

– Ана ул! – тип ҡулын иҙәне ҡоҙа, офоҡҡа олғашып, түбәһе ағарып торған тауға. «Алыҫтарҙан, ай, күренгән Ирәндеккәй тауҙың аҡ ташы.

Ҡайҙа бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы…” Бер тауға, бер Сабирға ҡараным да илап ебәрә яҙҙым. Уф, әллә нимә уйлап ҡуйыр ҙаһа бынау буласаҡ ҡоҙа-ҡоҙасалар? Шулай, ерле юҡтан йөрәкһенеп китә торған холҡом барын белмәйҙәр ҙәһә улар.

– Бөркөт оялар тауҙарығыҙ бар, иҫ киткес күлдәрегеҙ! – тинем. Ә Аҡбейектең Ирәндектән текәрәк, Толпарсыҡҡандың Талҡаҫтан тәрәнерәк икәнен (өйөрө менән толпар сыҡҡан даһа!) әйтеп торманым. Бүреһуҡҡан олатай ҡулында ҡанат ныҒытып, Уҡтау ҡаяларына осҡан Ирәндек бөркөтө хаҡында иһә торараҡ берәй бәйән итермен әле баймаҡтарға.

Таң һарыһы менән Заһираның ауылына юл тотточ. Бер урында Ҡыҙыл йылғаһы аша сыҡтыҡ. «Ҡыҙыл буйҡайҙары ҡыҙырым ҡырсын” тигән йырмышиғырмы иҫкә төштө… Күҙ был яҡтарға хас ҡырыҫ матурлыҡҡа күнә килә, сикәне дала еле киҫә, танауға әрем еҫе бәрелә. Тау һырттарында һандыҡ таштар үрә баҫҡан, әйтерһең, ер ҡыртышын йыртып үҫеп сыҡҡандар. Ҡайҙа ҡарама, аҡ сәстәрен ялбырлатып ҡылған сайҡала: мин – сал дала, күпте күрҙем, күпте хәтерләйем, ти һымаҡ бындағы һәр тотам ер. Үҙебеҙҙең Ҡырластау һыртындағы кеүек селек тә үҫә икән, өйкөм-өйкөм ҡарағусҡыл йәшел ҡыуаҡлыкты ла таныным – артыш!

Беҙ, яусылап барыусылар, һүҙебеҙҙе һүҙ итеп ҡайттыҡ, ҡыҙҙың ата-әсәһен күндерҙек. Сабирҙың, тубығы бөгөлмәгәс, һыңар аяғын саҡ ҡына һөйрәберәк

атлауына иғтибар биреүсе булманы ла. Заһираға мәктәптә эш буласағын да әйткәс, ҡоҙалар никахты ҡыҙыулатып ебәрҙе: ҡыҙ яғында туйҙы – август башында, ә беҙҙә бер аҙна үткәс тә уҙғарырға һүҙ ҡуйыштылар. Ысын, нимәгә һуғым ваҡытын көтөп ятырға, элекке заманмы ни?

Заһираны Мәүлиҙә, Менәүәрә менән яҡынайтып өлгөрҙөм, улар уҡырға киткәнсе. Сөгөлдөр баҫыуына ла бармай сараһы юҡ, барҙы, эшләне. Тәү ҡараш-та ғорур килеш-килбәте, киҫкенерәк хәрәкәттәре, баймаҡтарса башын текә йөрөтөүе менән шөбһәләндерһә лә, килендең уңғанлығын, тәкәббер булмауын толпарлылар тиҙүк аңланы һәм үҙ тупрағына ихлас ҡабул итте.

28

Тәбиғәттең тағы яҙы бөрөләнде, сәскә атты, емешкә уҙҙы, ә йәйе, шул емешкә ем бирәм тип, бар йылыһын, наҙын, һутын бирҙе лә төҫ ташланы, көҙгә юл ҡуйҙы. Тап шул мәлдә, әбейҙәр сыуағында, яңғыҙым ғына Толпарсыҡҡанға барып, уймаҡ түмәләстән донъяны байҡап, уйға тарып ултырҙым. Тынлыҡты күлдә сума-йөҙә кинәнгән өйрәктәр генә һиҫкәндерә – йылы яҡҡа йыйыныуҙары… Ҡағараҡ тигәненең ҡанаты шаҡмаҡлы, шахмат таҡтаһы кеүек. «Ҡағараҡ, ҡағараҡ, йөҙөп килсе ярғараҡ, ҡанатыңды йәй ҙә, сатраш уйнайыҡ, әйҙә!» – тип саҡырғы килә уны. Мәрйенгүҙ өйрәктәр ҙә суҡылдашып йөҙөп йөрөй, суҡыштары күгелйем ҡара, күҙҙәре мәрйен һымаҡ. Был гүзәллек менән хушлаштым да туп-тура мәктәпкә йүнәлдем.

Һәм ундағы «суматоха»ға сумдым. Был – Заһираның һүҙе. Педучилищеның дөйөм ятағының коменданты теленән төшөрмәгән һүҙ икән. Көн дә мыжып, бүлмә һайын инеп, тикшереп йөрөй, өҫтәл-тумбочкала ваҡ-төйәк әйберҙе, килештермәйерәк йыйыштырылған урын-ерҙе күреп ҡалһа, пыран-заран килтереп, өҫтәп туҙҙырып бөтә лә: “Что за суматоха!”– тип сығырынан сыға, ти. Быға са хәрби училище ятағында комендант булған, имеш.

Әлеге көндә иң ҙур суматоха – комсомолдың 50 йыллығына әҙерләнеү. Мәскәү комсомолы уйлап сығарған ҡайһы бер инициативалар Толпарлыға ла килеп юлыға. Мәҫәлән, улар 2018 йылда йәшәйәсәк быуынға бөгөнгөләр исеменән мөрәжәғәттәр, нәсихәттәр, шәхси хаттар яҙып шешәләргә һалыу һәм уларҙы, иҫтәлекле ярлыҡтар тағып, билдәле урынға күмеү йәки һыуға ағыҙыу менән мәшғүл икән. Беҙ ҙә мауығып алдыҡ ошо эш менән: тағы ярты быуаттан, ВЛКСМ-дың 100 йыллыҡ юбилейында табып алып уҡыһалар беҙ яҙғанды, ҡыҙыҡ таһа?!

Мин ике хат яҙҙым. Береһен, ҡалай һауытҡа һалып, ергә күмдем, икенсеһен, шешәгә тығып, Күрәнлегә ағыҙҙым – Иҙелгә, шунан Камаға барып етер, бәлки, Волга тулҡындарында бәүелер, кемдер, ҡасандыр тотоп алыр, асып уҡыр ҙа эс серҙәремде белер (русса яҙҙым). Адресымды ла ҡуйҙым, яуап алырмын һымаҡ тойолдо.

Шешәләге хатҡа сисә алмаған йомаҡты ла яҙып ебәргәйнем: Кәбирҙе яратаммы, әллә Фатихтымы?! Йөҙ, ә, бәлки, мең йылдан берәү асып уҡыһа, шаҡ ҡатыр. Ул заманда мөхәббәт әллә булмаҫ та? Нисек булмаһын?! Унһыҙ тормош та бөтәсәк тәһә? Ана, тәүтормошта йәшәгән боронғо ҡәрҙәш Уҡтау мәмерйәһенең таш ҡабырғаһына дәү мамонт, ҡурҡыныс аждаһа йылан, ҡанатлы толпар һәм сәскә һүрәтен төшөргән – тимәк, тәүтормошта уҡ булған ул мөхәббәт. Эйе, мамонтты – көс, йәшәү сығанағы, аждаһаны – яуызлыҡ, ҡурҡыу тойғоһо, толпарҙы хыял образы тип ҡабул итһәң, сәскә – һөйөү символылыр, моғайын? Әлмисаҡтан мөхәббәтте белгән, уның хаҡына ожмахтан ваз кискән Әҙәм вә Һауа тоҡомдары тағы йөҙ йылдан ғына нишләп ул илаһи хистән мәхрүм булһын?!

Күҙ асып ҡына йомған арауыҡ бит ул тарих өсөн йөҙ йыл: кемдер, ниҙер бар булыр был донъяла, кемдер, ниҙер юҡ булыр... Ә хис – мәңгелектер. Кеше заты һаман да мөхәббәт тигән тәү хистән тармаҡланып, мең сүрәткә кергән яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, тоғролоҡ һәм хыянат кеүек ҡылыҡтар ҡамауында йәшәр кеүек? Һөйөү, моғайын, һәр заманда ла кеше өсөн иң ғәзиз, зарури тойғо булып ҡалыр, сөнки фанилыҡ һынауҙары аша үтеп, ысын донъяға күскәс тә Әҙәм вә Һауаның Аллаһ алдында аҡланыр сәбәбе лә тик мөхәббәттер – ошо хис арҡаһында лаһа ... Яңылыш уйлаһам, Раббым, зинһар, ярлыҡа, зиһен ҡеүәһен миңә лә (уйлар өсөн!) Үҙең биргәнһеңсе.

* * *

Шулай, йәшәйештең үҙем уйлап тапҡан һәм ҡапылда үҙем дә сисә алмаған йомаҡтары менән ҡыялып йөрөп ятҡанда, ысынбарлыҡ мине ҡаты иттереп ҡаҡҡа баҫтырып ҡуйҙы ла күҙенә ҡаратты. Саҡмайылғанан Хәтимә апай мәктәпкә шылтыратты. Унда былтырҙан бирле телефон бар, рация шикелле. “Әсмә килеп әйләнгәйне, Нурия, нисек тә ваҡыт табып, мине күрһен әле, мотлаҡ күрһен, тип ныҡытты. Үҙең менән һөйләшергә бик теләгәйне, шул көндө элемтә насар булды, тота алманыҡ…” – Хәтимә апай тағы нимәлер әйттеме, рация сыйылдап һыҙғырып ебәрҙе лә, ҡолаҡты шаулатып, туҡтап та ҡуйҙы.

Ни булды икән? Көҙгө каникулға тиклем аҙналап ваҡыт бар ҙа, әхирәтем ныҡытҡан бит, мотлаҡ, тигән. Йәкшәмбе көндө иртүк сыҡтым да киттем Айыусыға. Бер үҙем. Саҡмайылғаға иртәнге һауымды алырға барған машинаға ултырып барҙым, ул яҡҡа сослоҡ бар, шофер ағай менән кистән үк һөйләшеп ҡуйҙым. Әшрәфте бимазалап торманым.

Түҙеп торғоһоҙ сере барҙыр Әсмәнең. Хәсрәтен уртаҡлашыр, эс бошоуын баҫыр өсөн генә саҡырмаҫ эш өҫтөндәге кешене – холҡон беләм әхирәтемдең.

Саҡмайылғанан йәйәү атланым. Көн аяҙ, сыуаҡ ҡына. Урман юлынан һәләт кенә атлап барған ерҙән шатун айыу, бәләкәй сана эҙе, бысаҡ менән беҙҙең яҡтарҙағы иң көслө йыртҡысҡа ташланған урман ҡыҙы күҙ алдыма килеп баҫты, сөнки Әсмәне ҡотҡарып ҡалған ҡороған ҡарағай тапҡырына барып еткәйнем. Туҡтап, тирә-яҡты байҡап алдым. Тығыҙ үҫкән ҡайындар араһынан көн яҡтыһы төшә: япраҡтарын ҡойғас, улар һирәгәйгән кеүек күренә. Барыбер шомло, олондарға бәрелеп-һуғылып ел олой, ул, моғайын, юрамал шулай ҡылана, мине шомландырыр өсөн. Ашыға төштөм, ауыл бынан алыҫ түгел, мөрйәләрҙән сыҡҡан төтөн есен танауым шәйләй. Ике генә мөрйә унда: ике әбейле Хан-солтан бабайҙыҡы ла, Әсмәләрҙеке. Уңарсы эт өргәне ишетелде. Һунарсы ҡарттың Юлбарыҫы – һирәк кенә, ҡарлыҡҡан, ялҡау тауыш менән, ә Әсмәнең атаһынан ҡалған Аҡҡолағы дәртле өрә, унын, кәртәгә алғы тәпәйҙәрен һалып, урман ауыҙынан килеп сығырымды көтөүен дә беләм, сос томшоғона минең еҫем күптән барып эләккәндер – бер-беребеҙҙе беләбеҙ ҙәһә.

Әсмә йүгереп ҡаршыма сыҡты, ҡыҫып ҡосаҡланы – ҡабырғаларым мыйт итеп бөгөлөп ҡуйҙы, шикелле. Шунан, бейек ярҙан сөңгөлгә һикерергә йыйынғандай, тәрән итеп тын алды ла күҙемә ҡараны. Ярабби! Әхирәтемдең ҡарашында бөтәһе бер юлы сағыла: ҡурҡыу, оялыу, икеләнеү, ғәжиз булыу… Нимә булған минең сая дуҫыма?! Ниндәй бәләгә тарыған?

– Әйҙә, әлморон йыйып киләйек. – Әсмә мине Сәтләүек урманы яғына әйҙәне, ҡулыма талсыбыҡтан үрелгән кәрзин тотторҙо. Үҙе лә үрә ундай кәрзиндәрҙе, айыусыларҙың боронғо кәсебе ләһә. Һалабаш һалырға, йүкә һуйырға, септә һуғырға, арҡан ишергә – уларҙы ғына ҡуш ине...

– Ҡыҙый, яҙылышы сәтләүек булһа ла, беҙҙә сәртләүек тиҙәр, иветә? – тине Әсмә. – Быйыл күп итеп йыйҙыҡ, һиңә лә биреп ҡайтарырмын.

– Сәртләп ярылып тороуына ишаралаһаң, сәртләүек тиеү дөрөҫөрәктер ҙә әле, – тинем дә туҡтап, туп-тура һораным: – Албырғатып маташма, ни булды, ҡыҙый, һөйлә!

– Ауырға ҡалғанмын! – Бынын ына сайҡалып ҡына ҡуйғайным, аптырауымдан. – Әшрәфтән! – тигәс, ултыра төштөм, ярай ҙа ауып китмәнем.

– ?! – Һорауымды өн итә алманым. Әсмә аңлап тора барыбер. Әҙерләнгәндер был һөйләшеүгә, йәшермәй теҙеп әйтте:

– Ете йәнбеҙ ҙәһә (бабай менән әбекәйҙәрҙе лә хисаплай), аҡтан да яҙһаҡ, нишләрбеҙ? Ике баш йылҡы, һыйырыбыҙ бар, һарыҡ-кәзә… Бесәнде күп итеп әҙерләгәйнек, Рауил ағай сабышты. Йыйырға әбейҙәр ҙә эшкинде. Ә бына ташып алыуы – бер бәлә. Ат менән дә хитланыр инек тә, сабынлыҡ алыҫыраҡ. Ямғырға китһә, анау Серек күл, һалабаш күле инде, беләһең, шуның аръяғындағы соҡор аша үтермен тимә. Сана юлы төшкәнсе көтмәй хәлең юҡ, улайһа. Малың күтәртеп ятһа, яман даһа. Әшрәф, туңға һөрөүгә төшкәнсе ташып ҡуям бесәнегеҙҙе, тигәс ни, һөйөнөп риза булдыҡ. Шунда… Ике кәбән ине, елле кәбәндәр, бабаҡайҙы оҫҡа ҡуйып, аҫтан үҙем һелтәп тороп ҡойғайныҡ. Өс трактор арбаһы булды ла ҡуйҙы. Һуңғыһына Әшрәф менән икәүләп кенә килдек, Рауил ағай Артурҙы тәрбиәләргә ҡалды, ҡуҙғатмай оҙаҡ ултыртһаң, тиҙүк тәне сейләнә башлай… Шунда… Бесәнде тейәп бөткәс, яҡында ғына сөбөрләп ағып ятҡан шишмәгә төшөп бит-ҡулыбыҙҙы йыуып, өҫ-башыбыҙға йәбешкән үлән ҡабығын ҡаҡҡылап алдыҡ та ҡайтырға йыйындыҡ. Әллә нимәгә эләгеп, һөрөнөп йығылдым да киттемсе. Үҙемә ҡыҙыҡ булды, һикерә һалып тораһы урынға, ятҡан еремдән һыным ҡатып көлөргә тотондом. Гонаһ шомлоғо… Әшрәф ҡул бирә, ә мин һаман шарҡылдайым. Уға ла йоҡто кәйефем: көлә-көлә эргәмә, һарғайған япраҡтар араһынан ҡурпылаған йәшел үләнгә сүкәйҙе. Шунан… Уның күҙ ҡараштары үҙгәрҙе, тәүәккәлләндеме-нишләне, әйтә алмайым – үҙгәрҙе инде. Ҡапыл ҡулымдан тартып аяҡҡа баҫтырҙы ла ҡосаҡлап алды. Көслө икән, ҡара эштә бит… Беләктәре ҡорос кеүек, ҡосағында үҙемде ҡупшы ҡурсаҡтай хис иттем. Эре һөйәкле әзмәүер Әсмә урынына… иренем дә ҡуйҙым. Балауыҙҙай… Шунан… Әшрәф мине шашып үбергә тотондо. Үҙе туҡтауһыҙ “аҡҡошом” тип ҡабатлай. Нурия, ҡыҙый, бик ныҡ, бик-бик ныҡ аҡҡош булғым килде шул минутта, хатта әйләндем дә аҡҡошҡа, биллаһи! Ҡулдарым ҡанатҡа әүерелде лә үҙемде наҙлаған затты һөйҙө һәм, һуштан яҙҙырып, күккә осороп алып китте… Иҫемә килгәндә, әле генә көләс күктең ҡашы төйөлгән, ҡара болоттар ҡуйырған, ә ҡанаттарым, ҡәҙимге ҡулдарым булып, көҙгө аҡлан һалҡынына күшеккәйне... Шунан… Әшрәф менән, бер-беребеҙгә күҙебеҙҙе лә күтәреп ҡарамай, ҡайттыҡ, бесәнде бушаттыҡ. Ул, сәй эсеп тә тормай, Толпарлыға ашыҡты. Артынан ҡапҡаны ябырға сыҡҡанымда, кабинаһынан һикереп төшөп яныма килде лә: “Хуш, аҡҡошом, ғәфү ит!”– тине. “Хуш,– тинем мин дә, – үҙем ғәйепле.”

– Ә ул беләме һинең был хәлеңде? – Ниһайәт, телемде бикләгән йоҙаҡ асылды.

– Күрешкәнебеҙ юҡсы. Ҡайҙан белһен. Белмәһен дә! Ҡыҙый, ант ит: әйтмә уға!

– Ант итмәйем-итеүен, әммә әйтмәм, һин тыйғас.

– Нишләйем икән, ҡыҙый? Башымды ташҡа ороржаймын. Ҡалдырһам, эсем ташмайғас, нисек күҙенә ҡарармын Артурымдың? Һуңғы арала ул ниҙер һиҙенә һымаҡ, шулай тойола ғына микән, үҙем шөрләп йөрөгәс? Кешеләр нимә тиер? Ғәрлеге ни тора, уф! Суфия апай көн дә башымдан һыйпап ала: «Фәрештә бит син, Әсмә балакай», – тип. Бөгөн, шул һүҙен әйткәс, уны ҡосаҡлап үкһеп

илап ебәрҙем. Ауырымды төшөртөүҙән, абортҡа барыуҙан башҡа сарам юҡтыр, ҡыҙый?!

– Аборт! – Был ҡурҡыныс һүҙҙе ҡабатлап ҡуйҙым, ҙур, имәнес бер ғифритте күргәндәй ҡалтырандым үҙем.

– Нишләйем һуң?!

Әхирәтемдең халәтен аңларға тырышып, үҙемде уның урынына ҡуйып, уратып-уратып уйланым, ләкин яуап тапманым. Улай ҙа әйттем:

– Тап та ҡуй!

Гонаһымдың тере шаһиты булып үҫерме ул бала?!

– Бәлки, гонаһ түгел, ә Хоҙай иземелер был, Артурҙан бала таба алмаясаҡһың бит, Әсмә?

– Ул үҙе сабый хөкөмөндә. Уны бағыр урынға, тыума бала ҡарармынмы? Юҡ, ҡыҙый, хәл иттем: төшөртәм! (Ошо һүҙҙе ишеткәс, яралғы рәүешемдә кисергән ҡурҡыуым алыҫтан, ҡан хәтере шаңдауынан килеп, тағы тетрәндерҙе.)

– Мине лә кесе йыһанда сағымда әсәйем саҡ һәләк итмәне… Тик уның сәбәбе һинекеләй үк аянысла түгел ине, – тип ҡуйҙым. Әсмә башҡа нәмә хаҡында ишетерлек, уйларлыҡ халәттәме, – мәгәр һүҙен дауам итте:

– Районда бер медсестраны беләм, таныш врачы юҡ түгелдер, ярҙам итер. Аяғына йығылһам, ашаҡлап үтмәҫ әле. Ҡыҙый, һине саҡырыуым да шунан: минең менән бер-бер хәл булһа – аборттан үлгән ҡатындар бар, ти ул – минекеләрҙе ташлама, зинһар.

– Тәүбә, тиең!

– Тәүбә-тәүбә!

Көҙгө каникулда район үҙәгенә Әсмә менән икәүләп почта машинаһына ултырып барҙыҡ. Шундай кисерештәр ҡамауында нисек яңғыҙын ҡалдырайым? Һылтауын таптыҡ: миңә китаптар кәрәк булды, уға – дарыу-фәлән.

Теге медсестра ярҙам итте. Таныш гинекологының дежурына үҙенекен дә тап килтереп, Әсмәне кистән үҙе менән эйәртте лә, иртүк етәкләп алып ҡайтып, миңә тапшырып китте. Эш хаҡы әҙ булғас, икешәр смена эшләй икән. “Температураһын үлсәп тор, хәл алһын берәй көн, шунан ҡайтырһығыҙ, – тип киҫәтте, – әтеү ул бөгөн үк юлға сығырға ашҡына”.

Шунда, кем менән килеп инде был медсестра апай, тиһәм, Әсмә ләһә, йөҙө һурылған, ҡаны ҡасҡан, ҡулдары һәленеп тора. Ә күҙҙәре, ҡурҡҡан кейектекеләй, йәл итеп ҡарай. Һүҙһеҙ генә ҡосаҡлаштыҡ та оҙаҡ ҡына баҫып торҙоҡ ишек төбөндә…

Сәғәттән ашыу ваҡыт үткәс кенә, карауатта күҙен йомоп ята торғас, ниһайәт, телгә килде Әсмә:

– Мин хәҙер үлемдең ни икәнен беләм, ҡыҙый, – тине. – Һунар иткәндә ҡулым ҡалтырамаған, кейектәрҙе атҡанмын, бер ни аңламағанмын. Бүтәнсә атмам. Бүреләр ҡоторһа йә үҙемә шатун айыу ташланһа ғына. Нурия, тим! Ҡарынымдағы яралғының ғүмере өҙөлдө. Үҙем ихтыяр иттем… Операция тиҙәр абортты, үлтереү тимәйҙәр. Ҡыҙый! Һуңғы минутта сабыйымды үлтермәҫкә, ҡотҡарырға уйлап, операция өҫтәленән тороп китергә уҡталдым да йәнемдән йән киҫелгән тауышҡа иҫемде юғалттым. Аяуһыҙ тимер ҡайсы… Аҡ халатлылар: «Ҡан… Укол… Ҡан баҫымы…» – тип һөйләнәләр, минең өсөн борсолалар. Ә бит мин – енәйәтсе, йән ҡыйыусы, ысыны шулай.

– Өҙгөләнмә ул тиклем, Әсмә! – Тағы ни тип йыуатайым һуң әхирәтемде был мәлдә? Уның кисергәндәрен күҙаллап, үҙемдең дә эсем киҫеп-киҫеп ауыртасы. Унда, бала яраласаҡ кесе йыһаныма, шөбһә үтеп инде – шул һыҙландыра. Ә әхирәтемдең әрнеүҙәре унлата, йөҙләтә әсерәктер.

Медсестра апайға рәхмәт инде: Артурҙы тәрбиәләргә кәрәгер тип, эшенән ярты шешә спирт, бинттар килтерҙе, аспирин, анальгин, валидол һымаҡ дарыуҙар тотторҙо, кәңәштәр бирҙе. Оҙаҡ түшәктә ятыуҙан тән тишелә башлай, шунан һаҡлағыҙ, тип иҫкәртте. Был турала ҡартәсәйем дә әйткәйне, «ятыу зәле» икән ул хәлдең халыҡта аталышы, Әсмәне үлән төнәтмәләре әҙерләргә өйрәткәйне.

Район үҙәгенән Өфөгә барған автобусҡа ултырып ҡайттыҡ. Әлеге почта машинаһы ултыртыр ине лә, Әсмәне кузовта нисек алып ҡайтаһың: йә ел бәрер, йә өҙлөгөп ҡуйыр. Бәхеткә күрә, таныш-тонош осраманы. Ауылға теймәһә лә, Оло юл аша уҙа бит, ә унан – бер саҡрым да юҡ.

– Ҡыҙый, Саҡмайылғаға барған молоковозға һыңланыҡ, уның шоферын Айыусыға алып барып еткертергә лә өгөтләп булыр ине, юғиһә. Әшрәфкә өндәшәйекме әллә? – Шулай тиеремде көтөп кенә торған, ахырыһы, әхирәтем:

– Өндәшәйек, – ти һалды. – Бөгөн дә ҡайтмаһам, Артур асыуланыр. – Уға һынап ҡарап ҡуйғанымды һиҙгәс, төҙәткән булды: – Йә үпкәләр…

Уф, асыуланыу түгел, һикереп тороп осора һуҡһа ла бер һүҙ әйтмәҫ инем ул бисара егеткә! Юҡ шул, уның тән кәре лә, зиһен ҡеүәһе лә кәмей генә бара.

Әшрәф, тракторын баҫыу ситендә ҡалдырып, мотоциклы менән тамаҡ ялғарға тип ҡайтып ҡына тора инеме, мине алыҫтан уҡ күреп, ҡаршыма төштө. Моторы тырылдап туҡтамаҫ борон уҡ һөрәнләне:

– Һөйөнсө! – Мин өндәшмәгәс, эргәмә килеп, шыбырлап тигәндәй әйтте: – Фатих ҡайтты, тим дәһә. Бөгөн йомош менән Өфөгә китте. Һөйөнсөһөнә нимә бирәһең?!

– Уң ҡолағың үҙеңә булһын. Ә Харис? Ул ҡайтмағанмы ни?

– Ул сверхсрочник булып ҡалған, ти.

– Һы…

– Нурия, һиңә нимә булды?– Әшрәф текләп күҙемә ҡараны ла ҡабатланы: – Ни булды, йәшермәй әйт!

– Миңә бер ни ҙә булманы. Әсмә…

– Әсмә?!

– Айыусыға алып барып ҡуя алырһыңмы Әсмәне? Килгәйне… йомошҡа.

– Әйҙә. Тиҙ генә әйләнергә кәрәк, бригадир һиҙеп ҡалһа, кәрәкте бирер. «Чемпион булдым тигәс тә» ти ҙә бәйләнә.

Үҙем дә ултырып барып, әхирәтемде күҙҙән ҡалдырып киттем яҡындары янында. Шундуҡ, Әшрәфтән тороп ҡалмаҫтан, кире әйләндем. «Ҡапылда Артурҙы бер үҙең күтәрмәй тор! – тип шыбырланым Әсмәгә, хушлашҡанда. – Әтеү, үҙең беләһең ни булырын.– Медсестра апай ҡат-ҡат киҫәткәйне, ауыр эшкә йоғонмай торһон, ҡанһырап үлеп ҡуйыр, тип. Абау, ҡаты итеп әйтә лә ҡуя шул медиктар.

Ҡайтып еткәнсе, байтаҡ ҡына ер бит, уйламаған уй ҡалманы. Тормош шулай көтмәгәндә икенең берен һайлау алдына килтерә лә баҫтыра: йә уңаһың, йә туңаһың. Әсмәне ул бигерәк аяуһыҙ һынаны, берәү булһа, һыныр ҙа ине әле. Аллаһ үҙенең яратҡан ҡолона донъялыҡта ауырлыҡтар бирер, әммә бәндә күтәрә алмаҫлығын бирмәҫ, тигәнде ишеткән бар ҙа... Күтәрер әхирәтем, көслө бит ул. Беләгендә генә түгел, йөрәгендә лә ныҡлыҡ һиҙелә уның, иншалла. Ә бит мин Әсмәне, эсендәге тышында булып, тәбиғилек хозурында ирәүәнләп үҫкән бошонмаҫыраҡ бер ҡыҙ итеп күҙаллай инем элек. Һуңғы аралағы ваҡиғалар, йәш иңдәренә килеп өйөлгән хәсрәт-хәстәрҙәр ныҡ үҙгәртте уны. Ауырға ҡалыуын миңә асҡансы күпме уйланғандыр, үҙен төрлө ҡалыптарға индереп, намыҫ ҡыҫаларына ҡыҫып, алға, киләсәккә, күҙ ташлап та ҡарағандыр. Башҡаса бала тапмаҫын, ғүмергә имгәк булып ҡаласаҡ кешене тәрбиәләп, урман төпкөлөндә ҡартаясағын да төҫмөрләп алғандыр: халыҡ күп урынға күсенмәйәсәк, Артурын, үҙен йәлләгән һүҙҙәрҙән, күҙҙәрҙән азат ул Айыусыла.

29

Алда тағы ни көткәнен белһәм икән шул борсолоуҙар менән солғанғанда! Ҡайҙа булған минең һиҙгерлегем, бәғзе мәлдәрҙә асылып алғылаған өсөнсө күҙем ни ҡараған?! Арығайны шул күңелем, арығайны башым, шуға һиңмайланып йөрөгәнмендер.

Теге ваҡиғаларҙан – аборттан (был һүҙ мәңгегә уйҙан сыҡмаç, уйлаған һайын күҙ алдыма йән киçеүсе өрәк булып килеп баçыр, ахырыһы) һуң аҙналап көн үтте. Мәктәптәге бөтмәç-төкәнмәç мәшәҡәттәр мине әүәлге Нурия халәтенә ҡайтара башланы. Ваҡыт дауалай, тигәнде ишеткән бар ҙа, ысынлап та шулай, күрәһең. Әсмәнең хәсрәте лә баçылһынсы инде – шулай юраным да пионер бүлмәһендә ихластан доға уҡып алдым. Уф, туп-тура Брежнев портретына текләп ултырғанмын, имеш, аңғармаçтан. Тәре түгел дәһә! Тәре булғанда ла, мин – мосолман өммәтенән. Тәҙрә яғына боролоп яңырттым доғамды.

Ә мин бер нисек тә һиҙенмәгән фажиғә һаман яҡынлашҡан…

Мәктәптән ҡайтышлай Әшрәф осраны, колхоз кәнсәләренең тупһаһынан төшөп килә ине. Күпмелер бергә атланыҡ. Дуçымдың йөҙө шат һымаҡ. Айыусы яғында бер эш ҡушҡандар, шуға ҡыуанған икән.

– Лесник ағай рәйестән трактор һораған, Саҡмайылға һәм Айыусы тирәһендә Һигеҙбөгөл аша һалынған күперҙең ике башынан да бураҙна ярып ҡуйырға кәрәк, ти. Янғындан һаҡланыр өсөн.

– Һиңә ҡуштылармы?

– Нәсих ағайға әйткәндәр ҙә, ул арҡырылашҡас, миңә ҡалды.

– Һигеҙбөгөлдө өс тапҡыр аша сыҡҡаным булды Бүреһуҡҡан олатай менән, элек мине йыш эйәртә ине ул урман-ҡырға. Бер үттек баçма аша, ике үттек, бара торғас, тағы һаман шул бер йылға – Һигеҙбөгөл. Саҡрым һайын алға килә лә ята. Ысын һигеҙ ти бит бөгөлө, бишәүһе – тау аръяғында, унда барып еткән юҡ әлегә.

– Әйтәм, беҙҙең механизаторҙар ул йылғаны «радиатор» тип әрләп ҡуя. Бер бөгөлө Малик бай баçыуының уртаһында ята, ярлауы хәтәр, аша сыҡҡанда тракторҙар батып ултырғылай. Ҡайһылыр бер йылды Нәсих ағай ауған шул ярлауҙан, убылды ла төштө, ти. Шуға, ҡапыл аумағанға, иçән ҡалғандыр инде.

– Малик байҙы beләм мин… – тип һалдым. Әшрәфтә уның ҡайғыһы юҡ ине. Мин генә ул, әллә ҡасанғыны хәтерләйем дә торам. Яңыраҡ ҡына шул олатайҙы уйлап бер булдым. Баҡса һымаҡ ҡына итеп кәртәләп, сортлы бойҙай үçтергәнен ололар иçләй. Хәлле крәçтиәндәрҙе кулак тип Себергә һөрә башлағас, һайланма орлоғон Таллы ауылындағы заманына күрә зыялы, һыу тирмәне тотҡан бик бөтмөр бер кешенән йәшерткән, ти. Һөйләүҙәренсә, теге Зәхмәт Әхмәт ағайҙың йөҙйәшәр атаһы булып сыға ул бөтмөр. Аманатҡа хыянат иткән, ҡайҙа йәшергәнемде оноттом, тип һылтаулап, Малик ҡартҡа кире ҡайтарып бирмәгән орлоғон. Әллә ысынлап оноҡҡан. Кем белә. Үҙе лә сәсмәгән, ти ҙәһә теге бойҙайҙы. Шул хәбәрҙәр яңыраҡ дөрөçкә сыҡты: Мөхәрләм бүләре Ильяс менән бер нисә ир, Аҡназар ағай һөрҙөрөп ташлатҡан ерҙәрҙә берәм-һәрәм иçән ҡалған андыҙ тамырҙарын Зәңгәр шишмә яғына күсереп ҡарамаҡ ҡаҙынып йөрөгәндә, бәләкәс кенә ағас һандыҡ тапҡандар, эсендә ҡайын туҙынан эшләнгән ҡумта ята, ә унда – гәрәбәләй орлоҡ, ти. («Ағас башында һандыҡ, һандыҡ эсендә өйрәк, өйрәк эсендә йомортҡа, йомортҡа эсендә…» – Бер әкиәттәге ошондай һүҙҙәр иçкә төштө.) Туңмаған да, бурһымаған да, теп-тере орлоҡ! Районға шалтырата һалғандар, унан килгән баш агроном алтын тапҡандай һөйөнгән, Өфөгә, селекционер

ғалимдарға, ебәрәм, тигән. Берәй заман “Толпарлы бойҙайы” тигән сорт донъяға таралһа, ә?! Иманым камил, Мөхәрләм бүләре бер нисә бөртөктө йоммай ҡалмағандыр усына. Хәләл, икенсе остан – Малик бай бүләре лә бит, үҙ мираҫын йомған, бәс. Сәсеп ҡарар, беҙҙең баҫыуҙар барыбер мәхрүм ҡалмаҫ ул, бойҙайҙан...

Әшрәф иртүк Айыусы тарафына юлланғандыр, мин, Әлфиә апаның йәш ботаниктарына эйәреп,Ҡарауылтау үренә гербарий йыйырға барҙым. Ноябрь бөтөп килә, ағастар шәп-шәрә, ә япраҡтары тап-таҙа, ҡоп-ҡоро булып ерҙә ҡыштырҙашып ята. Саған япрағының төрлөһөнән гөлләмә йыйҙым: һарыһынан, сыт ҡыҙылынан, бурҙат ҡыҙылынан, йәшел көйө өҙөлөп төшкәненән. Берәй һауытҡа ҡуйып, ҡағылмай ғына һаҡлаһаң, ҡыш буйы өйҙө йәмләп торасаҡ. Ләкин… Мине ифрат дәрәжәлә тетрәндергән күренеш арҡаһында саған япраҡтары ҡосағымдан һыпырылып төштө лә, устарын йәйеп, бармаҡтарын тарбайтып, ҡабат ергә түшәлеп ятты. «Өнһөҙ ҡалдым» тигән халәтте аңланым шул минутта, ҡараным да ҡаттым: Айыусы тапҡырында ут бағанаһы күтәрелгән! Уттың эҫе тынын ел шул арала Ҡарауылтауға килтереп тә еткерҙе. Балалар ҙа күреп ҡалды: «Пожар! Урман яна!» – тип һөрәнләп, беҙҙән рөхсәт тә һорамай, ҡайтыр яҡҡа һыпырттылар. Бынан Толпарлы ус төбөндәгеләй күренеп ята, Айыусы улай уҡ яҡын түгел, әммә ҡайһы төштә икәнлеге шәйләнә. Шик юҡ, тап шунда ҡотора янғын. Ҡасандыр мольберт ҡуйып Кәбир торған таш һикәлтәгә баҫып, ауылыма уның күҙе менән ҡарарға, тигән ниәтем бар ине лә, бойомға ашманы – мәле ул түгел. Аптырап ҡалған Әлфиә апаға ҡулым менән Айыусы яғына ишараланым да Ҡарауылтау биленән ҡыялап ятҡан юлға табан йүгерҙем. Унан тураға төшкәс, Ҡырластау ҡабырғаһындағы тар ғына һуҡмаҡтан үтәһең дә Зәңгәр шишмәгә, артабан Һигеҙбөгөлгә барып сығаһың, шунан күпер аша – Айыусы. Физкультура уҡытыусыһы спидометр тотоп үлсәп торһа, моғайын, кәмендә мәктәп чемпионы булыр инем, һәләк шәп йүгерҙем. Хатта яҡынайған һайын ҡайнар ипкене нығыраҡ һирпелгән янғын уты минең тыныма ла ҡабынды кеүек бер килке. Ҡырластауҙан ҡолай яҙҙым, селеккә йәбешеп кенә ҡотолдом. Усымды, бармаҡтарымды сыйҙы-сыйыуын: ҡаным сыҡты, һыҙландым, ә барыбер рәхмәт селеккә – әлдә ул булды. Ҡурҡыу тойғоһо аңыма уяулыҡ өҫтәне, йәнемде аяп, яйыраҡ, ипләберәк сыҡтым был хәтәр һуҡмаҡтың ҡойроғона. Шунан тағы Зәңгәр шишмәгә тиклем спринтер тиҙлеге менән саптым. Һигеҙбөгөлгә барып еткәс, туҡтап ҡалдым: күпер алды яңы ғына, бөгөн генә кәҫ ҡайтарып һөрөлгән, шул һөрөнтөгә еткән дә сигенгән янғын. Әгәр ошо бураҙналар юлын бүлмәһә, аяуһыҙ ут, күпер аша үтеп, ары ташланыр ине. Ә ары – ҡарағас урманы! Алтмыш гектар, ти, Бүреһуҡкан олатай әйткәйне. Йәше етмәгән, тип уға хатта леспромхоз бысҡылары ла теймәне. Урман хужалығы министрлығы ҡушыуы менән, ҡарағаслыҡты уратып, ике йыл һайын янғындан һаҡлау бураҙналары яралар икән. Быйыл килеп тикшергәндәр ҙә күперҙәр тирәһендәге ерҙең һөрөлмәүенә иғтибар иткәндәр. Аллаһ үҙе һаҡлаған бит беҙҙең ҡарағастарҙы, уларҙың тирә-яҡ мөхитен! Ана бит, бөгөн генә тракторы менән янғындан аралап ҡуйған Әшрәф тәбиғәтебеҙҙе.

Ярты саҡрым тирәһе ҡалды Айыусыға. Бигүк бейек булмаған ҡалҡыулыҡ аръяғында ул, өйҙәре бынан күренмәй. Ҡырластауҙа сағымда ауыл яна ине әле. Ике мөрйәнән генә төтөн сығарып көн итһәләр ҙә, унда эйәһеҙ тороп ҡалған ҡаралтылар, кәртә-ҡуралар әҙ түгел. Әбрәкәйең янһа ла йәл дәһә… Шулайтып, фекеремде төрлө яҡҡа ебәреп аҙаштырырға маташам, Әсмәләрҙең үҙҙәре хаҡында уйламаҫ өсөн. Уф! Әсмә, ҡыҙый, иҫәнме һин?! Күҙ алдыма ҡот осҡос күренештәр килеп баҫа… Ниһайәт, ҡалҡыулыҡтың түбәһенә менеп еттем дә күрҙем: Айыусы юҡ, уның урынында өңрәйеп, төтөн ҡатыш боҫ сығарып уһылдаған ҡурҡыныс баҙ хасил булған.

…Һалҡынса көҙгө иртә. Ҡояш күктән тап-таҙа итеп йыуылған быяла аша ҡарай, гүйә, йәйге кеүек ҡайнар, сағыу түгел. Тирә-яҡта илаһи тынлыҡ, ошо халәткә күндәм ризалыҡ хөкөм һөрә. Ҡышҡа әҙерлек тамамланған. Урмандағы тереклек өңөнә, ҡыуышына ризыҡ йыйған, әле шул сырсаһын сарыфламаҫ өсөн ҡырҙа йөрөп туҡлана. Ҡырмыҫҡалар иләү ишектәрен тотош бикләп бөтмәгән, көн сыуағына сығып ҡыҙыналар ҙа шул йылыны эскә ташыйҙар. Үрмәкселәр ау үрә лә ау үрә, меҫкен бөжәктәр уларға тыз-быз килеп эләгеп тора. Япраҡтар ҡойолғас, был нескә ауҙар ҙа күҙгә салына һәм, тейә ҡалһаң, улар сыңлатып, иң юғары ноталарҙы алып уйнап ебәрерҙәр һымаҡ.

Рәссам ҡылҡәләменә лайыҡ ошо гүзәл мәлдә, Айыусы яғына ашҡынып, бер ҡыҙ тәпәйләй. Аяҡ аҫтындағы таш-тошҡа эләгеп-һөрлөгөп тә ала, әммә, күҙе тонғандай, бер нигә иғтибар итмәй атлай бирә. Йөҙөндә көсөргәнешле, асыулы ҡиәфәт ҡатып ҡалған, ирендәре ҡыҫылған. Эсендә үс ҡайнай уның, көнсөллөк зәһәре, үт булып һытылып, бауырын талай, мин-минлеге тынын ҡыҫа. Кем һуң был бисара ҡыҙ бала? Миңзифа?!

Әшрәф Айыусыға һирәкләгәс, Артурҙың ата-әсәһе лә хәҙер унда булғас, йөрәге тынысланып ҡалғайны уның. Айҙан ашыу инде егет – тик Миңзифаныҡы ғына! Әшрәф уға иғтибар бирмәһә лә, вәғәҙәле ҡараштар бүләк итмәһә лә, ҡыҙ шулай уйлай, шуға ышанырға тырыша. Һирәк-һаяҡ клубҡа килеп, бер кемгә һүҙ ҡатмай гармун тартҡан егеттең кемде һөйгәнен белеп торһа ла, ул барыбер минеке буласаҡ, тип ҡырҡыша Миңзифа, Әсмәнән үлеп көнләшә. Тамағына аш бармай, һарғайып бөттө ҡыҙ. Әсәһе, Көнсөл Маһый, һиҙә, көнләшеү ғазабын аңлап, ҡыҙын йәлләй. Апайҙың был ҡушаматы миңә генә мәғлүм, сөнки үҙем таҡтым, анау юлы бинахаҡҡа әсәйемде рәнйеткәне өсөн.

Яуапһыҙ мөхәббәткә тарырға яҙмаһын икән. Салпа апайҙы, ана, ни хәлгә төшөргән?! Тарыһаң да, шул әрнеүҙе күтәрергә, үткәреп ебәрергә көс бирһен Хоҙай! Икең дә бер-береңде һөйөп тә ҡауыша алмау бар – ҡәһәрле һуғыш күпме йәш йөрәктәрҙе һәләк иткән, мәңгелеккә айырған. Тыныс тормошта, исмаһам, һөйөүеңде бер-берәү кире ҡаҡҡанда ла, уны юҡ-юҡта юлдарыңда осратып, күргеләп тороу бәхете насип.

Миңзифаның әхирәте лә юҡ шул. Түрә ҡыҙымын типме, үҙен бәләкәйҙән эре тотто, тиңдәштәрен биҙҙерҙе. Әсәһе уға кәңәш бирерлекме? Өләсәһе лә кесе улында йәшәй, күрше районда. Татар әбекәй әйтмешләй, мине генә ул ике яғымда ике фәрештә ҡурсалап тора. Көнләшеү – иң алама ғәҙәт, сир менән бер, Ҡөрьән дә тыя ул гонаһтан, ти ҙәһә ҡартәсәйем. Өләсәйем көндәше Гөлшәһүрә инәй менән ҡунаҡҡа барышып йөрөй. Шуларҙы ишетеп-күреп үҫкән минең күңелемә көнсөллөк сире йоғонмаҫтыр, шәт .

Әшрәфтең тағы Айыусыға киткәнен ишеткәс, Миңзифа, алҡымынан алып быуа башлаған ғәрлектән, тыны ҡыҫылып йығыла яҙҙы. Әйтерһең, ағыу йотторҙолар. Ул ағыу ҡанына, бөтә күҙәнәктәренә таралды, аңын томаланы. Әсмәнән генә түгел, Әшрәфтән дә, хатта бар донъянан үс алғыһы килде. Атаһының гаражына инеп, элек, электр яҡтыһы юҡ саҡта, кәрәсин һалып тота торған һауытты сөйҙә эленеп торған еренән алды ла мискәнән бензин һоҫоп тултырҙы. Боронғо һауыт ул – ауылда берәүҙер, еҙ ҡалайынан сүкелгән, йәпле генә тотҡаһы, ҡапҡасы бар. Ҡасандыр уны ризыҡ өсөн тотонғандарҙыр әле. Ҡартатайымдан ҡалған ҡомартҡы, ти атаһы… Шуны, бер нисә ҡап шырпыны сепрәк сумкаға тыҡты ла юлға сыҡты – уның башынан көлөп йөрөүселәр яғына. Әлбиттә, Миңзифа белмәй Әсмә менән Әшрәф араһында аңһыҙҙан килеп сыҡҡан енси яҡынлыҡ тураһында. Аборт хаҡында ла ишетмәгән, ишетһә, минуты менән килеп минең

битемә лә йәбешергә, әллә ниндәй әшәке һүҙҙәр ырғытырға күп һорамаҫ ине – теле яман бит уның. Бер уйлаһаң, Маһый апай йыуаш икән әле. Иренең йөрөмтәллеген белә-күрә, бик һирәк сығырынан сыға. Уны аңлап та була, ир бирмәк – йән бирмәк, тиҙәр. Ә был Миңзифаға Әшрәф кем? Үҙе йөрөй ҙәһә, тикмәгә…

Төрлөһө буламы мөхәббәттең? Миңзифаның һөйөүенә шигем юҡ та, яраталыр Әшрәфте, тик ниңә шул дәрәжәлә үҙендә түбәнһетергә, һағыҙҙай йәбешергә, уф. Әсмәнән генә лә ҡыҙғанмай әле ул, бер көндө Менәүәрәне әрләп киткән, шиғыр яҙып, егеттәрҙе әүрәтәһең, нишана, тип. Менәүәрәме нишана?! Унан һылыу ҡыҙ ауылда юҡ. Сафура бар ине, хәҙер ул ҡырҙа. Ҡалала уҡый башлағас, бигерәк матурайҙы шағирә ҡыҙыбыҙ. Оҙон бөҙрә сәстәре генә ни тора! Әсәһенеке шундай булғандыр йәш сағында, теге Балсыҡлы егетен ғашиҡ иткәндә?

Миңзифа Саҡмайылғаны урап үтте, киҫелгән урман аша һалынған йәйәүле һуҡмаҡтан барып сыҡты Айыусыға. Туҡтап, һағайып ҡаранып та торманы – тура Әсмәләр яғына атланы: кеше йәшәгән йорттоң ҡото тышына сығып тора бит инде.

Был мәлдә, ҡояш төшлөккә үрләй генә башлағанда, Рауил ағай улын һауа һулатып индереп, тамаҡ ашатып алғас, дарыуҙарын эсереп, серем итергә карауатҡа күсереп һала. Суфия апай ҙа ял итә. Әсмә ошо арауыҡта кәбәркәлә һутлыраҡ булып ҡыҙарып бешеп ятһын өсөн турпыша менән ҡаплап баҫырылған баланды баулай, оло мейестә муйыл киптерә, бәшмәк тоҙлай, сәтләүек таҙарта – урмандағы кейектәр шикелле, ҡышҡылыҡҡа сырса хәстәрләй. Тап шул сәғәттә Миңзифа ихатаға барып инде. Әмәлгә таянғандай, Хан-солтан ҡарт Айыусылағы ике һунар этен дә – үҙенең Юлбарыҫы менән Әсмәләрҙең Аҡколағын – эйәртеп урманға, үҙе әйткәнсә, ревизияға киткәйне: ҡайҙараҡ ниндәйерәк йәнлек төйәкләнгән, үрсегәнме, китмәгәнме бүтән яҡҡа, тип аңдырға. Әбейҙәр ни, өшөмтәлгә әүерелгәндәр, өйҙән бик сығып та бармайҙар: төҫ ташламаған еңгәләй, көлөп-ялтырап торһа ла, көҙ әле тышта, көҙ.

Әшрәфтең тракторын да күрмәгәс, ғашиҡтар парлашып берәй ҡайын төбөндә һөйөшәләрҙер, тип фаразлап, Миңзифаның тамам зиһене буталды. Өйҙөң бер генә тәҙрә уйылған артҡы яғына сығып, шешәләге бензинды сайыры тышҡа сығып мөлдөрәп ҡатҡан ҡарағай бүрәнәләргә һипте лә, шул тирәлә һерәйеп ҡороған бейек үләндәрҙе көлтәләп йолҡоп, шырпы һыҙҙы. Гөлт итеп тоҡанған ут бармаҡтарын өтөп алғас та аҡылына килмәне, дөрләп янған көлтәне бүрәнәләргә һелтәне. Ялҡын теле шундуҡ ялмап алды өйҙөң ҡабырғаһын, ә эстәгеләр һаман бер ни һиҙмәне…

Трактор тауышын шәйләп, Миңзифа аҙбар ышығына тайшанды. Әшрәфтең, Һигеҙбөгөл күперен бураҙналар менән ҡамап бөтөп, ҡалҡыулыҡты артылған ғына сағы ине. Әсмәләрҙең өйөнә үрт ҡапҡанын күреп йөрәге ҡупты, тракторын бар ҡеүәтенә ебәреп, Айыусы яғына ҡыуҙы. Килеп етеүгә ут тотош өйҙө ялмап алғайны. Ялҡын күккә олғашып бара. Күҙ ҡырыйы менән генә күреп ҡалды: ике ҡарсыҡ бирегә тәнтерәкләй. Тупһала Суфия апайҙы етәкләгән Әсмә күренде лә, уны ҡалдырып, тағы өйгә инеп китте. Әшрәф тә шунда, ут эсенә, атылды. Ҙур бүлмә эстән янмай ине әле, ҡолас етмәҫ эре бүрәнәләр тыштан дөрләй икән. Әсмә менән Рауил ағай коляскала ултырған Артурҙы алып сығырға хитлана. Ҡапыл иң ситтәге өрлөк ишелде, түбәнең шул өлөшө шарт та шорт килеп ҡубарылып төштө. Рауил ағайҙың башына таҡта тейҙе шикелле, ыңғырашып иҙәнгә ауҙы. Әшрәф Артурҙы коляскаһы-нийе менән күтәреп, тышҡа ашыҡты. Әсмә һаман Рауил ағайҙы аяҡҡа баҫтырырға тырышты. Ул арала тағы бер өрлөк ауҙы. Әсмә ялтанып өлгөрҙө, Рауил ағайҙың кәүҙәһе таҡталар, улар өҫтөнә түшәлгән

тупраҡ менән күмелде. Бына-бына түшәм тотош ишеләсәк, өйҙөң тыштан янып өңөлгән бүрәнәләре ауасаҡ! Ошо хәл иткес мәлдә Әшрәф ҡайтанан төтөнһөҙниһеҙ шартлап янып ултырған өй эсенә ташланды. Ут иһә рамдары көл булып, быялалары ҡойолоп төшкән тәҙрәләрҙән ҡыҙыл телен генә түгел, бөтә кәүҙәһен һоноп эскә ынтыла. Әсмә Рауил ағайҙы тупраҡ ҡатыш таҡта араһынан әрсергә серәшә, үҙен үҙе онотоп… Әшрәф менән икәүләп, ниһайәт, ағайҙың һушһыҙ кәүҙәһен һөйрәп сығарҙылар, ишеккә табан ыңғайланылар. Соланды ла ут баҫҡан, тура ишек алдына сыға торған тупһа аша үтерлек түгел. Әшрәфтең иҫенә төштө: үҙ ҡулы менән кәбәркәнән баҡса яғына ишек ҡуйып биргәйне ләһә, Әсмәгә уңайлы булһын тип. Шунда боролдо. Уларҙың сыһырын башҡа яҡтан күтәп торған әбейҙәрҙең береһе, соландың таҡта ишек-фәләне янып йығылғас, иҫен юйып ҡоланы.

Ошоларҙы күҙенән үткәреп, аҡылдан яҙыр сиктә, бесәне-нийе менән осҡон сәсрәп яна башлаған аҙбар янында, инде бер кемдән дә йәшенмәй баҫып торған Миңзифа иһә: «Әшрәф!» – тип йәнасыҡҡа ҡысҡырҙы ла янғын ҡосағына ташланды. Ҡыҙҙың асырғанышлы һуңғы ауазын дүрт ҡабырғаһы ла бер юлы таралып төшкән йорттоң гөрһөлдәүе йотто…

Күктәр ошо фажиғәгә шаһит булды ла, сырайын һытып, илап ебәрҙе. Тик һуң ине, янғын үрте үҙенең яуыз ғәмәлен атҡарып өлгөргәйне. Уттың убыр теле ел ыңғайына Һигеҙбөгөл яғына ла һуҙылды, яңы ғына һөрөлгән ҡара ергә барып терәлгәс кенә ғәйрәте тонсоҡто.

Баҫтырып килгән уттан ҡасып сигенә торғас, кешеләр бәрәңге баҡсаһының ыҙанына барып төңкәлделәр. Әлдә мал-тыуар аҙбарҙа бикле түгел мәл – ирекләләр. Тик ике генә ҡаралтыға үтеп инә алманы янғын – Айыусы клубына һәм балалар йәсләһенә. Тимер башлы был мөһабәт биналар торлаҡтарҙан ярайһы алыҫта урынлашҡайны, шуғалыр.

Ямғыр яуып үтеүгә, район үҙәгенән янғын һүндереү машинаһы килеп етте. Саҡмайылғанан рация аша хәбәр иттеләр микән? Толпарлылар ҙа шылтыратҡандыр, Әлфиә апалар ҡайтып әйтһә...

Мин ахмалға төшөп барып еткәндә, Рауил ағай аңына килгән, ә Суфия апай коляскала ултырған Артурҙың башын күкрәгенә һалып, көй көйләй ине – бәпес бәүеткәндәй. Сирле генә йөрәге нисек күтәрә бынса ҡайғыларҙы, и, Аллам. Сабырлыҡтар бирсе шул апайға, зинһар. Әсмә, береһе: «Самауырым, еҙ самауырым!» – тип, икенсеһе: «Кәртешкәләре лә һәләк булды улыҡайҙарымдың», – тип өҙгәләнгән әбекәйҙәрҙе йыуата. Әшрәф пожарниктар менән һөйләшә. Тәфтишселәр ҙә килер инде, кеше һынлы кеше янғын ҡорбаны булған даһа.

Әсмәгә ҡарап ғажиз булдым: йонсоу, ҡатып ҡалған сырайлы был ят ҡатын… ул түгел! Күҙҙәренә баҡтым – уларҙа өнһөҙ һорау: “Ни өсөн, ниндәй ғәйептәрем өсөн был яҙалар?!” Күккә күтәрелеп ҡараным, эсемдән ялбарҙым: «Әсә наҙынан иртә мәхрүм ҡалған, ҡырағай йәнлектәр менән ҡатар көн итеп, йәшәйештең ҡатҡыл ҡанундарын тойоп-кисереп үҫһә лә, йомшаҡ күңелле, игелекле зат булған әхирәтемдең бер үҙенә шунса һынауҙар ебәрҙең, Раббым, етер ҙәһә!» Атаһын юғалтҡас та бөгөлмәне, тыуым барҙа үлем барын ул, тәбиғәт һәм тәбиғилек мөхитендә тәрбиәләнгән урман ҡыҙы, күнеп ҡабул итә белә. Һөйгән егетенең аянyслы яҙмышын да иңдәренә күтәрҙе. Әсәлек бәхетенән ваз кисте. Инде килеп, тыуған нигеҙе көлгә ҡалды…

Әхирәтемде ҡосағыма һыйындырҙым, исмаһам, яртыһын булһа ла үҙ йөрәгемә бүлеп алғым килде уның ғазаптарының. Тик алып буламы – ҡайғыны

уртаҡлашыу бар, әммә кеше үҙ хәсрәтен тик үҙе генә еңә алалыр. Эргәндә аңлар яҡындарың булһа, еңелерәктер барыбер.

Беҙҙең янға Әшрәф килеп баҫты. Әсмә уның күкрәгенә башын һалды. Бер минутҡа ғына. Шунан, ярамаған эш ҡылғандай, ҡапыл сителеп, Артур эргәһенә китеп барҙы…

Уф! Әҙәм балаларына һерелекте лә биргән Аллаһ, күпмелер ваҡыт шаңҡып торғас, ҡыймылдай башланылар. Әбейҙәр, нимәлер булһа ла ҡалғандыр, бәлки, ул ҡәһәрле уттан, тип һуҡрана-һуҡрана, үҙ нигеҙҙәренең харабаларына табан ыңғайланы, күҙ алдында ҡапыл сауығып киткән һунарсы бабай арттарынан эйәрҙе.

Артабан һуҙылды ла һуҙылды был көн, үтеп китмәҫтәй булды. Үтеп, таң атһа, бөгөн күргән-кисергәндәр, бәлки, төш булып сығыр?!

Әсмәләрҙе өй эсе менән бөтәһен дә район үҙәгенә дауаханаға алып киттеләр. Суфия апайҙың йөрәге былай ҙа саҡ тора, Рауил ағайҙың башы яраланған, ҡулаяғы имгәнгән, Әхирәтемдең әллә нисә урында тәне ныҡ итеп бешкән. Бер Артурға ғына ут ҡағылмаған – йөҙөндә ҡан әҫәре юҡ, әммә күҙҙәре ҡурҡынған. Бәс, әллә зиһене уяндымы, хәтәрҙе аңғарған, ҡурҡҡан даһа?

Уғаса Әшрәф менән һунарсы бабайҙан, әбекәйҙәрҙән шаһитлыҡ һорауы алдылар – төрлө форма кейгән кешеләр килеп тә еткәйне, араларында Сәмиғуллин да бар. Беҙҙән рөхсәт алмайынса ҡуҙғалмаҫҡа тейеш ине тип, "Тиҙ ярҙам" машинаһын әрләнеләр. Енәйәт ҡылынған булһа, хәҙер ғәйепленең эҙенә төшөү ҡатмарлы буласаҡ, имеш. Әшрәф тә, бабай ҙа, сәбәбен белмәйбеҙ, беҙ килеп еткәндә өйҙө тыш яҡлап тотош ут ялмағайны, тинеләр. Ә минең, янғынды Ҡарауылтауҙан күреп ҡалып, туранан йүгереп килеүемде белгәс, тыңлап та бөтмәй, ҡул һелтәнеләр. Тап шул мәлдә формалыларҙың береһе бабайға ҡоромланған бер тимер һауыт килтереп күрһәтте, хужаларҙыҡымы был әйбер, тип төпсөндө. Бабай, күргән нәмәм түгел, тине.

– Ә миңә таныш был һауыт! – Шулай тигәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Ниңә телемде тешләмәнем, тип үкенмәнем. Алдашайыммы ни?

– Хужаларҙыҡымы?

– Юҡ, Аҡназар ағайҙыҡы. Колхоз рәйесенеке. Ҡартәсәйем идарала йыйыштырыусы булып эшләгәйне, электр юҡ саҡта әле, рәйес ошо һауытҡа кәрәсин тултырып килтерә торғайны.

– Шунан?

– Кәрәсинен шәменә һала ла, бушағас, һауытын өйөнә алып ҡайтып китә ине, олатайымдан ҡалған ҡомартҡы тип. Еҙ һауыт ул, алтын кеүек ялтырай торғайны таҙа сағында…

– Янып үлгән ҡыҙҙы ла беләһең, тимәк?

– Бер ауылдан даһа, бәс…

– Килеп еткәндә ауыл янып бөткәйне, тигәйнең дәһә, күрмәгәс, кем янып һәләк булғанын ҡайҙан беләһең?

Әбекәйҙәр күргән – тәҙрәнән, танығандар, атаһы менән йыл да килә торғайны, солоҡ балы, йәнлек тиреһе артынан, тиҙәр. Бәс…

– Һинең «бәс»еңде протоколға индереп булмай, "эйе" йәки "юҡ" тип әйт.

– Эйе. Миңзифалыр…Үҙ күҙем менән күрмәнем дәһә…

– Тағы кемегеҙ белә ине уны? Ә һин, абзый кеше, ни әйтерһең?

– Дөрләп янып ултырған өйгә инеп киткәнен, эйе, күрҙем ул баланың. Сырамытып та ҡалдым, Аҡназар энекәштең ҡыҙына оҡшатып. Урманда инем,

ҡайтып етеүемә тап шул хәлгә шаһит булдым: балаҡай аҙбар яғынан, өй артынан, ҡапыл килеп сыҡты ла ишеге янып ауған соланға инде лә китте, туп-тура ялҡын эсенә.

– Тағы кем күрҙе быны?

– Күрмәнем,– тине Әшрәф. – Ул мәлдә ике кешене кәбәркә яҡ ишектән саҡ сығарып өлгөрҙөм.

– Сәмиғуллин, быларҙан свидетельский показание яҙҙырып алырһың,– тип бойорҙо (әллә прокурор үҙе?) бер олпат ҡына ир. – Ауылдарынан пока сыҡмай торһондар.

– Хәҙер уларға ҡайтырға булалыр?– Сәмиғуллин үҙ бәсен төшөрмәй торған тыныс тауыш менән һораны. – Береһе – механизатор, икенсеһе – уҡытыусы, сәғәтле эштә. – Шунан, яуап көтөп тә тормай, беҙгә: – Барығыҙ, – тине, – беҙ ҡалабыҙ әле. – Һуңғы хәбәрен минең ҡолаҡҡа тиште, аңлап торам, Гуля-Гөлсөмөнә әйтергә ҡуша.

Бисара Миңзифаның мәйетен торомбаштар араһынан табып, кеше күҙенә күрһәтмәҫтән, ҙур тоҡҡа һалып районға – экспертизаға алып киттеләр…

Бына ошо рәүештә ғүмергә хәтеремә һеңеп ҡалды Айыусылағы ҡот осҡос янғындың тарихы – үҙ күҙем менән күргәндәрҙе барлап, күрмәгәндәремде шаһиттарҙың һөйләүенә таянып фаразлап, күҙаллап, фекер остарын ялғап, тойомлап, ахырҙа тәфтишселәр асыҡлап халыҡҡа еткергәндәрҙе лә ҡушып ойошто ул аяныслы тарих.

* * *

Бер һөйгәнем өсөн… Шул әйтемде әйләндереп-тулғандырып уйлап тик йөрөйөм. Бер һөйгәнем өсөн утҡа-һыуға инермен, тип тә бороп ебәрәләр уны. Йәнемде фиҙа итермен, тигәнен дә ишеткән бар. Ишеттем генә түгел, күрҙем дә. Әй, Миңзифа!

Мин, ололар һүҙен тыңлап үҫкән ҡыҙ, башҡа кешенең ғүмеренә генә түгел, үҙ-үҙеңә ҡул һалыуҙың да ислам динендә оло гонаһ һаналғанын беләм. Әй, Миңзифа… Хоҙайҙың миһырбаны киң дә ул… Әҙәм менән Һауаны ожмах хозурынан Ергә һөргәндә лә аҡылынан мәхрүм итмәгән, рух бөтөнлөгөн юғалтмауҙы үҙҙәренә ҡайтарып ҡалдырған даһа. Әй…

Мөхәббәтең ысын булған, инде кем ышанмаҫ. Ә ниңә Әшрәфтең хистәренең дә, күрә һәм белә тороп, ихласлығын ҡабул итә, көнләшеүеңде еңә алманың?! Ғәфү ит, мин дә һине ситкә тибәрҙем, һөйләшеп ҡараһам, бәлки, сигенер инең, күнер инең? Танмайым, минең асылымда ла туҡтауһыҙ көрәш бара – “үҙем”дәр араһында – мин-минлек менән сабырлыҡ, аҡыл менән дыуамаллыҡ, саялыҡ менән әҙәп көрәшә. Сәмсел ғорурлығымды саҡ ауыҙлыҡлап алам ҡай саҡта… Үҙемде үҙем генә еңә алмаһам, ҡартәсәйем, өләсәйем бар ярҙам ҡулы һуҙырға, әсәйем бар, ауылымдың Гуля-Гөлсөм кеүек ебәк телле, Рабиға кеүек баҫалҡы, Фариза кеүек алсаҡ ҡатындары бар. Тоғролоҡло Татар әбекәй, хатта яһил Салпа, уйынсаҡ Ҡарағаш Мәсрүрә, диуанараҡ Гөлбикә апайҙарҙан да нимәгәлер өйрәнергә (йәки киреһенсә, өйрәнмәҫкә) була лаһа – күрә бел, ишетә бел, йә үрнәк ал, йә ғибрәт ҡыл. Әй, Миңзифа… Йәш кенә көйөңә ҡара гүргә индең – һис шуға күндерә алмай яфаланам күңелемде. Тик нишләмәк хәҙер? Әсәңде ҡыҙғанам. Ояһында ни күрһә, осҡанда ла шуны күрә, тигән халыҡ, ҡош балаһына ҡарап, ҡыҙ балаға ла ҡырын китмәгән был мәҡәл – шуны ваҡытында аңлаһын ине лә Маһый апай. Әй...

Шул арала Фатих Өфөнән әйләнеп ҡайтҡан, мединституттағы әҙерлек курсына документ тапшырған икән. Курсты уңышлы тамамлағандар институтҡа имтиханһыҙ инеп китәсәк, ти. Быларҙы миңә Гөлфирә һөйләй. Үҙе быйыл Свердловск юридик институтының Өфөләге филиалына ситтән тороп уҡырға инде, көндөҙгө бүлеге юҡ, ти. Зөмәрә апай пенсияға сыҡты, хәҙер Гөл тарата почтаны, шуғалыр ҙа, белмәгән яңылығы юҡ.

Хәйер, мине бер ни ҡыҙыҡһындырмай... Ниҙер һынды һымаҡ йәнемдә. Һынмаһа ла, сатнаны. Ваҡыт тигән табип имләй алыр микән?

Әлдә кешеләргә ҡитғалар, даръялар аша элемтә тоторға форсат биргән почта бар донъяла, рәхмәт төшһөн уны уйлап сығарыусыға – бер ни ҙә, кемдер беренсе башламаһа, үҙенән-үҙе эшләнмәй. Дуҫтарымдан хаттар осоп килә, уларҙы уҡып сыҡҡас, күгәрсенгә оҡшатып бөкләйем дә, шул күгәрсен мине гөр-гөр килеп йыуата, ҡанаты менән яңағымдан һыйпай, суҡышын терәп, хәлемде аңлауын белдерә…

Мәүлиҙә, ғүмерҙә булмағанса, миңә посылка һалғансы, эсенә һыу буйы итеп хат яҙып тыҡҡан. Олексий техникумын бөткән, шахтала инженер-мастер, ти. Казачка апай йомшара төшкән, «басурманка» ҡушаматы әхирәтемә йәбешмәгән. Ундағылар болғар татарын да, ҡырым татарын да, монгол татарын да, хатта башҡортто ла «татары» тигән дөйөм бер атама менән йөрөтәләр, тип яҙған. Себер татарын һанға ла һуҡмайҙар микән? Бына наҙандар… Ә Мәүлиҙә фәнни темаға мәҡәләләр баҫтыра башлаған, әлегә институт альманахында, ти. «Наукова думка» хәҙер апайың»,– тип фәстергән, украинса. Посылкалап нимә ебәргән, тиһәм, сәнскеле һабағын ҡыҫҡа ғына итеп ҡалдырып киҫелгән, көслө тамырлы (тупрағынан айырмаған) әллә гөл, әллә ҡыуаҡ. Баҡһаң, рауза гөлө икән, сәскәһе зәңгәр буласаҡ, имеш. Ышанмайыраҡ торам һаман: зәңгәр рауза була тиме? Әлфиә апа өсөн ебәргән, ул мәктәп баҡсаһында ҡыҙыл, ал, аҡ, бәрҙәүәй, һары ҡыҙыл раузалар үҫтерә. Ҡайнатылған һөт төҫөндәгеһен сығарып киләм, тип ҡыуанып йөрөй, ә зәңгәре төшөнә лә инмәй ине. Бына лаһа! Донецкиҙа раузаларҙың йөҙләгән төрө үҫтерелә, был, – ташкүмерҙән ҡала, уның иң ҙур байлығы, донъяға таралған даны, тигән әхирәтем.

Ваҡыт алға саба, һәр тыуыр көн үҙ балҡышын килтерә, үҙ заңын иҫбатлай,үҙ көйөн көйләтә. Йөрәгемә ҡаҙалған ҡырҡ шырау-шырпының тағы береһе һынып ҡойолдо, һулышым иркенәйә төштө. Айҙан ашыу көн үтеп тә киткән шул теге янғынға. Әкренләп һынып бөтөр әле ул шырпылар. Әммә, һынғас, тотош сығып бөтмәгәс, осо ҡалыр, беләм.

Зәңгәр раузаны посылка йәшниге эсенән сығармай ғына, һаҡлыҡ менән тотоп, Әлфиә апаларға юлландым. Күңелемдә, гүя, оҙаҡ баҫырылып ятҡан орлоҡ шыта башланы – шатлыҡ орлоғо. Тәьҫирләндем. Йылмайҙым. Ошо хәләтемде юймаҫ элек барып етергә ашыҡтым. Матурлыҡ алып киләм дәһә ҡулымдағы йәшниктә – сәскәләрҙең иң гүзәлен. Әлфиә апа уны бәпләп үҫтерәсәк, таратасаҡ. Бәлки, исемен дә «Әлфиә раузаһы» тип ебәрерҙәр әле толпарлылар.

…Битемә елбәҙәк ҡар бөртөгө килеп ҡунды. Бына – ҡыштан да «хат» төштө!

*(Аҙағы бар.)*

Зиннур Ғәзиз улы Урақсин (1935 – 2007) Ырымбур өлкәһенең Мәксүт ауылында тыуып үҫкән. Морақ педучилищеһын тамамлап, хеҙмәт юлын уҡытыусы сифатында башлай, район гәзитендә эшләп ала. Һалдат хеҙмәтенән һуң Башҡорт дәүләт университетын, унан аспирантура тамамлай. Шунан бирле уның яҙмышы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән бәйле: ябай лаборанттан институт директоры вазифаһына (1988 – 2002) тиклем үрләне, йөҙҙәрсә ғилми хеҙмәт яҙҙы. Ул – филология фәндәре докторы, БР Фәндәр академияһы академигы, РФ-ның атҡаҙанған фән эшмәкәре, БР Фәндәр академияһы вице-президенты, Төркиә лингвистик йәмғиәте ағзаһы... БР Министрҙар Кабинеты эргәһендәге «Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһындағы закон»ды реализациялау буйынса комиссия рәйесе урынбаҫары, оҙаҡ йылдар «Ағиҙел» журналының мөхәрририәт ағзаһы ла булды.

З. Ғ. Урақсиндың фәнни эҙләнеүҙәр өлкәһе ифрат киң ине: лексикология, фразеология, төрки телдәренең грамматик төҙөлөшө, социолингвистика, ономастика һ.б. Ул бигерәк тә төрки телдәре фразеологияһы теорияһын үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе. Уның етәкселегендә егермегә яҡын терминологик, фразеологик, русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлектәр төҙөлдө, тюркологтарҙың халыҡ-ара форумдары уҙғарылды. Ул шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһын ойоштороуға ҙур көс һалған кеше. Академиктың лекцияларын Башҡортостан юғары уҡыу йорттарында ғына түгел, Төркиә, Германия университеттарында ла тыңланылар.

Яҙыусы буларак, Зиннур Урақсин әҙәбиәт һөйөүселәргә тик уймаҡ хикәйәләрҙән генә торған «Күҙ нуры», төрлө йылдарҙа ижад иткән хикәйәләре һәм повестары ингән «Һыу юлы», «Күтәрелә күк томан», «Әрем әсеһе», тәүге романы – «Ҡарат», йәнә «Тәҙрә уйыусы» («Ватандаш», 2007 йыл, № 8), «Каруанһарай» («Ағиҙел», 2001 йыл, № 1) кеүек тарихи әҫәрҙәре менән таныш. Шәхси архивында быҫаса донъя күрмәгән әҫәрҙәре лә бар. Бөгөн иғтибарығыҙға тәҡдим ителгән повесть шуларҙың береһе.

«Повесть яҙҙым әле, төп геройы – халыҡ рәссамы Әхмәт Лотфуллин...» – тигәйне ҡасандыр әҙип «Ағиҙел»селәргә. Үкенескә, икеһен дә – әүҙем авторыбыҙҙы ла, мәшһүр геройын да һағынып-юҡһынып хәтерләргә генә ҡалды хәҙер... Әҫәрҙе матбуғатҡа ғалим һәм әҙиптең тормош иптәше **Венера** ханым **УРАҠСИНА** әҙерләне.



**Зиннур УРАҠСИН**

# РӘССАМ

## ПОВЕСТЬ

*Рәхмәт, рәссам,*
*Үлемһеҙ сер барҙыр*
*Хоҙай менән һеҙҙең арала.*

(К. Кинйәбулатова, “Рәссам”)

Ҡулға эш бармаһа бармай ҙа ҡуя икән. Тотошо менән бушҡа тигәндәй үткән көндәр була. Ижад ғүмереңдән һыҙ ҙа ташла инде уларын. Ижадтан һыҙһаң да, яҙмышыңдан йолҡоп ташлап ҡына булмай шул. Рәссамдың да шундай көндәре була. Әхмәткә улар башҡа ижадсыларҙыҡына ҡарағанда ла күберәк була һымаҡ тойолдо. Бына йәнә өс көнө шулай үтеп китте, башлаған һүрәттәренә күҙгә күренерҙәй бер генә һыҙыҡ та, төҫ тә өҫтәй алманы.

Бөгөн иһә ул иртәнән ниндәйҙер көслө эш ҡомары менән килеп торҙо, ҡатыны Эльзанан, ғәҙәттәгесә, ашыҡтыра-ашыҡтыра йомортҡа бешертә һалып, һемереп-һемереп кенә һөтлө сәй эсте лә оҫтаханаһына ашҡынды. Ә унаһы ҡаланың икенсе башында ине. “Бер йортта булмағанда ла, оҫтаханаңа яҡын йортта ғына торһаң, ниндәй шәп булыр, ваҡыт әрәм булмаҫ ине...” Йәне көйөп тә алды. Шулай ҙа нисәмә тиҫтә йыл өйрәнгән эш урынына барыбер йөрәкһеп килде. Бөгөн икенсе урынға күсергә тәҡдим итһәләр, һис тә риза булмаҫ, моғайын.

Ғәҙәтенсә, ярты юлда уҡ тиерлек троллейбустан төшөп ҡалды ла машиналар геүләп торған киң проспект буйлап түгел, йорттар араһынан, тротуарһыҙ ерҙән, атланы.

Ҡышҡы айаҙ, һалҡын иртә. Әкрен генә иҫкән көнсығыш еле лә күңелгә ниндәйҙер бер төрлө дәрт бирә, йөрәкте елкендерә. Әхмәткә килә-килә эҫе булып китеп, һоро тунының өҫкө төймәһен ысҡындырып ебәрҙе. Һалҡын ҡуйынға инеп, тәнде ҡытыҡлап әллә ниндәй рәхәтлек килтерә.

Бына ул проспекттан эстәрәк икенсе рәттәге аҡ кирбестән ҡоролған дүрт ҡатлы йорттар тапҡырына килеп етте. Һуңғы ҡатындағы оҫтаханаһының бейек тәҙрәһенә ынтылып ҡарап торҙо, дүрт ҡатты бер тында атлап менеп, тимер рәшәткә ишеген шатыр-шотор килтереп асты. Иртәндән тоҡанған дәрт шауҡымы менән тиҙ-тиҙ генә кейемдәрен сисеп, иҫке шифоньерға элгәс, майлы буяуҙарға ҡатҡан шаҡмаҡлы күлдәген, ал яғы алъяпҡыс кеүек итеп тегелгән ләмкәле оҙон салбарын кейеп алды. Ул да шыптырлап тора, майға ҡатҡан ысын эш кейеме инде. Маляр кейеме кеүек. “Нимәнән башларға?” тигәндәй, ҙур рам кеүек станок янында туҡтап, шунда кисә ҡалдырған картинаһына ҡарап торҙо. Башына әллә ниндәй уйҙар килә. “Салауат... Так. Так... – тине ул ысҡырып, бүлмәлә бер үҙе генә булһа ла. – Не то, не то, ах!” Салауат арбала, бығауҙа, тубыҡланған. Тирә-яҡта халыҡ төркөмө өйкөмләшеп, ҡурҡышып ҡарап тора. “Юҡ, Салауатты тубыҡландырырға ярамай. Бығаулы көйө баҫып торһон арестант арбаһында”. Тирә-яҡта айбалталы, һөңгөлө стражниктар. Салауат аҡ күлдәктә, иҙеүе ысҡынған,

муйыны асыҡ, күлдәгендә ҡан таптары. Туҡмағандар. “Ниңә был ҡаһарманға асҡыс таба алмайым әле мин? Был картинаны һуңғараҡ башланым, шикелле. Йәшерәк, көслөрәк сағымда тотонорға кәрәк булғандыр, бәлки? Юҡ, юҡ, ниңә улай? Эшләп сығарам мин уны, тамамлайым барыбер. Не может быть!”

Әхмәт ҡапыл ғына картинаның уртаһына ҡуйылған Салауат батырҙың һүрәтен тотош буяны ла ташланы, йәнә яңы буяуҙар яғырға тотондо. Был юлы Салауатты арба янына ҡуйҙы, бығауҙары ла күренеп тора, уртала дар ағасы кеүек ике бағана ла килеп сыҡты. Улары арбала. Уны шуларға ҡуйып ҡоршап йөрөткәндәр.

Рәссам оҙаҡ ҡарап торҙо-торҙо ла иңе, буйы сажиндай полотноны ҡапыл ғына станоктан алып ситкә ҡуйҙы.

Был ни хикмәт? Үҙенә оҡшамай ҙа ҡуя картинаһы. Ниҙер етмәгән кеүек. “Һүрәткә деталь түгел, рух етмәй, ахыры, минең үҙемә”, – тип уйлап ҡуйҙы рәссам эске бер ризаһыҙлыҡ менән. Шунан стена буйына һөйәлгән картиналарын, уларҙың фрагменттарын берәм-берәм ҡарай башланы. Бына ул үҙенә кәрәкләһен һайлап алды ла, һаҡлыҡ менән генә күтәреп, станокка беркетте. Артҡа китә биреп, айырым бер итәғәт менән байтаҡ текләп торҙо.

Әсәһенең яҙылып бөтмәгән портреты... Рәссамдың үҙе кеүек тулы ғына алһыу йөҙлө, ҡалын иренле, ҡуйы ҡалын ҡашлы, маңлайына, күҙ тирәләренә тәрән һырҙар ятҡан алтмыш тирәләрендәге һылыу ҡатын. Йөҙөнә әбейҙәр төҫө лә инеп етмәгән әле. Башына биҙәкле ҡыҙыл яулыҡ ҡаплаған, уның һайын биттәре алһыуланып янып тора, муйынына эре бөртөклө аҡ гәрәбәле мәрйен таҡҡан. Ҡарашы һағышлы ла, хәүефле лә, башында әллә ниндәй мәшәҡәттәр тулы...

Әхмәт әсәһенең һүрәтенә оҙаҡ ҡына текләп торҙо. “Минең өсөн һаман хәүефләнә лә баһа”, – тигән уй уның мейеһен телеп үтте. Бер нисә төҫ буяуҙы һул ҡулындағы түңәрәк фанер киҫәге өҫтөндә ебетеп, бергә ҡушып, болғатып алды, һүрәттең күрәнһыу төҫтәге күлдәгенә һаҡ ҡына яғып ҡараны, был хәрәкәттәренә риза булған кеүек, күлдәктең төҫөн дә бер аҙ аса биреп ҡуйҙы. “Шулай яҡшыраҡ булыр”. Был уйынан рәссам үҙе лә эске ҡәнәғәтлек кисергәндәй булды.

Эштән туҡтап, әсәһенең моңһоу йөҙөнә йәнә бер аҙ ҡарап торғайны, күңеле тулып, тамағына ауыр төйөн тығылды, күҙҙәренә ҡайнар йәш эркелде. Әхмәт, ҡысҡырып илап ебәреүҙән саҡ-саҡ тыйылып, эстән быуылып һыҡтап алды, иҫенә килгән бер моңдо көйләп ебәрҙе лә, тахта өҫтөндә аҫыулы торған мандолинаһын алып, бер дәртле бейеү көйөн сиртеп ҡуйҙы.

Бына нисәмә йыл инде ул ошо һүрәттән айырыла алмай, асылда уны тамамлап, берәй күргәҙмәгә оҙатҡыһы ла килмәй. Музейға-фәлән бирһәң, әсәйҙе һағынған һайын барып ҡарап йөрөргә тура киләсәк бит. Ә былай эргәлә генә. Донъяла иң яратҡан кешеһенән айырылыр, уның рухын рәнйетер һымаҡ булып тик тора. Әсәһе тиҫтә йыл элек үк донъя ҡуйғайны инде. Хәҙер унан да яҡын кешеһе ҡалманы һымаҡ булып тик тора. Эльзаның тормошта үҙ урыны бар, хистәр донъяһында ул әсәйҙе алмаштыра алмай.

Әсәһенең рәсеме янында рухланып, күңеле нескәреп ултыра биргәс, ул йәнә хисләнеп китте, әсәһенең тамырҙары беленеп торған эре һөйәкле йомшаҡ ҡулдары арҡаһынан ҡаҡҡан кеүек тойолдо. Әхмәттең иҫенә шул нескә тойғоларға иң бай, күңелде иҫертерлек хәтирәләре бөгөнгөләй ап-асыҡ булып ҡалҡып сыҡты.

***

Әсәһе уны бер ваҡытта ла тота килеп арҡаһынан ҡағып иркәләмәһә лә, терпе сәстәрен көслө бармаҡтары менән наҙлы ғына аралауы, маңлайына усын баҫып алыуы иҫенә төштө. Әйтерһең, ошо мәлдә әсәһенең һүрәттәге тубығы өҫтөнә ятҡан көслө ҡулдары хәрәкәткә килде.

Әхмәт иләçләнеп уянып китте:

– Әсәй, һин минең сәсемдән һыйпайһыңмы? Әллә мин төшөмдә күрҙемме? Миңә шундай рәхәт булды.

– Ята бир, балам. Арығанһыңдыр, кисә көнө буйы ат башында йөрөнөң бит. Әле иртә.

– Әсәй, һин мине иркәләйһең, миңә рәхәт тә ул. Ә Мәғнит китеп барһам, кем шулайтып уятыр икән? – тип әйткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

– Ни һөйләйһең, һин, балам? Өйҙә һине ҡағалармы ни? Унда, урыç араһында, нишләмәксеһең?

– Әсәй, кисә беҙ малайҙар менән һөйләштек. Хәтмулла гәзиттә уҡыған, унда ФЗУ-ға алалар икән. Беҙ өсәүләп барырға һөйләштек. Токарға уҡыталар, ти. Минең бер һөнәрем дә юҡ. Һеҙҙең елкәлә күпме ултырайым? Егет булдым тиерлек тәһә?!

– Уныһы ни һөнәр тағы? Ата-бабаң һөнәре лә етмәгәнме ни? ФЗУ тигән эште яманлап һөйләйҙәр бит, балам. Унда эләккәндәр берен-бере ҡаға, ти бит.

– Әсәй, беҙ һөйләштек. Мин егеттәрҙән айырылып ҡала алмайым инде.

Әсәһенең йөҙөнә борсолоу билдәһе сыҡты, ҙур ҡуңыр күҙҙәре моңһоу төç алды, йәшкәҙәп киткәндәй булды.

Әхмәт үҙенә тип ҡалдырып ҡуйған иртәнге йылы һөттө күтәреп эсте лә урамға ынтылды.

Уларҙың өйө өçкө урамда. Әхмәт, түбәнге урамда туҡтап тормаçтан, Ҡыҙыл буйына, Ҡаранйылғаның ҡойған еренә, килде. Һыу ингестә рәхәт, йылға өйөрөлөп-өйөрөлөп ағып ята. Ҡыҙыл буйындағы эре тирәктәрҙә ҡарғалар ҡар-ҡор килеп, яман шаулаша, ҡолаҡ тондорорлоҡ. Бала осоралар, ахыры. Ә Ҡыҙыл өçтөндә балыҡ ҡарпый. “Их, ҡармаҡларға ултырғанда? Моғайын, ҡабыр ине”. Иртәрәк булғанмы, көн һалҡынырыаҡ ине әле. Әхмәт шуға сисенеп торманы, тәпәш кенә яр башындағы йәшел үләнгә ятты. Күктә ҡара ҡарғаларҙың зыҡ ҡубып уйнағанын күҙәтә башланы. Зәп-зәңгәр төпһөҙ күктә аҡ болот киçәктәре артынан оло тирәк баштары сайҡалып, ҡайҙалыр шылған кеүек тойолдо. Ошо хәрәкәтте ҡарап ята торғас, уның башы әйләнеп китте. Шул ваҡыт тирәк башынан ярты тәнен йөн, мамыҡ ҡаплаған, яртыһы шыр яланғас сеп-сей ҡарға балаһы лап итеп яҡынға ғына килеп төштө. Ҡып-ҡыҙыл ауыҙын ҙур асып ҡысҡырырға маташа, тауышы сыҡмай, ыçылдай ғына инде. Әхмәт ҡаршылағы йыуан өйәңке ботағынан ялбыр ҡанатлы төйлөгәндең күтәрелгәнен күреп ҡалды. Был ҡотһоҙ ҡош ҡарға балаһы тәңгәлендә урата башланы һәм уға ҡарап ҡапыл шыҡыйҙы. Әхмәт һикереп тороп, аунап ятҡан тирәк ботағын ала һалып, уға киҙәнде. “Көш-көш!” – тип ҡысҡырған булды, таш алып елләне. Ә теге йыртҡыс әлеге өйәңке ботағына кире ҡунып, ерҙәге ҡорбанын күҙәтергә ултырҙы. Әхмәт иплап кенә теге сей ҡарға балаһын тирәк төбөнә, таҡырыраҡ ергә, күсерҙе. Ҡанатһыҙ ҡош талпынып ҡараған булды, аяғына ла баçа алмай, мороно менән ергә төртөлдө.

Әхмәткә бик моңһоу булып китте. Ул үҙен дә ошо ояһынан ауған ҡарға балаһындай ярҙамһыҙ тойҙо. Ныҡ болоҡһоно, күңелһеҙләнде.

Күп тә үтмәй, туҙанда буталған ҡарға балаһы янына ике оло ҡарға осоп төштө. Әсе-әсе итеп тамаҡ төбө менән ҡарҡылдаштылар, бала ҡошто ҡауырһындары тырпая башлаған ҡанаттарынан ике яҡлап ҡабып алдылар ҙа күтәрелеп тә киттеләр. “Ҡош та үҙ балаһын ташламай, бына бит нисек!” тигән уй үтте уның башынан. Уға еңел булып китте, иркенләп тын алып ҡуйҙы. “Хәҙер ояға мендергәс, төйлөгәнгә бирмәçтәр инде. Үҙе йәнә осам тип ҡанаты нығынмаç борон ынтылмаһын ине.”

Әхмәт йүгереп өйгә ҡайтып инде лә ҡарға балаһы тураһында әсәһенә ярһып-ярһып һөйләп бирҙе. Әсәһе тәүҙә моңло ҙур күҙҙәрен уға тултырып ҡарап торҙо:

– Яҡшы иткәнһең, улым. Ҡарға булһа ла, ҡош балаһы бит әле ул. Шул балаларын сығарып, үҫтерәбеҙ тип ҡайҙарҙан ошонда ҡайталар, меҫкендәр. Һин дә, балам, ояңдан осорға итәһең бит әле, тәгәрәмәһәң, эт-ҡош ҡулына эләкмәһәң ярар ине.

Әхмәт, шуны ғына көткәндәй, иртәнге хәбәрен ялғаны:

– Әсәй, риза бул инде. Беҙ иртәгә юлға сығабыҙ. Был колхоз эшенән арына алмабыҙ кеүек, һөнәрһеҙ ҡалабыҙ бит. Ебәргән саҡта ысҡынырға кәрәк.

– Эй, балам, ул тимер-томор туҡмау эшенә, ана, ауылдағы тимерлектә Абдулла бабайыңдан өйрәнһәң дә булыр ине. Тимер сүкеү һөнәрме инде ул...

– Улай түгел, әсәй. Беҙ зауытта ыстанокта эшләйәсәкбеҙ. Бындағы кеүек балға күтәреп түгел инде унда, сәғәтләп эшләйһең дә ял итәһең. Аҡсаһын да ваҡытында бирәләр, ти.

– Ярар, әләйһәң, хәйерле булһын. Юлыңа әҙ-мәҙ булһа ла ашарға һалайым. Бер көндә генә атлап етә алмаҫығыҙ әле ул Мәғниткә.

Иртәнсәк уның юл моҡсайында бер нисә баш кипкән ҡорот, майға баҫылған сөсө кәкүрткә, ҡаҡланған ҡаҙҙың бер бото ята ине.

– Мауыҙҙы буйында туҡтап, тамаҡ ялғағыҙ. Балыҡҡа килгән кешеләрҙән йылы һыу булһа ла һорап эсегеҙ, ут яғаларҙыр шунда, – тигән булды әсәһе.

Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына өс урамлы Ишҡолдоң төньяҡ ситенән үк һөҙәк кенә тау итәге башлана. Бер буй булып алыҫҡа һуҙыла ул, бейек кенә һыртҡа олғашып тирә-яҡты ҡаплап тора. Аттар ҙа уны менгәндә ныҡ арый, туҡтай-туҡтай үрләй. Өҫтө ялан яғына оҡшап тора, аҡ ҡылған менән ҡапланған. Берәм-берәм ваҡ ҡайындар ғына күренә, сауҡалыҡтар үҙәндәрҙә, соҡор-саҡырҙарҙа өйкөм-өйкөм булып ҡалҡҡан. Был – мал йөрөтә торған һырт. Унда бесән әҙерләп булмай. Үләне йоҡа, үҙе ҡаты була.

Ауылдың ҡаршы яғынан урман башлана, шул уҡ ҡайындар, уҫаҡ. Тик бында улар эре, ысын урман. Был яҡҡа мал ҡыуырға ярамай. Ауыл малы иртә яҙҙан яңы ҡар ятҡансы шул төньяҡтағы ҡаҡ һыртта ла Ҡыҙыл буйындағы туплауҙа көн күрә.

Малайҙар, һөҙәк һырттың түбәһенә менгәс, туҡтап, арттарына әйләнде. Ҡыҙыл буйында ятҡан бәләкәй генә ауылдарына бейектән ҡарап тороу моңһоу ине. Бына хәҙер һырт аша төшөп китәләр, ауыл артта ҡала. Әхмәттең күҙҙәренә йәш тулды, әсәһе иҫенә төшөп, илап ебәрә яҙҙы. Үҙен ояһынан тәгәрәп төшкән кисәге сей ҡарға балаһы кеүек тойҙо.

– Аһ-аһ, әллә илаған була инде, кит, иҫәүән. Һағынһаң, бар, кире ҡайт, – тип мыҫҡылланы иптәштәренең береһе.

Әхмәткә оят булып китте.

– Кит юҡты, нишләп илайым, ти.

Киң ҡаштары аҫтынан моңһоу ҡарашын офоҡҡа, Магнит яғына, бороп баҡты ул. Офоҡ томанһыу. Тауҙың аҫтында ғына ҙур-ҙур күлдәр ялтырап ята. Уларға ҡарап торһаң, офоҡ киңәйеп, алыҫайып киткән һымаҡ.

Алға беренсе булып ул атланы. Ял итә-итә килһәләр ҙә, малайҙар ҡояш байыуға томанлы Магнитҡа яҡынлай алды. Ләкин уларҙың йоҡлар урыны юҡ ине. Төнгә ҡарай кем индерһен уларҙы. Шуға юл ситендәге бесән эҫкерте төбөндә ҡундылар. Иртәгәһенә ФЗУ-ның өс ҡатлы таш бинаһын таптылар. Ҡала ҡала инде. Был йортто эҙләй-эҙләй эт булды малайҙар. Ярай әле, яҙып алғандар ине. Магнитта йорттар бөтәһе лә бер төрлө кеүек, номерҙан ғына табып була. Ишек төбөндә ултырған оло йәштәрҙәге апай башта иртүк килеп ингәндәре өсөн ҡыҙҙырып алды, шунан ҡайһы бүлмәгә барырға, кемгә өндәшергә өйрәтеп ебәрҙе.

ФЗУ тигәненең шуныһы рәхәт: имтихан юҡ. Комиссия ағзаһымы, кемдер инде, малайҙарҙың документтарын ентекләп ҡарап сыҡҡас, тәүге биттәренә ниҙер һыҙғыланы ла ятаҡҡа ебәрҙе быларҙы.

Малайҙар бергә урынлашырға маташып ҡарағайны ла, комендант тигәне ҡаты ғына ҡысҡырҙы:

– Ауыл менән бергә йәшәтеп булмай, урыҫ малайҙары менән йәшәрһегеҙ, аралашырһығыҙ. Урыҫса өйрәнергә лә шәп булыр.

Былар башта баҙап ҡалғайны, урыҫтар ҙа төрлө ауылдарҙан килгән малайҙар булғас, тынысландылар. Шулай ҙа улар үткерерәк күренә, белмәгән нәмәләре юҡ. Борлатып тәмәке лә тарталар, һүгенәләр. Береһе тиктомалдан Әхмәткә:

– Кумган! – тип тә һалды. Был мыҫҡыл ине, әлбиттә. Әхмәттең йәне көйҙө, шулай ҙа ул аңламаған кеүек ҡыланды, ҡапыл ғына яуап бирә алманы. Бер нисә көн үткәс, теге “кумган”ды йәнә ҡабатлағайны, Әхмәт күрше урыҫ ауылына барғанда малайҙар бер-береһен үсекләгән һүҙҙе иҫенә төшөрҙө:

– А ты качан капуста!

“Ҡомған” бик йәбешмәһә лә, “кәбеҫтә күсәне” тегеңә ныҡ йәбеште. Урыҫ малайҙары ла уны шулай атап алды ла китте. Сөнки ҡомғанды тегеләр үҙҙәре лә йүнләп белмәй, шикелле. Етмәһә, теге малай үҙе лә кәбеҫтә күсәне кеүек йомро, бите тумпыҡ ине. Төҫө лә ап-аҡ. Әйтерһең, кәбеҫтәнән яралған.

Был “кәбеҫтә күсәне” Әхмәтте тыныс ҡына ҡуйманы, осрашҡан һайын баҡрайып ҡарай, ҡурҡытырға иткән кеүек ҡылана, һелтәнә, яурыны менән булһа ла төртөп киткән була. Әхмәт тә шулай яуап бирһә, һуғышып китерҙәр кеүек. Әхмәттең ындай теләге бөтөнләй юҡ, хатта быңың менән ултырып һөйләшкеһе, килешкеһе килә. “Эй, земляк” тип өндәшеп ҡарай, теге кәбеҫтә күсәне үҙенекен ҡыуа бит инде, нишләйһең.

Уҡыу башланғас, быларға яңы кейем бирҙеләр, яғаһында тәрегә оҡшаған ялтыр значоклы ҡара гимнастерка, шул төҫтәге салбар, козыреклы фуражка, ҙур таралғылы ҡайыш, елле генә күн ботинка. Уҡымаҫ ереңдән уҡырһың. Ашауы ла ярарлыҡ, көнөнә бер мәртәбә кәбеҫтә һурпаһы, иҙелгән картуф, ҡара булһа ла икмәк, сәйгә шәкәре лә шаҡмаҡлынан. Ауылда ҡатыҡтан әллә ни сыҡмаған малайҙарға ярап ҡалды был.

Оҙон тәнәфестә уҡыусылар барыһы тиерлек киң ишек алдына сыға, унда ер тап ауылдыҡы кеүек йомшаҡ үлән менән ҡапланған. Ятып аунағы килә. Турник, “кәзә тәкәһе” тип аталған бүкән, тағы әллә ниндәй спорт ҡоролмалары теҙелгән. Әлеге “кәбеҫтә күсәне” бында ла Әхмәткә һырлыҡты, һаман яурыны менән төрткөләй:

– Давай бороться, давай бороться! – тип йәнгә тейә. Көсөн күрһәтеп, бөтөнләй еңеп, өҫтөнлөк алмаҡсы була. Малайҙар ҙа һөскөртә, уларға мәрәкә кәрәк. Ауылдашы Хәтмулла Әхмәттең ҡолағына шыбырлай:

– Еппәр һин уны башҡортсалап, һабантуйҙа көрәшә торғайның да баһа. Ҡурҡма, һуғыша башлаһа, беҙ һинең яҡта.

Был һүҙ Әхмәткә көс биргәндәй булды. Шулай ҙа ул ҡапыл ғына тегенең биленә йәбешмәне, көрмәкләшеп самаһын белергә итте. Теге инде, ах та ух килеп, уны елкәһенән дә, яурынынан да эләктереп һелтәмәксе була. Әхмәт бесәй кеүек ергә баҫа төшә лә ҡуя, аяҡ салып та ҡарай. Әхмәттең аяғы әллә ҡайҙа артта, эләктерерлек түгел. Бара-бара “кәбеҫтә күсәне” ышылдай башланы, артыҡ көсәнеп, хәле ныҡ кәмене, кәүҙәһе лә бушаны. Әхмәт, шуны ғына көткәндәй, тегенең ҡултыҡ аҫтына инеп, биленән эләктереп үҙенә табан тартты һәм, күтәрә биреп, һул яурыны аша һелтәне – һалам тултырылған тоҡ кеүек ергә гөрҫ итеп барып ятты бит был.

“Кәбеҫтә күсәне” ҡып-ҡыҙыл булды, илар сиккә етеп, торғас та йәнә килеп йәбеште. Әхмәттең гимнастеркаһыныңең төбө шытыр итеп ҡалды.

– Неправильно свалил, неправильно! – тип һөрәнләй үҙе. Тыштағы бөтә малайҙар уратып алды быларҙы. Һөрәнләйҙәр, ҡоторталар, талашҡан эт кеүек һөсләйҙәр.

– Танауына бир ҙә ҡуй! – тип ҡысҡыра береһе, кемде ҡеүәтләгәнен үҙе лә белмәй. Уға һуғыш ҡына кәрәк, күрәһең. Былай ҡыҙыҡ түгел.

Тәүге көрәштәге хәл йәнә ҡабатлана. Әхмәт был юлы ла тегенең хәле бөткәнен көтөп йөрөй. Йәнә ыһылдай башлағайны, ергә лап итеп барып ятҡанын белмәй ҙә ҡалды. Әхмәт был юлы уны ысҡындырып ебәрмәне, түшенә ятты. Теге тулай, артын тегеләй ҙә былай ташлап ҡарай. Тубығы менән осаға төртөп маташа. Әхмәт уны һаман ергә һеңдерә. Дәрескә ҡыңғырау булғансы ерҙә тотто ла ҡуйҙы. Бөттө был меҫкен, ебәргәс, тороп өҫтөн ҡаҡҡыланы ла:

– Үҙе бәләкәй генә, ә ҡалай көслө! – тип һалырға мәжбүр булды.

Тамаша ҡылыусылар шар-шор көлөштө. Ошонан аҙаҡ был Әхмәт тирәһенә яҡын килмәҫ булды. Тәнәфес һайын малайҙар быны үртәп маташа:

– Йә, Николаев, теге “ҡомған” менән көрәшмәйһеңме ни?

Уның был теләге һүнде, күңеле менән Әхмәткә яҡынларға ла уйлап ҡуйған кеүек, ләкин ғорурлығы ҡамасаулай ине. Әхмәт уға ҡарата асыу тотманы, хатта йығып кәмһеткәне өсөн йәлләп тә ҡуя. Нишләйһең, үҙе ғәйепле. Бара-бара теге “земляк” һүҙен ҡуллана башланы, “ҡомған”ды онотто.

Дәрестәрҙең ҡыҙыҡтары ла, артыҡ күңелгә ятмағандары ла бар. Тик барыһына ла йөрөү мотлаҡ. Ике-өс дәресте сәбәпһеҙ ҡалдырһаң, ашауҙан яҙыуың, хатта ҡыуылып ҡайтып китеүең мөмкин. Күрше урыҫ ауылынан килгән бер малай әллә махсус шулай эшләне, ҡыуылғансы шулай ҡыланды ла ҡуйҙы. Әхмәттең ауылдаштары тырышып ятҡан була. Берәүҙең дә ҡайтып киткеһе килмәй, һағыныуҙарын да баҫалар.

Әхмәткә иң оҡшағаны һыҙма дәресе ине. Төрлө шаҡмаҡтар, өсмөйөштәр генә яһалалар ҙа, күңелгә яҡын. Һыҙманан оло ғына ағай уҡыта. Уның һыҙыҡтары таҡтала ла, дәфтәрҙә лә бик йәтеш кенә, линейкаһыҙ дөрөҫ тартыуын иғтибарға алып ултыра ул. Уҡытыусы ла Әхмәтте таҡтаға йыш сығара, аҡбурҙы ла, ҡәләмде лә бик дөрөҫ тотоп, төп-төҙ һыҙыҡты үткәрә бит был малай.

Бер көндө Металлургтарҙың сәнғәт һарайында үҙе алып барған изостудияға саҡырҙы уҡытыусыһы. Аҙағыраҡ Әхмәт дәрестән һуң көн дә шунда йүгерә башланы. Бында ҡәләм генә түгел, акварель буяу ҙа бар, һыҙма ғына түгел, натуранан рәсем дә эшләп була. Әхмәт өҫтәлдәге бер-ике сәскәнең һүрәтен яһап та ҡуйҙы, ауыл тәбиғәтен. Ҡыҙыл буйы тәбиғәте күренештәрен һыҙмаҡлап ҡараны. Әхмәттең ҡулы һүрәткә генә түгел, тимер-томорға ла йәпле ине. Уларҙы станок тирәһенә бик ебәрмәйҙәр ине әле, шулай ҙа мастер ҡарап торғанда әҙ-мәҙләп булһа ла ниндәйҙер үҙҙәре лә белмәгән деталдәрҙе юналар, тишектәрен тишеп тә ҡуялар. Һүрәткә ҡулы оҫта кешене ҡайҙа ла тиҙ күрәләр, уның абруйы ла бөтөнләй башҡа була. Әхмәтте лә төркөм мастеры айырып ала башланы. Бер килтереп стена гәзитенә әҙерләгән ватманды алдына һалды. Яңы йылға номер әҙерләргә кәрәк икән. Әхмәт гәзитте бик тырышып биҙәне, башына исемен генә яҙып ҡалманы, эсен дә төрлө шарждар менән тултырҙы. Аҙағына “Рәссамы Әхмәт Фәтҡуллин” тип яҙып ҡуйҙы. Уның абруйы иптәштәре алдында бермә-бер артып китте. Изостудия етәксеһе ҡыуанысынан уға ҡалын ҡағыҙҙан тегелгән альбом бүләк итте, акварель буяу алырға аҡса ла биреп торҙо. Әхмәттең башы күккә тейгәндәй булды. Ул үҙен, әлбиттә, билдәле рәссам итеп күҙ алдына килтерә алмай ине әле. Һүрәт төшөрөү үҙенә ныҡ тартып алып китте.

– Һиңә артабан уҡырға кәрәк, – тине студия уҡытыусыһы. – Әлбиттә, һинән насар токарь сыҡмаç. Ләкин...

Ошо “ләкин”гә ул ҙур мәғәнә һалды шикелле. Ҡайһы ҡалаларҙа сәнғәт училищелары барлығын мауығып һөйләне. Тик Әхмәттең әллә ҡайҙарға китеп уҡырлыҡ аҡсаһы юҡлығын иçәпкә алып еткермәне.

Илебеҙ һаман фашизмға ҡаршы һуғыша. Дошманды ояһына ҡыуып индереп баралар, ә һуғыш бөтмәгән. Уның ауыр эҙемтәләре күпмегә барырын берәү ҙә белмәй.

Әхмәт үҙе лә хыялыйыраҡ малай шул. Уны-быны уйлап тормай, ошо һуғыш бөткән йәйен ФЗУ-ны тамамлап, ҡағыҙ алды. Әммә заводҡа барып инмәне, тотто ла Ленинград художество училищеһына юлланды. Әсәһе лә, үгәй атаһы ла ҡаршы килмәне. Әхмәтте ул да үҙ балаһы кеүек күрә ине, уға йәтимлек елен ҡағылдырмаçҡа тырышты. Тик юлы уңманы, училищеға ҡабул итеү имтихандары бөткән булып сыҡты. Әхмәт оялышынан ауылға ҡайтып торманы, Магниттағы заводҡа ла барманы. Буяусы-маляр училищеһына йәнә имтиханһыҙ инде лә китте. Унда инеүҙең ыңғай яғы бар. Әлеге токарлыҡҡа уҡыған училищеһына йәнә ФЗУ-ға ингәнлеккә ҡағыҙ ебәреп ҡотолдо. Юғиһә, яуапҡа тарттырыуҙары бар. Барыбер эшсегә уҡый бит. Бәйләнмәнеләр. Мөғжизәле ҡалала өс йыл үтеп тә китте. Буяусы эше нисек булһа ла рәссамға тартып тора, буяуҙарҙы оçта итеп ҡуша белергә, стенаға яға, һыйпай-һылай белергә лә кәрәк. Быны Әхмәт бик матур үҙләштереп, ошо ҡалала йылдан артыҡ эшләп тә алды.

Буяусы-малярҙы йәнә рәссамлыҡ хыялы һаташтыра башланы. Ул Өфөгә ҡайтып төштө һәм, яһаған альбомын, рәсемдәрен күрһәтеп, башҡа имтихандарҙы әңгәмә менән генә үтеп, күптән ынтылған сәнғәт училищеһының ишеген асты.

Был мөғжизә менән тулы уҡыу йорто баш ҡаланың иң үҙәгендә, уның бейек ишегенән ингән һайын артҡа боролоп, опера һәм балет театрының ҡыҙыл кирбестән мөһабәт бинаһын ҡарап алаһың. Әйтерһең, һине мәшһүр Шаляпин үҙе оҙатып ҡала. Йырсы ла уға: “Не шали, Фаткуллин! Учись хорошо!“ – тигән кеүек тойола. Әхмәткә егерме йәш ине инде. Үҙ төркөмөндә ул иң оло, кәүҙәгә лә бик үк тоҡос түгел, арттараҡ ултырһа ла, ҡалҡыулығы күренеп тора.

Әхмәттең ысын сәнғәткә яҡынлауы ошо ике ҡатлы, имән таҡтанан эшләнгән ауыр ишекле, тыштан бейек тойолған бинала башланды ла инде. Был ишектәрҙе асыуы ғына түгел, түшәмдәре сиркәү көмбәҙе кеүек бейек бүлмәләрҙә белем алып ултырыуы ла күңелгә йәм, рух бирә.

Бына ул көткән рәсем дәресе лә килеп етте.

– Александр Эрастович Тюлькин, – тине ябай ғына итеп ҡаҡса йөҙлө, нескә генә эйәген һаҡал баçҡан күҙлекле ағай. – Бөгөн – танышыу дәресе, мин һеҙгә инеш рәүешендә сәнғәт төрҙәре тураһында һөйләрмен. Киләһе дәресте минең оçтаханала үткәрербеҙ.

Оçтахананың адресын әйтеп, унда нисек барып етергә өйрәтте, хатта ишек ҡыңғырауын бау тартып шылтыратырға кәрәклеген дә аңлатты. Был көндө Әхмәт бик тулҡынланып көттө. Уның ысын рәссамдың оçтаханаһын күргәне юҡ ине әле. Картиналарҙа ул сағылмай бит. Әлегесә күргәне завод цехы ла, буяусыларҙың эш бүлмәһе булды.

Александр Эрастович бик оçта лектор ине. Ике дәрес туҡтауһыҙ композиция тураһында һөйләне лә ҡуйҙы. Тауышы әллә ни асыҡ булмаһа ла, белемле, һөйләү логикаһы көслө. Һүрәт өсөн композицияның төп элементтары, үҙәккә ҡуйылған кеше рәүеше йәки тәбиғәт күренеше булыуын аңлатты. Ул рәссамдың төп идеяһын биреү функцияһын үтәй. Конкрет үрнәктәрҙе Ҡасим Дәүләткилдиев, Михаил Нестеров картиналарынан килтерҙе. Композиция тигән нәмәнең

сюжетлы һүрәттә генә түгел, айырым портретта ла булыуын раҫлап ҡуйҙы ул.

Әхмәткә Тюлькин үҙе акварель менән эшләгән һүрәттәр ныҡ йоғонто яһаны. Уларҙа ниндәйҙер асыҡлыҡ, сафлыҡ күҙгә ташланып тора. Бер томанлы уй-ниәт юҡ кеүек. Александр Эрастович һәләтле уҡыусыһын тиҙ күреп алды, уның киләсәге бик өмөтлө булырын үткер рәссам күҙе менән, нескә күңеле менән тойҙо.

– Фәтҡуллин, һиңә артабан уҡырға кәрәк, – тине ул Әхмәт сәнғәт училищеһының һуңғы курсында уҡығанда.

– Олоғаям бит, Александр Эрастович, ғаилә төҙөп, нигеҙ ҡороп йәшәргә, эшләргә ваҡыт етте. Минең йәштә атайымдың ғаиләһе лә, өйө лә булған. Минең уныһы ла, быныһы ла юҡ.

– Өлгөрөрһөң. Уҡы әле. Бына мин һиңә рекомендация бирәм. Бар Балтик буйына. Минең бергә уҡыған дуҫҡа, – тип ныҡышты остазы. – Буласаҡ рәссамға Балтик илдәрендә булыу, унда белем алыу, уларҙың оло сәнғәте менән танышыу фарыз.

Әхмәт уҡытыусыһының кәңәшен тотто һәм шул йылды уҡ Вильнюс дәүләт художество институтына барып та инде. Бында ул Көнбайыш сәнғәте, Литва рәссамдары ижады менән яҡындан ныҡлап танышты, музейҙарҙы ҡат-ҡат ҡарап сыҡты. Өфөгә ҡайтҡан һайын тәүге башҡорт рәссамы Ҡасим Дәүләткилдиев ижады менән мауыҡты, рәссамдың портреттары үҙенең реаллеге, милли колориты менән таң ҡалдырҙы. Нестеров исемендәге музейҙа ҡуйылған рәсемдәренән оҙаҡ айырыла алманы, йәш рәссам “Пушкин башҡорттар араһында”, “Башҡорт ҡыҙы”, “Зәңгәр күлдәкле башҡорт ҡыҙы” исемле картиналарын ныҡ өйрәнде. Бына, исмаһам, характерҙар, ысынбарлыҡ, сафлыҡ! Шул мәлдә үк уның башына портреттар серияһы эшләү уйы һалынды. “Кемдән башларға?”

Вильнюстан профессиональ рәссам булып ҡайтҡас, ул ошо уйы менән янды, көйҙө. Был ваҡытта, ысын рәссамдар кеүек, майлы буяу, киндер туҡыма менән эшләргә өйрәнгәйне инде. Акварелдәр әкренләп онотолдо.

“Кемдән башларға? Кемдән? Әлбиттә, үҙеңә яҡындарҙан, күңелеңә яткандарҙан!” Йәш рәссамдың тәүге портреты әсәһенеке булды. Әсәй иҫән, ҡаршыһына ултыртып, донъя михнәтен күтәргән яурындарын, тамырҙары ташып торған ҡулдарын, тәрән һырҙар ятҡан асыҡ маңлайын, нурлы йөҙөн ҡарап ултырыу – үҙе бер бәхет. Буяуҙар ғына етмәҫ кеүек. Ауылдағы өй эсе лә ҡараңғыраҡ, был яҡты йөҙҙөң ниндәйҙер һыҙаттарын йәшерә һымаҡ. Әхмәт әсәһен тышҡа сығарып, өй янындағы күләгәгә ултыртты, ҙур ҡулдарын тубығына һалдырҙы. Артына аҡ шаршау элде. “Бына былай бара”, – тип уйлап алды ул. Эстән генә “бисмилла”һын әйткәндәй, ирендәрен ҡыбырлатып ҡуйҙы. Ҡәләм осо ышаныс менән ватманға ятты. Шул көндө үк киндер туҡымалы рамка тартты ла күмер төҫлө ҡәләм һыҙмаһын күсерҙе һәм ҡылҡәләмен тартты. Бына уның өсөн изге йөҙҙөң, ҡалҡыу маңлайҙың тәүге төҫтәре сыҡты.

Өфөгә ҡайтҡас, Әхмәт портретына тотондо. Үҙеңдә үҙең ҡәләм, буяу аша күреү ине был. Күп рәссамдар үҙенең һүрәтен эшләй. Әхмәткә үҙенең һүрәте артыҡ асыулыраҡ тойолдо. Ҡарашын бер аҙ йомшартырға уйланы ла, был уйынан кире күнде – тәүге ҡараш, тәүге тойом дөрөҫ булған. Был бит – донъяға, кешеләргә ҡараш. Үткер һәм уйсан, моңло һәм ярһыу, шаян һәм етди. Төшөнкө яурындарҙан көс аңҡый. “Икенсе рәссам, бәлки, мине икенсе төрлө итеп күрер. Ярар. Үҙемсә яһаным әле”.

Бына шулай портрет артынан портрет, ҡылҡәләм түҙмәй, материя өҫтөнә буяуҙы ятҡыра ғына. Бына “Һике ситендәге башҡорт ҡыҙы”. Был инде, Ҡасим Дәүләткилдиевҡа тарта бирһә лә, бөтөнләй башҡа тонда башҡарылған. Ҡыҙыл төҫтәр өҫтөнлөк итә, йөҙ ҙә, кейем дә башҡа, уның ҡыҙы йәшкә лә олораҡ.

Бөтөнләй башҡа пластика, ҡылҡәләмдең эҙҙәре беленгән кеүек, әйтерһең, рәссам һыҙмаған, буямаған, буяуҙарҙы түрткән. Был, художествола бик киң таралмаһа ла, танылыу алған түрткө ысулы.

***

Илленсе йылдар уртаһында рәсми рәүештә сәйәси золом ҡорбандарын аҡлау башланды. Халыҡ алдында уларҙың фажиғәле, әсе яҙмышы ғына түгел, ҡаһарманлығы, рух ныҡлығы ла асыла торҙо. Уларҙың күбеһе, әлбиттә, аҡыл хеҙмәте кешеләре ине. Күп яҙыусылар, ғалимдар, сәнғәт оҫталары был яҙмыштар тураһында уҡып, белеп, ишетеп, үҙҙәрен дә күреп тетрәнде һәм уларҙың героик образын тыуҙыра башланы. Матбуғатта улар тормошондағы яңынан-яңы биттәр асыла барҙы.

Шул шәхестәр араһында ҡаһарман яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның яҙмышы бер кемде лә тетрәндермәй ҡалмағандыр. Талантлы ҡәләм оҫтаһының, һылыу ҡатындың сәнскеле тимерсыбыҡ кәртәләр, таш камералар эсендә тонсоғоуы үтә аянысլы ине. Әхмәт Фәтҡуллин да уның яҙмышын урап үтә алманы. Был иҫ киткес сабыр, ғәжәп һылыу ҡатындың үҙен тере килеш күрмәне, әммә уның образы менән янды рәссам. Ҡыҙынан ҡалып байтаҡ йылдар йәшәгән әсәһен, туғандарын күрҙе.

Был портретын Әхмәт рухланып, ярһып, янып эшләне, ошо образда ни тиклем михнәт татып та һынмаған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының бер үрнәген күрҙе ул. Һәм бына бер йыл үтеүгә, Һәҙиәнең нескә генә яурындары, ҡабарып торған аҡ блузкаһы, наҙға туйып өлгөрмәгән аҡҡош муйыны, иҫ киткес моңло, сабыр, аҡыллы күҙҙәре һынланды. Әхмәт был һүрәтте әсәһе кеүек яҡын күрҙе, һуңғы һыҙығын материяға һалғансы күҙен унан ала алманы. Рәссам был портретҡа үҙенең күңелендә ҡатын-ҡыҙға ҡарата беренсе булып бөрөләнгән хистәрен, һөйөү идеалдарын да һалды. Йылдар үтер, әммә Һәҙиә Дәүләтшинаның һынын был рәүешле итеп биргән рәссам тиҙ табылмаҫ.

“Бөтә ҡатын-ҡыҙ ҙа оло мөхәббәт өсөн яратылалыр инде, – тип уйланы Әхмәт. – Был Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы – илаһи зат. Уны алыҫтан, күңелдән генә яратып булалыр. Уға ҡул менән, ҡаты ҡараш менән ҡағылыу мөмкин түгел!”

Яҙмыш аяуһыҙ шул. Һөйгән иренән, берҙән-бер балаһынан, яратҡан ҡәләме менән аҡ ҡағыҙынан айырған. Шунан да ауыр яҙмыштың булыуы мөмкинме? Нисек аҡылдан яҙмаған тиң.

***

Эльзаларҙың фатиры ҡыҙыл кирбестән һалынған ике ҡатлы иҫке йорттоң икенсе ҡатында ине. Күҙгә күренерлек булып ҡалҡынған был ҡыҙ, көндәгесә, мәсеттең һул яғындағы Иҙел ярындағы баҡсала йөрөп ҡайтты ла тәҙрә янына яран гөлө артына ултырҙы. Ҡып-ҡыҙыл булып сәскә атҡан гөл янында киске ҡояш нурҙарында тумалаҡ ҡына кәүҙәле ҡыҙ сын яһау булып күренә ине. Тап шул мәлдә уларҙың подъезына ике егет килеп туҡтаны, ишек ҡыңғырауҙарын тартты-тарттылар ҙа, берәү ҙә яуап бирмәгәс, артҡараҡ шылып, бер тәҙрәгә ниндәйҙер ишаралар яһай башланылар. Хужалар өйҙә юҡ ине, шикелле. Егеттәрҙең береһе, бөҙрәрәк һары сәслеһе, тәҙрә эргәһендә торған Эльзаны күреп ҡалды һәм һөрәнләп тә ебәрҙе:

– Әхмәт дуҫ, ҡара, ана бер мөғжизә!

Ҡара сәсле, ҡалын ҡашлыһы ла ҡыҙға төбәлде.

– Недурно! Ну и күҙ һиндә, Миәссәр!

Миәссәр тигәне шунда уҡ ҡысҡырып мөхәббәт тураһында шиғыр уҡый башланы. Эльза түҙмәне, тәҙрәне төртөп асты ла яҡынырaҡ килде.

– Һин туҡта әле, Миәссәр дуҫ! Арбамай тор, был ҡыҙ миңә оҡшай, – тип һалды теге терпе сәс. – Төш һин бында, сибәркәй.

– Юҡ инде, әсәйем ҡушмай. Үҙегеҙ күтәрелегеҙ, – тип һалмаһынмы ҙур зәңгәр күҙле, оҙон һары сәсле һылыу.

Әхмәт исемлеһе ысынлап та ҡыйыуыраҡ шикелле, һәр хәлдә Эльзаға шулай күренде.

– Так как хочешь, мин үрелдем, – тине лә, таҡта баҫҡыстарға тап-топ баҫып, күтәрелә лә башланы. Үҙе тағы фатирға инеүен инде лә бөтөнләй юғалып ҡалды. Эльзаға текләп ҡарап торҙо-торҙо ла:

– Бәй-бәй, бигерәк бала икәнһең дә, – тигән булды. – Тәҙрә аша ирәберәк күренгәйнең.

– Нисек бармын, шулаймын инде. Ҡурсаҡ уйнамайым инде, ағай.

Был “ағай” тигәне Әхмәтте олоғайтып ебәргән кеүек булһа ла, ниндәйҙер олпатлылыҡ өҫтәгән кеүек ине.

– Һеҙ ҙә шағирмы әллә, Әхмәт ағай? – тип һорамаһынмы ҡыҙыҡай.

Был һорау Әхмәткә бик оҡшап етмәһә лә, ул бирешмәне.

– Юҡ, мин шағир түгел. Ҡыҙҙарға тәҙрә төбөндә шиғыр уҡый алмайым. Йыр ҙа йырларға рәтем юҡ. Мин рәссам ғына. Ә-ә, кстати, ике көндән шәхси күргәҙмәм башлана Нестеров музейында. Саҡырам, не пожалеете.

Эльза, ризалыҡ белдереп, баш ҡаҡты. Тупһала кемдеңдер тауышы ишетелеү менән, Әхмәт тиҙ генә сығып шылды. Был ҡыҙ бала әллә нимәһе менән Әхмәттең күңеленә һеңеп ҡалды ла ҡуйҙы.

***

Яҙыусы әҫәрен берәй журналда баҫтырһа йәки китап итеп сығарһа, уны меңәрләгән кеше уҡый. Рәссам улай эшләй алмай. Уның ижад емеше бер генә данала, төп нөхсәһендә генә була. Ҡайһы бер рәссамдар картиналарының күсермәһен дә эшләй, ике-өс дана итә ала. Әхмәт йәш сағында ла, олоғайғас та быны эшләмәне, уның һәр әҫәре берҙән-бер данала ижад ителде. Шуға ла рәссам өсөн күргәҙмә ойоштороу, бер ай самаһы ваҡыт эсендә килгән кешеләргә күрһәтеп ҡалыу бик мөһим. Халыҡ алдына сығыу был, үҙеңә ышаныс туплау мөмкинлеге.

Әхмәт Фәтҡуллин да ижад емештәрен кешегә күрһәтерлек тупланы, ахыры. Рәссамдар берлегенән уға күргәҙмә ойошторорға тәҡдим яһанылар. Ошо заманда Әхмәткә сағыу ижады менән билдәлелелек яулап өлгөргән рәссам Рәшит Нурмөхәмәтов үҙе иғтибар итте. Был көндө йәш рәссам бик тулҡынланып көттө. Төшөргән бөтә портреттарын, эскиздарын Нестеров исемендәге музейға алып килде. Ҡайһы берҙәрен яңы рамға тарттырҙы. Балаһын көткән әсә кеүек тойҙо ул үҙен: рәссамдарҙың күбеһе уның һүрәттәрен тәүгә күрә бит әле. Рәссамдар ҡыҙыҡ халыҡ булып сыҡты: театрға йөрөмәһә йөрөмәй, ә бер-береһенең күргәҙмәһенә һөрләгөшөп килә. Олораҡ Борис Домашников та, ҡорҙашы Александр Бурзянцев та килгән. Театр рәссамы Мөхәммәт ағай Арыҫланов та иғтибар менән ҡарап йөрөй.

Күргәҙмәнең төп урынын әсәһенең, Һәҙиә Дәүләтшинаның, дирижер Ғәйнетдин Моталовтың портреттары, “Һике ситендәге башҡорт ҡыҙы” биләй. Бер залды тултырырлыҡ эшләгән икән дә баһа. Бер урынға йыйғас, күп күренә.

– Да, это великолепно, Ахмат! – тип ебәрҙе киң күңелле дуҫы Александр Бурзянцев, айыу кеүек оло кәүҙәһе менән йәш рәссам алдына баҫып.

– Һин хәҙер монументаль картиналарға тотонһаң да була, – тип тыйнаҡ ҡына маҡтаны Борис Домашников. – Портретист булараҡ ты состоялся.

Ниндәйҙер һынлы сәнғәт белгесе, һүрәттән һүрәткә күсеп:

– Бына классика, бына образдар, – тип һөйләнде, – мин отзыв яҙам матбуғатта. – Ул хатта рәссамдың үҙенән интервью алырға ла тартынманы, аяҡ өҫтө торған көйө һорауҙар бирҙе, блокнотына ниҙер һыҙмаҡланы.

– Тәнҡит, тәнҡит кәрәк миңә, – тип ҡараны Әхмәт директор бүлмәһендәге фуршетта. – Маҡтайһығыҙ ҙа маҡтайһығыҙ, шашып китһәм, ни булыр?

Олпат Нурмөхәмәтов та тәнҡиткә күсмәне, маҡтау тонын тотто. Күргәҙмә ысынлап та сәнғәт байрамы төҫөн алды.

Һалҡын шампан эсеп алған рәссамдар үҙ хәбәрҙәренә төшөп киткәс, Әхмәт иплəп кенә залға сыҡты. Йыйылған халыҡ таралған, йомро ғына кәүҙәле, тулы йөҙлө, оҙон сәсле йәш кенә ҡыҙ уның һүрәттәре янында һаман урала ине.

Әхмәт түҙмәне, уның эргәһенә килде.

– Нишләй, һеңлем, оҡшаймы әллә?

– Оҡшай шул. Мин бында көн дә килер инем.

– Аҡсаң булһа ни, әйҙә инде. Бөгөн генә буш ул, күргәҙмәнең асылыу көнө булғанға.

Әхмәткә был ҡыҙҙың асыҡ йөҙө, башҡортса ихлас һөйләшеүе яҡын тойолдо.

–Ҡайһы һүрәт һиңә нығыраҡ оҡшай? – тине ул, был ҡыҙҙы оҙағыраҡ һөйләштерергә теләп.

– Бына бынау – яҙыусы Һәҙиә апай Дәүләтшина.

– Уны йылы итеп бигерәк “апай” тиһең, әллә белә инеңме?

– Эйе, ул минең олатайымдарға килгәне бар ине.

– “Олатайым” тигәнең кем һуң ул?

– Сәсән Мөхәмәтша Буранғол. Бәлки, беләһегеҙҙер?

– Белмәй ни! Бына һиңә! Шул кешенең ейәнсәреме?

– Эйе. Ниңә?

– Ә ниңә ерән төҫтәһең? Ул бит ҡап-ҡара ағай. Йөҙө ҡуңыр, сәсе, мыйығы ҡап-ҡара.

– Әллә инде, – тип йылмайҙы ҡыҙ, үҙен төҫө өсөн ғәйепле кеүек тойоп.

– Үҙеңдең исемең кем һуң, һеңлем?

– Эльза.

– Вәт, әй! Бына тигән ата башҡорт ағай ейәнсәренә Эльза исемен ҡуштырған!

– Мин тыуғанда ул лагерҙа булған, исем ҡушыуҙа ҡатнаша алмаған. Һәҙиә апай ҙа төрмәнән ҡайтҡас беҙгә килгәйне. Эй, иҫ киткес һылыу апай ине ул.

– Мин дә шуға һоҡланып, уның рәсемен яһаным инде. Үҙе һылыу, үҙе сабыр, үҙе батыр ҙа.

– Эй, хозяин! Ахмат! Куда пропал? – тигән тауыш ишетелгәс, рәссам, был мөләйем ҡыҙ менән ашығыс ҡына хушлашып, китеп тә барҙы.

Шулай ҙа:

– Тағы кил, һеңлем! Мин шат булырмын, – тип әйтеп өлгөрҙө. Был тәҡдимен, үҙе лә аңламайыраҡ ҡалһа ла, әйтте инде. Аҙаҡ ошо уҡ залда был мөләйем ҡыҙҙы бер нисә мәртәбә осратып, йылы һүҙ әйткеләне лә һөйләшергә форсат тапманы, шулай ҙа өй телефонын һорап алырға ҡыйыулығы етте. Эльза ла икеләнеп торманы, әйтте лә ҡуйҙы. Бер көндө Әхмәт хисләнеп, йылы хәтирәләргә төшөп китте лә уның өйөнә шылтыратты. Шылтыратып ҡына ҡалманы, егеттәрсә ҡылыҡ ҡылып, Эльзаны киноға саҡырҙы.

Был көн Әхмәт өсөн үҙе бер мөғжизә ине. Ул һөйләшелгән сәғәтте саҡ еткерҙе, урамға сыҡҡас та ҡыҙҙы ҡултыҡлап алған булды. Улар Туҡай урамынан Ленин урамына барып сыҡтылар ҙа трамвай юлы ыңғайына атланылар.

Бына аҡ колонналы “Родина” кинотеатры, ул Өфөнөң иң яҡшы яңы кинотеатры, шикелле. Йәштәр барып ингәндә фойела оркестр милли көй уйнай. Йәш композитор Рим Хәсәнов үҙе уйнай, үҙе оркестр менән дирижерлыҡ итә.

Тәнәфестә Әхмәт ике ҡулына ике туңдырма тотоп килеп тә етте. Ҡыҙ бик ҡыйыуһыҙ ғына алды, нисектер оялып ҡына ашаны. Үҙе Әхмәткә ихлас ҡарап-ҡарап ала. Шул минуттарҙа егет әллә ниндәй хыялдарға сумып, был тыйнаҡ ҡына ҡыҙҙы берсә әсәһенә, берсә Һәҙиә Дәүләтшинаға оҡшата. Күҙҙәре лә шулай ҙур, асыҡ, йөҙө генә тулыраҡ. Ә матур...

Кино бөткәс, Әхмәт уны өйҙәренә оҙатып ҡуйҙы.

Оҙаҡламай тотто ла өйләнешергә тәҡдим яһаны.

– Әсәйем менән кәңәшләшәйем, ҡайҙа ашығаһың? – тип ҡараған булды тыйнаҡ ҡыҙ. “Әсәйем менән” тигәненән олатаһына барып сығасағын алдан аңлап торған егет шыртлай биреп тә ҡуйҙы. Кейәү була торған кешене күрергә теләһә баһадир ҡарт, нишләргә? Ҡойолоп төшмәмме? Бик яуаплы аҙым бит әле. Ваҡиғалар Әхмәт уйлағанса уҡ ҡатмарлашманы, күпте күргән оло сәсән ейәнсәрен билдәһеҙ рәссамға бирергә ризалыҡ биргәнме, Эльза әсәһе менән генә һөйләшеп хәл иткәнме – бер ай эсендә ыңғай яуап та бирҙе. Шулай ҙа Әхмәттең үҙенең донъяуи хәлен асып бирергә ҡыйыулығы етте:

– Минең торлаҡ та юҡ бит әле, ҡәрендәш, ҡайҙа йәшәрбеҙ икән?

– Беҙҙә. Беҙҙең фатирҙа. Әсәйем менән ҡустым  ғына бит. Өсәүбеҙ. Олатайым айырым йәшәй ул. Һин дә һыйырһың.

Әхмәттең ауыҙы йырылып киткән булды, Эльзаның тулы яурынынан аймап алып, күкрәгенә ҡыҫты.

Ике йәштең берлектәге тормошо шулай башланды. Данлы олатай менән танышыу ҙа өйләнешкәндән һуң ғына булды. Әхмәт Мөхәмәтша олатайҙың кем икәнен, уның әсе яҙмышын белә ине. “Халыҡ сәсәне” исеменең дә күптән түгел генә ҡайтарылыуы хаҡындағы ҡарарҙы ла уҡып ҡыуанғайны. Ул ошо олпат кешенең үҙ халҡы өсөн ни эшләгәнен генә белеп етмәй ине әле. Сөнки ул яҙып алған “Урал батыр” эпосы ҡайҙалыр архивта ята, заманында уйналған тиҫтәләрсә драмалары сәхнәләрҙән алынған, ҡулъяҙмалары ла юғалып бөткән, ДИК (Дәүләт именлеге комитеты) архивтарына таралған. Эйе, Әхмәт күңеле менән кемгә кейәү булғанын тоя ине. Рухы ла, йәне лә, тәне лә һынмаған кеше менән тәүге осрашыуҙа уҡ һиҙҙе ул, һиҙеп кенә ҡалманы, үҙенең йөрәгенә һеңдерҙе.

Күпте күргән ҡарт һүҙгә артыҡ әүәҫләнеп, сиселеп үк бармаһа ла, кейәүе менән һөйләшергә ярата ине. Йәш рәссам уның күңеленә, рухына үҙ юлын, үҙ асҡысын эҙләне. Ҡыҙының фатирына әкрен генә баҫып, ауырайған олпат кәүҙәһе күренеү менән, килеп инеүе, сәй эсеп алыуы була, рәссам кейәү уны йомшаҡ ултырғысҡа ултырта ла башын бер күтәртә, бер төшөртөп ҡарай, ҙур ҡулын тубығына һалдыра, һырҙар баҫҡан бейек маңлайына текләй, уны уратып йөрөп сыға, ситкә китеп бағып ала, шунан ғына, был йөҙҙөң үҙе генә аңлаған ниндәйҙер серен асҡан кеүек, ҡәләме менән ватманға һыҙғыларға тотона.

– Һин, кейәү, мине ҡыҙ һайлаған егет кеүек ҡарайһың даһа.

Икеһе лә шарҡылдап ихлас көлөп ебәрә.

Бына тәүге һыҙма килеп тә сыҡты. Мөхәмәтша үҙ рәсеменә ентекләп ҡарап ултыра, күҙҙәрен ҡыҫыбыраҡ ҡуйып йәнә ҡарай, хистәрен генә артыҡ белдермәй.

– Оҡшаған, тик артыҡ йәш сағым һымаҡ.

– Бара-бара ҡартлыҡ төҫө инә ул һүрәткә. – Шулай ти ҙә рәссам йәнә бер эскиз эшләп ташлай.

Икенсе  килгәнендә Әхмәт ҡарт ҡайныһына яңы тәҡдим яһай:

– Солидныйыраҡ итәһе ине һеҙҙе, олатай. Былай күлдәксән һәм яланбаш килеп сыҡмай. Анау фотолағы осло папаханы, пальтоғыҙҙы кейеп килегеҙ әле, генерал кеүек булһын.

Был һүҙҙәргә ҡарт сәсән хәйләле генә йылмайып ҡуя ла ризалығын бирә.

Һөйләшеүҙәр китә. Бер-береһенең серҙәрен ауларға тырышалар. Әхмәт

шуның Гулагтарҙа күргәндәрен, кисергәндәрен белгеһе килә, тик сәсән был теманы бөтөнләй уратып үтә, бер генә зар һүҙен дә ысҡындырмай. Әхмәт: “Әллә был минән дә шикләнәме икән?“ – тип тә уйлап ҡуя. Унылы ла тәбиғи. Сөнки сәсән буш-юҡҡа өс мәртәбә ҡулға алынып, бишәр-алтышар йыл ғүмерен Сталин лагерында ултырмаҫ. Уның ошолай зарлана белмәүе лә бер рух ныҡлығы түгелме ни? Әлеге аҡ каракуль бүрекле баһадир кәүҙәле ирҙең рәүеше ҡылҡәләм менән ватманға ятты. Ҡәләм генә тота торған ҡул, балта, ломдар менән эш иткән.

Әхмәт өсөн дә, Эльза өсөн дә был иң ҡәҙерле һүрәт булып сыҡты. Был рәсемде улар бер музейға ла бирмәҫ булдылар, оҫтахананан алып ҡайтып, өйҙәрендә генә тоттолар.

Сәсәндең йәшәр йылдары һанаулы ғына ҡалған, күрәһең. Ошо танышыуҙан һуң биш йыл самаһы үтеүгә, ул донъя менән хушлашты. Уның даны яңғырауы, ижадына, эшләгән эштәренә бирелер тейешле баһалар алда ине әле. Тик быының өсөн заман елдәренең бөтөнләй икенсе яҡҡа әйләнеүе кәрәк булды.

Был осрашыу, башланған күңел йылылығы тураһында Әхмәт күп уйланды. Эльзаны үҙенең иң яҡын кешеһе, өйөнөң хужаһы итеп күҙ алдына килтереп ҡараны һәм килештерҙе. Сөнки электән шаяртышып йөрөгән ауыл ҡыҙҙары күптән урынлашып бөткән, училищела, институтта уҡығанда ул үҙенә иш булырҙай ҡыҙ осрата алманы. Хатта эҙләмәне лә. Уның башында тик уҡыу, белем туплау ине. Күңеле гел ирекле килеш, оло мөхәббәткә ымһынған көйө ҡала килде.

***

Тәүге күргәҙмәһенән һуң Әхмәт Фәтҡуллин йәмәғәтселек күҙенә ташлана башланы. Белгестәр уның тураһында “Милли колоритлы рәссам үҫеп килә” тигән фекерҙе әйтте. Ә бына Аҡ йорттоң һәр яңылыҡҡа һиҙгер идеологтары, был “милли колорит”та үтә миллилек юҡмы икән, тип һағайҙы. “Ниңә әле был рәссам гел башҡорт йөҙлө кешеләрҙе төшөрә?” тигән һорауҙы ҡуйҙы. Был ҡараш рәсми әйтелмәһә лә, юғары даирәлә йөрөнө, рәссамдарға ла белдерелде.

Шул Аҡ йорттоң (ул ваҡыт халыҡ телендә Йәшел йорт ине әле) төп хужаһы ғына ижад кешеләренә ҡарата көтөлмәгән ҙур егетлек эшләп ташланы. Өлкә комитетының беренсе секретары Зыя Нуриев атлы шәхестең турана-тура бойороғо менән яҙыусыларға ҡыш торорлоҡ махсус йорттар эшләтеп, Аҡманай күле буйынан ер бүлеп, Яҙыусылар ауылы ҡалҡып сыҡты. Күҙгә күренгән һәр бер яҙыусы йортло, ерле булып ҡалды. Ул данлы “Аҡлан” исеме менән тормошҡа инде.

Ошо уҡ осорҙа әлеге Нуриев инициативаһы менән рәссамдарға биш ҡатлы йорттар өҫтөнә йәнә бер ҡат күтәреп, оҫтаханалар хасил ителде.

Икенсе күргәҙмәһенә әҙерләнеп ятҡан Әхмәт Фәтҡуллин да, башҡа бер нисә рәссам менән оҫтаханалы булып ҡалды. Рәссам өсөн был – оло бәхет. Ысын эш, ижад урыны, ысын сәнғәт тыуҙырыу йорто ине. Әхмәт башта уҡ был ҡоролманы ныҡ оҡшатты: тәҙрәләре бейек яҡты бүлмә, эргәлә генә һыуы, йыуыныу бүлмәһе бар. Ҡалған кәрәк-ярағын ул үҙе етештереп алды: эш өҫтәле, тахта килтереп ҡуйҙы, махсус станок эшләтте.

Әхмәт яңы дәрт менән ижад эшенә сумды. Ҡайһы бер көндәре ошонда йоҡлап та ҡалғыланы. Буяу еҫенә лә өйрәнеп китте, башы ла ауыртманы, ашауҙан да яҙманы. Бер ваҡыт уның уйында Эльзаны саҡырып, оҫтахананы күрһәтеп, ғорурланып алыу теләге тыуҙы. Кемдең генә рәссамдың остаханаһын күргеһе килмәһен инде? Килде Эльза, һоҡланып бөтә алманы. Әхмәт уны уртаға аҡ экран алдына ултыртып, ҡәләме менән портретын да һыҙмаҡлап ташланы, тик буяулы картинаға тиклем еткермәне. Эльза Әхмәт эштән туҡтаған арала оҫтаханаһын йыуып, йоҡо урындарын ҡағып, йыйыштырып та ҡуйҙы. Быныһы Әхмәттең күңеленә бик ятты. “Хужалыҡлы ҡатын булмаҡсы был” тигән уй башынан үтте.

Әхмәттең ижады Башҡортостан сиктәренән дә сыға башланы. Урал зонаһының Свердловск, Силәбе, Пермь ҡалаһында үткәрелгән “Социалистик Урал” тип аталған күргәҙмәлә ҡатнашты, тора-бара Мәскәү кимәленә сыҡты. Әлбиттә, һәр күргәҙмә ҙур көс, ваҡыт талап итте. Картиналарҙы әҙерләп, буклеттар сығарыу, үҙең дә шунда күренеү, һорауҙарға яуап биреү эске көсөргәнеш талап итә ине. Әхмәт оҫтаханала эшләүҙән башҡаны бар булмышы менән ҡабул итеп етмәне. Уны яҡташтары, Ҡыҙыл буйының сабыр холоҡло, һапалы кешеләренең һүрәттәр циклын эшләү хыялы һис тынғы бирмәне. Йәйҙең иң матур айында, халыҡ йәбешеп ятып бесән эшләгәндә, ауылына ҡайтып төштө ул. Үҙе менән бөтә эш ҡоралдарын тейәп алып барҙы: буяуҙар, станок, ҡылҡәләмдәр, ватман биттәре...

Яҡташтары бик йылы ҡаршы алды, ҡунаҡ итте. Әхмәттең был һый-хөрмәтте артыҡ һанлап еткермәгәнен күргәс, эргәһендә яҡындары ғына ҡалды. Район етәкселәре лә уның тураһында яҡшы белгәс, ҡырыҫыраҡ холҡона ла өйрәнделәр, бик иғтибарлы булырға, кәйефен күтәренке тоторға тырыштылар.

Күргәҙмәләр, эш рухты күтәрһә лә, йәшәргә лә кәрәк бит әле, ғаиләгә аҡса етмәй, музейҙар һирәк-мирәк һатып алған була, кешеләрҙә быңдай мәҙәнилек тә, аҡса ла юҡ тиерлек. Ундай аҡсаны крәҫтиән сығарып та бирә алмай, сөнки юҡ ул. Булһа ла, һүрәткә тығылмай, өйөнә картиналар элеп өйрәнмәгән. Аҡсалы интеллигенция вәкилдәре лә үҙ портреттарын аҡса түләп ала һалып бармай, юбилейына бүләк иткәнде көтә.

Был ваҡытта Әхмәт Эльзаға өйләнеп, йылға яҡын йәшәп тә өлгөргәйнеләр. Ҡатыны ауырлы. Уны яҡшыраҡ ашатырға ла кәрәк, йорт кәрәк-ярағы ла етешмәй. Шундай ваҡытта Әхмәттең тимер юл вокзалында йөк ташыусы булып эшкә китерҙәй саҡтары ла булғыланы. Унда, исмаһам, көн дә күтәргән йөгөңә тейешен алып ҡайтаһың. Ә рәссам эшләй-эшләй, һүрәтенә күргәҙмәлә берәйһе күҙ һалғансы йә музейҙар алғансы кеҫә таҡыр. Көндәлек эш хаҡы килеп тормай. Ҡайһы бер рәссамдар йүнен таба. Мәҙәниәт һарайҙарын, ресторандарҙың стеналарын биҙәй. Ә Әхмәттең быға һис күңеле төшмәй. Әхмәттең ижады өсөн был йәй үҙенсә бик емешле булды. Яҡташтарын ул үҙе өсөн яңынан асты, бесәндә, баҫыуҙарҙа йөрөнө, фермала булды, ер кешеләренең рухлы йөҙҙәрен, көслө беләктәрен эштә күрҙе. Һуғыш михнәттәрен иңендә күтәргән һыны менән генә түгел, рухы менән матур, көслө иҡәнен тойҙо, уның ҡылҡәләме был кешеләрҙе һынландырып ҡалырға ашҡынды, юғиһә, һуң буласаҡ, был быуын китеп бөтәсәк.

Әхмәт көҙгә тиклем яҡташтарының портреттары галереяһын эшләп, колхоз сәнғәт музейын асты һәм эштәренең күпселеген шунда бүләк итеп ҡалдырҙы.

Тап шул барыуында ауылда йәшәп, темперамент менән “Өс ҡатын” картинаһы төшөрөлдө. Аҙаҡ был картина бик күп күргәҙмәләрҙе йөрөп сыҡты һәм рәссамдың ижады методын да, рухын да билдәләгән бер эшкә әйләнде. Был картина сәнғәт белгестәре араһында ҙур ғына бәхәстәр ҙә тыуҙырҙы: нимә ул – рәссамдың реализмдан импрессионизмға күсеүеме? Ниңә әле, был тау түбәһенә ҡунған бөркөттәр кеүек, ҡатындарҙың тарамыш кәүҙәләре, ҡулдары үтә оҙон, ҡараштары үтә һалҡын? Ә был рәссам аңында һуғыштың аяуһыҙ ғазап-эҙемтәләренең сағылышы ине. Күпте күргән, әммә һынмаған тән һәм рух. Өс берҙәм һын образы Әхмәт Фәтҡуллиндың бынан һуң төшөргән һүрәттәрендә лә ныҡлы урын алды. Тимәк, был – ниндәйҙер яңы алымға эйәреү түгел, ижади метод, ысынбарлыҡты икенсе төрлө күреү. “Өс ҡатын”дан һуң ижад ителгән “Көтөү” картинаһы уның ижадындағы был мотивты йәнә көсәйтте. Ҡара болот фоны, ябай, тәнгә ятып торған ауыр кейем – был да һуғыштан һуңғы реаллек. Ә йөҙҙәр!

Шомло, хәүефле, тереме был ир-уландар, ҡайтып киләләрме? Ҡайтырҙар кеүек бит. Көтөргә һәм көтөргә! Ошондай уҡ тоналлектә “Хушлашыу” картинаһы тыуҙы.

Бер быуындың трагик хәле аҙағыраҡ “Яҙмыш” картинаһында ҡот осҡос тормошсанлыҡ менән бирелде: мөйөшө ергә һеңеп барған бәләкәй генә өй, түбәһе тишелгән, ҡоймалар ҡыйшая башлаған һәм аҡ күлдәкле, аҡ яулыҡлы йоҡа ғына кәүҙәле яңғыҙ ҡатын һыны. Быныӊ яҙмышы – мәңге яңғыҙлыҡ.

Шунан да аяныслы хәлде табып буламы? Рәссам халҡының яҙмышын бар күңеле менән тойҙо. Ул шат йөҙлө кешеләрҙе лә төшөрҙө. Ләкин бөтәһе лә уйсан. Был уның ижадында өҫтөнлөк алып китте. Шуға Аҡ йорттағы ҡайһы бер идеологтар, был рәссам совет ысынбарлығын үтә ҡайғылы, моңһоу итмәйме, тигән уйға ла төшкөләне. Был фекерҙе юҡ-юкта рәсми урындарҙа ла ысҡындырып ҡуялар ине. Ә рәссам үҙенсә ижад итте, баш өҫтөндә болоттар ҡуйырып-ҡуйырып алыуын тойһа ла, һиҙҙермәне.

Көҙгө көн эңергә ауышып барғанда, оҫтахананың ишек башындағы ҡыңғырау зыңланы. Әхмәт эш көнөн тамамлап, ҡайтырға йыйына башлағайны инде. Был ваҡытта кеше килмәй торғайны, әллә ҡатыны Эльза ҡайтҡанын көтөп ала алмай килеп еттеме, ҡайһы ваҡыт ул шулай ҡылана торған. Әхмәт аптырабыраҡ ҡалды ла ишек яғына атланы.

– Хәҙер, хәҙер! – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра оҙон коридор буйлап өсөнсө ҡат менән дүртенсе ҡат араһындағы тимер рәшәткәгә яҡынланы. Ишекте йоҙаҡҡа бикләп ингән булған икән. – Бәй, бәй! Кәләш килгән икән тип торам. Һинме ни был, яҡташ? Ниндәй елдәр ташланы?

Баҫҡыста яҡташы, авиация институты доценты Хәмзә Йәғәфәров тора ине.

– Ас ишегеңде, ингәс һөйләрмен.

Тимер ишек шағыр-шоғор асылып, ҡунаҡ менән хужа йомшаҡ тахтаға ултырғас, доцент һүҙ башланы.

– Йә, дуҫ, ижад итеп буламы?

Ул берсә түбәһе быяла рам менән ҡапланған бейек түшәмгә, берсә станокта торған картина эскизына ҡарап ултырҙы. Әхмәт йомшаҡ ҡына итеп:

– Бына күрәһең инде ижадты, – тигән булды, үҙе яҡташының визитын аңлай алмай.

– Да. Йылдан ашып китте, һине күргән юҡ. Ниндәй титулдар алып өлгөрҙөң?

– Атҡаҙанғанмы әле шунда, рәссам инде.

– Молодец. Рад за тебя, – тип һалғайны урыҫсалап Хәмзә, Әхмәт ғәҙәтенсә төртмә теле менән тегене әләктереп тә алды:

– Ҡара, ҡара, урыҫса һин дә мин һупалайһың түгелме һуң, беҙ шул икмәк-тоҙлоҡ көйө ҡалдыҡ инде.

– Ярар, ярар, не скромничай. Урыҫ ҡыҙҙарының башын әйләндерә торғайның әле. Ниндәй яңы һүрәттәрең бар? Күрһәткән бул инде яҡташыңа.

Әхәт яҙыусы Зәйнәб Биишеваның, ҡуйы сал сәсле мәшһүр композитор Хөсәйен Әхмәтовтың, профессор Ҡоҙаяровтың портреттарын берәм-берәм станокка ҡуйып, яҡтылыҡ йүнәлтеп ебәрҙе.

– Вот это здорово! Молодец! – тип һөрәнләне яҡташы. – Һин ысын портретист та баһа! Әйткәндәй, һиңә бер тәҡдимем бар әле. Мине, слушай, студентар одолели. Ҡайҙан яҡташ икәнеңде белгәндәр: саҡыр осрашыуға – и все! Буласаҡ инженерҙар өсөн ысын рәссам менән осрашыу оло бәхет бит инде. Кемгә тейә әле ул.

– Бына был ағайҙы ла танныйһыңдыр инде.

– Да, да. Мостай Кәрим. Слушай, Әхмәт дуҫ, һинең портрет эшләүҙә үҙ алымың бар кеүек.

Әхмәт әҙ генә йылмая биреп ҡуйҙы. “Үҙ алымым булмаһа, ҡылҡәләм күтәреп, рәссаммын тип йөрөмәҫ тә инем” тигән уй башына килеп ҡуйһа ла, өндәшмәне. Шулай ҙа үҙе һорау бирҙе:

– Ә нимәнән ғибәрәт ул “үҙ алымым?”

– Бына һин, минеңсә, портреттарҙы буяу менән полотноға төрткән кеүек төшөрәһең, буяуҙы һыҙмаҡлап таратмайһың кеүек. Ә в целом елле килеп сыға.

– Соображаешь, үҙең кеүек урыҫса еппәргәндә...

– Эй, дуҫ кеше, минең тәҡдимде оноттораһың. Авиация институтында осрашыу һәм бәләкәй генә күргәҙмә – галерея портретов. Беҙҙең ректор Мәүлит Хәкимович бик мәғлүмәтле кеше, рәссамдарҙы, яҙыусыларҙы ныҡ ярата, бер юбилейҙан ҡалмай. Мин дә рәхмәт ишетермен унан. Һинең юбилейға ул мотлаҡ киләсәк.

– Ҡасан була һуң ул осрашыу тигәнең?

– Ошо аҙна аҙағында, мин машина ебәрермен, ярҙамға бер-ике студентты ла. Һөйләштек. Өсөнсө курстар, буласаҡ механиктар, авиадвигатель белгестәре. Бик эрудициялы халыҡ, һин уларҙы технарь, халам-балам тип уйлама.

– Вот здорово! – тигән булды Әхәт, әллә шаяртып, бындай ваҡытта уны аңлауы ҡыйын, шаян һүҙ ысын менән ҡушыла ла китә. – Дуҫҡай, һин беләһең бит, мин һөйләргә яратмайым, ни һөйләргә лә белмәйем.

– Улар һорауҙар бирерҙәр, һин яуап ҡына бирерһең. Инеш һүҙҙе үҙем әйтермен. Нисек беҙ Магнитта токарлыҡҡа уҡығанды иҫкә алырмын.

– Һин һөйләп өйрәнгәнһеңдер инде, – тигән булды Әхмәт, шуның менән һөйләшеү ҙә бөттө.

Әхмәт иртәгәһен үк картиналарҙы тәфсирләп төрҙө, күргәҙмәгә тигәндәре әҙер ине. Һөйләшелгән осрашыу сәғәттәре лә етте. Амфитеатр кеүек ҡоролған ҙур аудиторияға барып ингәс, ул бер аҙ юғалып та ҡалды. Ике йөҙләгән йәш егеттәр, ҡыҙҙар уға төбәлгән, көндәр буйы оҫтаханаһында бер үҙе эшләргә күнеккән рәссам өсөн был үтә ят күренеш ине.

Яҡташының ышаныслы телмәре уға көс, дәрт өҫтәп ебәргәндәй булды. Үҙенә һүҙ биргәс тә, Әхмәт һаман ошо хәленән сыға алмай бер булды, тулҡынланды.

– Нимә әйтәйем инде. Һеҙҙең алда мин эшләгән бер нисә портрет ҡына. Был ағайҙың бөтә ижады ошо ғына икән, тип уйлай күрмәгеҙ. Башҡа картиналарым да бар, эскиздар, этюдтар... Уларҙы еңел машинаға һыйҙырып та булмай, бөкләп йөрөтөргә лә ярамай.

Һорауҙарға күсеү менән, джинсы кейгән мөләйем ҡыҙ һүҙ алды.

– Һеҙ, Әхмәт ағай, нишләп тәбиғәтте төшөрмәйһегеҙ? Бына мин һеҙҙең күргәҙмәләрҙә булдым, беҙҙең Башҡортостан тәбиғәте юҡ дәрәжәһендә.

– Беләһеңме, һеңлем, һәр рәссамдың үҙ тематикаһы була. Миндә кешеләр – иң алда, төп фигуралар, тәбиғәт күренештәре фон ғына. Бына минең остаздарымдың береһе Александр Эрастович Тюлькин гел тиерлек тәбиғәтте төшөрөргә ярата ине, дуҫым Бурзянцев та шулай, зато уларҙа портрет бик аҙ.

Йәнә бер егет ҡул күтәрҙе.

– Әйтегеҙ әле, ниңә һеҙҙә ҡыҙыл, ҡара төҫтәр өҫтөнлөк итә?

– Дөрөҫ күргәнһең, ҡустым, минең портреттар ҙа шулайыраҡ. Үҙем дә аңламай ҡалам. Рәссам һүрәтте эшләгәндә, аҡтымы, ҡыҙылдымы, йәшелдеме күберәк

ҡулланайым әле, тип уйламай. Үҙенән-үҙе бер төҫ өҫтөнлөк ала ла китә. Күрәһең, үткән ҡанлы һуғыш минең рухыма нығ эҙ һалған, һуғыш ҡанымда ут һәм ҡара ҡором да, ҡара ҡайғы ла булып ятты, халҡым йөрәгенә лә шулай һеңгән. Ә мин һуғыш заманында үҫмер генә инем әле, ун ике йәшемдән ҡара ерҙә тир түктем, тормоштоң күп михнәтен татыным.

– Рәссамдарҙың айлыҡ эш хаҡы күпме?

Әхмәт саҡ көлөп ебәрмәне, шулай ҙа уның йөҙө етди төҫ алды. “Ни тиергә? Ысынын әйтһәң, көлкө. Ышанмаҫтар. Алдашыу килешмәй!”

– “Эш хаҡы” тигән төшөнсә беҙҙә юҡ, картинаңды музей йә берәй кеше һатып алһа, шуның хаҡы була. Унан беҙҙең Художестволы фонд тигән ойошма бар, ул күргәҙмәләр ойоштороп, әҙ-мәҙ аҡса бүлгән була. Так что не очень густо, – тип ҡуйған булды ул шаяртыу ҡатыш.

Байтаҡ һорауҙар биреп, осрашыуҙы йомғаҡлау яғына китеп барғанда, йәнә бер фырт ҡына кейенгән егет баҫты.

– Өфөләге Ленин һәйкәлен һеҙ нисек баһалайһығыҙ? Ҡала Советы ҡаршыһындағы...

Әхмәт инде “мин скульптор түгел, бер нисек тә баһалай алмайым” тип әйтергә лә уйлағайны, тик яуаптан ҡаса алманы, үҙ фекерен асыҡтан-асыҡ әйтте лә ҡуйҙы.

– Был Лев Кербелдең сираттағы штамповкаһы инде, оригиналь әҫәр түгел, ҡала һайын шул бер фигура. Етмәһә, пропорцияһы ла дөрөҫ түгел. Һуҙған ҡулы оҙонораҡ.

Зал тып-тын ҡалды, был тиклем аныҡ яуапты көтмәгәйнеләр шикелле рәссамдан. Әммә был яуаптың эҙемтәләре иртәгәһенә үк килеп ҡалҡты. Әхмәтте КПСС-тың өлкә комитетынан эҙләнеләр.

– Беренсе үҙе саҡырта. Немедленно!

Был команда Әхмәт Фәтҡуллинды тетрәтте: “Ни булды икән? Аяҡ баҫып ингән урыным түгел ине”.

Беренсе секретарь һөмһөрө ҡойолоп ултыра, ялпаҡ биттәре һалпайып, аҫылынып торған кеүек. Башын да күтәрмәй.

– Һин нимә, Владимир Ильичты тәнҡитләргә тотондоңмо ни?

– Юҡ. Мин уның һәйкәле тураһында һүҙ йөрөттөм. Мөмкиндер бит. Ысынлап та, штамповка ул. СССР-ҙың ҡайһы ҡалаһына барһаң да, даһибыҙ шул уҡ позала, ҡулын тоҫҡап, юл күрһәтә.

Әхмәттең асыҡтан-асыҡ баһаһы үҙен күк вәкиле ролендә күреп өйрәнгән партия әһелен дә аптыратты. Быны ул көтмәгәйне. Кешеләрҙең гел генә үҙен ғәйепле һанап, ғәфү үтенеүҙәренә өйрәнеп бөткәйне шул улар. Ә был рәссам үҙ уйын ярып һалды ла ҡуйҙы, ғәфү үтенеп, кәмһенеп, меҫкенләнеп торманы.

Һөйләшеүҙе оҙаҡҡа һуҙманы секретарь, үҙ фекерендә тора торған фанат менән эш итеүен аңланымы, даһи темаһын сурытыу уның өсөн дә ҡулай түгел ине, берәй яңылыш һорау бирһәң, был йәнә иркенәйеп китеп, үҙ фекерен һөйләй башлар, бының өсөн нишләтәһең уны? Уның әңгәмәһен тейешле урында тыңлауҙарын белә ине ул.

– Бар, ҡабат Ленин һәйкәле тураһында ауыҙ күтәреп һөйләп йөрөмә, һүрәттәреңде эшлә, – тине ул, һүҙҙең тамамланыуын белдереп. – Үтә күп белдекле булып китәһең.

Был киң бүлмәнән сыҡҡан рәссам үҙен балта төйҙәһе менән һуғып шаңҡытып боҙ өҫтөнә һалған балыҡ кеүек тойҙо. “Шуның менән ижадҡа юл ябылырмы

икән ни?"  60-сы йылдар уртаһы бит әле, илдә Хрущев "өргән" йылы ел иҫеүен дауам  итә, партияның иң ҙур яңы әһелдәре лә "демократия" һүҙен кәрәк-кәрәкмәгән урында ҡабатлай. Был хәл күңелгә әҙ генә булһа ла өмөт өҫтәй.

Әхмәт, ауыр уйҙарынан арына алмай, кисәге осрашыуҙы ойошторған яҡташына барҙы. Ни булғанын түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе.

– Да-а, студенттар араһында стукач булған, тимәк. Вәт әй! Шул арала Беренсенең реакцияһы! Иҫ китерлек.

– Минең уйымса, ул да үҙен һаҡлай, – тигән булды Әхмәт.

– Пожалуй, һин хаҡлы. Һиңә, бәлки, ғәфү үтенергә кәрәк булғандыр. Яңылышыуыңды танырға. Даһи һәйкәле алдында теҙ сүгергә?

– Ни в коем случае! – тип ҡысҡырып ебәргәнен Әхмәт һиҙмәй ҙә ҡалды. – Мине ул бөтөнләй ихтирам итмәйәсәк, меҫкенгә һанаясаҡ ине бит, что һин!

– Үпкәләмә инде, яҡташ. Шулай килеп сыҡты ла ҡуйҙы бит. Теге һорау биргән студент, бәлки, провокаторҙыр.

– Булған булған инде, ярар, онотайыҡ, – тигән булды Әхмәт һәм үҙе лә тыныҫланды.

Ҡабат ул был осрашыу, Беренсенең һүҙҙәре тураһында бер кемгә лә һөйләмәҫ булды, оҙаҡ йылдарға ауыҙын йомдо, хатта ҡатынына ла ләм-мим өндәшмәне.

Рәссам яңынан-яңы картиналарға тотондо. Айырым портреттарҙан коллектив һүрәттәргә күсте. Бара-бара "Ауылда байрам" панорамаһы хасил булды. Бында инде шатлыҡлы йөҙҙәр, асыҡ төҫтәр өҫтөнлөк итте. Баҙыҡ ир һәм ҡатындар, аяҡҡа баҫҡан балалар ҡыҙыл байраҡ артынан алға ынтыла. Аҡ күлдәкле ир даһиҙың таяҡҡа ҡағылған портретын да күтәреп алған. Алыҫта асыҡ төҫтә тау түбәләре һәм өйҙәр, улар әле дүрт мөйөшлө, ваҡ бүрәнәнән генә ҡоролған. 30-сы йылдар атмосфераһы, ынтылыш, киләсәккә ышаныс.

Шундай уҡ тонда "Һабантуй" картинаһы яҙылды. Халыҡ тормошонда йыл да була торған был оло байрам күтәренке күңел менән үтә. Алғы планға ҡуйылған кешеләр (ололар, йәштәр, балалар) күңелле тамашаға ынтыла, кәйефтәре байрамса. Картина бик көслө милли колоритлы итеп бирелгән, буяуҙары ҡуйы. Рәссамдың сираттағы уңышы ине был да.

Әхмәт Фәтҡуллин өсөн ҙур яуаплылыҡ һәм шатлыҡлы көндәр яҡынлай ине. 1976 йыл – Мәскәүҙә беренсе шәхси күргәҙмә! Бында инде ижадты бөтә тулылығы  менән күрһәтеп була. Төҫлө буклеттар, каталогтар баҫылды. Бөйөк рәссамдар, белгестәр йыйылды. Мәскәү Мәскәү инде. Баһаны тыйнаҡ ҡына бирһәләр ҙә, мәғәнәһе ҙур. Бынан һуң урындағы түрәләр ҙә, рәссамдар ҙа  бөтөнләй башҡа ҡарашҡа күсте. Ижадҡа йәбешеп барған "ҡараңғы төҫ" тигән баһалар артҡа күсеп, "милли колорит, үҙенсәлек" төшөнсәләре ҡалҡып сыҡты. Ошо күргәҙмәнән һуң ай самаһы ваҡыт үтеүгә, Әхмәткә Художество академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы тигән исем биреп ҡуйҙылар.

Һәм бына ике йылдан йәнә бер ваҡиға – уның эштәре сит илгә күргәҙмәгә тәҡдим ителде, ошо хаҡта ойоштороу комитетының хуплауы алынды. Етмәһә ҡайҙа бит әле – Франция! Париж! Әҙерлек эштәре йылға яҡын ваҡытын алды. Иң йәнгә тейгәне картиналарҙы һайлау булды. Быны инде өлкә комитет ойошторған махсус комиссия башҡарҙы. Әхмәт үҙе яратҡан, тәҡдим иткән күп һүрәттәрҙе кире ҡаҡтылар: әлеге ҡараңғы тон, ҡайғы баҫҡан йөҙлө кешеләр. Был бит капиталистик илдә социалистик ҡоролошто кәмһетеү тип ҡабул ителде. Асыҡ төҫтәгеләрҙән "Һабантуй", "Ауылда байрам", "Алтын туй" һәм бер нисә портрет эләкте. Уларын да иләп, һелкеп кенә үткәрҙеләр.

– Ҡатынды ла алып барып булмаçмы икән? – тип һораған булды Әхмәт үҙенсә бер ҡатлылыҡ менән.

– Аҡсаң булһа, әйҙә! – булды яуап, – үҙеңде командировать итеүгә лә ҡырып-сырып ҡына эшләнек әле. Кеçәңә – илле доллар.

Сит илгә тәүге сығыу ине был. Сыҡҡанға тиклем район, ҡала комитеттары ултырыштарын үтергә кәрәк ине. Партия өлкә комитеты комиссияһы эшен икенсе секретарь Манаев үҙе етәкләне. Улар алдында Әхмәт үҙен бесәй тырнағына эләккән сысҡан кеүек тойҙо. Сәйәси һорауҙар менән дә ҡапшанылар, бер нәмә менән дә һоҡланмаçҡа өйрәттеләр. Ҡайһыһылыр уның Ленин һәйкәлен тәнҡитләүен дә иçкә алды. Шулай ҙа күргәҙмәлә ҡатнашыу тәҡдиме Мәскәүҙән килгәс, "ебәрмәçкә!" тип әйтә алманылар. Ни тиһәң дә, республика өсөн был намыç эше бит.

Поезд ике тәүлек елде. Таможня тикшеренеүҙәрен үтеү мәшәҡәттәре Әхмәт өсөн өп-өр яңы тойғо ине, өс илдең сиген аша сығаһың бит. Картиналарға ҡарата төҙөлгән документтарҙы бик ентекләп тикшерҙеләр, ҡуйы ҡашлы, ҡуңыр йөҙлө, тырпыҡ сәсле рәссамдың үҙенә лә, паспортына ла сик һаҡсылары тишерҙәй ҡараны: үҙеме был, түгелме, тиҙәр, ахыры. Һәм бына мәшһүр Париж... Әхмәттең үҙенә генә тәржемәсе беркетеп ҡуйҙылар, илселектән көн дә күргәҙмәгә лә киләләр, отелгә лә көтмәгәндә килеп инәләр. Күҙҙән ысҡындырмайҙар. Йәш балет артисы Рудольф Нуриевтың труппаһынан ҡасып китеү, сәйәси һыйыныу эҙләү шау-шыуы һүрелеп үк бөтмәгәйне әле. Шуғамылыр инде, Әхәт һис яңғыҙ ҡала алманы, урамға ла бер үҙе сығыу тураһында уй ҙа юҡ. Беренсе аҙым яһауың менән бороп индерерҙәр, индереү генә түгел, ҡыуып, дөрөçөргә, саҡырып кире ҡайтарырҙар. Күргәҙмәгә урыçса таҙа һөйләшкән кешеләр ҙә килгеләне. Артыҡ-бортоҡ һорау биреп ҡаңғыртыу юҡ, күргәндәрен эстән генә кисереп, ихтирам менән ололоҡлап баш ҡына эйәләр, сәскә килтергәндәре лә бар.

Күргәҙмә аҙна самаһы барҙы, Әхмәт ҙур тәьçоратар менән ҡанатланып ҡайтып төштө. Рәссамдар берлегенең тәүге ултырышында уҡ Әхмәттең Париждағы күргәҙмәлә ҡатнашыуы тураһындағы отчеты ҡуйылды. Әхмәт партия әһелдәре биргән кәңәштән сыға алмай ине әле, бер ҙә "Париж да Париж" тип иçе китмәй, ах та ух килмәй генә һөйләне, әйтерһең, күргәҙмә Бәләбәйҙә генә булған.

Ҡәләмдәштәренең ҡайһы берәүҙәре:

– Да, был бар донъяны йөрөп сыҡҡан тиерһең, ҡайһылай һалҡын ғына һөйләй, – тип ебәреүселәр ҙә булды.

Кемдер, Борис Домашников булһа кәрәк, шаяртып та алды:

– Йә, Әхмәт брат, француженкалар нисек?

– "Нисек" тип ни, арыуҙар инде.

– Һин һуң, башҡорт егеттәрен оятҡа ҡалдырманыңмы?

– Егеттәребеҙҙе оятҡа ҡалдырмайым тип, француженкаларға яҡынламаным да ҡуйҙым.

Әхәттең шаяртып һөйләүенә бөтәһе лә шарҡылдап көлдө.

– Не лишен он юмора, однако, – тине кемдер.

– Теле телгә йоҡмай. Йыуаштан йыуан сыҡҡан...

Илле йәше тулғанда булған был күргәҙмә Әхмәттең яҙмышын ыңғай яҡҡа ҡырҡа борҙо. Үҙенә ышаныу тойғолары үçте, аҙаҡ сәйәхәт татлы төш кеүек кенә булып ҡалды. Бынан аҙаҡ йыл һайын тиерлек күргәҙмәләр китте: Вьетнам, Корея, башҡа илдәр... Сәйәхәт артынан сәйәхәт, тик тәүгеһенән дә матур булып күңелгә һеңгәне булманы.

Дан да ҡыҙыҡ нәмә икән: яуҙы маҡтаулы исемдәр, береһе артынан береһе. Иң ҡәҙерлеһе “СССР-ҙың халыҡ рәссамы” исеме булды.

Бынан аҙаҡ рәссам яңы дәрт менән “Ямғыр теләү” полотноһын, “Атайым”, “Шағир Рауил Бикбаев” портреттарын эшләп ҡуйҙы. Былары алдағы күргәҙмәләрҙә төп урындарҙы ала торған һүрәттәр ине.

“Ямғыр теләү” картинаһын рәссамдар авторҙы аңлап, тейешле баһа бирһәләр ҙә, партия функционерҙары кирерәк ҡараштарын да белдермәй булдыра алманы. Был ҡарашты улар рәссамдар аша әйттерергә маташты.

– Ямғырҙы теләп яуҙырып буламы ни инде? Что за мистика?

– Халыҡта таралған ырым ул, – тип аҡланды рәссам. – Мин бәләкәй саҡта ошолай йыйылып доға ҡылыу менән дә, һыу һибешеү, берен-бере һыуға ташлашыу менән дә башҡарыла торғайны. Әмәлгә ҡалғандай, шул уҡ көндө теләгән ямғыр яуып та ҡуя ине. Бәлки, күмәк көс, күмәк теләк күктәргә ашып, ниндәйҙер энергетик көскә эйә булғандыр.

– Ә ниңә кешеләрҙең арҡалары менән тау һырттары бөтәһе лә бер күңелһеҙ төҫтә булған?

– Ер ҙә, кешеләрҙең күңеле лә ҡорғаҡһыған. Уларға терелткес ямғыр кәрәк.

Әхмәт Фәтҡуллин һынлы сәнғәт академигы исемен дә алды, уның ижады тейешле баһаланып килә ине, шикелле.

Сәнғәт институтының һынлы сәнғәт факультеты деканы бер көндө уның фатирына килеп инде.

– Телефонығыҙҙы әллә алмайһығыҙ, әллә өйҙә тормайһығыҙ, шуға шылтыратып тормай килергә мәжбүр булдым, – тине ул. – Арыу ғынамыһың?

– Арыу ғына, әгәр шаярмаһаң? – тип ҡаршы алды уны Әхмәт. – Ниндәй елдәр ташланы?

– Мин һине факультетҡа эшкә саҡырырға килдем әле, Әхмәт ағай.

– Уныһы ни тағы? – Минән ни фәтүә сығыр икән һуң?

– Халыҡ рәссамы һеҙ. Беҙҙең факультетҡа килеп, студенттарға күренеүегеҙ – үҙе ҙур ваҡиға буласаҡ. Аспиранттар бирербеҙ.

– Мин бик һөйләргә яратмайым бит әле, Зәйнетдинов ҡустым.

– Һеҙҙең күренеүегеҙ мөһим, ағай. Фойела күргәҙмәгеҙҙе лә ойошторорбоҙ.

– О, вот это дельно!

Шул йылды уҡ Әхмәт Фәтҡуллинға сәнғәт буйынса профессор исеме лә биреп ҡуйҙылар. Буласаҡ йәш рәссамдар менән осрашып тороу, фекер алышыу алтмыш өҫтөнә баҫкан рәссамға яңы һулыш биргәндәй булды. Декан уны бер шаяртып та алды.

– Әхмәт ағай, йәштәр араһында ҡайнау һинең үҙеңде йәшәртеп ебәрҙе, шикелле.

– А как же, барҙыр инде, барҙыр! Миндә лә йәш бар бит.

Әхәт Фәтҡуллин үҙе лә шаян кеше ине, ҡайһы берҙә арттырып та ебәргеләй. Белгән кешеләр араһында шаянлыҡ менән яуап бирә. Бер барғанында факультеттың оҫтаханаһына инде ул, мольберттар, һыҙмалар менән тулған бүлмәлә бер таныш һаҡалтай ниҙер һыҙғылай ине, Әхмәт тотто ла уға:

– Бәй, һин дә һүрәт яһайһыңмы ни әле? – тине лә ҡуйҙы.

Тегенең йөҙө буҙарып, күҙҙәре янып китте. Ул да рәсем уҡытыусыһы икән дә баһа. Әхмәт, арттырғанын аңлай һалып, төҙәтергә тырышты:

– Яһа, яһа, шаяртам мин. Һинең эшең бешә... Тик мине күргәҙмәңә саҡырырға онотма.

Унының тәүге ике аспиранты ла килеп сыҡты. Әхмәт уларға, һынлы сәнғәт буйынса лекция һөйләү менән бергә, профессиональ серҙәрен дә асты. Йәлилов менән Әмировты ныҡ яратты ул. Һүҙгә һаранырыаҡ булһа ла, кеше араһында маҡтап ебәреүҙән дә тартынманы.

Үҙенең уҡыусыһы Сөләймән Йәлиловтың һынлы сәнғәттәге тәүге аҙымдарын ҙур иғтибар менән күҙәтеп барҙы.

– Йәлилов, һин реализмдан арттыра башланың түгелме һуң? – тип ярым шаяртып, ярым ысынтылап әйтте ул. – Бынау үгеҙеңдең башы шайтанға оҡшай түгелме?

– Мин гротеск алымын хуп күрәм, – тине йәш рәссам.

– Һә, грамотный күренәһең. Ярай, ярай, донъяны нисек күрәһең, шулай төшөр. Һәр рәссам сәнғәткә үҙ алымы менән сума.

Уҡыусылары менән ул шулай бик ябай ғына аралаша. Өгөт-нәсихәт уҡымай. “Нисек аңлайһың, шулай аңла” тигән кеүек һүҙ әйтеп тә ҡуя.

* * *

Иртән торғас та Әхмәт тәҙрә янына килде. Тышта көҙгө көн илаулай. Быҫҡаҡлап ямғыр яуа, бейек йорттоң түбәһенән тамған ваҡ тамсылар тәҙрә янындағы йүкәнең һарғайған япраҡтарына тап-топ итеп төшә.

– Эльза, ҡана мин сәй эсә һалайым да оҫтаханама китәйем әле.

– Ҡуй, бынау көндә нишләйһең унда? Йылы бирмәгәндәрҙер әле, һалҡындыр.

– Әй, шул «ҡуй»ыңды ҡуйып тор әле.

– Әләйһәң, әйҙә бергә, мин дә барам.

– Әйҙә һуң. Миңә ҡайһы бер полотноларҙы алып биреп булһа ла торорһоң. Бүлмәне лә саң баҫҡандыр, күптән булған юҡ.

Һуңғы йылдарҙа олоғайыуы, хәтере лә китә биргәнен ҡатыны яҡшы тоя ине. Шуға ул ирен үҙен генә бер генә аҙым да ситкә ебәрмәҫкә тырыша. Бала кеүек күрә башланы. Оҫтаханаһына барып инеүгә көн дә асылып китте, ҙур тәҙрәләрҙән көҙгө ҡояштың һуңғы нурҙары бөркөлдө. Әхмәттең күңеле күтәрелде.

– Әйттем дәһә, бөгөн көн матур булыр, тип өйҙә ултырып буламы ни шундай көндә?

– Һиҙгерлегең бар инде.

Эльза ул һораған бер һүрәтте килтереп мольбертҡа нығытты. Әхмәт Фәтҡуллин эш кейемен кейеп алды ла буяуҙарҙы таҡтала ҡуша, иҙә башланы.

– Однако, күҙ насар күрә бит әле, Эльза. Төҫтәрҙең ҡуйылығын айырмайым.

– Ҡуйып тор, ял итеп ал. Эшләгәнеңде боҙоп ҡуйма инде.

– Әйҙә, әҙерәк йөрөп киләйек әле.

Бына улар ҡаршылағы паркка барып инде. Аяҡ аҫтында кипкән япраҡтар ҡыштырлай, һауа саф, арҡаны ҡояш йылыта.

Әхмәт ҡасандыр үҙе тәнҡитләгән һәйкәлгә ҡарап уйға ҡалды: «Торор инде ул, мәңге торор даһи һәйкәл, тора бирһен. Власть алышынған һайын һәйкәлдәрҙе алыштырып булмай һәм ярамай ҙа. Мин, биғәйбә, даһиҙың таш һынын ғына рәссам күҙлегенән тәнҡитләнем. Хәҙер бит үҙен, шәхесен ер менән тигеҙләнеләр. Бынһы бөтөнләй яраған эш түгел. Биш-алты тел белгән өсөн генә лә ихтирамға лайыҡ бит ул. Эх!.. заманалар...»



**Мостай**
**КӘРИМ**

# КӨНДӘЛЕКТӘР*

**2000 йыл**

**9.1.2000.**

*Инәй алдында әүәлерәк кемдер берәү урыҫты "кафыр" тип тиргәй башлаһа, ул әйтә торған булған: "Улай тимә әле, урыҫ кафырмы, беҙ кафырмы, уны белеп булмай".*

*Ябай һәм бөйөк фәлсәфә!*

**18.1.2000.**

*Людей надобно жалеть не только сердцем, но и разумом. Жалость разумом вызывает конкретное действие и реальную помощь нуждающемуся.*

***

*Такое обращение придумал я к депутатам Госдумы.*

*"Дорогие, очень дорогие дармоеды!*

*Я много насмотрелся на свете, немало видел дармоедов. Но таких, дорогих, очень дорогих еще не было. Вы обходитесь стране, народу России безмерно дорого. Безмерно дорогие депутаты! Любите друг друга, берегите друг друга, ибо вас, кроме вас самих, никто любить не станет, никто беречь не станет (даже Жириновский!). Даю вам такой немудреный мудрый совет: когда из общего котла хлебаете, не бейте ложкой друг друга по рукам; похлебки, называемый государственной казной, всем хватит. Кому мало, добавка — внебюджетная. Так что, радуйтесь сами, радуйте нас, вдохновляйте ваших полуголодных избирателей своим отменным аппетитом и всеядностью желаний".*

---

*Дауамы. Башы журналдың 2006 йылғы 10-11-се, 2007 йылғы 10-сы, 2008 йылғы 10-сы, 2009 йылғы 10-сы һандарында сыҡты. Матбуғатҡа балалары **Илгиз КӘРИМОВ** менән **Әлфиә КӘРИМОВА** әҙерләне.*

***

*Фраза, сказанная женщине:*

*"Даже Бог мне не каждый день снится, а ты требуешь, чтобы я думал только о тебе".*

**3.III.2000.**

*Әле Ҡадир Даян тураһында мәҡәлә уҡыным да ("Башҡортостан", 2.III) бер хәлде хәтерләнем. 1940 йылдың йәйендә "Культура паркы"ында (хәҙерге Матросов баҡсаһы) Хәй менән оҙаҡ ҡына һыра эсеп (ул заманда араҡы эсеү юҡ ине) ултырҙыҡ та баҡса буйлап йөрөнөк. Төнгө берҙәр тирәһендә ҡайтырға сыҡтыҡ. Ленин урамындағы икенсе номерлы йорт ҡаршыһына еткәс, Хәй:*

*— Әйҙә, Даянға инеп сығабыҙ, — тине. Даян шунда тора ине. Ҡыҙмаса баштан был уйҙы мин дә хупланым.*

*— Давай инәбеҙ, — тинем.*

*Ҡадир Даян ул саҡта — пединститутта минең уҡытыусым. Ләкин миңә студенты итеп кенә ҡарамай, шағирға һанай ине. Миңә арнап хатта шиғыр ҙа яҙғайны. (Йәнәһе, Мостайҙың менгән шиғыр аты әле үҙен күрһәтер...) Шуға күрә артыҡ тартынып торманым.*

*Байтаҡ ҡына шаҡыныҡ. Ишекте хужа асты. Индек. Ул йәш кәләше менән, моғайын, түшәктә ятҡан булғандыр.*

*— И-и-и, егеттәр! — тине Даян, хатта ҡыуанып. — Рәхим итегеҙ! Бигерәк тә ваҡытлы йөрөйһөгөҙ икән! Түрҙән уҙығыҙ! Афарин!*

*Хәй — бик нескә күңелле, саҡ ҡына ҡылтымыраҡ та зат. Уның хәтере ҡалды ла ҡуйҙы:*

*— Нимә эшләп ваҡытлы булһын инде?! Ниңә алдашаһың? Төнгө икенсе бит! Бына һин беҙҙе ваҡытһыҙ ваҡытта ҡабул ит. Шул саҡта хуп булыр.*

*— И-и, буйҙаҡтар! Һеҙ ваҡытһыҙ ваҡытта ла ваҡытлыһығыҙ. Борсолмағыҙ, минең эшем ҡалмаç. Ҡалһа, һуңынан еренә еткерермен. Бисәкәй! Сәй ҡуй!*

*— Ҡуйҙым инде!*

**10.III.2000.**

*Бөгөнгө көндө берҙән-бер иҫән фронтташ иптәшем Ғилман килеп китте. Мәләүез районында Томансы ауылында йәшәй. Шундай әҙәпле, мәғәнәле ул. Сәй эсеп, бер-ике сәғәт һөйләшеп ултырғас, ҡапыл китергә йыйынды. Мин ебәрмәҫкә иткәс: "Һин халыҡ кешеһе, мин бер үҙем. Һинең иғтибарыңды артыҡ ҡабул итә алмайым," — тине.*

*— Мәләүезгә поезд кис кенә китә бит, ашыҡма әле, — тип ҡараным.*

*— Бында поездың ҡатнашы юҡ. Ул китер ҙә китер, һинең күңел тыныслығың минең өсөн ҡыйбат, — ти.*

*1945 йылдың февраль башында Венгрияла мин уны маршевая рота менән алғы һыҙыҡҡа йүнәлгән еренән үҙебеҙҙең фронт газетаһына эшкә алып ҡалдым. Мин эшләгән татар газетаһы "Совет сугышчысы"на корректор кәрәк ине. Иң артта бәләкәй*

*генә һалдат аҡһай-туҡһай килә. Мин юл ситендә торам. Һалдаттың йөҙөнә ҡарайым. Тегеңә эйәрә биреп һорайым: "Башҡортмо?" — тим. "Башҡортмон", — ти был.*

*Ҡыҫҡаһы, колонна ошо ауылда ҡунарға ҡалды. Мин үҙебеҙҙең баш редакторыбыҙ Николай Степанович Филипповҡа индем. "Татар газетаһына корректор таптым", — тинем. Шунда уҡ ул 3-сө Украина фронтының Политуправление начальнигы, үҙенең дуҫы Аношин менән телефондан һөйләште. Аношин 1938—1941 йылдарҙа партияның Башҡортостан өлкә комитетының 1-се секретары булып эшләне. Аношин рөхсәт итте. Мин Ғилман Хәйбуллинды барып алдым. Һуғышты бергәләп Венала тамамланыҡ.*

*Венала минең иҫ киткес мөхәббәтем булды. Исеме уның Һилга ине. Торған урамы Зибенштерништрассе (Етегән йондоҙ урамы). Бынан ун биш йылдар элек миңә Венаға барырға форсат сыҡҡайны. Барманым. Һилганы күрһәм (моғайын, уны табыр инем), күңелем ҡайтыр, алыҫтағы яҡты көндәремде юғалтырмын тип ҡурҡтым. Күптән түгел Рәхимовтың ҡабул итеү бүлмәһендә Венанан килгән бер эшҡыуар менән һөйләшеп торҙоҡ. Ул русса белә. Президенттың ҡабул итеүен көтөп ултыра. Тегеңә Һилга тураһында әйттем: "Теләһәгеҙ, Венаға ҡайтҡас та уны табып, һеҙгә хәбәр итәм. Иҫән булһа, әлбиттә", — ти. "Тапмағыҙ, уҙғандарҙы табып булмай. Уларҙы хәтерләргә генә мөмкин."*

*Ғилман килеп, бына ниндәй хәтирәләр уятып китте.*

**15.III.2000.**

*Сәйер бер күҙәтеү. Донъяла һуғыштар бихисап күп булған. Унда йыш ҡына еңеүселәр отторошло, еңелеүселәр отошло булып сыға-лар. Сөнки еңелгәндәрҙә йәшәү һәләте, ныҡышмалылыҡ арта, төҙөү ҡеүәте ишәйә, ә еңеүсе ғәмһеҙлеккә бирелә.*

**10.IV.2000.**

*Мин йәш саҡта барлы-юҡлы моңом менән гел бер йырҙы йырлай инем. Бер төрлө ашҡынып, ярһып йырлай инем.*

*Атҡа атланһаң, һикереп атлан,*
*Бөҙрә сәсең һелкенһен.*
*Ҡайғырма баш, түгелмә йәш,*
*Беҙ күрәһен кем күрһен?..*

*Шуны йырлағанда үҙемде бик сая, хәтәр егет тип хис итә инем. Шул йыр хәтеремә килде. Уның мәғәнәһе ысынлап та бөгөнгө тор-мошомдоң асылын сағылдыра:*

*Беҙ күрәһен кем күрһен?..*

**12.IV.2000.**

*Если бы я не формировался в самый оптимистический период, в период высокого энтузиазма во всем — в труде, творчестве, в обще-ственном сознании — не знаю, каким было бы мое мировосприятие. Возможно скепсис, неверие, сомнения занимали бы вакуум в моем*

*сознании. У меня натура — сомневающаяся. Я верил, восхищался, вдохновлялся пафосом своего времени. Потому, как ни странно, у меня нет ни тени разочарования в том времени. Я — его дитя. В матери не разочаровываются. XX столетие — мой век. Даже с самого начала. Ибо моя мать в начале века была почти взрослой — ей было 15 лет. Мой век начинается с момента ее созревания. Задумываю большую статью "Прощание с веком".*

**19.IV.2000.**

*Артығыраҡ тороп ташланым әле был донъяла. Китергә кәрәк ине. Рауза шундай хәлдә. Хәҙер, киреһенсә, бирешмәҫкә, бирелмәҫкә тейешмен. Әлфиәгә лә таяныс кәрәк. Ваҡыт-ваҡыт шундай кәйеф була: минең үҙемә бер нәмә лә кәрәк түгел, хатта үҙем дә...*

***

*Кто-то доносит на ближних властям или просто другим людям, кто-то (я имею в виду писателей, философов, историков) в своих писаниях доносит на своих современников, на свое время будущим временам. Вообще жизнь, кажется, состоит из доносов.*

**1.V.2000.**

*Төндә ҡар яуҙы. Ағастарҙа әле лә ҡар күренә. Донъяның ҡото юҡ. Шулай ҙа Әлфиә байрам табыны әҙерләне. Аҡ шарап эстек. Рауҙаны коляскаһында көйө өҫтәл эргәһенә килтерҙек. Ул аяғына ла баҫа алмай. Уға ла бер йотом вино бирҙек. Иҫерҙе лә ҡуйҙы. Шунан ошо таҡмаҡ килеп сыҡты:*

*Вино эсеп бер ҡашыҡ,*
*Иҫерҙе бит был ҡарсыҡ.*
*Хәҙер ҡурҡып торабыҙ:*
*Китә күрмәһен ҡасып.*

**8.V.2000.**

*Мортаза Ғөбәйҙулловичҡа кемдер Мәскәүҙә минең өсөн тип "Солдаты XX века" исемле китапты биргән, шуны килтерҙеләр. Унда минең турала ла бар. Шул китапты аҡтарып ултырғанда бына ниндәй фекер килде: һуғыш барышында иң тиҙ ҡартайған кешеләр, моғайын, генералдар һәм әсәләр булғандыр.*

**30.V.2000.**

*Гамлетовский вечный вопрос "Быть или не быть?" в наше время можно переиначивать так: "Ныть или не ныть? — вот в чем вопрос!"*

***

*Об истоках наций писатель Григорий Канович устами Ребби Ури говорит так: "Велико море, но люди и птицы не из него пьют, а из рек и речушек. Что было бы, если в один прекрасный день их взяли да осушили?"*

*Как хорошо сказано. И просто.*

***

*Беҙҙең перестройканың төп һыҙатын шулай билдәләп булыр ине: арыҫлан үлгәс, себендәр үрсей, сөнки үләкһә себендән башҡа затты тыуҙыра алмай.*

**1.VI.2000.**

*Минең рухи ауылымда халыҡ күп түгел. Ваҡыт үтеү менән ҡайһы берәүҙәре минең ихтыярым буйынса ҡасаҡтарға әйләнеп, ситкә сығып китте, бәғзеләре, үҙҙәре теләп, минең ауылды ташланылар. Ундайҙары бер-ике генә...*

***

*Беҙ киткәндән һуң донъя малы ғына түгел, хатта ҡояш үҙе лә тороп ҡаласаҡ беҙҙән.*

**11.VI.2000.**

*Мәскәүҙә "Халыҡтар Ассамблеяһы"ның конгресында булып ҡайттым. Уның етәксеһе — Рамазан Абдулатипов. Мин дә сығыш яһаным. Төшкө аш ваҡытында айырым бүлмәлә ултырҙыҡ. Давид Кугультинов шундай ирмәк нәмәне иҫкә төшөрөп һөйләне: "Мостай бер заман 10 йыл буйы хәмер заты менән иренен дә сылатманы. Бер саҡ килеп был ураҙаһын асты. "Һин бит нәфсе ҡапсығыңдың ауыҙын бәйләп ҡуйғайның, — тим быға, — нимә эшләп систең?" Мостай яуап ҡайтарҙы: "Һин дөрөҫ әйтәһең, ысынлап та, бәйләп ҡуйғайным. Ләкин мин ғәйепле түгел, бәйләгән ебем ғәйепле. Шул тиклем ғүмер эсендә ул серене лә тик торғанда өҙөлөп ҡуйҙы. Ваҡыт үҙенекен ала..." — тип тәрән мәғәнә лә сығарҙы.*

*Давид быны бик тәмләп һөйләне.*

***

*Һуғыштан һуңғы йылдар. Ауыл мәктәбендә ҡоштар тураһында дәрес бара. Уҡытыусы төрлө ҡоштоң төп сифатын һорай. Балалар берәм-берәм яуап бирә:*

*— Күгәрсен гөрләй...*

*— Һандуғас һайрай...*

*— Бөркөт саңҡ-саңҡ итә.*

*— Һайыҫҡан нимәһе менән айырыла? — тип һорай уҡытыусы апа.*

*— Һайыҫҡан ул, — ти Искәндәр, — кеше күкәйен суҡып ашай.*

*Быны инде "тауыҡ йомортҡаһын суҡый" тип аңларға кәрәк.*

***

*Һеңлем Салисә һуғыш бөткән йылдарҙа Ишембайҙа уҡытты, ул һөйләй: "Кинйәбулат ауылынан бер малай уҡырға йөрөмәй башланы. Әсәһен саҡырттым. "Ниңә улығыҙ уҡырға йөрөмәй?" — тим. "Һылыу, уның ҡайғыһы бик ҙур, шуға ҡайғырып ҡаңғыра, — ти әсә кеше. — Ағаһы кәләш алғайны ла, тәне һыуыҡ тип, айырып ебәрҙе. Бала шуға хәсрәтләнә". Сәбәп, әлбиттә, бик ҙур.*

**16. VII.2000.**

*Бөгөн Раузаның зиһене асығыраҡ һымаҡ. Быны һынамаҡ булып, әйтәм: “Мин һине яратам. Һин мине яратаһыңмы?” — тим. Тетрәткес яуап алдым: “Минең һиңә булған мөхәббәтемде бер нәмәгә лә һыйҙырыу мөмкин түгел”, — тине. Ә бит ул йыш ҡына бүтән донъяла, үҙ донъяһында йәшәй.*

***

*Мода — всегда вчерашний день.*

***

*Бер нәмәне аңланым. Кем генә булмаһын, урамда осраһа ла, телефондан һөйләшһә лә, миңә зарланырға керешә. Ҡотолор әмәл юҡ. Бынан ары шулай итергә кәрәк: һәр осраҡта башлап үҙем зарланырға тотонасаҡмын. Булдырып булһа, әлбиттә...*

**13.IX.2000.**

*Начал снова перелистывать романы Шолом-Алейхема. Они очень еврейские. А романы Фейтвангера, к примеру, “в то же время” еврейские. Чтение романов Шолом-Алейхема при всем интересе и увлекательности малость утомительно (возможно, перенасыщенностью “еврейским“). Он — великий весельчак. Смеется сквозь слезы.*

***

*У евреев никогда не было проблемы “быть или не быть” или “что делать”. Они всегда знали, что надо быть, знали, что делать. Иначе погибли бы. В еврейских книгах я немало встречал пустых мечтаний, но не встречал пустых еврейских терзаний. О еврействе говорю довольно часто. Жизнестойкость и жизнелюбие евреев пример и для нас. Не отчуждаться от них, а учиться у них надобно.*

***

*Сладкое слово “Свобода” пустой звон, если оно не орошено горьким потом труда. Мы пока оглушены этим звоном.*

**25.IX.2000.**

*Төнөн сәйер төш күрҙем. Сәйер генәме икән? Йонсоу, ябыҡ Мирзаһитов мине ҡосаҡлап алды ла ысҡындырмай, етмәһә, иренемдән үбә. Мин ҡарышам, ләкин тегене еңеп булмай. Үҙем шунда уҡ уйлайым: “Хәйерлегә булһын инде, мине үлек үпте”, — тим. Иртән сестра һорай: “Нишләп бөгөн кәйефегеҙ юҡ?”— ти. Юҡлығы күренеп тора, күрәһең.*

**4.X.2000.**

*При моих ранениях и всяких операциях, при отсутствии доли левого легкого, при маловоздержанности относительно всяких соблазнов живу довольно долго. Причину вижу в том, что не страдал желочной завистью, злой памятью.*

**18.X.2000.**

*Через два дня мне исполнится 81. Странная цифра. Никогда не думал сам — живой — назову эту цифру. Хотя лет 40 назад про себя прикинул: сколько лет будет мне в конце XX века? Мне часто кажется, что умру в день моего рождения. Не сейчас. Потом. Я всегда любил точность в завершении своих дел. Учился без "хвостов", жил без "хвостов", старался, повторяю, не оставлять "хвостов" в делах своих. Две даты — начало и конец — надеюсь, тоже будет без "хвостов" в виде лишних месяцев.*

**20.X.2000.**

*82-гә киттем. "Кәйеф нисек? — тип һорайҙар. "Шәп! — тим, — алда эшем тағы ла бер йылға кәмей төштө".*

***

*"Сначала было слово", — говорится в Библии. А ведь еще раньше был звук, выражающий мысль. Значит, музыка древнее слова.*

**27.X.2000.**

*Һана, яҙмыш, гонаһ-сауабымды,*
*Барлыҡ ҡылғанымды,*
*Тик үртәмә бинахаҡтар менән*
*Күңел ҡылдарымды.*

**31.X.2000.**

*Факиһа Туғыҙбаева менән икәү Муса Ғәлиҙең хәлен белергә больницаға барҙыҡ. Бөгөн кәйефе һәйбәт кенә. Врач әйтә: "Үт ҡыуығында таш күп, — ти. — Бәлки, операция яһарға тура килер." Быға көсө етер микән Мусаның? Үҙен былай ныҡ тота, сер бирмәй. Ни тиһәң дә, рух аристократы шул ул. Аристократ духа.*

**6. X.2000.**

*Такое поучение услышал я однажды от Константина Симонова. И очень справедливое. Давно уж на съезде писателей РСФСР, выступая с речью, для красного словца вставил какую-то поговорку: "Так говорят в народе..." Во время перерыва Константин Михайлович похвалил мое выступление и сказал: "Мы с тобой старые товарищи, я люблю тебя, поэтому прямо скажу — больше никогда не ссылайся "в народе говорят", "народная мудрость гласит". Ты — поэт, говори свою мудрость, чтобы потом в народе повторяли ее: "Мустай сказал..." Что сказал народ давно, к тому ты ничего не добавил". Он сам никогда не пользовался готовыми пословицами и поговорками.*

**8. X.2000.**

*Рәшит Солтангәрәевты оҙатып ҡайттым. Ауыр кисерәм. Ул бит башҡорт яҙыусыларының иң ысындарынан берәү ине. Йыназа ваҡытында Кәтибә миңә былай тине: "Үҙеңдән йәштәрҙе оҙатҡанда*

*ниндәйҙер ғәйебең бар кеүек тояһың. Уның өлөшөнә кергән кеүекһең..." Ул тойғо миңә күптән таныш инде.*

*Бынан ары торған һайын Рәшиттең юҡлығы ныҡ һиҙеләсәк. Сабый күңелле был кешенең урыны буш ҡалды. Уға оҡшаш зат башҡаса юҡ беҙҙә.*

*Йыназанан һуң мине өйгә Марат Аҙнабаев машинаһында килтереп ҡуйҙы. Ул минең рухи туғандарымдың берәүһе. "Һаҡла инде үҙеңде, абзый, үҙеңде бөтөрмәҫкә тырыш", — ти. Ул беҙҙең өйҙәге хәлде — Раузаның ауыр сирләүен белә. Шуны күҙ алдында тотоп әйтте, булыр. Әйтеүе күңелде йыуатты, ә бөтөрөнмәй булмай шул.*

**2001 йыл**

**10.1.2001.**

*Нынешние богачи, кругом окруженные телохранителями, все находятся в тюрьме. Только эта тюрьма без стен, тем страшнее — заточение без границ. Свобода их — одна видимость. Без охраны в нужник не могут сходить. Нынче телохранителей в стране больше, чем хранителей границ Отечества.*

*Вчера в приемной Президента случайно встретился с банкиром Курманаевым. Так высокомерно, так заносчиво разговаривал со мной, как повелитель, как хозяин жизни. Чем-то очень недоволен. Говорит: "Скорее бы покончить с этой коммунистической мразью". Кто же мразь? Те ли, кто построил жизнь, укреплял страну, или он, за 5-6 лет укравший, награбивший миллионы и миллионы. Я был поражен тем, что в этой комнате он себя чувствует как хозяин. Прямо пошел к Президенту, даже не спросил меня, не жду ли приема. (Я не ждал приема, заходил туда позвонить по телефону.) Ведь Рахимов, как и я, в известной мере относится к той же "коммунистической мрази". Мы — дети Советской власти. Я банкиру успел только сказать: "Потерпите уж, через 15—20 лет нас совсем не останется. Вам будет привольно". По-моему, с этим он согласился. На том спасибо!*

***

*Минең бик һәйбәт күршеләрем бар: Әмир Юлдашбаев, уның ҡатыны Римма, ҡыҙҙары Әминә, Зөһрә. Күршене Хоҙай тәғәйенләп ебәрә, тиҙәр. Ҡайһы ваҡыт ул да шундай насар күрше биреп ҡуя, "шайтан алғыры" тип зарланаһың. Юлдашбаевтарҙы мин, Хоҙай үҙе һораһа ла, кире бирәһем юҡ.*

**15.1.2001.**

*1933-1934 йылдар булғандыр. Ҡара Яҡуп һабантуйынан ҡайтҡас, Әсҡәт ошондай таҡмаҡ сығарҙы.*

*Яҡуптарҙың байрамы ла*
*Байрамы,*
*Себен сыҫҡан айраны ла*
*Айраны.*

*Эсһәң, эсте күптерә лә*
*Күптерә,*
*Сысһаң, күтте шештерә лә*
*Шештерә.*

*Ҡара Яҡупта уларҙың ҡоҙалары бар. Күрәһең, Әсҡәткә айранды мул эсергәндәрҙер.*

***

*Бер саҡ Рәсүл әйтә һалды: "У Ельцина власть большая, авторитет маленький. У тебя авторитет большой, власти — никакой. А у меня ни авторитета, ни власти". Слукавил баловень славы.*

***

*Лев Толстой в моем возрасте из "Ясной Поляны" ушел в темную поляну. Старик знал меру.*

**24.1.2001.**

*Мы часто говорим о том, что ждет нас на том свете — ад или рай. Я для себя нашел ответ. И Рай, И Ад — это память потомков о предках: одни попадут в Память по имени Любовь и Благодарность. Это есть Рай. Другие — в Память по имени Ненависть и Проклятие. Это и есть Ад. Думаю, все предопределятся при жизни. С детства нас пугали Адом. Было страшно. Потом я уразумел: там же я не буду один. Бояться нечего.*

***

*Сегодня в Кляше никто не умер. Значит, у Бога неприемный день.*

**31.1.2001.**

*Кисәге газетала талантлы шағир Ғәбиҙулла Зариповтың вафаты тураһында хәбәр бар ине. Йылмайып төшкән рәсеме лә баҫылған. Ғәбиҙулла үлгәс тә йылмая, әйтерһең, үҙ әжәленән үҙе көлөп тора. Шиғырҙары миңә бик оҡшай. Хуплау һүҙҙәремде үҙенә әйтергә тура килмәне. Һуңғы йылдарҙа осрашманыҡ шул. Үкенесле. Әйтелмәгән яҡшы һүҙ, яҡшы баһа түләнмәгән бурысым булып ҡалды Зариповҡа.*

***

*Писатель становится признанным, когда о нем слагают анекдоты, придумывают небылицы, приписывают ему забавные поступки, которые, возможно, он не совершал вовсе.*

**4.1.2001.**

*Алты көнгә һуңлап Әлфиә менән Олегтың никахына 30 йыл тулыуҙы билдәләнек — үҙебеҙ генә. Иң ҙур шатлығым шунда: 30 йыл эсендә Олег менән Әлфиә үҙҙәре лә, уларҙың улы Тимербулат та мине рәнйетерлек эштәр ҡылманы.*

*Бына шундай бәхетле кеше мин! Мәскәүҙәге балаларым да, шөкөр, күңел ҡырырлыҡ ҡылыҡтар ҡылмайҙар.*

*Рауза, үҙенең коляскаһында ултырып, табында ҡатнаша. Күп әйберҙе аңлап етмәй ул хәҙер. Шулай ҙа мине тикшереп алды:*

*“Нимә эсәһең — араҡымы, виномы?” — ти. Мин оятһыҙ рәүештә алдашам: “Әлбиттә, вино”, — тим. “Бынынына ризамын”, — ти. Был йәһәттән инде уның ғүмер буйы араҡыға ҡаршы көрәшеүенең шауҡымы килеп сыҡты. “Көрәш”, әлбиттә, гел еңеүҙән генә торманы.*

***

*Аралбаев шылтыратты. Кәңәш һораны. Рәми Ғариповтың “Китап”та сыға ятҡан әҫәрҙәр йыйылмаһында шундай раҫлау бар икән: “Мостай Кәрим ул башҡорт халыҡ шағиры түгел, уға “Башҡортостандың халыҡ шағиры” тигән исемде дөрөҫ биргәндәр, “Башҡорт халыҡ шағиры” тигән исемде алыр кешегә өмөтөбөҙ бар”, — тигән икән. Һәйбәт өмөт.*

*Ҡәҙим әйтә: “Был нәмә сетерекле түгелме?” — ти. Мин шундай яуап бирҙем: “Минең ниндәй шағир, кем шағиры булыуым тураһында ла фекер бар икән, шулай ҡалһын. Әйтеүеңсә, китаптың йәш редакторы ошо текста ҡалдырыу яғында икән, тимәк, минең турала бөгөн дә фекер төрлөлөгө бар. Һин дә икеләнәһең... Шулай ҡалһын”, — тип ҡабатланым. Киләсәктәге урынымды билдәләү — минең хәстәрем түгел. Был инде башҡорт йәмәғәтселегенең, зыялыларҙың интеллектуаль кимәленә, ниндәй ҡараштар, ниндәй баһалар һәм үлсәүҙәр хөкөм һөрөүенә бәйләнгән. Бәлки, ул саҡта фәлән-фәләндәр беҙҙең юғары өлгөлө иҫәпләнер. Быға дәғүә итеүселәр байтаҡ. Ул рух, аҡыл, талант кимәленең ошо баһа биреүселәрҙең дәрәжәһенә тап килеүе бик ихтимал. Талант талантһыҙлыҡты бер ваҡытта ла күккә күтәрмәй, һыйпаһа арҡаһынан һыйпап ҡуя, ә талантһыҙлыҡ талантһыҙлыҡты юғарыға сөйә, ул бының менән үҙен дә сөйә, үҙен раҫлай.*

**12.1.2001.**

*Бик яҡшы дуҫым Рәшиҙә Солтанова бар. Минең уға ғүмеремдә бер игелегем дә тейгәне юҡ. Ул миңә — яҙыусыға, беҙҙең ғаиләгә ҡарата һәр ваҡыт иғтибарлы, ярҙамсыл булды. Рәшиҙә хәл итмәгән (беҙгә ҡарата) нәмә булманы. Мин уға “Быуат менән хушлашыу” тигән шиғырымды арнағайным, әй китте имеш-мимеш. Ниңә ул шиғыр мотлаҡ Рәшиҙәгә бағышланған? Ошо шиғырҙы уҡығанымды ике тапҡыр телевидениела күрһәттеләр, икеһендә лә бағышлауҙы ҡырҡып ташланылар. Тимәк, нимәне кемгә арнауҙы улар хәл итә. Бигерәк тә минең арнауымды. Бынан ары уларҙан рөхсәт һорарға кәрәк булыр.*

***

*Әжәл тураһында күп ҡабатлайымдыр инде. Шулай ҙа әйтәм. Әжәл менән бығаса татыу йәшәйем. Унан көн элгәре шөрләмәйем. Киреһенсә, гел шаяртам. Ул үҙе лә шаянлыҡты ярата икән. Ышанмаһағыҙ, үлем тураһындағы шиғырыма күҙ һалығыҙ. Мәҫәлән, әле 1947 йылда, хәлем бик ауыр ваҡытта, былай шаярттым. “Һуңғы юлға дуҫтар алып китерҙәр, о, мин наҙлы — күтәреп үк илтерҙәр...”*

**18.1.2001.**

*“Башҡорт шиғриәте антологияһы”н ҡулға тоттом. Һәйбәт эш эшләнгән, ҙур хеҙмәт башҡарылған. Рәхмәт тойғолары уята. Шул ваҡытта китапта авторҙарға бирелгән урын ара-тирә уларҙың әҙәбиәттә тотҡан урындарына тап килеп етмәй. Кемдең ниндәй урында ултырыуына, урында ултырыусыларҙың кемгә ниндәй мөнәсәбәттә булыуына ҡарап та йәки кемдең ниндәй төбәктән сығыуын иҫтә тотоп та эш ителәү һиҙелеп ҡуя.*

*Был нәмәләргә, бәлки, иғтибар ҙа итмәҫ инем. Бер нисә звонок булды, шунан китапты яңынан аҡтарып сыҡтым. Етмәһә, мин үҙем дә редколлегия ағзаһы булып иҫәпләнәм. Нисектер, уңайһыҙ булып китте.*

*“Антология” урыны менән каруселдә хәтерләтеп ҡуя: бөтәһе лә — фил дә, ҡуян да бер ҙурлыҡта, бер тиҙлектә сабалар.*

**21.II.2001.**

*Большие начальники ведут себя так, будто они пришли на свет быть всегда большими начальниками. А поэты понимают свою земную недолговечность и бренность всего сущего. Тем не менее начальники стараются, торопятся брать-брать побольше, а поэты стараются, спешат, чтобы больше отдавать.*

**22.II.2001.**

*Ҡарайым, күрәм —*
*Донъя тутыға.*
*Хатта ҡояш та*
*Тутығып сыға.*
*Тутыға йәнем,*
*Тутыға аңым.*
*Етте, күрәһең,*
*Тутығыр сағым.*

**26.II.2001.**

*Дуҫтарым Ф. Т. һәм Й-ға*

*Яратһағыҙ, мине яратығыҙ,*
*Кеше алдында әммә йән атмағыҙ.*
*Мине өнәмәгән әҙәмдәрҙә*
*Үҙегеҙгә асыу уятмағыҙ.*
*Үҙегеҙҙе, тимен, талатмағыҙ.*

**27.II.2001.**

*Мостай Кәримгә пародия*

*...Шуға күрә һәр көн таңдан алып*
*Күкрәгемдән ҡоштар осорам.*
*М. Кәрим.*

*Төрлө ерҙән төрлө ҡош осорам,*
*Әле бынан, әле тегенән —*
*Бер саяһы, таң атҡанды көтмәй,*

*Тишеп осҡан ыштан төбөнән.*
*Бына балда! Ҡошһоҙ тор хәҙер,*
*Анау ташҡа башың ор хәҙер.*

***

*Одно любопытное наблюдение: некрасивые женщины редко жалуются на судьбу. Их жалобы не трогают мужчин, поэтому они более жизнестойкие и жизнерадостные, чем красивые создания. В уме я перебрал много примеров. Красивым — их красота опора, дурнушки — сами себе опора. У меня есть одна совсем некрасивая племянница Зухра. Она однажды мне говорит: “Мы — Каримовы, ведь правда, красивы”. И рада.*

*Преклоняюсь перед вами, некрасивые женщины!*

**14.III.2001.**

*Беҙҙә Фәриҙә исемле медсестра Раузаны ҡарай. Шуны күргәс, бынау бәйетте сығарҙым:*

*Кәләшлеккә Фәриҙә*
*Ҡасып сыҡҡан бәрейгә.*
*Бик риза, ти, Фәриҙә.*
*Бергә ғүмер итергә.*
*Алмаштырмам, ти икән,*
*Бер бәрейҙе биш иргә.*
*Үҙе шундай инсафлы,*
*Ашамай, ти, эсмәй, ти,*
*Көнө буйы туҡтауһыҙ*
*Ең туҙҙырып эшләй, ти.*
*Кисен инһә ҡосаҡҡа,*
*Таң атҡансы төшмәй, ти.*
*Иргә сығыр алдынан,*
*Ҡыҙ-ҡырҡын, абайлағыҙ,*
*Бер йүнһеҙгә барғансы,*
*Лутсы бәрей һайлағыҙ.*

**10.III.2001.**

*Өфөлә Салауат театрының гастролдәре башланды. “Салауат”-ты күрһәттеләр. Спектакль иҫ киткес булды. Һөйөндөм. Һөйөндөк Сәйетовҡа ла оҡшаны. Ул теләһә нәмәне ҡабул итеп бармай. Телефондан шылтыратып, ни өсөн оҡшағанын миңә бәйнә-бәйнә һөйләп төшөндөрҙө. Уға фәлсәфәүи концепцияның асылышы айырыуса оҡшаған: халыҡ — етәксе — шағир.*

**16.III.2001.**

*Әле генә Ибраһим Абдуллин шылтыратты. Мәскәүҙә Миҙхәт Ғәйнуллиндың вафат булыуын хәбәр итте. Һәйбәт, кешелекле кеше ине. Дәррәү ҡырылабыҙ.*

**17.III.2001.**

*Миҙхәт Ғәйнуллинды оҙаттыҡ. Йөҙө бәп-бәләкәс кенә булып ҡалған. Хәләф Ишморатовтан башҡа (рәхмәт уға) бер ҙур түрә лә булманы йыназала. Хатта мәғариф министры һәм юғары белем министрҙары ла юҡ ине. Бүздәктә тыуғас ни, шулай була инде ул. Ундайҙар йөҙөп эшләйҙәр ҙә үлгән көндө үк юҡҡа иҫәпләнәләр.*

**27.III.2001.**

*Российское общество, говорят, раскололось. Нет, оно вдребезги разбилось. Пора сметать осколки.*

***

*Уҙған төндө Рауза байтаҡ ҡына йоҡланы. Бөгөн йәнләнә төштө.*
*— Мин һине һағынып бөттөм, — ти.*
*— Мин бит гел һинең эргәңдә, — тимен.*
*— Эргәмдә булһаң да һағынам шул...*

***

*Поликлиникала булдым. Таныш-белеш хәл һораша: "Үҙ аяғым менән докторға килә алғас, хәлем шәп инде", — тим.*

**30.III.2001.**

*Апрель килеп еттеме, татар яҙыусыларының (шағирҙарының бигерәк тә) миңә булған мөхәббәте тоҡана ла китә. Была яҙҙың көсө, нинде илһамлы. Яҙ тылсымы күңелдәрҙе шулай елкетә икән, тиһәм... Апрель айында Ҡазанда Тукай премияһына бәйге башлана. Баҡтиһәң, әлеге мөхәббәт бәйгелә ҡатнашыусыларҙа уяна икән. Улар тураһында бер кәлимә һүҙемде Комитетҡа яҙып ебәреүгә ишара яһайҙар. Бөтөнләй томана түгелбеҙ, ишараны аңлайбыҙ. Күңелемә оҡшаған әҫәрҙәр тураһында фекеремде йә Тукай комитетына, йә Шәймиевҡа яҙып ебәрәм. Быйыл да ишараны яһаусы булды.*

**14.IV.2001.**

*Бөгөн Олег менән кешеләрҙең һәм халыҡтарҙың ҡылыҡтары, характерҙары тураһында һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул шундай көләмәсте хәтерләне: "Имештер, бер сыуаш, донъя менән аралары боҙолғас, уға асыуланып, урманға барып ағасҡа аҫылынған. Һуңғы васыятын яҙып ҡалдырған: "Мине элмәктән алғас, бауҙы (арҡанды) семьяма ҡайтарып бирегеҙ".*

**14.IV.2001.**

*Махровый шовинист, националист похож на филина, который не знает других птиц, кроме себя, ибо он днем ничего не видит и не слышит, когда другие птицы летают и поют, а ночью другие птицы спят. Так что ему кажется, кроме него вообще птиц нет.*

***

*Роберт Миңнуллинға:*

*Фамилияңды боҙоп маташма,*
*Ул килешә бары Ғаташтка.*

**18.IV.2001.**

*Яков Ухсай әйтә торғайны: “Иҫерек сыуаш йығылып ятмаҫҡа, йөрөп ятырға тейеш”. Үҙе ул шулай булды ла. Мин уның айыҡ йөрөгәнен дә, иҫереп ятҡанын да күрмәнем. Бер саҡ ул миңә зарлана: “Ухсай эсә”, — тип һөйләйҙәр. Дөрөҫ, булғылай ундай хәл. Ә бит мин эсәм дә, яҙам да. Һирәк осраһа ла, эсмәгән сыуаш яҙыусылары ла бар. Улары эсмәй ҙә, яҙмай ҙа. Бүтәндәре тик эсәләр генә, яҙмайҙар. Уларҙанмы, минәнме сыуаш әҙәбиәтенә файҙа?”*

**24.IV.2001.**

Фамилияһын ҡыҫҡартыу айҡанлы ода

*Әлибаев Сафуан*
*Просто Әлибай хәҙер.*
*Яңы ҡолонсаҡ ине,*
*Текә тояҡ тай хәҙер.*
*Йондоҙ ғына ине ул,*
*Бөгөндән һуң ай хәҙер.*

**27.IV.2001.**

*Ун дүрт йәшемдә яҙға табан атайым мине ифрат ҡупшы итеп кейендереп ебәрҙе. Аҙ ғына кейелгән бейек үксәле, тар ҡуныслы итек, аҙ ғына таушалған шәл яғалы (шалевый воротник) пальто алып ҡайтты Өфө толчогынан. Яға тигәне, әлбиттә, йәнлек тиреһенән түгел, тышлыҡтың үҙенән генә эшләнгәйне. Тик шуныһы сәйер: пальтом тиҫкәре яҡҡа ҡайтарыла. Ыҫпай егет булып киттем. Хатта миңә ҡыҙҙар ҙа иғтибар итә башланы. Аҙаҡтан кемдер миңә төшөндөрҙө: атайым миңә, таман булыр тип самалап, ҡатындар итеге менән ҡатындар пальтоһы алып ҡайтҡан икән. Ул заманда кейем-һалымға ҡытлыҡ ине. Кейеп туҙҙырҙым уларҙы. Инде күп йылдар үткәс, бер ҡатын мине бөхтә, ыҫпай кейенәһең, тип маҡтап ҡуйҙы. “Модно кейенергә бит мине атайым өйрәтте”, — тип уйлап алдым.*

**27.IV.2001.**

*Живя долго, понял, что на земле довольно много ничтожных людей — не плохих, не злых, а просто ничтожных. В то же время верю, что хороших людей тоже немало.*

***

*Беҙгә урам аша ҡыйғасыраҡ Мәхмүт ағайҙар йәшәй ине. Ул яман кеше түгел ине. Шуның ҡатыны килененә ошондай өгөт — мосолман ҡатынына хас өгөт бирә икән: “Ирең башыңды тишһә, яулығың аҫтына, ҡулыңды һындырһа, еңең эсенә йәшер”, — ти икән. Илгә сығып иргә зарланырға кәрәкмәүҙе шулай аңлатҡан.*

***

*Беҙҙә шундай шағирҙар һәм шағирәләр бар: әҫәрҙәрендә ифрат талантлы итеп илай beләләр.*

**21.IV.2001.**

*1950 йылдың йәйе. Өргөн ауылының иçәре Әбүбәкер менән күл уртаһында кәмәлә балыҡ ҡармаҡлап ултырабыҙ. Ҡытлыҡ йыл. Тамаҡ яғы самалы. Әбүбәкер иһә ялан тәпәй генә йөрөй. Аяҡ кейеме юҡ. Уға 20 йәш. Мин әйтәм:*

*— Әбүбәкер, беләһеңме, нимә ул коммунизм?*

*— Шуны белмәгәс...*

*— Коммунизм булғас, нимә эшләйәсәкһең?*

*— Ашайым да йоҡлайым. Хатта балыҡ ҡармаҡлап та йонсомаясаҡмын.*

*Мин хәҙер тамам Әбүбәкер коммунизмында йәшәйем: ашайым, йоҡлайым, эшләгән эшем юҡ тиерлек.*

*Ошо Әбүбәкер колхоз контораһына таң менән бара ла хисапсы ҡыҙ сибәр Гөлнурға ҡарап тик ултыра, ти. Уға әйтәләр икән:*

*— Әбүбәкер, Гөлнурҙың егете бар, һиңә ҡарамаç ул.*

*— Беләм Жәүит тигән ҡара әтәсте. Гөлнурҙың маңлайына бит "мин Жәүиттеке" тип яҙылмағандыр. Яҙылһа, уны сыйып ташлайбыҙ ҙа урынына "Әбүбәкер" тип яҙҙырабыҙ.*

*Бына һиңә йүләр Әбүбәкер...*

*1950 һәм 1952 йылдарҙа йәйен мин ғаиләм менән Өргөндә йәшәнем. Әбүбәкер менән шунда таныштым. Ул минең исемде әйтмәй, "дуç" ҡына тип йөрөтә. Еләк осоронда көн дә тип әйтерлек иртән иртүк тау яғына барып, еләк йыйып килтерә. "Бынылы, дуç, һинең ризыҡҡа", — ти. Бер саҡ икәүләп кәмәлә балыҡ тотоп ултырабыҙ. Әйтергә кәрәк, күлдең эргәһендә генә йәшәһә лә, дуçым йөҙә белмәй. Мин, ауыр кәүҙәле әҙәм, ипһеҙ ҡуҙғалып, кәмәне сайҡалдырып ҡуйҙым. Был өндәшмәне. Минең ипһеҙ хәрәкәтем ҡабатланғас, теге: "Дуç, төйә кеүек һолһоҙ ҡыланма әле", — тип иçкәртте. Өсөнсө тапҡыр был хәл ҡабатланғас, әйтә һалды: "Йүнле ултыра белмәһәң, дуç тип тормам, ишкәк менән орҙом төшөрҙөм булыр". Икебеҙ ҙә оҙаҡ шымып ултырҙыҡ. Һөйләшмәйбеҙ. Кис булып килә. Шым ғына ҡармаҡлайбыҙ. Балыҡ шәп эләгә. Ҡайтыр яҡҡа йүнәлдек. Тәү башлап Әбүбәкер өндәште:*

*— Дуçтар араһында ни булмай ҙа, ни уҙмай. Ярға сыҡҡас, беҙҙең был боҙолошоу хаҡында һөйләмә, дуç. Дошмандарға сәйнәргә ем булмаһын. Беҙ үҙ-ара килешербеҙ ҙә онотторбоҙ, ә тегеләр онотмаç.*

*Килештек, әлбиттә...*

**21.V.2001.**

*Миңнулла Гәрәев менән урамда йөрөнөк. Элек обкомда машинистка булып эшләгән Фәниә тигән ҡатынды осраттыҡ. Ул кейәүгә сыҡмай ҡалды. Хәҙер етмеште ҡыуалыр. Егерме биштәр тирәһе булғандыр уға. Уның начальнигы Розанов, нимәгәлер уға бик ныҡ асыуланып, һүгенеп ташлаған. Б... хәрефенә башланған һүҙҙе лә ысҡындырған. Был ҡыҙыҡай иламаған, туламаған, башын баçып сығып киткән. Иртәгәһен үҙенең ғиффәтле икәнен раçлаған врач яҙыуын килтергән һәм былай тигән: "Николай Константинович, мә, уҡығыҙ. Минең турала һеҙгә ялған информация еткергәндәр шикелле. Дөрөçө ошо ҡағыҙҙа яҙылған. Теге алама һүҙегеҙҙе кире*

*алығыҙ". Розанов былай ипле кеше ине, моғайын, "алама һүҙ"ен кире алғандыр.*

**30.V.2001.**

*Больницаға яттым. "Ниндәй сир менән ятың?" — тип һорайҙар. "Сирем юҡ, ҡартлыҡты оҙайтып маташам", — тим. Үҙем саҡ-саҡ тын алам. Муса Ғәли, Ибраһим Абдуллин да бында. Хәл иткес бросок алдынан, бергә йыйылып, фронттағы шикелле көс туплап ятабыҙ. Аэропортта самолетҡа ултыртыр алдынан пассажирҙар йыйылған залды "накопитель" тиҙәр. Беҙ хәҙер шул "накопитель"дәбеҙ.*

**30.V.2001.**

*Кисә больницалағы Әлифә исемле сестраға 36 йәш тулды. Уға ошо таҡмаҡты яҙҙым:*

*Күктә балҡып янған йондоҙ*
*Күрҙем мин кисә кисен.*
*Шул йондоҙға үҙем бирҙем*
*"Әлифә" тигән исем.*
*Әй, тал үҫә, тал үҫә,*
*Бөгөлһә лә, гел үҫә.*
*Иләҫ-миләҫ күңелемде*
*Әсир итте Әлифә.*
*Талғын ғына ел иҫә,*
*Бәүелеп тә гөл үҫә,*
*Һинең баҫҡан эҙҙәреңдә*
*Нурҙар уйнай, Әлифә.*
*Ярҙан ырғып төшәмен,*
*Тауға осоп менәмен.*
*Шифалары ана шундай*
*Һин ҡаҙаған энәнең,*
*Әлифә!*

*(Әлифә — процедурная сестра. Бар эше — энә ҡаҙау.)*

**1.VI.2001.**

*Бөгөн баҫҡыстан менеп килгәндә, вахтер ҡатын һораша:*

*— Нимә, Мостай абзый, хәл бөтәме ни? — ти.*

*Шуға ифрат ҡыуандым. Бөтә торған булһа ла, тимәк, әле минең хәлем бар икән. Булмаһа, бөткәне күренмәҫ ине. Мәҫәлән, аҡса булмаһа, ул бөтмәй бит.*

**11.VI.2001.**

*Кисә беҙгә Путин килде. Бик матур ҡаршыланылар. Күңелде киткән нәмә лә булды: үҙе менән әллә мең тән һаҡсыһы алып килгән. Ҡайҙа барма, шулар миңә әйтә торҙолар: "Сюда нельзя. Вам не положено!" "Аҡбуҙат" ресторанына инеп барғанда, тотоп туҡтаттылар. "Вам не положено!" Мотлаҡ ошо ресторанға тәғәйенләп саҡырған ҡағыҙҙы күрһәттем. Ҡарамайҙар ҙа. Берәһе мыҫҡыллап әйтә һалды: "Вашу бумагу оставьте себе на память". Үҙем түшемә Герой йондоҙо тағып алған булғанмын. Минең илемә*

*килеп, Мәскәү малайҙары команда биреп тора. Аңлайым, уяулыҡ, һаҡлыҡ кәрәк. Әммә мин — 82 йәшлек ҡарт, күкрәгемдә — Алтын Йондоҙ. Шуны күреп торалар, миңә өҫтән аҫҡа ҡарайҙар. Береһен төртөп ебәрҙем дә рестораныға инеп киттем: "Иди, на меня жалуйся, меня зовут Мустай Карим. Номер паспорта II АР 714082. Если арестовать задумал, принеси ордер на арест", — тинем. Килмәне. Ҡулға алманы.*

*У Путина, оказывается, такое представление о Башкортостане, что там из каждого окна целится в него снайпер. Тем, что он приехал с таким количеством охранников, задел самолюбие моей республики.*

*Хотя в наше время любое тело стало дороже, чем душа. Охрана Президента — еще одно дело. Охраняется с тем же усердием любой преступник — мафиозник. Души топчут, тела берегут.*

***

*Пришла на ум такая фраза о вечности бытия: министры здравоохранения приходят и уходят, а болезни остаются.*

***

**Тамара Ғәниеваға эйәреп**

*Уйым минең йәшәү тураһында,*
*Үлем хаҡында ла уйлайым.*

Т. Ғәниева.

*Уйым минең эсеү тураһында,*
*Махмур хаҡында ла уйлайым.*

И. Кинйәбулатов.

***

*Уйым минең шешә тураһында,*
*Бисә хаҡында ла уйлайым.*

Р. Бикбаев.

***

*Уйлағанда "ярты" хаҡында,*
*Уйламайым арты хаҡында.*

Р. Тимершин.

***

*Эсһәм дә мин айыҡ,*
*Торам ҡуҡрайып йәки ҡупайып.*

Ҡ. Аралбаев.

***

*Йыш эсмәйем, эсәм һирәк-мирәк,*
*Айыҡ ирҙәр сөнки илгә кәрәк.*

Н. Мусин.

***

*Булмаһам да ҡуштандан,*
*Эсәм Бикбай ҡушҡандан.*

Т. Йосопов.

***

*Мин Игебаев, — ап-айыҡ*
*Айыҡ булғас, бөттөм байып.*

А. Игебаев.

***

*Бар булғаным — Барыймын,*
*Төшөрһәм, тиҙ арыймын,*
*Мажараға тарыймын.*

Барый Ноғоманов.

***

*Тормай ғына үлсәшеп,*
*Эсәм урыҫтарға үсләшеп.*

Аҫылғужа.

***

*Һорайҙар:*
*— Һиңә нимә хас?*
*— Эсһәм дә мас, эсмәһәм дә мас.*

Й. Солтанов.

***

*Нормамды үтәп сыҡтым,*
*Нәфсемде йыға һуҡтым.*
*Йөрөмәм махмур булып,*
*Күрәләтә хур булып.*

Х. Назар.

***

*P.S. ...Антым ары — мин бире,*
*Асылыма ҡайттым кире.*

Х. Назар.

***

*Ниңә эсмәҫкә? Миңә ни тарыған?*
*Ҡай ерем кәм анау татарҙан?*

Р. Шәкүр.

***

*Мин Рауилмын, йәғни мин Шаммас,*
*Эсмәй, тиһәләр, әҙәм ышанмаҫ.*

Р. Шаммас.

**20.VII.2001.**

*Гляжу на памятные подарки, которые когда-то давали мне, и вспоминаю только хорошие случаи и события, только хороших людей. Их дарили мне благожелательные люди в радостные минуты. Какой немудреный, но мудрый смысл: сувениры хранят только добрую память. По горькому или горестному случаю люди друг друга не одаривают. Презенты в виде одежды или обуви недолговечны. Дарите, люди, друг другу нетленные пустячки! Этот пустяк потом станет бесценным.*

**1.VIII.2001.**

*Часто говорят, что писатель должен мыслить по-своему. Если у него вообще нет своих мыслей, как же тогда он будет мыслить по-своему?*

***

*Казахский писатель Мамыш-улы — он же прототип героя повести Александра Бека "Волоколомское шоссе" — писал: "Народ всегда впереди нас". Зачем же ты — писатель нужен ему, если волочишься сзади, в хвосте.*

**2.IX.2001.**

*— Ни ҡылдың, нимәләр эшләнең? — тип һорарҙар ине әүәл йыш ҡына.*
*— Ҡайҙан, ниндәй районнан сыҡтың? — тип һорайҙар хәҙер.*

**7.IX.2001.**

*Боже! Как потрясающе сказал однажды Фазиль Искандер: "Совесть — это реальность Бога". Я всю свою сознательную жизнь поклонялся этой реальности Бога. Ибо оно, это божество во мне. С ним я общаюсь без посредников. Посредники нужны тем, кто убог и ущербный духом. В этом отношении я себя убогим не считаю.*

**7.IX.2001.**

*Интересная штука. Одни люди делают добро другим на досуге. Другие делают это, отдавая себя полностью. Рауза болеет. Одни родственники приходят навещать ее, посмотреть на нее, когда у них есть свободное время. Другие ходят, не считываясь ни с чем (работой, семейными заботами, недоделанными делами), чтобы ухаживать за ней, побыть с ней ночью и т.д.*

*Похвалюсь, я всю жизнь относился ко второй категории. Делать добро или подобие добра, не утруждая себя, не так трудно, наверное. Не терплю добродетелей, которые делают это напоказ или, еще хуже, из корысти.*

***

*Я, пожалуй, уже металлолом. Возможно, металл был неплохой, нехрупкий, но лом есть лом.*

**9.IX.2001.**

*Олег менән дачаға барып ҡайттыҡ. Унда ҡот юҡ. Сөнки унда беҙ юҡ. Әле ҡойолорға өлгөрмәгән ҡурай еләген өҙгөләп, бер стакан йыйҙым, әле шиңергә өлгөрмәгән һуңғы сәскәләрҙән букет яһаным. Ҡайтҡас, сәскәләрҙе Раузаға ҡапшатып, еҫкәтеп ҡараным. Оҙаҡ еҫкәп торҙо. Шунан еләктәрҙе ҡаптырҙым. Байтаҡ ҡапты ла былай тине: "Һин мине бик ҙурланың әле. Рәхмәт".*

*Кисә, шаярып, уға: "Һин минең княгиням бит", — тинем. Ул да яуапһыҙ ҡалманы: "Әгәр һиңә кейәүгә сыҡмаһам, княгиня була алмаҫ инем", — тине. Аңы шулай ҡайһы ваҡыт асылып та китә. Шундай саҡта һүҙе ғәжәп мәғәнәле була.*

**11.IX.2001.**

*Бөгөн Ленинградтан иҫке дуҫым, нәфис һүҙ оҫтаһы Владимир Перилдән хат килде. Ул хәҙер етмештең өҫтөндә. Яҙыуын саҡ-саҡ таныным. Элек почергы шундай асыҡ, төҙөк ине. Бына ҡартлыҡ нимә эшләтә. Почеркты ла имгәтә.*

**12. IX.2001.**

*Страшно! Страшно для Америки, страшно для всего мира. На Америку обрушилась великая беда. Совершен невиданный теракт. Вчера произведен вандализм. Разрушены два небоскреба в Нью-Йорке. Два самолета с интервалом в 15 минут протаранили эти башни. В них было десятки тысяч людей. Погибли ни в чем не повинные люди. В Вашингтоне тем же способом разрушена часть Пентагона, поврежден Белый дом. Говорят, для этой серии терpактов было заделано 11 самолетов, из них четыре или пять достигли цели. Это, утверждают, совершено арабами-смертниками. Они захватили самолеты и направили к цели. Самолеты-то пассажирские с многочисленными пассажирами. Все это уму непостижимо. Много раз показывали по телевизору момент, когда самолеты врезались в башни.*

*Где же была хваленая американская спецслужба? За это злодеяние отдельных групп или людей упадет вина на весь арабский народ, упадет тень на мусульманский мир. Прямо или косвенно. Таков этот неправедный, но неоспоримый суд.*

*Теперь хочу сказать и о том, как накликали беду. За последнее 50-60 лет американское кино наводнило мир фильмами ужасов, пропагандируя изощеренные методы разрушения, насилия, убийства. Оно насаждало, внедряло в людей психологию любования ужасами, любования насильственной смертью. В тех картинах рушатся небоскребы, заживо сгорают люди. Какое потрясающее, великолепное зрелище! Пришло возмездие за игру с огнем и смертью. Зрелище возникло наяву.*

*Начиная с Хиросимы и продолжая вьетнамской войной, США безнаказанно устанавливали “свои порядки" в Ираке, Югославии — огнем и мечом. Они объявили любой угол Земного шара сферой своих интересов (даже Грузию). Через океан указывали всем, командовали всеми. В немалой мере они приложили руку к развалу СССР, ибо при могучем Советском Союзе им стало тесно в мире. Очень тесно. За все пришла расплата. Вина на все содеянное падает не только на правителей страны, но и на американский народ. Таков этот неправедный, но неоспоримый суд.*

*Я был в Хиросиме. Посетил тамошний музей, где очень масштабно воспроизведен момент трагедии и ее последствия. Ночей не спал. Как назло, напротив окна моего гостиничного номера беспрестанно горела реклама американской Кока-колы.*

*Американская трагедия надолго унесет мой покой, мою веру в незыблемость мира. Не только каждый человек, но и каждый народ ходит под богом. Добавлю — каждая страна... Об этом нужно помнить всегда. Ненаказуемых нет. Арабы когда-то через обильное кровопролитие установили ислам, потом — свое государство, свою могучую империю. Затем все рухнуло, распалось.*

**21. IX.2001.**

*Меня часто спрашивают: "Что такое счастье? Что такое любовь?" Вопрос довольно банальный, если не глупый. Любовь или счастье, как отпечаток пальцев, у каждого свое, неповторимое. Из миллионов людей этот отпечаток ни у кого не повторяется. Кому для счастья нужно целое Солнце, кому достаточно мерцающего огонька.*

**16. IX.2001.**

*Аңламайһың әҙәм балаһын. Үҙемде әйтәм. Йәшәү ҙә ялҡыта башланы, үлге лә килмәй. Бына бер хикмәт...*

*Кисә Муса Ғәлигә барып, тыуған көнө менән ҡотланым. Үҙен егеттәрсә тота. Сәләмәт ваҡытта ул һаулығына йышыраҡ зарлана ине. Ҡаты сирләй башлағас, зар-марҙарҙы шып туҡтатты. Миңә эйәреп, кисә ике-өс рюмка араҡы ла эсте. Яңы шиғырҙарын уҡыны. Бик һәйбәт шиғырҙар яҙған. Ә бына мин яҙа алмайым. Туғарылдым. Бөгөн шылтырата: "Кисә бик йонсотманыммы?" — ти. Кәйефем күтәрелеп ҡайтыуымды әйттем. Күңеле ныҡ булды. Тауышынан һиҙелеп тора.*

**24. IX.2001.**

*"Һөйләшә торған көҙгө" тигән хикәйә яҙырға ине. Берәүҙәр яңы көҙгө алалар. 10 йәшлек Сынтимер исемле улдарының мәктәптә тәртибе лә шәп түгел, уҡыуының да рәте юҡ. Малай көҙгө ҡаршыһына килгәс, теге Сынтимер тауышы менән һорай:*

*— Нимә текәлдең миңә?*

*Малай тирә-яғына ҡарана, берәү ҙә юҡ.*

*— Кем текәлгән?*

*— Һин.*

*— Минме ни?*

*— Һин шул. Һинән башҡа был йортта ялҡау уҡыусы юҡ.*

*Ҡыҫҡаһы, былар дуҫлашып китәләр. Сынтимер Көҙгөгә үҙенең бөтә бәләләрен, серҙәрен һөйләй, бөтә ғәйептәрен аса. Шулай итеп алама ҡылыҡтарынан ҡотола бара. Мәктәптә дәрес ваҡытында уҡытыусы быға Көҙгө тауышы менән өндәшә. Был дәрес буйынса, гүйә, Көҙгөгә яуап бирә. Өйгә ашығып, дуҫын һағынып ҡайта, юҡты бушҡа бушатып ваҡыт әрәм итмәй.*

**30.X.2001.**

*Минең палатаға Нурия Ирсаева инеп ултырҙы. Зарлана, театрҙың хәле һәйбәт түгел, ти. Мин уйланып ҡалдым. Театрҙың был көнгә төшөүе Исрафиловтан башланды. Тәүге йылдарҙа бик һәйбәт, талантлы спектаклдәр ҡуйҙы. Үҙен ҙур художник итеп раҫланы. Һуңғы йылдарҙа ваҡлаша төштө, ваҡ кәмит, "шаҡ ҡатырғыс" тамаша менән мауыҡты. Бүтәндәрҙең фекере менән иҫәпләшмәҫ булды.*

*Шулай ҙа Исрафилов менән Хановты ҡайтарырға ине. Әгәр улар, мәҫәлән, хоккеистар булһалар, ҙур аҡсалар түгеп ҡайтарырҙар ине. Артистың баһаһы түбән шул. Шашкала уйнап чемпион булған бер ҡыҙ бала тураһында доклад һайын  һөйләйҙәр, әҙәбиәт, музыка, живопись, театр тураһында һүҙ ҙә юҡ. Шундай заманға еттек, күрәһең. Хәйер, был йәһәттән Мәскәү бөтөнләй мәмерйәлә йәшәй. Ризыҡ табыуҙары ла  мәмерйәләгесә — көпә-көндөҙ аталар, шартлаталар, яндыралар, үлтерәләр.*

***

*Нурия һөйләгән бер көләмәсте яҙып ҡалдырмай ярамаҫ. Бына ул.*

*...Бик алдынғы һауынсыны диңгеҙ буйына ялға, курортҡа, ебәргәндәр. Урап ҡайтҡас, ире һорай икән:*

*— Һин унда, Фаягөл, ир-ат менән сыуалып йөрөмәнеңме? Ул курорт тигәне әҙәмде аҙҙыра икән, тиҙәр...*

*— Кит бынауҙы! Нисек башыңа шундай уй килә лә телеңдән шундай һүҙ сыға. Оятың бармы саҡ ҡына?! Рәнйеттең нахаҡҡа, — тип ирен өтөп ала был.*

*Ире ғәфү үтенә. Кис була. Балалар йоҡлап китә. Былар түшәктә ята. Татлы мөхәббәт минуттары кисерәләр. Икенсе ғәмәлдән һуң Фаягөл, донъяһын онотоп, әйтеп һала:*

*— И-и-и... Үҙеңдекенә етәме һуң инде!..*

***

*Беҙҙең ауылда ат ҡараҡтары Һуҡыр Сәлим менән Бур Сәлим  бар ине. Шулар араҡы эскәндә йәй көнө тәҙрәләрен асып, парлашып йырлайҙар икән:*

*Ҡара беҙҙең атыбыҙ,*
*Ҡараҡ беҙҙең затыбыҙ.*
*Эрәсәйҙәргә таралған*
*Беҙҙең яманатыбыҙ.*
*Беҙ үҙебеҙ конокрад,*
*Ашайбыҙ виноград.*
*Рәсәйҙәге бөтөн ҡараҡ*
*Наша родной брат.*

*Демократия башланғас, ошо йырҙы улар, моғайын, былай үҙгәртеп йырларҙар ине:*

*Беҙ үҙебеҙ демократ,*
*Ашайбыҙ виноград.*

*Рәсәйҙәге бөтөн ҡараҡ*
*Наша родной брат.*

*Әхирәттә (теге донъяла) йырлайҙармы икән? Йырламаһалар, бик күңелһеҙҙер унда.*

***

*Был арала Достоевскийҙы бер талай уҡып алдым. Русса әйткәндә, с каким наслаждением пишет об ущербной психике, о людях с такой психикой.*

**13.XI.2001.**

*Интересное наблюдение мое. Американские журналисты обнародуют "запрещенную правду", когда это выгодно Америке, наши журналисты делают тоже самое, когда это во вред России. Разница только в этом. И в этом смысл "свободы печати по-российски".*

**21.XI.2001.**

*Марсель Сәлимов журналистар съезына саҡыра. Сығыш яһа, ти. Ошондайыраҡ нотоҡ һөйләргә кәрәк: "На острие" пера журналиста находятся судьбы отдельных людей, судьбы политиков, творцов прекрасного, порою — судьбы правительств. Подумай, крепко думай, журналист, учуяв свою эмоцию, пристрастие, злобу, даже любовь, прежде чем начать свой суд именем "четвертой власти".*

***

*Да, прессу, СМИ называют четвертой властью. До них еще три власти. Боже мой! На одного меня четыре власти. Одной власти мне с избытком достаточно. Все рвутся к власти. Постарались бы лучше властвовать над умами.*

**28.XI.2001.**

*Һеңлем Салисә әйтә:*

*— Шулай ҙа шағир Х. маҡтансығыраҡ инде, — ти.*

*— Шағир бер аҙ маҡтансыҡ булырға тейеш ул.*

*— Һин маҡтансыҡ түгелсе.*

*— Үҙемде илле йылдан ашыу гел маҡтанылар, маҡтанырға миңә урын да ҡалдырманылар.*

**27.XI.2001.**

*Р. Бикбаевтың "Йөҙ ҙә бер хәҙис" тигән китабын ҡарап сыҡтым. Пушкиндың "Подражание Корану" исемле бер нисә шиғри юлдары бар. Ярай, Рауил, Пушкиндан арттырып, ете-һигеҙ хәҙис яҙһын ине. Бит ҡалғаны Рауил Бикбаев кеүек оло шағир эше түгел. Уны Фәйзи Ғүмәров йәки Файыҡ Мөхәмәтйәнов шәп башҡарыр ине.*

*Бикбайҙың хәҙистәренә мин дә берҙе үҙемдән өҫтәп ҡуйҙым:*

*Йөрөп ҡайтҡас тәнгә кәсептә,*
*Иман килер, инеп мәсеткә.*

***

*У него были пальцы гения, голова пещерного человека. Какая дисгармония!*

**13.XII.2001.**

*Көмөш бирһәң түрәгә —*
*хуп күрер.*
*Кәңәш бирһәң түрәгә —*
*төкөрөр.*

***

*Йөҙө тулғас, инәй әйтә торғайны: "Йәшәргә лә ояла башланым инде".*

**26.XII.2001.**

*Ибрагим Абдуллин звонил и спросил, знаю ли я книгу Пабло Неруды "Признаюсь, я жил". Этой книги у меня нет. Но тот звонок разбудил во мне светлые и грустные воспоминания. Ровно 50 лет назад в дубовом зале Дома литераторов довольно в узком кругу отметили застольем 50-летие Александра Фадеева. Торжественное собрание состоялось в Концертном зале имени Чайковского. Потом было то застолье, где я первый раз встретился с Нерудой. На всю жизнь запомнил его слова, сказанные Фадееву. "Дорогой Саша, — говорил он, — на моей родине — в Чили есть такие светло-голубые озера, как твои глаза. Поэтому я тебя никогда не забываю. Смотрю на те озера и думаю о тебе".*

*Тот банкет был не то 24-го, не то 26-го декабря 1951 г. Великого чилийского поэта современная молодежь, возможно, мало знает. Жаль.*

**28. XII.2001.**

*"Әбүбәкер коммунизмы"нда йәшәйем: ашайым, йоҡлайым, ҡулға ҡәләм тотҡан юҡ. Оҙаҡламай ҡултамға урынына бармаҡ ҡына баҫырмын, ахырыһы. Күңел һүрән. Бер ҡараһаң, ҡыуанырлыҡ та. Тағы ла Яңы йылдың ыҙанына йәйәүләп килеп еттем. Атайым йәшен уҙып киттем. Был нәмә лә хәүефле генә икән. Атайым үҙе, Садиҡ ҡартатайым йәшенә еткәс (63-тә үлгән), шомланып ҡуя торғайны. "Ҡартатағыҙ йәшенә еттем..."— тип бошондо бер саҡ. Миңә ул мәле 10 йәш ине. Олатайым йәшенән ул 19 йылға уҙҙы.*

**29.XII.2001.**

*"Ағиҙел" журналы бөгөн 2001 йылғы премияларын тапшырҙы. Мине лә быйыл тәү тапҡыр лауреат яһанылар. Редакцияла оҙаҡ итеп, матур итеп ултырҙыҡ, сәйе лә, саҡ ҡына мәйе лә булды. Берәү ҙә бушты һөйләмәй, зарланмай. Уйын-көлкө, йор һүҙ күп булды, матур-матур хәтирәләр һөйләнде. Рәшит Солтангәрәевты юҡһындыҡ. Әлибаев былдай мәжлестәрҙе ойоштора белә ул. Үҙе илһамланып йырланы.*

## *Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

# ӘҘӘБИӘТ ТОРМОШ ДӘРЕСЛЕГЕМЕ БӨГӨН?

*(Ерендә лә хәстәрлә, йондоҙло күк барлығын да онотма)*

Донъяны, ысынбарлыҡты өйрәнеүҙә, танып-белеүҙә художестволы саралар менән ярышырҙай алымдар юҡ тиерлек. Кеше булып етешер йән эйәһе, дүрт аяҡлы хәленән турайып баҫҡас та, офоҡо бермә-бер киңәйеп китеүгә шаҡ ҡатып торғандыр тип фаразларға кәрәк. Билен турайтҡандан һуң ғына көндөҙөн төпһөҙ күктәге Ҡояшты, төндәрен Ай менән йондоҙҙарҙы шәйләгәндер. Уларҙы йәнләндереп, аллалаштырып, интуитив рәүештә үҙенең йәшәүенә бәйләп ҡабул итеүе – тирә-йүнде художестволы күҙаллауҙың тәүге яралғылары булғандыр. Ә инде был күҙаллауҙар һүҙҙә сағылыш таба башлағас, уларҙың тәү сиратта ритмға буйһоноуы тәбиғи. Сөнки көн менән төндөң сиратлашыуы, йәй аҙағынан ҡыш килеүе әҙәмде лә, биологик зат булараҡ, ошондай тирбәлешкә көйләгән. Әҙәм ауыҙынан ниндәйҙер өндәр ишетелә башланыр-башланмаҫтан уларға, өндәргә, әлеге “мөңрәү” ҙә (“хис-тойғо”но, ҡурҡыу-өркөү, ҡыуаныс-кинәнесте белдерергә тырышыу) ҡушылғандыр, моғайын. Был фараздар бар тирәне художестволы ҡабул итеүҙә ни өсөн шиғриәттең (ысын мәғәнәһендәге шиғриәттә рифмаға ҡарағанда ла ритм әһәмиәтлерәк) проза, драматургия менән сағыштырғанда алданыраҡ тыуыу, традицияларының байыраҡ булыу сәбәптәрен аңларға ярҙам итә, минеңсә. Бына ни өсөн башҡорт әҙәбиәтендә генә түгел, донъя кимәлендә лә шиғриәт “олораҡ” йәштә.

Кешелекте тәүге аҙымдарынан уҡ тип әйтерлек оҙата килгән шиғриәт (бил яҙып, офоҡ киңәйтеү, йондоҙҙарҙы иғтибарлау) ни хәлдә бөгөн? Уға булған ихтыяж ниндәй кимәлдә? Тормошто өйрәнеүҙә уның роле ҙурмы, бәләкәйме? Кемдер: “Шағир һабаҡ бирмәй. Шиғриәт ул дәреслек түгел”, – тип раҫлай икән – был уны – ни тиклем парадоксаль яңғырамаһын – уғата ябайлаштырып аңлауҙан. Примитивлыҡтан. Әлбиттә, шиғриәтте тура мәғәнәһендә дәреслек тип ҡарап булмай. Кемгәлер ул – һандуғас һайрауына үрелгән күңел талпынышы, ғашиҡ күҙенә салынған йондоҙҙар балҡышы, ә кемгәлер ҡылыстар зыңы, уҡ һыҙғырыуы, яу ораны, ата-бабалар ҡиссаһы, Урал батырҙың үлемһеҙ батырлыҡтары хаҡында ҡобайыр, Аҡмулла нәсихәте... Туранан-тура ниндәйҙер фәһем биргән әҫәрҙәр хаҡында әйтеп тә тормаҫтан, шуны асыҡ билдәләйек: шиғриәт донъяның, йәшәйештең илаһилығын, әҙәм балаһы булмышының серлелеген, ҡабатланғыһыҙлығын күрһәтеп, кешелә матурлыҡ тойғоһон, теләһә ниндәй осраҡта ла **Кеше булып ҡалыуҙың бөйөклөгөнә инаныс тәрбиәләй**. Тәрбиә сығанағы икән, тимәк, шиғриәт тә, билдәле дәрәжәлә, дәреслек ролен башҡара. Парта артында шиғыр ятлатыу аша түгел, ә “аҡыллы йөрәк” (Лев Толстой) формалаштырыу юлы менән. Был һорауҙарҙы, уйланыуҙарҙы, фекер алышыу ниәтенән, күренекле шағирә, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Фәкиһә ТУҒЫҘБАЕВАҒА** юллайыҡ.

**Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА:**

– Башта уҡ шуны белдерге килә: “Ағиҙел”, заман тыуҙырған көнүҙәк мәсьәләләр, уларҙы хәл итеүҙә әҙәбиәттең роленә бәйле һөйләшеү ойоштороп, ҡыйыулыҡ та, тәүәккәллек тә күрһәтә. “Тормош дәреслеге” һүҙбәйләнеше, әлбиттә, был осраҡта халыҡты тәрбиәләү, уның рухын нығытыу сығанағы мәғәнәһендә ҡулланыла.

Кәрәкме ул шиғриәт хәҙерге заманда? Ғөмүмән, нәфис әҙәбиәт кәрәкме?

Ҡомһоҙ байҙар ҡасандыр классиктар йәшәгән йорт-ҡораларҙы емереп, урынына үҙҙәренең ояһыҙлығына “һәйкәл” булған һарайҙар һалған заманды ла күрергә яҙған икән беҙгә. “XX быуат – тарихтың ҡанлы ихтилалдар, һуғыштар осоро“ тип тамғаланһа ла, рухиәт, намыҫ-выждан кеүек төшөнсәләр халыҡты берләштереүсе көс булғанына беҙҙең быуын да шаһит. Үкенескә ҡаршы, XXI быуат рухи ҡиммәттәрҙе емереүҙән башланды. Социализм тип аталған ижтимағи ҡоролошто емереп ташлағанда, илһөйәрлек, кешелеклелек кеүек изге төшөнсәләр ҙә ситкә быраҡтырылды.

Ә ҡайҙа булып бөткән һуң бөгөнгө рус шағирҙары? Уларҙың шәхесенә һәм ижадына хөрмәт күрһәткән телевидение каналдары, гәзит-журналдар нишләптер күҙгә салынмай. Беҙҙең быуындың идеалдары формалашҡан заманда хатта Коммунистар партияһының төп баҫмаһы – “Правда” гәзите лә күренекле шағирҙарҙың әҫәрҙәрен йыш ҡына баҫып тора ине. Эйе, шул-шул, йәмәғәт: бөтәһе лә бик ябай – шиғриәт бер кемгә лә матди байлыҡ килтермәй. Был бер булһа, икенсенән, бөтә донъяла глобалләшеү тигән процесс барғанда, йәшенең-ҡартының зиһене генә түгел, ә күңеле лә Интернет селтәренә тоташтырылған. Ә бит шиғриәт – нәфис әҙәбиәттең иң юғары бейеклеге, халыҡ үҙаңының шулай уҡ иң юғары сағылышы. Пушкин йә Лермонтов, Есенин йә Маяковский, Ахматова йәки Твардовский әҫәрҙәрен уҡымайынса улар йәшәгән заманды, халыҡтың тын алышын, йөрәк тибешен, өмөт-хыялдарын, ҡайғы-хәсрәттәрен күҙ алдына килтереп буламы ни?

Шиғриәт – ул иң юғары әхлаҡ, халыҡ мәнфәғәтенә тоғролоҡ. Шәйехзада Бабич менән Рәми Ғариповтың, мәҫәлән, халыҡ намыҫына әүерелеүе уларҙың шәхес һәм ижадының бер бөтөнлөгөнән килә.

Донъя – ҡуласа, килтерә лә бер баҫа, ти халыҡ. Уҙған быуатта ер йөҙөндәге идеологияларҙы ҡорал тотоп таратһалар йәки уның өсөн һуғышһалар, бөгөн идеалдар өсөн Интернет аша аҡыл-зиһен көрәше бара. Ә был алышта, үкенескә ҡаршы, алда әйткәнемсә, кешенең, бигерәк тә йәш быуындың, күңеле ҡорбан ителә. Тимәк, халҡы, иле өсөн йөрәге әрнегән шағирҙар иман, әҙәп, туған тел өсөн алыша. “Алыш” тигән һүҙ бигүк урынлы ла түгелдер, сөнки изге төшөнсәләр өсөн янып-ярһып йәшәү шағирҙың тормош рәүешенә әйләнә.

Совет цензураһының ҡаты ҡулына ҡарамайынса, тормошто үҙенең бар дөрөҫлөгөндә яҡтыртырға тырышҡан “Новый мир” журналының баш мөхәррире, атаҡлы рус шағиры Александр Твардовский үткән быуатта бик хаҡлы фекер яҙып ҡалдырған: “Мир может и должен быть еще прекраснее при оснащении его средствами научно-технического гения человечества. Этот гений вовсе не противоречит сам по себе искусстве. И там, и там в конечном счете господствует человеческий разум”.

Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө компьютер заманы китап, әҙәбиәт донъяһын ҡыҫырыҡлағандан-ҡыҫырыҡлай бара.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Асылда күп проблемалар – рухи фәҡирлектән, бары матди байлыҡҡа ғына табыныуҙан. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында физиктар менән лириктар бәхәсе ҡубып-ҡуйырып алғайны. Ул саҡ, һәр ҡайһыһының тормошта үҙ тәғәйен урыны бар, тигән уртаҡ һығымтаға килделәр. Кешелек бер үк тырмаға әйләнә лә баҫа, әйләнә лә баҫа. Эйе, әҙәм балаһына ашарға-эсергә лә, кейенергә лә, йортло булырға ла кәрәк. Ләкин быларҙың бөтәһе лә уға, Кешегә, тәғәйен төп бурысты үтәү өсөн элементар шарт ҡына. Әҙип бына ошоно һәр даим иҫкә төшөрөп торорға тейеш бит. Антон Чеховтың хикәйәһендәге герой әйткәнсә: “Һәр бәхетле, ҡәнәғәт кешенең ишеге артында сүкеш тотҡан кемдеңдер тороуы кәрәк, һәм ул өҙлөкһөҙ туҡылдатыуы менән донъяла бәхетһеҙҙәрҙең дә булыуын, үҙеңде нисек кенә бәхетле тимә – тормош иртәме-һуңмы барыбер тырнаҡтарын күрһәтәсәген, бәлә – ауырыу, ярлылыҡ, юғалтыуҙар – килерен, ә һине, әле үҙең бер кемде лә күрмәгән-ишетмәгән кеүек үк, берәү ҙә күрмәйәсәген дә, ишетмәйәсәген дә иҫкә төшөрөп тороп ине.“

Ашарыңа иген үҫтереү өсөн ереңде лә хәстәрлә, әммә күңелеңә ҡанат ҡуйырҙай йондоҙло күк барлығын да онотоорға ярамайҙыр.

**Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА:**

– Яңыраҡ миңә һағышлы бәхет кисерергә тура килде. Китап магазинына барып әйләнгәйнем. Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәте Һәҙиә Дәүләтшинаның тормош һәм ижад юлына арналған фотоальбом сығарғанын күреп ҡыуандым да һорай һалдым:

– “Һәҙиә Дәүләтшина” күпме тора?

Шунан үҙемдең алйот һорауымдан рәхәтләнеп көлөп ебәрҙем дә үҙ-үҙемә ҡысҡырып яуап бирҙем:

– Ул аҡса менән баһаланмай. Һәҙиә Дәүләтшина – мәңгелек!

Бөйөк яҙыусының был китаптағы шиғырҙары минең өсөн ҙур асыш булды.

*– Рәхмәт, доктор, һис тә зарар юҡтыр,*
*Борсолмауығыҙҙы һорайым.*
*Бик һирәк ул – ысын ялҡынлы сир,*
*Һуңғы тапҡыр дөрләп янайым, –*

тип яҙған “Ырғыҙ”ының баҫылып сығыуын да күрмәй донъянан уҙған ҡаһарман апайыбыҙ.

Шиғриәтебеҙҙе күҙҙән кисереп ултырғанда шуға ҡыуанам: рухиәт өлкәһендәге алда әйтеп киткән кире күренештәргә ҡаршы торорлоҡ ижтимағи көсө бар беҙҙең шағирҙарҙың. Был иң тәүҙә “Китап” нәшриәтендә беҙҙең китаптарҙың өҙлөкһөҙ сығып тороуы менән бәйләнгән. Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Рауил Бикбаев, Абдулхаҡ Игебаев, Александр Филиппов, Тимер Йосопов, Марат Кәримовтың, шулай уҡ күренекле шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Сафуан Әлибайҙарҙың күп томлыҡ һайланма әҫәрҙәре донъя күрҙе. “Кәрҙәшлек кәштәһе“ серияһы татарҙың Илдар Юзеев, Роберт Миңнуллин, Мөҙәрис Әғләмов, Зөлфәт кеүек атаҡлы шағирҙары менән таныштырҙы.

Мине һуңғы йылдарҙа поэманың һирәгәйеүе уйландыра. “Ағиҙел”дең мин уҡып сыҡҡан һигеҙ һанында бары бер генә поэма – Ҡәҙим Аралбайҙың “Торатау” әҫәре донъя күргән. Ул, 14 өлөштән тороп, бөгөнгө менән үткән замандар параллель рәүештә бәйән ителә. Торатау, шағир раҫлауынса, халыҡ тарихы, халыҡ рухын символлаштыра.

*Башҡорт рухын раҫлап,*
*Ғорур баҫҡан*
*Офоҡтарға бағып Торатау.*
*Замандарҙың үтеп дауылдарын,*
*Торҙо,*
*тора,*
*мәңге торасаҡ.*

Поэма жанрын “Ағиҙел”дәге әҫәрҙәр менән генә сикләп булмай, әлбиттә. Улар китаптарҙа ла күренгеләй. Минең уйлауымса, шағирмын тигән һәр шағир, донъяны эпик ҡолас менән, шул уҡ ваҡытта замандың бөтә ҡатмарлыҡтары көсөргәнешлегендә тасуирлап, үҙен поэма жанрында һынап ҡарарға тейештер ул. Шағирҙың донъяға ҡарашы, эстетик зауығы, ижади оҫталығы был жанрҙа бөтә тулылығында сағыла.

Поэмаларҙан Тамара Ғәниеваның һуңғы йылдарҙа ижад ителгән “Ҡатын”, Гөлнур Яҡупованың “Әҙәм вә Һауа” шиғриәт һөйөүселәрҙең дә, тәнҡитселәрҙең дә иғтибар үҙәгендә булды. Поэма жанрын үҫтереүгә ҙур өлөш индергән Тамара Ғәниеваның “Ҡатын” поэмаһы тотошлайы менән аллегорияға ҡоролоуы менән йәлеп итһә, фәлсәфәүи йүнәлештә ижад итергә яратҡан Гөлнур Яҡупованың поэмаһы тураһында әҙәбиәт белгесе Әнғәм Хәбиров бына нимә тип яҙҙы: “Әҙәм вә Һауа”ның нигеҙендә дини риүәйәт ятһа ла, Гөлнур Яҡупова был легенданы ысынбарлыҡтағы хикәйәт дәрәжәһенә күтәреүгә ирешкән”.

Поэма жанрын, темаһы, күтәргән проблемаһы, яҙылыш рәүешенә ҡарап, төрлөсә атау урынлы, тип уйлайым. Мин үҙем, мәҫәлән, ҡайһы бер поэмаларымды дастан, реквием, һағышнамә тип исемләнем.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Поэмаларыңды төрлөсә атауың һис шикһеҙ ерлекле. Был атамалар уҡыусыны билдәле тулҡынға көйләй. Әҙәбиәт белгесенә лә әҫәрҙе анализлағанда тап ошо аныҡлабыраҡ күрһәтелгән жанр талаптарын күҙ уңында тоторға тура килә. Ә инде һинең, шағирҙың оҫталығы тулыһынса поэмала асыла, тиеүең ҡәтғиерәк яңғырай. Улайға китһә, бер роман да яҙып ҡарамаған Антон Чехов үҙен тулыһынса асып бөтә алмағанмы ни?! Ә Сәғит Агиш беҙгә “Нигеҙ”е менән ҡәҙерлерәкме, әллә хикәйәләре менәнме? Ә Рәшит Солтангәрәев? Шиғриәттә лә шулай. Донъя әҙәбиәтендә тиңдәшһеҙ Ғүмәр Хәйәм бары тик робағиҙары (дүрт юллыҡтары!) менән мәшһүр. Һәр жанрҙа ла маһир булһаң, дан, әлбиттә. Мостай ағайыбыҙ трагедияларын да шиғырға көйләне, поэмалары ла трагедияға торошло, повесть-хикәйәләре лә “йырлап” тора.

Бөгөнгө поэмаларға килгәндә... Миңә ҡалһа, Торатауға арналған әҫәр шул тауҙай мөһабәт булырға тейеш ине һымаҡ. Ә былай, “Торатау” – ҡом барханын хәтерләтә: күҙгә эленерҙәй өйөм өйөлгән, ә тотоп торорҙай үҙәге, сюжеты, йә иһә сюжетын алыштырырҙай фекер тиҫбеләрен бер еккә теҙгән ебәк бәйе – ергә тамырланған таш ҡаяһы юҡ. Улай ғына ла түгел: башҡорттоң, Аллаға шөкөр, тауҙары күп һәм һәр береһе үҙенә башҡа. Мәҫәлән, Янғантау менән Ирәмәлде нисек бутайһың?! Йә булмаһа, Ямантау менән Ирәндек һырттарын берҙәй итеп күреп буламы?! Поэма тиклем поэманан Торатауҙың ҡабатланғыһыҙ образын күрергә теләүҙән дәғүәләр. Юҡһа таш ҡаяһы ла булыр, әммә талапсан уҡыусы Заятүләк артынса:

*Тауҙы тауға оҡшатып,*
*Тимер менән ҡоршатып*
*Алып килгән тауығыҙ, –*
*Балҡантауым был түгел, –*

тиәсәк.

“Күк әрем” шәлкеме менән әҙәбиәтебеҙгә башҡорт тарихын хәтергә төшөрөп тороусы дала елеләй килеп ингән шағирҙан да ысын мәғәнәһендәге хазина көтөргә ерлек бар ине. Үкенесле, әммә уйландырырлыҡ ваҡиғаның (“Хазина” геройы янғын эсенән ырыуының шәжәрәһен алып сыға) художестволы сиселеше тейешле юғарылыҡҡа күтәрелеп етмәгән. Яланғас публицислыҡ иһә, заман ҡаҙығына ни тиклем ныҡлы ептәр менән сырмалмаһын, барыбер ҙә шиғриәттең йәне булған художестволылыҡты алыштыра алмай.

**Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА:**

– Быйылғы “Ағиҙел” мине тағы шуныһы менән ҡыуандырҙы: бәй, беҙ, шағирҙар, бик бәхетле икәнбеҙ ҙә – яҙыусыларҙың төп журналында һәр һанда шиғриәткә арналған мәҡәләләр бар. 1-се һәм 2-се һандарҙа егәрле аҡһаҡалыбыҙ Ғайса Хөсәйенов Хәсән Назар ижадын анализлаһа, 3-сө һанда филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәков Факиһа Туғыҙбаева ижадына үҙ баһаһын бирә; ошо уҡ һанда профессор Әнғәм Хәбиров Гөлнур Яҡупованың тотош шиғриәтен күҙҙән үткәреп сыға. Йәш шағирә һәм әҙәби тәнҡитсе Ләйсән Кәшфи халыҡ шағирҙары Рауил Бикбаев менән Роберт Миңнуллиндың “Туғандашлыҡ“ серияһында донъя күргән китаптарына ҡыҙыҡлы байҡау яһай (4-се һан).

Йәштәр ижады ситтә ҡалмауы ла – хуплауға лайыҡ күренеш. Фәнил Күзбәковтың “Йәштәр тауышы: ни ишетелә, нисек ишетелә?” тигән мәҡәләһе йәш ҡәләмдәштәребеҙ өсөн ижад дәресе кимәлендә яҙылған (5-се һан). Рауил Бикбаевтың Факиһа Туғыҙбаеваның ижадына арналған мәҡәләһе, ғөмүмән, шағирҙың был донъялағы миссияһы тураһында уйланыуҙарына ҡоролған (6-сы һан).

Рим Исхаҡов – әҙәби тәнҡит өлкәһендә арымай-талмай эшләгән ҡәләмдәштәребеҙҙең береһе, башҡорт әҙәбиәтенең үҫешендәге уңыштар һәм етешһеҙлектәр тураһында йыш яҙып тора. 7-се һанда шағир Ирек Кинйәбулатовтың барлыҡ китаптарына анализ яһап, ул шундай һығымта яһай: “Шағир – үҙе йәшәгән замандың йылъяҙмасыһы... Тормош күҙ асып йомғансы үҙгәреп тора, шуға күрә лирик геройға көслө ялҡын да, әсе төтөн дә, хәйерсе лә, донъяһы бөтөн кеше лә булырға тура килә. Шулай тормош. Шағир ҡайһылай уны образлы итеп һүрәтләй!”

“Ағиҙел”дең шиғриәтте анализлап барыуы – әйткәнемсә, бик ҡыуаныслы күренеш, йәш ижадсылар өсөн оло һабаҡ.

Шулай ҙа, исемдәре йыш телгә алынған талантлар менән бергә, иғтибарҙан ситтәрәк ҡалған ҡәләм оҫталары ла етерлек беҙҙә. Мәҫәлән, Рәшит Шәкүрҙең һуңғы йылдарҙа ижад ителгән афористик шиғырҙары уның йөрәгенең һүнеү-һүрелеү белмәйенсә илһам утында дөрләүен раҫлай. Рафаэль Зиннуровтың “Башҡортостан юлы” дастаны йөкмәткеһе һәм яҙылыш рәүеше менән яңылыҡ булды. Фәнил Күзбәковтың “Йәшәйеш ҡанундары” китабы ла – әҙәбиәтебеҙ өсөн ҡыуаныслы күренеш. Уның шиғриәтендә быуындар бәйләнешен дә, шул сылбыр өҙөлмәүе өсөн оло яуаплылыҡты ла тойорға мөмкин:

*Ата-бабаң ҡаны һеңгән,*
*Йәне һеңгән был ерҙән*

*Һәр яҙ һайын яҡтылыҡҡа*
*Баш ҡалҡыта йәш үлән.*
*Үләндәргә баҫҡаныңда*
*Баҫ һин абайлабыраҡ.*
*Был йәшеллек араһынан*
*Киткәндәр ҡарай һымаҡ.*

(“Был донъянан ни ҡала?”)

Ғөмүмән, әҙәбиәтселәр бөгөнгө көн шиғриәтенә иғтибарын аҙыраҡ бүлә, тип уйлайым. Монографиялар яҙыуға торошло ижады булған шағирҙарыбыҙ бар. Ана шулай тип ғорурланып яҙам да бит, ә халыҡ уҡыймы беҙҙең әҫәрҙәрҙе?

Ижадтың халыҡсанлығы социалистик реализм уйлап сығарған төшөнсә түгел, ул быуаттарҙан килгән эстетик категория. Эйе, беҙ халыҡ, Тыуған ил мәнфәғәттәренән сығып яҙабыҙ. Был йәһәттән әҫәрҙәребеҙ халыҡсан, тип әйтергә мөмкин. Ләкин ябай уҡыусы менән шағир араһы әҙәбиәт тарихында булмағанса алыҫлаша бара. Әҙәби журналдарыбыҙҙың тиражы йылдан-йыл кәмей барыуы – әйткәнемә асыҡ миҫал. Кешеләрҙә, үкенескә ҡаршы, гәзит-журнал ҡайғыһы түгел, нисек тә йән аҫрау, донъя көтөү ҡайғыһы. Бик күптәрҙе эскелек һаҙлығы йота бара, суицид арта.

Әҙәбиәткә йәштәрҙең, элеккесә, ташҡын-ташҡын булып килмәүе, ә аратирә берәм-һәрәм исемдәрҙең күренгеләп ҡалыуы ла әйткәнемә ҡеүәт. Күпселек йәштәрҙең шиғриәткә, музыкаға зауығын ишетеп-күреп йөрөйбөҙ: ул үҙен популяр йырсы итеп атаған һәүәҫкәрҙең хатта ритм, рифмаһы ла булмаған “әҫәрҙәр”ен ысын шиғыр йә музыка тип ҡабул итә.

Ғүмерем буйы балалар матбуғатында эшләгән әҙибә булараҡ, шуны әйтә алам: үткән быуаттың 70-се -80-се йылдарында балалар әҙәби ижадҡа шул тиклем ныҡ ынтыла ине: уларҙың хаттарына яуап бирер өлгөрөп булмай торғайны. Хәҙер хаттар һирәгәйҙе, балаларҙың яҙғандары бер-береһенән айырылмай ҙа тиерлек, сөнки художестволы фекерләү ҡеүәһе юҡ, тел байлығы ла етмәй.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәлдәр ысынлап та шулай. Минеңсә, быныӊ сәбәптәре тормош ауырлығында ғына түгел. Уҙған быуаттың 20 – 30-сы йылдарында еңел булғанмы ла, һуғыш мәлендә, унан һуңғы осорҙа анһат инеме?! Әммә халыҡ китапҡа, матбуғат баҫмаларына йәбешеп ятҡан бит, яҡты идеалдарға инанған. Беҙ, идеологтар ҙа, әҙиптәр ҙә, дөйөм алғанда, халыҡтың ана шул өмөттәрен, инаныстарын ҡаҡшатыуға ҙур өлөш индерҙек. Быны танырға кәрәк. Таныу кемделер хурлау, үткәнде тулыһынса инҡар итеү, аҡланыу өсөн түгел, ә аңлау өсөн, фәһем өсөн. Осорҙоң трагедиялары ла шунда: беҙ әле булһа аныҡ ҡына маҡсаттар билдәләй алмайбыҙ. Рәсәйҙең бар үҙенсәлектәрен, ҡапма-ҡаршылыҡтарын иҫәпкә алған милли идеология кәрәк беҙгә. Һулар һауа кеүек үк – бөгөндән кәрәк! Уны Мәскәү ғалимдары эшләйәсәк, тип өмөтләнергә ярамай. Уларҙың ил хәстәре менән янғандары өсөн дә был икенсел проблема. Бөгөн, ғөмүмән, Рәсәйҙе иҡтисади, сәйәси һ.б. йәһәттән бойондороҡһоҙ ил һәм дәүләт итеп һаҡлап ҡала алыу мәсьәләһе бик ҡырҡыу тора. Беҙгә иһә россиян булараҡ ҡына түгел, башҡорт булараҡ һаҡланыу ҙа бик мөһим. Тап шуның өсөн, бөгөнгө ысынбарлыҡтан сығып, перспективаларҙы тоҫмаллап эшләнгән алдынғы идеялар тупланмаһы, йәғни милли идеология кәрәк беҙгә.

Ана “Республика Башҡортостан” гәзитендә иҡтисадҡа ҡағылышлы бик төплө

мәҡәләләр серияһы баҫылды. Был йәһәттән, әгәр ҙә әҙәбиәтте, әлеге лә баяғы, примитив рәүештә аңламаһаҡ, әҙиптәр ҙә тормошто нисек бар шулай тасуирлауҙары менән үҙ өлөшөн индерә алыр ине. Атаҡлы Эйнштейндың: “Миңә Достоевский Гаусска ҡарағанда ла күберәк бирә”, – тиеүе ни тиклем фәһемле. Ә бит Гаусс – бөйөк математик һәм физик. Шулай ҙа Достоевскийҙың Эйнштейнға йоғонтоһон нисек аңлатырға һуң? Әллә был ҡанатлы һүҙ генәме? Был тәү ҡарамаҡҡа ғәжәйеп бәйләнеш шунан ғибәрәт: Эйнштейндың гениаль теорияһы матдәнең яҡтылыҡ тиҙлеге менән хәрәкәт иткән шарттарҙа Эвклид геометрияһы закондары юҡҡа сығыуын асыҡланы. Достоевский иһә геройҙарын экстремаль хәлдәрҙә асырға ынтыла. Йәғни кеше көсөргәнешле осраҡтарҙа үҙенең йоҡомһораған мөмкинлектәрен, ҡылыҡтарын асып һала: йә үҙенән дә юғары күтәрелә, йә түбәнлеккә тәгәрәй, әшәкелеккә бара. Был – бер. Икенсенән (әйткәндәй, “Ағалы-энеле Карамазовтар”ҙы яҙған 1879 йылда Эйнштейн тыуған), Достоевскийҙың Иван Карамазовы бына нимә ти: “Если Бог есть и если он действительно создал землю... по эвклидовой геометрии... между тем находились и находятся геометры и философы, которые сомневаются в том, чтобы... все бытие было создано лишь по эвклидовой геометрии”. Шулай ҙа Достоевский Эйнштейнға логик фекерләүгә ҡарағанда, әлбиттә, психологик яҡтан ҙур этәреш биргән. Сөнки Достоевскийҙың ижады ғәҙәти психологияға (образлы рәүештә: “Эвклид теорияһы” сиктәренә, тиәйек) һыйып бөтмәй, ә ғәйәт масштаблы гармония менән һуғарылған.

Күренеүенсә, бөйөклөк ҡайһы өлкәлә генә булмаһын (!), хатта бөтөнләй башҡа йүнәлештәге бөйөктәргә лә ни ҙә булһа бирмәй ҡалмай. Ә “Миңә башҡаларҙан өйрәнеүҙең кәрәге юҡ, сөнки мин үҙем – гений“ тип хисаплаусыға нимәлер иҫбатлауҙың мәғәнәһе юҡ.

Әҫәрҙең халыҡсанлығына килгәндә... Ысын мәғәнәһендә халыҡ рухы менән һуғарылған талантлы әҙип бөгөнгө тормош күренештәрен, күңел тирбәлештәрен йөрәге аша үткәрә ала икән, халыҡсанлыҡҡа ирешә тигән һүҙ. Уҡыусы менән алыҫайған араны ҡайтанан яҡынайтыу өсөн тәү сиратта алдашмаҫҡа кәрәк. Әҙип, әлбиттә, әҙәм балаһының ҡатмарлы кисерештәрен иғтибар йәлеп итерлек асыу өсөн төрлө алымдар менән эш итә, һүрәтләүсе булараҡ төрлө ҡиәфәт ала. Хатта йәнлектәр, улай ғына ла түгел “йәнһеҙ әйберҙәр” исеменән һөйләп ебәрә. Бындай шартлылыҡты нисек алдашыу тип ҡарайһың?! Бар шулай уҡ һүҙ уйнатыуҙар... Айырыуса бында сик тигән нәмәне оноторға ярамайҙыр. Тәү сиратта мин әҙиптең бөтөнлөгөн күҙ уңында тотам: һөйләгәндәрең, яҙғандарың үҙеңдең асылыңа тап килһен. Юҡһа беҙҙең ҡайһы бер шағирҙар ике әҫәренең береһендә иман тураһында һүҙ ҡуйырта, ә үҙенең иманһыҙлыҡҡа тере һәйкәл булыуы хаҡында уйлап та бирмәй...

Эйе, һүҙ уйнатыуҙар ҙа, иманһыҙлыҡ та, “генералдар”ыбыҙ ҙа бар. Бынамын тигән таланттарыбыҙ ҙа етерлек. Тик киләсәгебеҙ хаҡына әҙәби тәнҡит алтынды баҡырҙан, көмөштө әлүминдән айыра белһен ине.

**Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА:**

Әҙәбиәт тыуҙырған идеалдар кешене бөтә ғүмере буйы яҡтылыҡҡа, матурлыҡҡа әйҙәп торорға тейештәр. Бөйөк ижадсының шәхесе лә, әгәр ул үҙ ижадына торошло булһа, легендаға әүерелеп, үҙе үк идеалға әйләнә.

*Намыҫ өсөн, Тәңрем, йәндән кисәм,*
*Килтер вәғәҙә... Ҡөҙрәт ҡулың бир!*
*Башҡортостан иҫән ҡала тиһәң,*
*Бер йәнемә миллион үлем бир!*

(“Ғәскәр доғаһы”).

Шәйехзада Бабич, әйтерһең, үҙенең ҡатилдар ҡулынан язаланып, мең ғазаптар сигеп йән биргәндән һуң да “миллион үлем”гә дусар буласағын алдан күргән. Заманында власть әһелдәре исемен дә телгә алдырмаған Бабич халыҡ күңелендә йәшәгән, ҡулъяҙмалары уҡымышлы олатайҙарыбыҙҙың йәшерен һандығында ҡәҙерле хазина булып һаҡланған. Рауил Бикбаев тырышлығы менән Бабич яңынан “тыуҙы”.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең һөйләгәнен әле лә хәтерләйем: “Бер ҡатындан хат алдым. “Үҙемә ҡул һалыр сиккә еткән мәлдә, – тип яҙған ул, – һеҙҙең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” әҫәре баҫылған роман-гәзитте почта йәшнигенән алдым да уҡый башланым. Әүрәп киттем. Шул тиклем ҡояшлы әҫәр! Һеҙ – мине әжәлдән ҡотҡарҙығыҙ!”

Әҙәбиәттең тәрбиәүи әһәмиәте шул булалыр инде ул.

Эстетикала *художестволы* тәрбиә биреү тигән төшөнсә бар, йәғни сәнғәт әҫәрен аңлау өсөн уны аңларлыҡ кимәлдә булырға тейешһең бит әле. Был эш мәктәпкә генә ҡайтып ҡалмай, ул кешенең һуңғы һулышынаса һуҙыла.

Рус революцион демократтары сәнғәтте, шул иҫәптән әҙәбиәтте лә тормош көҙгөһө һәм тормош дәреслеге тип ҡараған. Айырыуса Н.Г. Чернышевский ошо фекерҙә торған, ул, сәнғәт – белем, шулай уҡ әхлаҡ, социаль-сәйәси тәрбиә биреү сығанағы тип фекер йөрөткән.

Бөгөн әҙәбиәтте белем биреү сығанағына һәм дәреслеккә генә ҡайтарып ҡалдырып булмай, әлбиттә. Шулай уҡ бер яҫылыҡта ғына сағылдырған көҙгө лә түгел. Алда әйткәнемсә, әҙәбиәттең, шулай уҡ шиғриәттең кеше йөрәгенә, аҡыл-зиһененә тәьҫир итеү көсө икһеҙ-сикһеҙ, сөнки яҙыусы ла бит йөрәге менән яҙа, таланттың фекерләүе лә ҡеүәтле. “Мең талантҡа әсә бер талант”, – тип яҙғайным мин бер шиғырымда.

XIX быуаттың икенсе яртыһында заман талабы башҡорт әҙәбиәтендә мәғрифәтселек йүнәлешен тыуҙыра. Йәмғиәттәге социаль тигеҙһеҙлекте бөтөрөү маҡсатында улар халыҡты мәғрифәтле итеү өсөн күп көс һала. Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Риза Фәхретдиновтарҙың хеҙмәттәре шул тиклем ҙур – улар бөгөн дә халыҡты тәрбиәләүҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Һәр башҡорт мәктәбендә тиерлек Аҡмулланың “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!” тигән үлмәҫ шиғри юлдары яҙып ҡуйылған.

Заман башҡа – заң башҡа, тигәндәй, бөгөнгө әҙәбиәттең бурыстары ла башҡа. Ул хаҡта алда әйтеп кителде инде. Һорауҙы башҡасараҡ ҡуйырға кәрәктер, бәлки? Бөгөнгө заман геройы кем ул? Илен һатып байыған олигархмы, бөлгөнлөккә төшкән ябай башҡорт кешеһеме, әллә үҙ йүнен үҙе күрергә тырышҡан эшҡыуармы? Халыҡҡа афәт булып ябырылған эшһеҙлектән, эскелектән, суицидтан нисек ҡотолорға? Урмандарың һатылып бөткәндә, ер-һыуың ҡулдан ысҡынырға торғанда ни ҡылырға? Генофондты нисек һаҡлап ҡалырға? Ҡайҙа ул беҙҙең милли идея? Йәмәғәт эшмәкәре, күренекле яҙыусы Булат Рафиҡов һәр башҡорттоң йәшәү ҡағиҙәһен эшләп, “Ағиҙел” журналында баҫтырып сығарғайны. Үкенескә ҡаршы, күптән онотолдо инде ул. Йәһүдтәрҙең борон-борондан йәшәп килгән катехизисы бар ҙа баһа. Уны бөгөн дә бер йәһүд тә онотмағандыр, моғайын.

Детектив, фәнни фантастика ла бик кәрәк. “Әммә уларҙа бөгөнгө көн геройын тыуҙырып буламы?” – тигән һорау ҙа борсой мине.

Яңы формаларға мөрәжәғәт итеүгә килгәндә... Башҡортостан рәссамдары модернизм, авангардизм кеүек йүнәлештәрҙә бик әүҙемлек күрһәтә. Улар сит илдәргә йыш йөрөй, картиналарын һата, уңыштарға ирешә. Ләкин, нисек кенә булмаһын, сәнғәттең төп ҡануны – гармония. Донъя, ғаләм үҙе лә бит гармонияға ҡоролған. Ер күсәрен картинала үҙ урынынан алып, икенсе мөйөшкә ҡуйып була, әлбиттә. Ләкин ысын мәғәнәһендә уның үҙ функцияһын

алмаштырһаҡ, ахырызаман булыр ине. Тфү... Тфү... Бөйөк Блоктың классик Пушкинға арнап яҙылған “Шағирҙың тәғәйенләнеше тураһында” мәҡәләһендә шундай кире ҡаҡҡыһыҙ юлдары бар: “Что такое поэт? Человек, который пишет стихами? Нет, конечно. Он называется поэтом не потому, что он пишет стихами; но он пишет стихами, т.е. приводит в гармониях слова и звуки, потому что он – сын гармонии, поэт. Что такое гармония? Гармония есть согласие мировых сил, порядок мировой жизни...”

Һынлы сәнғәткә, бер уйлаһаң, модернизм килешеп тә торған кеүек. Һүҙ сәнғәтендә бит һүҙ, моң, фекер – бер бөтөн. Башҡорт поэзияһында Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рәми Ғарипов кешенең эске кисерештәре, шулай уҡ фекер тәрәнлеге, халыҡсан моңо менән ҡәҙерле. Рәшит Назаров, Рауил Бикбаев, Хәсән Назар шиғриәтенең рухи энергетикаһы көслө. Ғөмүмән, беҙҙең шиғриәттең күркәмлеге – быуындар традицияһын дауам итеүендә. Йәшерәк быуындан үҙенсәлекле художестволы фекерләүе менән Рәйес Түләк һуҡырға ла алыҫтан күренеп тора.

Урал тауҙары Азия менән Европаны тоташтырып торған кеүек, беҙҙең әҙәбиәт тә борон-борондан көнсығыштан да, көнбайыштан да һут алған. Шул уҡ ваҡытта үҙ традицияларын һаҡлаған. Ошо хаҡта фундаменталь хеҙмәттәр яҙған академик Ғайса Хөсәйенов ағай миңә ҡарағанда күберәк белә, әлбиттә.

Хәҙер ҙә көнсығыштан килгән робағиҙы Мәүлит Ямалетдин менән Ҡәҙим Аралбай ҡойоп ҡуя. Әнисә Таһирова – сонет оҫтаһы. Күңелең тарта икән, уларын да ижад ит. Бөйөк Байрондың Пушкинға йоғонтоһо көслө булған.

Илебеҙҙәге бар халыҡтар ҙа көнбайышса йәшәү рәүешенә, Америка демократияһына эйәргән заманда уларҙың идеологияһы ла беҙҙең аңыбыҙға һеңә. XIX быуат аҙағында Европала тыуған модернизмдың нигеҙен “сәнғәт сәнғәт өсөн” принцибы тотоп тора. Ул йөкмәткегә ҡарағанда тышҡы эффекты, йәғни форма менән шаҡ ҡатырыуҙы үҙ итә. Иң ҡурҡынысы: быуындан-быуынға килгән традицияларҙы емерергә саҡыра.

Ҡыҙыҡ ҡына мәҡәлә уҡыным. Ҡытай бөгөнгө көндә алдынғы илдәрҙән һанала. Был мөғжизәнең сере бик ябай: улар донъяла иң боронғоларҙан булып һаналған мәҙәниәттәренә, традицияларына таянып эш итә икән.

Фольклорҙа һалынған фәлсәфәне әлегә беҙ аҙ файҙаланабыҙ. С. Айытматовтың бөйөклөгө нимәлә? Һәр әҫәрендә тиерлек ҡырғыҙ фольклорын төп сюжетҡа параллель ҡулланып, ул ҙур фәлсәфә сығара. “Маңҡорт” һүҙен донъяла белмәгән кеше юҡтыр хәҙер.

Яҙыусыларҙың үткән съезындағы сығышымда мин әҙәби ижадҡа һәләте булған балалар өсөн республика гимназия-интернаты асырға кәрәклеге тураһында әйтеп киткәйнем. Рәссамдар, музыканттар махсус мәктәптә белем ала, уларҙың һөнәри оҫталыҡҡа юлы шунда башлана. Нишләптер беҙ, әҙәбиәтселәр, ауылда тыуып, мең михнәттәр менән үҙҙәре юл ярырға тейеш, тип күнеккәнбеҙ. Яҙыусы донъя әҙәбиәте, туған әҙәбиәт менән бергә тарих, философия, логика, психология, музыка, ғөмүмән, сәнғәт төрҙәрен, уларҙың тарихын белеп үҫһә, бик яҡшы булыр ине. Шуға өҫтәп туған тел, рус теле һәм берәй сит телде тәрәндән үҙләштереү ҙә зарур.

Журналист, әҙәбиәтсе, тәржемәсе булырға теләгән һәр баланың ана шундай мәктәптә уҡығыһы бик килер ине, тип уйлайым.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Әҙәбиәтселәр әҙерләүсе махсус мәктәп? Бәлки, киләсәктә ул да тормошҡа ашыр... Әлегә иһә Рәми Ғарипов исемендәге Республика гимназия-интернатында бер әҙәби класс асыуҙан башлау бөгөндән мөмкин булыр ине, моғайын. Бында бары тик Яҙыусылар идараһының, Мәғариф министрлығының,

хөкүмәт етәкселегенең һәм гимназия администрацияһының был мәсьәләгә ыңғай ҡарауы ғына кәрәк. Күҙаллауымса, был идеяны тормошҡа ашырыу өсөн күп сығымдар ҙа талап ителмәй. Гимназиялағы балаларҙың әлеге һанынан сығып (тик был класҡа республика буйынса һайлап алып), эш итергә мөмкин. Был класты тамамлаусылар ошо уҡ йүнәлештә уҡыуҙарын БДУ-ла дауам итер ине. Шулай уҡ махсус программа буйынса.

Беҙгә, ысынлап та, барына шөкөр иткән хәлдә лә, тирә-йүнгә ҡарап фекер итеү фарыз. Яңылыҡҡа яңылыҡ булған өсөн генә мөкиббән китергә лә, тулыһынса уны инҡар итергә лә һис ярамай. Тормош мәңгелек үҫеш, үҙгәрештә икән, уны сағылдырыусы формаларҙың да, алымдарҙың да алышынып тороуы тәбиғи. Тимәк, модернизмды мотлаҡ традицияларҙы боҙоу тип кенә аңлау уғата сикләнгәнлекте күрһәтә. Иң мөһиме: модернистик йүнәлештәр үҙмаҡсатҡа әйләнмәһен. Әйтергә теләгән фекерҙе, күңелдә яралған образды үҙең күҙаллағанса, бөгөнгө техник ҡаҙаныштарҙы эйәрләгән замандаш аңларлыҡ телдә түкмәй-сәсмәй аҡҡа күсереү теге йәки был форманы, алымды талап итә. Ғүмер буйы йәйәү йөрөгән кеше психологияһы менән тыуғанда уҡ компьютер тотоп тыуған әҙәм балаһының донъяны күҙаллау айырымлығы һәм мөмкинлектәре төрлөсә булыуын иҫәпкә алмай ярамай. Бына һинең, Факиһа, хатта бер үк әҫәр эсендә традицион һүҙ ағышынан аҡ шиғырға күсеп китеүҙәрең...

**Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА:**

– Һинең менән килешәм. "Ҡыңғырау"ҙы яҙғанда, мәҫәлән, миңә шартлауҙы, әҙәм балаларының ғына түгел, ҡош-ҡорттоң, йәнлектәрҙең, бар тәбиғәттең "аһ"ын, ғазабын, үлемесле хәлен бирергә кәрәк ине. Тыныс ҡына, һәүетемсә генә аҡҡан тормоштоң ҡот осҡос ҡыйралышҡа дусар ителеүен мин тап ана шундай алым аша ғына сағылдыра алырға мөмкин тип таптым.

● *Сираттағы әңгәмәлә – шиғриәтте "Мәңгелек сылбыр" тип баһалаған ҡәләмдәшебеҙ Йомабикә Ильясова.*

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

– Йомабикә, һин билдәле баҫманың абруйлы баш мөхәррире сифатында ла, танылған шағирә булараҡ та әҙәбиәтебеҙҙе яҡшы күҙаллайһың, эстән дә, тыштан да һәйбәт беләһең. Дөйөм кимәлебеҙгә бәйле борсолоуҙар белдергән осраҡтарҙа ла йыш ҡына: "Ярай әле шиғриәтебеҙ бына тигән – ул һаҡлай юғарылыҡты", – тигәнерәк ҡараштабыҙ. Ысынында иһә, айырым уңыштарыбыҙ булыуға ҡарамаҫтан, бында ла хафаланаһы нәмәләр байтаҡ бит. Ошо хаҡта ниндәйерәк фекерҙәһең?

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА:**

Шағирә, моғайын, был һорауға яуапты үҙенең юғары кимәлдәге шиғырҙары менән бирергә бурыслылыр. Әҙәбиәт тураһында күберәк тәнҡитселәр, уҡыусылар фекер йөрөтөргә тейештәр. Шул уҡ ваҡытта һәр ижадсы, ағас тамыр ебәргән тупрағына бәйле булған кеүек, үҙен тыуҙырған мөхит, уның һүҙ сәнғәте менән бер бөтөн. Бөгөнгө шиғриәттең ерлеге башҡорт халҡының бөйөк эпостарына, ҡобайыр, әкиәттәренә, йыр-моңдарына, Урал тәбиғәтенә һәм хатта йыһанға барып тоташа. Был асыл беҙҙең булмышыбыҙға нәҫелдән (генетик юл менән) һалынған һәм, ер ҡуйынындағы хазина кеүек, уйлап эҙләгәнде, тапҡанды көтөп кенә ята. Зиһенеңдә генә эшкә ек! Ә ҡайһы саҡта табыш һиҙемләү рәүешендә үҙенән-үҙе килә. Әйткәндәремде үҙем яҙған юлдар менән нығыта алам:

*Ай һәм ҡояш ниндәй матур пар ҙа,*
*Мәңгелектәр булгән.*
*Хикмәт шунда: берене янһын өсөн*
*Икенсеһе һүнгән.*

Аңдың бер төпкөлөнән килеп сыҡҡан был строфаны теркәп ҡуйғанда, боронғо әкиәттәребеҙҙә күктә ике ҡояш булып, береһен йә уҡ атып, йә бүтән сәбәптән һүндереп ҡуйыуҙарын уҡығаным юҡ ине әле. Ғәжәп бит! Йәки бына:

*Шағир йәне осто йондоҙҙарға*
*Йондоҙ төҫлө япраҡ яуған мәлдә,*
*Бойоҡмайса балҡып торған көҙҙә...*
*Һиҫкәнеүле һағыш ҡалды йәндә.*

Шиғыр 2005 йылда Мостай Кәримгә бағышланғайны. Ике аҙна элек фәнни темаға мәҡәлә уҡығайным, шунда, йәндең бер өлөшө атомға әйләнеп, йондоҙҙарға китә, был турала Циалковскийҙың хеҙмәттәрендә лә бар, тиелгән.

Өсөнсө миҫал:

*Мәңгелектең сиген үтер даһи*
*Бала һымаҡ була бер ҡатлы,*
*Алла кеүек яңғыҙ, һәм аллалай*
*Көсһөҙлөктән тыуа таланты.*

Һуңғы ике юлым өсөн эстән генә кәпәренеп, тапҡырлығыма һоҡланып йөрөп алдым. Маһайыуымды, ауылға ҡайтып, ҡатын-ҡыҙҙар менән сәй эсеп ултырғанда, бер апайҙың һүҙ араһында ғына әйтеп ҡуйғаны тотош юҡҡа сығарҙы: “Яңғыҙлыҡ Хоҙайға ғына килешә“, – тине ул. Ошолор инде халыҡ аҡылының бөйөклөгө. Әгәр һин милләтеңдән үлән кеүек кенә шытып сыҡһаң да, шиғриәтеңдә уның сикһеҙ моң даръяһы ана шул үләндәге саф ысыҡ кеүек мөлдөрәп торасаҡ. Бының өсөн шиғырҙың йөрәктән тыуыуы ғына кәрәк ни бары. Бөтә нәмәне яһалма шиғриәт боҙа.

Әҙәбиәтебеҙҙә Шәйехзада Бабич, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рәшит Назаров, Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев кеүек бейеклектәрҙең булыуы шулай уҡ дөйөм ижади эшмәкәрлеккә ыңғай йоғонто яһай. Берәй биҙәкте яһау өсөн уның ниндәйлеген тоҫмаллау мотлаҡ бит. Ә аталған әҙиптәрҙең биҙәктәре – бөйөк рухи ҡаҙаныштар, тик бының ҡәҙерен белергә генә кәрәк.

Һеҙ әйткән: “Ярай әле шиғриәтебеҙ бына тигән, ул һаҡлай юғарылыҡты”, – тигән һәм, ысындан да, йыш ишетелгән хәбәргә мин көләмһерәп ҡарайым. Беҙҙә, үкенескә ҡаршы, буш ҡына нәмәне, эстафета һымаҡ, мейенән мейегә тапшырыу ғәҙәте бар. Әҙәбиәт ғилеменең һүлпәнлеге лә быға булышлыҡ итәләр.

Дөйөм алғанда, бер ни өсөн дә хафаланырға кәрәкмәй. Шым ғына ижад итәйек. Бөйөклөк тынлыҡта ярала. Гөлдәр ҙә бит салют кеүек күкрәмәй генә таждарын аса, унан, Мостай Кәрим яҙғанса, “тик, күшеккән ҡоштар төркөмөләй, ошо көҙҙөң һуңғы сәскәләре ҡыуаҡ-ҡыуаҡ ултыра түтәлдәрҙә, ерҙе күмеп һағыш төҫтәренә”. Ошо ғәҙәти генә күренештәрҙә – донъяның оло камиллығы ла, тәрән ғазабы ла. Уларҙы кешелектең күңел йылъяҙмаһына теркәү өсөн шағирҙар тыуа.

Ысын шиғриәттә ваҡыт – үтә күренмәле генә сик. Шекспирҙың ҡайһы сонеттары әле ултырып яҙылған кеүек. Классик музыка, халыҡ көйҙәре шулай быуаттан быуатҡа күсә. Бындай әҫәрҙәрҙең тыуыуы иҡтисадҡа ла, сәйәсәткә лә, муллыҡҡа ла, ғүмер һәм йыл миҙгелдәренә лә, шиғриәткә ҡағылышлы

фекерҙәребеҙгә лә бәйле түгел, минеңсә. Шулай ҙа һуңғы осорҙа беҙ ижад хаҡында эскерһеҙ һөйләшеүҙәрҙән ситләштек. Бәғзе берәүҙәребеҙ үҙен маҡтаусы мәҡәләләрҙе үҙе ойоштора. Талант, намыҫ, халыҡ алдында ижадың өсөн яуаплылыҡ тигән төшөнсәләр онотолдо. Әҙәби премияларҙы алыу ҙа депутаттарҙың һайлау алды кампанияларын хәтерләтеп ҡуя. Бындай ауырыуҙар, әлбиттә, әҙәбиәттең сәләмәтлеген ҡаҡшата.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Һинең "Бөтә нәмәне яһалма шиғриәт боҙа", тиеүең менән килешмәй мөмкин түгел. Әммә "Бер ни өсөн дә хафаланырға кәрәкмәй", тигәнеңдә ҡабул итеүе ҡыйыныраҡ. Әлбиттә, ысын ижад емеше быуаттар аша ла балҡып торасаҡ, кешеләрҙең күңелен йылытасаҡ, изгелеккә рухландырасаҡ. Йөрәктең ҡанса йылыһын йөрөткән әҫәрҙәр үлемһеҙ ул. Михаил Булгаков әйткәнсә, "Ҡулъяҙмалар янмай!" Әммә нисек кенә булмаһын, был ғына "Борсолаһы юҡ! Тыныс ҡына йәшәргә мөмкин" тиергә нигеҙ була алмай. Кемдер тыныс ҡына, "шым ғына ижад итә" алһын өсөн, икенсе берәүгә утҡа инергә, хаяһыҙ бәндәләргә (ә улар тормоштоң һәр өлкәһендәге кеүек үк, әҙәби мөхиттә лә етерлек) ярҙай ҡалҡынырға тура килә, һәр әҙиптән быны талап итеү урынһыҙ ҙа, кәрәкмәй ҙә. Әгәр ҙә беҙ шул уҡ әҙәби тәнҡитселәрҙе "талант"ты хеҙмәтләндереүселәр (обслуживающий персонал) тип ҡарамаһаҡ, уларҙың үҙенсәлекле талантҡа эйә булғандарын таный алыу кимәлендә торһаҡ, әҙәби процесс ҡайнап торор, туртаЛары ваҡытында алыныр, бешеүе еткәне "табын"ға тәҡдим ителер, өлгөрмәгәне "ҡайнай" бирер, ә бөтөнләй "өлгөрмәҫтәйе" ҡаҙандан алыныр ҙа ине, бәлки. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең әҙәби тәнҡитселәрҙең булған тиклеме лә бөгөн "хеҙмәтләндереүсе" роле менән тулыһынса хушына, артығына дәғүә лә итмәй. Сөнки, берҙән, ул әҙәби мөхиттең әлегеһе хәлендә башҡаса мөмкин булмауын бик яҡшы аңлай. Икенсенән, әҙәбиәт хаҡында тәғәйен һүҙ әйтә алыу өсөн тәбиғи һәләт, ентекле ғилем өҫтөнә заманың талап иткән граждандлыҡ позицияның булыуы ла шарт. Бына ошо өс тағанға таянған ижади шәхестәр күтәрәсәк әҙәби тәнҡитте. Оптимист булһам да әйтәйем: бындай әҙәби тәнҡиткә әле мәле килмәгән. Ул көн, әлбиттә, иртәме-һуңмы тыуасаҡ. Әммә ул үҙлегенән генә яралыр тип уйлау – буш хыял ғына. Конкрет ҡәләмдәшебеҙҙең үҙ ижадынан да ғәйре, тотош башҡорт әҙәбиәте, башҡорт рухиәте, улай ғына ла түгел, халҡыбыҙ өсөн йәнен фиҙа ҡылыуҙары аша тыуасаҡ ул көн. Заман трагедияларының береһе шундалыр ҙа, бәлки: беҙ хатта әҙәби тәнҡит ярҙамынан тыш та баҡырҙың баҡыр икәнен беләбеҙ, әммә, алтын был тип тәҡдим итһәләр, тауыштынһыҙ ҡабул итәбеҙ, йәиһә, өндәшмәй, боролоп китәбеҙ.

Бөгөнгөбөҙҙә барлаһаҡ, һуңғы осор шиғриәттә уртаға һалып һөйләшерҙәй яңылыҡтар, ваҡиға булырлыҡ әҫәрҙәр бармы? Бындай әҫәрҙәрҙе кемдәрҙән көтөргә булыр ине?

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА:**

– Бар, әлбиттә. Бындай әҫәрҙәре менән оло быуын әҙиптәр ҙә, йәштәр ҙә ҡыуандырып тора. Тик ваҡиғалар шауҡымы арҡаһында иғтибарыбыҙҙы әҙәби күренешкә төбәргә йә ваҡыт, йә мөмкинлек тапмайбыҙ. Был да үҫешкә ҡамасаулай.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Аһ, ваҡыт!.. Назар Нәжми нисегерәк әйткәйне әле: "Ваҡытым юҡ!.. – тине Ваҡыт. Үтте лә китте". Ваҡыттың берәүҙе лә көтөп тормауы күптәребеҙгә һылтау

ҙа, ҡалҡан да, ҡорал да булһа кәрәк. Һылтауы аңлашыла (ҡүрәләтә кемдең генә утҡа ҡаршы күкрәк киргеһе килһен?!.). Ә кемгә ҡалҡан да, кемгә ҡорал һуң ваҡыт? Бөгөнгө хужа барыһына үҙе баш, үҙе түш икән – әлегеһе мәл тик уның, уның яҡындарының (ҡағиҙә булараҡ, ҡуштандарының) мәнфәғәтендә. Рәми ағай кеүектәргә иһә, “йырҙар менән күңел йыуатып”, бөгөнгөһөн ҡалҡан итеп, “киләсәгем, ас һин ишегеңде” тип, иртәгәгә генә өмөт бағларға ҡала. Шәйехзада, Рәми ағайҙар, әйтерһең дә, халҡың өсөн нисек бирелгән булырға кәрәклеген иҫбатлау өсөн генә йондоҙҙай атылып һүнгән кеүек. Уларҙы һәр саҡ иҫтә тотоп, улар яҙмышы яҡтылығында ваҡыты-ваҡыты менән бизмәндәрҙе тикшергеләп тороу ҙа зарур бит. Ә ижадта эталон мөмкинме, кәрәкме? Һинең өсөн кешелеклеге менән дә, шағир булараҡ та үлсәм һымағыраҡ бирәү бармы бөгөн?

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА:**

– Нимә яҙыуың, нисек яҙыуың өсөн эталон кәрәкмәй. Уның ҡамасаулауы ғына ихтимал. Ижад менән мәшғүл сағымда мин бер нәмә лә уҡымайым. Яңылыш ҡына ла кешегә эйәреүҙән йә кешенән алып ҡуйыуҙан ҡурҡам. Бер кем дә бер ни сәсмәгән, бер ни үҫтермәгән тупраҡ – шул булырға тейеш ижади лаборатория.

Ижадсы өсөн бер аҙ аяуһыҙ дәүерҙә йәшәйбеҙ. Марина Цветаева әйтмешләй: “О поэте не подумал век – и мне не до него”. Әммә бөтә кеше лә Марина Цветаева кеүек көслө түгел. Был көс үҙеңдең төп асылыңды юғалтмауҙа сағыла, һинең яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа хеҙмәт итергә ынтылыусы булмышыңды замандың ялған ҡиммәттәре язалай, ә ҡайһы мәлдә ымһындыра ла. Үҙең булып ҡалыу өсөн күңелгә таяу кәрәк. Ошондай ваҡытта яҡын-тирәлә инаныуҙарына тоғро ҡалған шәхес, уның менән аралашмаған хәлдә лә, – йөрәккә ҙур таяныс. Мостай Кәрим минең өсөн – ошондай рухи терәү. Тағы ла Роберт Байымовтың исемен атай алам. Йәшәү алдындағы һорауҙарына яуапты ғүмере менән биргән шул уҡ Марина Цветаева, шул уҡ Шәйехзада Бабич та – ҡараңғы төндөң йондоҙҙары, тойғоларында аҙашмаҫ һәм бүтәндәр алдында алдашмаҫ өсөн былдай маяҡтар барлығы ифрат мөһим. Дин алдында гонаһлы хәлдә лә Марина Цветаева оло ҡиммәттәр алдында изге, тип раҫлай алам.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Мостай ағай дәүере, тигәндә, беҙ Рәсәй әҙиптәре менән аралашыу, донъя әҙәбиәте кимәленә сығыу, тәржемә кеүек мәсьәләләрҙе ҡалҡытырға мәжбүрбеҙ. Бына ошо аралашыуҙар, тәржемәләр бөгөн һүнеп ҡалды кеүек. Айырым әҙип үҙе генә былдай проблеманы тулыһынса хәл дә итә алмай, тыйнаҡлыҡ та күрһәтә. Яҙыусылар берекмәһенең төп бурыстарының береһе шул түгелме икән? Республика буйынса уҡыусылар, халыҡ менән осрашыуҙарға ла берекмә исеменән бер үк дүрт-биш кеше йөрөй...

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА:**

– Минеңсә, тап был мәсьәләлә тыйнаҡлыҡ кәрәкмәй. Иң тәүҙә донъя мәҙәниәтенә иғтибар йүнәлтеп, ҡабул итерлек ижадты тыуҙырыу мөһим, унан, тейешле кимәлдәге тәржемәне хәстәрләү фарыз. Тәржемә, быяла аша ҡараған кеүек, әҫәрҙе нисек бар, шулай күрһәтергә бурыслы. Юғиһә башҡортса балҡып торған шиғырҙар рус телендә уртаҡул ғына яңғырай. Рәшит Назаровтың, Рәми Ғариповтың әҫәрҙәренең тәржемәләре, үкенескә ҡаршы, уларҙы күпкә түбәнәйтә. Ғәжәйеп тәржемәләре менән хайран итеүсе Рәми Ғарипов та, үҙ шиғриәтенә ҡағылғанда, һеҙ әйткән тыйнаҡлыҡ арҡаһында

отола, бәлки, иҫән сағында ваҡыты ла етмәгәндер. Әҙип үҙенең тәржемәһе менән үҙе шөғөлләнергә, үҙ күңелен, яҙыу үҙенсәлеген теүәл тоҫмаллаған оҫтаны табырға, эш ваҡытында ҡәтғи талапсанлыҡ күрһәтергә тейеш. Яҙыусылар союзы ниндәйҙер дәрәжәлә булышлыҡ иткән хәлдә лә, тик автор үҙе генә яҙғанын сит телдә ҡотло итеп тыуҙыра ала. Союзға һылтанып, ялҡаулығыбыҙҙы аҡлайбыҙ. Мин үҙем дә шиғырҙарымдың тәржемәһе менән булышырға һис ваҡыт бүлә алмайым.

Уңайы сыҡҡанда әйтеп үтәйем: быйыл беҙ филология фәндәре докторы, ҙур ғалимәбеҙ Фәнүзә апай Нәҙершина менән Рәшит Назаровтың “Йондоҙҙар туйы” исемле китабын башҡорт, рус, инглиз телдәрендә әҙерләп сығарҙыҡ. Мин шуны аңланым: бындай талантты тәржемә итеү өсөн иң тәүҙә уға сикһеҙ ихтирам, унан шул уҡ кимәлдәге һәләт, илһам, уның һымаҡ тулҡында фекерләү, үҙеңдә лә уны дөрләтеүсе ялҡынды ҡабыҙыу, йәнә лә бындай ҙа эскерһеҙ хеҙмәткә булышлыҡ итеүсе киң күңеллелек кәрәк икән. Ә был бик һирәк осрай. Айҙар Хөсәйеновтың тәржемәләре Фәнүзә апайҙы ла, мине лә ярайһы уҡ ҡыуандырҙы. Йомғаҡлап әйткәндә, бындай эште ошолай тоторға ла эшләргә кәрәк. Унан һәр нәмәнең үҙ тәбиғи айышы бар. Әйтәйек, яҙын япраҡты ағастан саҡ өҙөп алаһың. Көҙ көнө ул үҙенән-үҙе ҡойола. Тимәк, беҙҙә тәржемә мәктәбе өлгөрөп етмәгән барыбер. Тәржемә әҙәбиәттең бер өлөшө икәнлеге ҡанунға әйләнергә тейеш.

Ғөмүмән, милли әҙәбиәт үҫеше донъя кимәле менән бер рәттә барғанда ғына тиңдәр араһында тиңгә әйләнергә мөмкин. Рәссам төҫтәрҙең туҡымаға нисек ятыуы, ҡайһы урынды ниндәй ҡылҡәләм менән төшөрөү хаҡында уйлана. Композитор моңдоң бөгөлдәрен нескә тоя. Беҙҙең оҫталыҡ, хисте сағылдырыусы булараҡ, һүҙҙе, мәғәнәне ниндәй дәрәжәлә файҙаланыуыбыҙға бәйле һәм был камиллыҡтың сиге юҡ. Әгәр башҡорт телен уҡытыуҙы, белеүҙе төп талаптарҙың береһе итеп ҡуябыҙ икән, иң тәүҙә был телдә юғары кимәлдәге әҫәрҙәр тыуыуы туҡтамаҫҡа тейеш. Был кимәл шулай уҡ дөйөм кешелек хазиналарын башҡортсаға тәржемә итеү иҫәбенә лә тулыланһын ине. Бындай тәржемә әҙәбиәттең сиктәрен киңәйтә, яңы художество алымдары индерә.

Башҡорт, рус, инглиз телдәренән тыш, шиғриәттең үҙенең генә теле бар икәнен иҫкә төшөрһәк, уны тәржемә итеү ябай ғына түгеллегенә тағы бер төшөнөрбөҙ.

Әҙәбиәтте ҡош менән сағыштырһаҡ, ҡанаттарын йәйеп осор өсөн уға тәржемә кәрәк. Башҡортостан эсендә генә ҡайнау ижад офоҡтарын тарайтыуы ла ихтимал бит.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Әҙәби тәнҡитсе (әҙерлекле, ғәҙел тәнҡитсе!), әлбиттә, әҙипте талантлы итә алмай, әммә уны “асырға”, тәғәйен баһаларға һис шикһеҙ ярҙам итә, минеңсә. Кемгәлер аҡыл өйрәтеүҙе маҡсат итмәй ул, сөнки белә: ысын мәғәнәһендәге ижадта был – урынһыҙ, “танылған”дарға ла иҫәп тотмай, сөнки уның баһалары күптәрҙе айнытыуы бар (яңғыҙ йөрөп юл тапҡанға еңелме лә, күмәктәр менән бергә аҙашҡанға ҡыйынмы?). Уның күҙ терәгәне: рухлылар, күбеһенсә, йәштәр, ғүмерҙе – һынау, ижад тип ҡараусылар. Тәғәйен баһалар аша тап ошо рухлыларҙа әҙәбиәтебеҙгә ҡарата дөрөҫ ҡараш, ғөмүмән, юғары әҙәби, рухи зауыҡ тәрбиәләргә мөмкин һәм кәрәк. Ошондай тәнҡитселәребеҙ бармы беҙҙә? Әллә, алдан әйткәнеңсә, премия өләшеү кампанияларында ҡатнашыусылар ғына бармы? Әҙәби тәнҡитте үҫтереүгә ни ҡамасаулай?

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА:**

– Үкенескә ҡаршы, Ғайса Хөсәйенов, Ким Әхмәтйәнов һымаҡ юғары кимәлдәге әҙәбиәт белгестәренә бөгөн ҡытлыҡ ҙур. Ни өсөн уларҙан һуңғы быуын фән кандидаттары һәм хатта докторҙары араһында ла шиғриәткә әһәмиәт биреүсе һәм уны тәрән аңлаусылар юҡ? Был һорау киләсәктә лә риторик килеш кенә ҡалһа, эштәр харап. Ә матбуғат баҫмаларында әҙәбиәт хаҡында ғәҙел һүҙ бик һирәк әйтелә, ошо арҡала әҙерлекһеҙ уҡыусы ҡайһы саҡ баҡырҙы алтын күреп ҡабул итә. Әйтәйек, рус әҙәбиәтендә Пастернакты халыҡ түгел, әҙәби мөхит күтәргән. Бөгөнгө көндә берәй башҡорт Пастернагы килеп тыуһа, хатта ул берәүгә лә кәрәк тә түгел кеүек. Бөгөн беҙ шиғриәтте алҡыштарға ҡарап баһалайбыҙ. Ә бит халыҡсанлыҡ уҡыусының дәррәү ҡабул итеүендә генә түгел. Үҙенсәлекле фекер, сәнғәтсә зауыҡ эсендә йәшерелгән халыҡсанлыҡ ысын тәнҡитсегә мохтажлыҡ кисерәлер ҙә инде. Ижадтың күп яҡлылығын, төрлөлөгөн асыу, быға ирешеүҙе булдырыу – тап әҙәбиәт ғилеменең бурысы. Был мәсьәләне юғары уҡыу йорттарының филология факультеттарына талап итеп ҡуйыу кәрәктер, бәлки?

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Талап та кәрәк. Дөйөм әҙәби процестағы эске ихтыяж булыуы тағы ла кәрәгерәк. Хикмәт шунда: тормошта бит бөтәһе лә күренер-күренмәҫ ептәр менән бергә бәйләнгән, бергә сеймәлеп, төйнәлгән. Әҙиптәрҙең ижады йоғонтоһонда йәш быуын тәрбиәләнә (мәҙәни, техник интеллигенция ғына түгел, ғөмүмән, йәш быуын), улар юғары уҡыу йорттарына килә. Шуларҙың мәҙәниәткә, әҙәбиәткә ҡағылышлы йүнәлеш һайлағандарының белемен артабан үҫтереүҙә ҡайһы берҙәре Яҙыусылар берлеге ағзаһы булған ҡәләмдәштәребеҙ ҡатнаша. Аңлашылыуынса, беҙгә ҡайҙандыр ситтән килеп өйрәтеүселәр ҙә, һабаҡ биреүселәр ҙә, талап ҡуйыусылар ҙа юҡ. Беҙ бөтәһен дә үҙебеҙ эшләйбеҙ. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ күтәрәбеҙ, йә төшөрәбеҙ. Йә күтәргән, күтәрелгән булып ҡыланабыҙ (һүҙ оҫтаһының бит ҡасан ҡыланғанын, ҡасан ысынды һөйләгәнен аңғара һалыуы ла еңелдән түгел). Тап ошоноһо насар. Күҙ буяуҙар, күҙ быуыуҙар хаҡында сәйәсәттә, иҡтисадта асығыраҡ һүҙ ишетелә башланы. Ә бына һүҙ менән күҙ быуыу тураһында... Тәҡүәле кешегә мәсет иң изге урын икән, әҙәби майҙан да әҙип өсөн шулай булырға тейеш түгелме икән?! Ә шиғыр һинең өсөн, Йомабикә, нимә ул?

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА:**

– Бөтәһе лә. Әммә миңә ғүмер буйы тап шиғри булмышымды ситләтергә, үгәйһетергә тура килде. Ә ул барыбер бөтә мөһим эштәремдең осонда эләгеп торҙо, ситкә китмәне, үҙ сиратын сабыр көтөп, күңелемде арбаны, йәшәүемә юғары асыл бирҙе, тап уның арҡаһында донъяға һоҡланыуҙан, ошо һоҡланыуҙың сикһеҙ бәхетен татыуҙан туҡтаманым. Шиғыр – минең төп көсөм. Йәнемдә шиғыр булмаһа, бәлки, мин дә һыныр инем, йә эске яҡтымды күләгә ялмар ине. Нисек кенә йәшәгәндә лә, ул тормошомдо бөтөн итеүсе, уға ҡот өрөүсе.

Бер яҡтан, Назар Нәжми әйткәнсә, шиғыр – юғары һыҙланыу, йәшәйештә төҙәтеп булмағанды төҙәтергә ынтылыу, донъяның камиллығына ирешергә маташыу һәм быны килеп сыҡмауынан тетрәнеү. Әммә, күп шағирҙар кеүек үк, мин дә изге, идеаль түгел, байтаҡ етешһеҙлектәре булған кешемен. Бары шиғыр яҙғанда, доға уҡығандағы йә йыр йырлағандағы күңел бейеклегенә күтәреләһең, ә кешеләр яҙғаныңды уҡый ҙа “ниндәй һәйбәт кеше” тип уйлай. Шиғырҙың ошо яғы бер аҙ ҡыйынһыныу тыуҙыра.

Икенсе яҡтан, шиғыр яралыуында барыбер билдәһеҙ бер сер бар. Мин

шиғырҙың ҡайҙандыр килгәнен хатта тәнем менән тоям, әллә ул уйҙың бер энергетикаһы булып уҡмаша микән? Ул, бала кеүек, бигүк матур, бигүк камил тыумаҫҡа ла ихтимал. Миндә шиғыр тотошлайы менән килеп сыға, шуға ла һуңынан төҙәтә лә, яҡшырта ла алмайым. Нисек тә – үҙемдеке. Ни хәл итәһең, гел сәскә түгел һәр шиғыр, араһында сүп үләне һымаҡтары ла байтаҡ. Быны оятын да күтәрергә тура килә. Шуға күрә шиғыр яҙырға йөрьәт итеүҙе, уны яҙмыш итеүҙе ҡаһарманлыҡҡа ла тиңләп ҡуям. Өҫтәүенә, көллө ғаләмгә йөрәк сереңде асаһың.

Шиғыр яҙғандан һуң күңел тынысланып та ҡала, үҙенә күрә бер йән дауаһы (психотерапия) һымаҡ.

Минең ижадымды яратыусылар күп түгел. Әммә улар бар. Бер уҡытыусынан килгән хатты ҡәҙерләп һаҡлайым, "Һеҙҙең шиғырҙарығыҙ барында көндәлек яҙыу ҙа кәрәкмәй", – тигән һүҙҙәре йөрәгемә уйылды. Тағы ла Әбйәлил районынан бер ҡатын илай-илай шылтыратҡайны: "Иң ауыр мәлдәремдән һеҙҙең шиғырҙарығыҙға таянып сыҡтым", – тип. Быларҙы белеү маһайыу өсөн түгел, ә үҙеңдең кәрәклегеңә ышаныу өсөн кәрәк. Ижадта был бик мөһим.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Уҙған быуатта шиғыр һөйөү теле лә булды, ярһыу публицист ролендә лә сығыш яһаны, фәлсәфәүи дөйөмләштереүҙәргә лә ынтылды. Йәштәр һөйөүен атаҡлы шиғыр юлдары менән белдерергә тырышты... Нисек уйлайһың, бөгөнгө шиғриәт был биләмәләрен һаҡлай алғанмы? Һәйбәт традицияларҙы кемдәр дауам итә, улар нисек үҫтерелә, эҙләнеүҙәр, табыштар бармы?

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА:**

– Шиғыр бит ул – тормоштоң үҙе. Ғөмүмән, ниндәйҙер халыҡты белгең килһә, уның шиғриәтен уҡырға кәрәктер, тип иҫәпләйем. Сөнки сәсмә әҫәр дөйөмләштерелеүгә ҡорола, ул тулыһынса авторҙың сағылышы түгел барыбер, драматургияның – үҙ ҡанундары. Ә бына ысын шиғыр (яһалма шиғриәт күҙ уңында тотолмай) йөрәктән түгелеүе менән милләттең төп булмышын һынландыра, тип уйлайым. Шуға күрә шиғыр һәр заманда ла, бәндәнең күңел кисерештәре кеүек үк, һис бер өҙөлмәүсе сикһеҙлек булып ҡаласаҡ. Мәктәптәрҙә йөрөгәндә, шиғыр яҙыусы һәм шиғырҙы ғәжәйеп аңлап уҡыусы балалар менән осрашыу киләсәккә өмөт уята.

Әҙәбиәттә үҫеш, прогресс тигән төшөнсә фәндәгенән йәки тормоштағынан ныҡ айырыла бит ул. Беҙ, мәҫәлән, Шекспир Гомерҙан, ә Толстой Шекспирҙан шәберәк, тип әйтә алмайбыҙ. Шул уҡ Шекспир миңә әлеге әҙиптәргә ҡарағанда ла замансараҡ тойола, күңел торошома иҫ китмәле ауаздаш юлдары бар. Машиналар, самолеттар, технологиялар ғына яҡшырғандан-яҡшыра бара. Шул уҡ ваҡытта, әгәр Толстой бөгөн йәшәһә, башҡасараҡ яҙыр ине.

Ҡатын-ҡыҙ булараҡ әйтәм, өйҙә гөл генә ултыртһаң да, күршәккә шул мәңгелек тупраҡты һалаһың, бында бер ни ҙә уйлап сығарып булмай. Әҙәбиәт тә мәңгелек төшөнсәләргә бәйле, уның традициялары, табыштары, боронғоһо, бөгөнгөһө бергә үрелеп килә. Осо-ҡырыйы юҡ был сылбырҙың ғәжәйеп яҡтыһында башҡорт шиғриәтенең үҙенә генә хас нуры ла балҡый. Был нур Башҡортостанға ғына түгел, барса ғаләмгә шифа бөркә икән, тимәк, бер генә башҡорт шағиры ла ерҙә юҡҡа йәшәмәгән.

# ДРАМАТУРГТЫҢ РУХИӘТЕ

Илаһ – ғәрәп һүҙе. Күп мәғәнәһе бар. Беренсеһе – “Һуғыш Аллаһы”, икенсеһе – “Ғишыҡ Аллаһы”. Мәғәнәһе – беренсенекенә тартым. Әйтәйек, Бөйөк Ватан һуғышында беҙ дошманды хәрби техника менән генә түгел, Тыуған илгә булған илаһи ҙур мөхәббәт рухы менән дә еңдек. Өсөнсөһө – “дини фәлсәфә ғилеме”. “Рух” та – ғәрәп һүҙе. Йән тигәнде аңлата: кеше рухы, кеше йәне.

Ғәрәп һүҙҙәре төрки телдәргә унынсы быуаттарҙа күпләп ағыла башлай. Арттырып әйтһәк, тулҡын-тулҡын булып. Бөгөн инде ҡайһы телдән ниндәй һүҙҙәр үҙләштерелеүен белгестәр генә асыҡлай алыуы мөмкин. Һүҙҙе балҡытып ебәреү иһә тел маһирлығына бәйле.

Был хаҡта халыҡтың хан заманында уҡ үҙе әйткән ғибәрәһе лә бар: “Тел тигән даръя бар, төбөндә ынйы-мәрйен бар; телəгәндәр сумып алыр, теләмәгән ҡоро ҡалыр”.

Башҡорт теле – бай. Уның диңгеҙе – ифрат киң. Сум. Арҡыры-буй йөҙ. Төбөнә төш. Сүплә халыҡ ынйыларын. Әммә уның менән генә ҡәнәғәтләнмә. Әҙергә-бәҙер булма. Эшкәрт телде. Үҙ хосусиәтеңде, үҙ рухиәтеңде күрһәт. Ошо ауыр, серле, күп етдилек талап иткән үҙенсәлек буйынса ҙур оҫталыҡ күрһәтә драматург Наил Ғәйетбай. Фразеологик берәмектәрҙе генә алайыҡ. Тел ғалимдары уларҙы “ҡатып ҡалған” тип тә әйтә. Ундайҙар ҙа бар. Шулай ҙа һүҙ сәнғәте оҫтаһы уны үҙгәртә лә ала. Үҙе лә яңыларын ижад итә. Уның матур өлгөләрен Л. Н. Толстой, М. Горький, М. Шолохов, М. Ғафури, М. Кәрим, Һ. Дәүләтшина, З. Биишева һ. б. күрһәтте. Һуңғы осорҙа (бигерәк тә егерменсе быуат баштарында) киңәйтелгән (контаминацияланған) фразеологик берәмектәр барлыҡҡа килде. Башҡорт әҙәби теле диңгеҙендә улар һаман ишәйә бара. Үҙе ижад иткән ғибәрәләрҙе Наил Ғәйетбайҙың ҡырҡтан артыҡ драма әҫәрҙәренән һанап сығыу ҙа ауыр. Улар аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатырға, драматургтың эстетик идеалын, фекер йөрөтөү офоҡтарының киңлеген самаларға, ниндәйерәк илаһиәтлелек менән ҡоралланып яҙыуын белергә ярҙам итә. “Дүрт кешелек табын” драмаһынан бер миҫал: “кәкре мөрйәле донъяның Салауат тоҡомло ирҙәрҙе мөшкөл хәлгә төшөрөүе”. Бында өс фразеологик берәмек синтетиклашып киткән. Авторҙың индивидуаль емеше был. Ундағы фекер өс быуат дауамында барған хәлваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала, хәҙерге йәшәйешебеҙ хаҡында уйланырға ла мәжбүр итә.

Быларҙы аңлатыу өсөн бик күп яҙырға тура килер ине. Драматург уны үҙе ижад иткән бер конструкция (төҙөлмә) эсендә биреү оҫталығына ирешә. Ошо уҡ драманан йәнә ҡанатлы ғибәрәләр: “кешенең ғашиҡ булғас йәшәреүе”,

“мөхәббәттә таҙа булырға тейешлек”, “елгә ҡаршы төкөрөп бер ни иҫбат итә алмау”, “хәҙерге кешенең рәхимһеҙ булыуы”, “бер кемгә ышанып булмай торған донъя”, “стресс хәлендә оҙаҡ йәшәп булмау”, “хәҙерге бисәләргә ир тигән ҡол кәрәк булыу”, “эгоистарҙың ҡаймаҡ өҫтөндәге май тормошо хаҡында хыялланыуы”, “һылыу кеше өҫтөндә йөҙ начальник тороу”, “ҡоллоҡтоң фәхишәлек тыуҙырыуы”, “беҙҙең илдә бер кемдең дә үҙ-үҙенә хужа була алмауы”, “йәшәүҙең бер ваҡытта ла үлемдән аянысыраҡ була алмауы”, “тыштан саф булып күренгән дошмандарҙың күбәйеүе”, “телһеҙ шағирҙың үле шағир булыуы”, “йөрәк ҡанын алтын итеп һыҡҡан эттәр”, “күңелдең ҡол булыр өсөн тыумауы”, “кеше ғүмеренең идеяға ҡарағанда арзаныраҡ булыуы” һ.б.

Драматургтың үҙе ижад иткән ҡатмарлы фразеологик берәмектәренең һәр береһе нигеҙендә әҫәр яҙырлыҡ хатта. Контаминацияланған төҙөлмәләр күберәк сәсмә әҫәрҙәр өсөн хас. Ә бына Наил Ғәйетбай уларҙы сәхнә әҫәрҙәрендә ҡулланыу оҫталығына ирешә.

Тел фәнендә “экономиялылыҡ” тигән термин бар. Халыҡ ҡыҫҡа һөйләргә ярата. Һүҙ эсендә алтын бар, ти ул. Аҙ һүҙ – алтын, күп – балтун, тип тә әйтә. Эстетик зауығы һаман үҫә барған халыҡ, йәмәғәтселек был мәсьәләгә хәҙер айырыуса ныҡ иғтибар итә. Эш бүлмәләрендә “Аҙ, мәғәнәле, тиҙ һөйлә”, тип яҙып ҡуйыуҙар – шуның бер миҫалы. Быны тиҙ хәрәкәтле компьютер заманы талап итә. Элек 3, 4, 5 шаршаулы пьесалар яҙыла ине. Оҙон-оҙон монологтар һөйләп яфалана торғайны артист. Спектакль 4-5 сәғәткә һуҙыла. Ундай замандар үтте инде. Ҡыраҫ еле булып иҫте. Ел 100 – 150 битлек пьесаларҙы пыран-заран килтерә. Хәҙер 35 – 40 битлек сәхнә әҫәрҙәре заманы: ҡыҫҡалыҡта – оҫталыҡ. Һүҙ эсендәге алтынға иғтибар ҙур. Алтын эсендә ҙур идея, эпик киңлек, халыҡ рухы, ил яҙмышы тантана итһен. Ҡыҫҡалыҡ! Ҡыҫҡалыҡ!! Ҡыҫҡалыҡ!!! Телдәге “экономиялылыҡ”ка ҙур иғтибар итә драматург. Уның шулай икәнлеген һәр береһе нигеҙендә әҫәр яҙырлыҡ ҡатмарлы фразалар ижад итә белеүе лә раҫлап тора. Тел, сюжет ҡора белеү, тема һайлау оҫталығы күрһәтә ул.

Әҙәби әҫәрҙең сәнғәти ҡимммәте образлылыҡ (һүҙ-һүрәт), идеялылыҡ (мәғәнә), эмоционаллек (хис-тойғо) менән дә бәйле. Шуларҙы береһе генә етешмәһә лә, әҫәр, фронт инвалиды шикелле, аҡһауға дусар була. Һүрәт (образ) айырым һүҙҙәр (исем, сифат, һан, ҡылым), сағыштырыу, эпитет, метафора һ.б. тасуирлау саралары, төрлө поэтик биҙәктәр ярҙамында яһала. Һәр жанр өсөн тәғәйенләнеп ҡуйылған һүрәтләү-тасуирлау саралары юҡ, әлбиттә. Шулай ҙа сәсмә әҫәрҙәрҙә (прозала) поэтик саралар пьесаларҙағыға ҡарағанда мулыраҡ ҡулланыла. Мәгәр кеше кейеме, болон сәскәһе менән матур булған кеүек, сәхнә әҫәрҙәре өсөн дә күркәм сифаттар ят түгел. Наил Ғәйетбай ошо үҙенсәлектәрҙе лә иҫкә алып яҙа.

Донъя, бөтә ғәләм, тормош, тәбиғәт ҙур мөхәббәт менән ләззәтләнеп йәшәй. Мөхәббәт донъяһында сағыштырыуҙар күп. Телсе ғалимдар сағыштырыуҙарҙы ниндәй лексик-грамматик саралар ярҙамында яһалыуҙары буйынса өйрәнә. Һуңғы ваҡытта ул философия фәнендә танып-белеү (познание), һиҙемләү (ощущение), сағылыш (отражение) категориялары менән бер яҫылыҡта ҡарала башланы. Был киң ҡоласлы категорияның эске мәғәнәһенә боронғолар ҙа иғтибар иткән: “Сағыштырыу – танып-белеүҙең атаһы”, – тигән улар. Әҙәби әҫәрҙәрҙә сағыштырыу образ тыуҙырыусы сара булараҡ ҡулланыла.

Башҡорт әҙәби теле һүрәтләү сараһының был төрөнә лә бай. Шулай ҙа һүҙ сәнғәте оҫталары мең  мәртәбә ҡулланылып, мең тапҡыр тапалған, төҫө шиңгән, ҡәҙере киткән сағыштырыуҙар менән яҙыуҙы хуп күрмәй. Әҫәрҙең идея-йөкмәткеһе, герой-ҡаһармандары,  сюжет-композицияһы талап итһә, заман һулышын иҫкә  алып, әҙип үҙе лә  яңыларҙы ижад итә. Наил Ғәйетбай шундай юғары талаптар  илаһилығы менән яҙа. Уның эске рухиәте шуға көйләнгән. Ул философик фекерләү менән ижад итә. Сағыштырыуҙары төрлө лексик-грамматик саралар ярҙамында яһала. Персонаждарҙың эске халәте, донъяға ҡарашы, ҡылыҡ-фиғеле ошо тел-биҙәк сараһы менән тағы ла тәрәнерәк асыҡлана. Һәҙиә менән Рәми образдары сағылдырған “Төн” трагедияһынан бер миҫал.

**“Рәми.** Көнөм һыуыҡ, күңелдә  тик ел илай. Әйтерһең, ул – яҡтыһы юҡ болот ҡыҫҡан яңғыҙ ай. Партия – заманыбыҙҙың аҡылы, намыҫы һәм выжданы! Партия – беҙҙең  өсөн иң изге нәмә.

**Һәҙиә.** Таң  ата, таң! Күрәһеңме, офоҡ ҡыҙыллана! Төн үтте!

**Рәми.** Был таң түгел, Һәҙиә апай, ҡан! Партия һәләк иткән миллиондарҙың  ҡаны!”

Ел образы төрки телле халыҡтарҙа әүәл-әүәлдән билдәле бер стилистик сара булараҡ  ҡулланылып килә. Ҡол Ғәлиҙә, мәҫәлән, таң еле Яҡуп пәйғәмбәргә  улы Йософтоң донъяла барлығы, батыр йөрәкле, кешелекле булыуы тураһындағы хәбәрҙе  алып килә. Туҡай ел илауы аша  егерменсе быуат башында  ярлы халыҡтың ауыр  тормошон тасуирлай (“Көҙгө төн. Мин йоҡлай  алмайым. Өй түрендә ел илай...”). Наил Ғәйетбайҙа ла  ел илауы  ил яҙмышы, халыҡ  яҙмышы, Ватан  яҙмышы менән бәйле.

Йәнә миҫалдар: “Һөт өҫтөндәге май кеүек йөҙөү” (“Аҡмулла”, трагикомедия), “Рәйлә – торғаны Наполеон, Ләйлә – үҙ-үҙенә ғашиҡ дура. Ләйсән? Уға эскесе түгел, композитор кәрәк. Кешегә иң алда күңел байлығы һәм мөхәббәт  кәрәк. Мөхәббәт бит – рухи берҙәмлек. Яратмайым бөрсә кеүек егеттәрҙе. Һеҙ нимә улай   кейенеп алдығыҙ әле?. Берегеҙ попугайға, икенсегеҙ страусҡа оҡшап киткәнһегеҙ”. (“Ауылға ҡыҙҙар  килде”, комедия); “Бер ай элек ҡайҙа булғанлығымды иҫләргә  мин һиңә  компьютер түгел” (“Тойғолар ниңә һүнә?”, драма).

Сәхнә әҫәрендә, прозалағы һымаҡ, тәбиғәт күренештәрен һүрәтләү мөмкинлеге юҡ. Шулай ҙа, эмоциональлек  сылбырын өҙмәҫкә тырышып, тәбиғәт рухын әҫәр туҡымаһына оҫта ғына  бәлзәмләй белә Наил Ғәйетбай.

**“Вазифа.** Ғилман, ҡара теге ике турғайға, яндарына ике турғай килде. Сыр-сыу киләләр.

**Ғилман.** Парҙарын тапҡандар, тимәк. Туй  үткәрәләр” (“Яусы йыһан йәки нисек  кейәүгә сығырға?”, комедия-уйланыу).

Ҡоштарҙағы мөхәббәт ялҡыны көслө булыу  һәр кемгә мәғлүм. Кеше туйы менән ҡоштар туйын сағыштырыу эмоциональлек йәки хис-тойғо ғына түгел бында. Ҡоштарҙа ла, кешеләрҙә лә дөрләй мөхәббәт ялҡыны. Кешеләрҙәге мөхәббәт ялҡыны рухи илаһилыҡ етмәү нәтижәһендә тиҙ һүнә. Ҡоштарҙағы мөхәббәт рухиәте оҙаҡ  һаҡлана. Шул илаһилыҡты әйтә драматург.

Аҡ менән ҡараның  киҫкен көрәше осоронда йәшәйбеҙ. Киҫкенлек – бөтә ер йөҙөндә, мәмләкәттәр араһында, тәбиғәттә, кешеләр йөрәгендә. Аҡ – изгелек сифаты: аҡ юл, аҡ хыял, аҡ бәхет. Ҡара – ҡараңғы,  ҡайғылы, күңелһеҙ ваҡиға-күренештәр менән бәйле. Аҡ, ҡара эпитеты халыҡта киң ҡулланыла.

Бер һүҙ менән күп төшөнсә аңлатырға кәрәк булғанда, Наил Ғәйетбай улар менән оҫта эш итә. Был осраҡта ла ул үҙ табышы менән һоҡландыра. "Аҡ тәүбә, ҡара тәүбә", – ти Бикә "Әстәғәфирулла" комедияһында. Халыҡта улай әйтеү юҡтыр. "Аҡ тәүбә", "ҡара тәүбә" Бикәнең йөрәк илаһилығы менән һөйләшеүен аңлата. Ул илаһилыҡта персонаждың үҙ рухиәте, үҙ эске донъяһы, үҙ хосусиәте.

Мәғәнәләре яғынан эпитеттар икегә бүленеп ҡарала: логик эпитет (аҡыллы кеше, сибәр кеше, етди кеше), метафорик эпитет (алтын һүҙ, ҡорос йөрәк, тимер ҡул). Драматург шуларҙың икеһе менән дә иркен эш итә. Мәгәр тура мәғәнәле эпитеттары ла уның ҙур рухиәтлектәр менән бәйле. "**Муса.** Юҡ! Ауылға китәм! Таҙа, саф ҡыҙ табам!" ("Илама, һылыу", драма). Былай әйтеү ҡасандыр кәрәк булмағандыр. Ә хәҙер бик урынлы. Ни генә тимә, беҙҙең мосолман ҡыҙҙары күптәнге әҙәплелек, инсафлылыҡ, ғиззәтлелек, ғиффәтлелек, шәфҡәтлелек традицияһын һаман һаҡлай әле. Был дин, мәсет, рухиәте менән бәйлелер, бәлки. Был – бер. Икенсенән, драматург, минеңсә, тормоштағы драманы комедияны, трагедияны сәхнәлә тамашасыға күрһәтеү маҡсатын ғына ҡуйырға тейеш түгелдер. Ул драматург ҡына түгел, илаһи изге көс менән ҡоралланған шәхес булырға тейеш. "Драматург-педагог", "драматург-психолог", "драматург-философ" тигән һүҙҙәрҙе лә әйтке килә. Әгәр ауыл ҡыҙҙарының таҙа, саф булыуы тураһындағы һүҙҙәр сәхнәлә яңғыраһа йәки улар китаптан уҡылһа, ауыл ҡыҙҙарының сафлыҡҡа ынтылыу шәрбәте йәнә көсәйәсәк бит. Һүҙ – күңел емеше, һүҙ – йөрәк дарыуы, һүҙ – иман, һүҙ – илаһ, һүҙ – рух, һүҙ – йән аҙығы... Был ике эпитетты шул хаҡта ла уйлап ҡулланғандыр драматург. Бына ни өсөн драматург та, психолог та, философ та.

Драматургтың ҡырҡтан ашыу сәхнә әҫәрҙәрендә төрлө тәбиғәтле кешеләр бар. Улар тураһында оҙон-оҙаҡ һөйләп тороу мөмкинлеге юҡ. Күп персонаждарҙың эске донъяһы, аң-аҡылы, хис-тойғоһо, йәшәү рәүеше, тормош итеү халәте, башҡа сифаттары яңғыҙаҡ эпитет менән генә лә белдерелә: Рәхимһеҙ кеше ("Дүрт кешелек табын", драма); ғәҙел Морат, шамбы Барый ("Тынғыһыҙ төн", трагикомедия); уйнаш атай, ҡарт кәзә ("Аты барҙың – дәрте бар", комедия); мыжыҡ ир ("Кейәү әйттереү", комедия) һ.б.

Эпитеттар кеше дәрәжәһенең шәүкәтлелеген тел саралары ярҙамында сағылдырыу йәһәтенән дә файҙаланыла: илһамлы һүҙ ("Аҡ төндәр йәки Аҡмулла", пьеса). Төрлө тормош-көнкүреш хәлдәренә, бөгөнгө бөтә йәшәйешкә, замана һулышына метафорик, логик эпитеттар тапҡырлығы менән баһа бирелә: сепрәк туй, быяла туй; бөгөнгө аңлайышһыҙ, бысраҡ заман ("Яңы башҡорт, йәки был кешегә ни етмәй?", трагикомедия).

Әйтелгәнсә, халыҡтың эстетик зауығы һаман үҫә, фекер йөрөтөү офоҡтары киңәйә бара. Бай, матур, гүзәл тәбиғәтле Башҡортостан ерен, бал илен, һандуғас донъяһын бысратыу – ҙур гонаһ. Драматургтың сәхнә әҫәрҙәрендә ошо идея ла мөбәрәк тәсбих төймәләреләй теҙелеп китә. Наил Ғәйетбай драма, трагедияға ҡарағанда комедия яҙыуҙы, көлдөрөүҙе мәслихәт күрә. Тик ул хикмәтһеҙ көлөү түгел. Бысраҡлыҡҡа бомба булып төшһә, сафлыҡҡа байраҡ елберҙәтә. Көлөүҙә күп бысраҡлыҡтар көлгә әүерелһә, ыңғай яҡтар кешелеклелек сифаты менән бәйле булып сыға. Драматургтың юмор утын, сатира ялҡынын ни өсөн дөрләткәнлеге аңлашыла булһа кәрәк. Илаһ, рух кеүек һүҙҙәрҙе комедия рухына яраҡлаштыра белә ул. "Алыш-биреш йәки

һинән – фатир, минән – ир" комедияһында, мәҫәлән, Ансар ауыр ваҡыттарҙа ҡатыны менән түгел, үҙ рухы, үҙ йәне менән кәңәшләшергә ярата. Быларҙы драматургтың эстетик идеяһына бәйләп ҡарарға кәрәктер.

Кешенең Ерҙә йәшәйеше Атайыбыҙ Әҙәм, Әсәйебеҙ Һауа мөхәббәте менән бәйле. Илаһилыҡ, рух, мөхәббәт, иман изге, ләззәт кеүек һүҙҙәр – эске мәғәнәләре буйынса "туғандаштар", фәнни телдә әйтһәк, синонимдар. Был синонимдарға йән рухы, йөрәк ҡыҫтауы, күңел күбәләкләнеүе, хис-тойғо ҡайнарлығы, аң-аҡыл шәүҡәтлелеге менән табына драматург. Уларҙы "поэтизмдар" (матур яңғырашлы һүҙҙәр) тип тә йөрөтәләр. Бында тышҡы матурлыҡ менән эске матурлыҡтың бер бөтөн булып нағышланыу хәсиәте бар. Уларҙың эске, сәңгел мәғәнәһе әҫәр туҡымаһында башҡа лексик берәмектәр менән "тәғәнләшеп" киткәндә генә аңлашыла. Шундай һүҙбәйләнештәргә иғтибар итәйек: "Рухтарыбыҙға ирек бүләк итте" ("Тынғыһыҙ көн"); "бай рухлы кеше" ("Аҡ төндәр"); "мөхәббәт – рухи берҙәмлек" ("Ҡомартҡы, киллер һәм мөхәббәт"); "йөрәк мәрйене" ("Аҡ төндәр"... )

Һүҙ сәнғәтенең йәмәғәтселектә, халыҡта, инсаниәтселектә ҡулланылыу мәсьәләһенең фәнни нигеҙе менән беҙҙең эраға саҡлы йәшәгән боронғо юнан ғалимы Аристотель (философ, телсе, әҙәбиәтсе, филолог) ныҡ шөғөлләнгән. Телдәге өс стиль теорияһын асыҡлай ул. Юғары стилгә әле беҙ йөрөткән поэтизмдар, ораторҙарҙың фәлсәфәүи сығыштары, эсендә алтын, тышында көмөш йөрөткән аҫыл мәғәнәле һүҙҙәр инә. Түбән стиль халыҡ телендәге ябай һүҙҙәрҙе үҙ эсенә ала. Урта стиль юғары һәм түбән стиль ҡатнашлығында була. Рәсәйҙә уның менән бөйөк ғалим Ломоносов шөғөлләнә. Уныңса, сиркәү-славян һүҙҙәре юғары стилде тәшкил итә. Ҡалған икеһе – Аристотелдәгесә. Өс стиль теорияһы тора-бара филология фәнендә ныҡлы урын ала. Ул хәҙер ҙә йәшәп килә әле. Наил Ғәйетбай, нигеҙҙә, урта стиль менән яҙа. Түбән стиль менән дә бик оҫта эш итә.

"Түбән" тигәнендә артыҡ тупаҫ һүҙҙәр ғәскәре лә йөҙөп йөрөй: ҡәбәхәт, эт, хайуан, әшәке, алйот, дурак, шайтан, бисура, тиҫкәре, йәпһеҙ, фәхишә, хөрәсән, молокосос, аждаһа, сволочь, подлец, дура, битһеҙ, бысраҡ, кәнтәй, ахмаҡ, сүп, тараҡан, бөжәк, хаин, диуана, йыртҡыс, иҫәр, тиле, һәпрә, бандит, түмәр, эскесе, алкаш, уйнашсы, оятһыҙ, хәстрүш, сусҡа, меҫкен, ишәк, фашист, бандит, маймыл, ҡанһыҙ, шүрәле, тинтәк, янъялсы, злодей, бунтовщик, изменник, бөрсә, крыса, һағыҙаҡ, иҫәрбаш, бәғерһеҙ, хамелеон, этлек, зверь, маньяҡ, иблис һ.б.

Кешене бер һүҙ менән генә характерлау хан заманынан бирле килә. Беҙҙең ауылда, ана, ниндәй Хажиҙар бар ине: Бүре Хажи, Әжәл Хажи, Табан Хажи, Ҡамыр Хажи, Һөтсө Хажи. Әгәр сәхнә әҫәрендә ун персонаж бар икән, шуның бишеһе кире йәки тиҫкәре (М. Горький фекере) булырға тейеш. Наил Ғәйетбай ҙа был мәсьәләгә етди иғтибар итә. Әлеге тупаҫ һүҙҙәр, ҡара болоттан яуған ямғыр һымаҡ, тиҫкәре персонаждар өҫтөнә һибелә. Драматург, бәлки, уларҙы ҡыйынһынып ҡуллана торғандар. Ни генә тимә, үҙе әйткән "Мөхәббәт сәхнәһе"нә, ҡыҙарып бешкән еләктәргә көл елпегәндәй, яман һүҙҙәр ырғытаһы килмәй. Шулай ҙа "Мөхәббәт сәхнәһе" тормош сәхнәһе» лә бит әле ул. "Тормош сәхнәһе" театр сәхнәһенә күсерелә. Әйтелгәнсә, әүәл-әүәлдән килгән аҡ, ҡара көрәше дауам итә: аҡлыҡта – сафлыҡ, ҡаралыҡта – алйотлоҡ. Драматургтың маҡсаты: аҡлыҡты – илаһилаштырыу, ҡаралыҡта – һүҙ атакаһы менән тар-мар итеү. Эт эсенә һары май

килешмәгәндәй, эт кешегә кәрәкмәгәнгә алтын һүҙ әйтеү иҫке кейем йыртығына яңы ямаулыҡ һалырға маташыу кеүек кенә. Әйтәйек, "Дүрт кешелек табын" драмаһында Иректең кәпәренеү утын Дамир "Алдайһың, эт!" тип һүндерә. "Эт" һүҙе, фашист уғылай, Иректең йөрәгенә килеп ҡаҙала.

Драматург тел диңгеҙенең төбөнән мәргән һүҙҙәр эҙләргә ярата. Мәғәнәләш һүҙҙәрҙе (синонимдарҙы) бер-береһенә оҡшаш һалдаттарҙай теҙеп ҡуя ла иң кәрәклеләрен һайлап ала белә. Һайлап алынған һүҙ, минометтан атҡан минаның сәпкә мәргән төшөп ярылғанылай, тейешле персонаждың йөрәгенә барып ҡаҙала. Был поэтизмдарҙы, башҡа лексик хазинаны, тупаҫ һүҙҙәрҙе ҡулланғанда ла шулай. Драматургтың ҡырҡлап сәхнә әҫәренән (иренмәйенсә!) алтмыш тупаҫ һүҙ һайлап алғанмын. Уларҙы мәғәнәләштәр йәки синонимдар тип атарға мөмкин. Бөтәһе лә персонаждарҙың ҡара яҡтарын асыҡлауға ярҙам итә. Әммә һәр береһенең үҙенә генә хас мәғәнә үҙенсәлеге бар. Ул мәғәнәне ослар өсөн ваҡыт-ваҡыт бөтә әҫәрҙе уҡып сығырға кәрәк. Бәғзе береһендә йә сатира, йә юмор уты була. "Академтеатрҙа ғәйбәт тә академический",– ти драматург бер урында. Быны уҡып, көлөп ебәрҙем мин. Һм... "академический ғәйбәт"... Быны аңлатыу өсөн күп яҙырға кәрәк. Ямаулыҡты йыртығына ҡарап таба белә Ғәйетбай.

Был мәҡәләне яҙыу алдынан мин күңелемде башҡа драматургтар донъяһына ла сәйәхәт иттерҙем. Шекспир, Дюрренмат (Швейцария), Чехов, Гоголь, Горький, Островский, Ғ. Камал, К. Тинчурин, Т. Ғиззәт, М. Фәйзи, С. Мифтахов, М. Кәрим, И. Абдуллин, Н. Асанбаев, Т. Миңнуллин, И.Юзеев, Р. Сафин һ.б. Уларҙың нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы булыуҙары, сюжет төҙөү маһирлыҡтары, характерҙарҙы индивидуалләштереү шәүҡәтлелектәре, был ауыр жанрҙа күрһәткән хосусиәттәре иҫкә алынды. Ғәйетбайҙың һиҙгер күңеле, аңаҡылы, хис-тойғоһо уларҙың ижад баҡсаһында нисек хозурланып йөрөгән, үҙ рухына, үҙ йәненә, үҙ илаһилығына драматургияның нindәй асыл, ҡиммәтле, тәмле емештәрен һайлап ала белгән – шул хаҡта етди уйланырға тура килде.

Бала заманына ҡарап тыуа. Драматург та шулай. Классик драматургия бар. Ярай. Яҡшы. Донъя драматургияһын уптым илаһи бер бөтөн итеп алып, был бөтөнлөккә аҡыл анализы яһап-яһай, фекерҙәрҙе күркәм синтезлап уйланһаҡ, инсаниятселек өсөн ҙур хазина ижад иткәнлегебеҙҙе аңларбыҙ. Хәҙер инде Наил Ғәйетбай был хазинаның алтын бөртөктәрен йыя. Алтындың да ҡиммәтлелеге замана бизмәненә ҡарап үлсәнә бит ул. Егерме беренсе быуат. Компьютер заманы. Аҡыл менән уйланыу, тиҙлек, ижтиһадлылыҡ, бәрәкәттең йән хәрәкәтендә икәнлеген аңлап эш итеү осоро. Үҙ һөнәренең әһелдәре ныҡ уйлана был хаҡта. Булдыҡлылар яңылыҡ тураһында баш вата. Таш яра. Тау аҡтара. Үҙ ынйы-мәрйенен тапмайынса ҡалмай. Наил Ғәйетбай шундай шәхес булып сыҡты. Замана рухына, осор илаһилығына, бәндәләр һулышына ярашырҙай үҙ стилен уйлап тапты. Стиль бар – драматург бар. Стиль юҡ – драматург юҡ. Стиль бар – драматург бәхетле. Стиль юҡ – драматург бәхетһеҙ. Драматургияла үҙ бәхетен үҙ стиле менән тапты ул. Ҡорал эшләй – ир маҡтана, ти халыҡ. Ҡәләм эшләй – драматург маҡтана. Ҡәләм осонан аҡ ҡағыҙға аң-аҡыл хазинаһы, хис-тойғо ялҡыны, йөрәк уты ынйыларын төшөрә белеүе менән маҡтана.

Стиль – ҙур төшөнсә. Уны ябай ғына ла аңлатып була. Ниндәй генә сәхнә әҫәрен уҡып ҡарама, ул үҙе үк "Мин Наил Ғәйетбайҙыҡы" тип ҡысҡырып

тора. Мәҡәләлә ошо мәсьәләне асыҡларға тырышылды. Ул нәфис йәки художество оҫталығы менән бәйле. Оҫталыҡта һүҙ илаһилығы. Һүҙ! Һүҙ!! Һүҙ!!! Наил Ғәйетбайҙың һүҙ оҫталығын бер әҫәренә анализ яһап ҡына ла асыҡларға мөмкин. Мәгәр миңә әлеге ҡырҡлап пьесаның бөтәһен дә уҡып сығырға тура килде. Улар тураһында кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҙырға була. Әле бына фәнгә инеп китеүемдең бер сәбәбе бар. Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусылары М. Ғәйнуллин, Т. Килмөхәмәтов, Р. Әхмәҙиев башҡорт драматургияһы буйынса докторлыҡ диссерацияһы яҡлағайнылар. Улар махсус осор менән бәйләп эш итте. Ҡабатлап булһа ла әйтәйек: бына яңы осор. Егерме беренсе быуат. Ун йыл үтеп тә китте. Яңы осорҙа яңы драматургтар яҙа. Үҙәктә – Наил Ғәйетбай. Кешеләргә ярҙам итеү йәһәтенән үҙ илаһилығы менән тиҙ осҡан Сәмреғоштай, халыҡҡа, тамашасыларға үҙ стиле менән рухи аҙыҡ биреү өсөн елдерә.

Был елдереүҙә эске һәм тышҡы хикмәттәр бар. Тышҡыһы йәки формаль яғы ҙур ваҡиғаларҙы ҡырҡ биткә һыйҙыра белеү, уйнаусыларҙы 4-5 кешенән арттырмаҫҡа тырышыу, төрлө лексик мәғәнәле һүҙҙәрҙе әҫәр туҡымаһына әүҙем ылыҡтырыу, туған телдең грамматик төҙөлөшөн аңлап яҙыу, мәҡәл-әйтем, һүрәтләү-тасуирлау саралары, фразаларҙы ҡулланыу менән билдәләнә. Мәгәр һәр тел сараһының эске зөбәржәт мәғәнәһе, асыл рухы, әҙәби әҫәрҙең идея-йөкмәткеһен асыҡларҙай ҡөҙрәте, йәне, ҡаны, шаңдауы булырға тейеш. Икенсе төрлө әйтһәк, форма, мәғәнә “Мөхәббәтенең” бер бөтөн булып кәрәҙләнеүе талап итеlә. Драматургтың кәрәҙләй белеү оҫталығы ла шатландыра. Ысынбарлыҡ тураһында фәлсәфәүи фекер йөрөтөүө лә һоҡландыра. Аңлы, белемле, айбарлы драматург ул.

Хозур олон – ныҡлы тамыр бәрәкәте. Был бәрәкәт алтын ботаҡтар ебәрә. Алтын ботаҡтар ҡеүәтен көмөш япраҡтар данлай. Был күренеш “Һүҙҙең эсе – алтын, тышы – көмөш” тигәнде лә хәтерләтә. Наил Ғәйетбай тамыры ныҡ тема һайлай белә. Өҫтән ҡарағанда ул әллә ни әһәмиәтле булмағандай тойола. Бәй, уҡый башлаһаң, ҡара ер күкрәген тишеп сыҡҡан аҡ сәскәле бәләкәй генә сирень гөлө тиҙ генә тармаҡланып киткәндәй, драматургтың “ваҡ” темаһы ҙурая ла китә. Ваҡыт-ваҡыт бер ихатала барған ваҡиға бөтә ил эсендәге тормош-көнкүреш, сәйәси, иҡтисади, тарихи хәл-әхүәлдәр менән бәйләнә. Тел оҫтаһы ҡаһарманы булыу ҡөҙрәте был. Ә бит Салауат (“Еңеү йәки Салауат”), Аҡмулла (“Аҡ төндәр”), Һәҙиә , Рәми (“Төн”), Бабич (“Йөрәктәрҙә ҡалдың йыр булып”) кеүек иманлы шәхестәрҙе театр сәхнәһендә күрһәтеү өсөн үҙеңә лә иманлы, философ-драматург булырға кәрәк. Һәр береһенең үҙ осоро, үҙ илаһилығы, үҙ рухиәте, үҙ Аллаһы (әгәр шулай әйтергә яраһы) бар. Уларҙың эске донъяһын асыҡлау өсөн тел диңгеҙендәге һүҙ гәүһәрҙәрен табыу мотлаҡ. Сәйәси, иҡтисади, тарихи, ижтимағи мәсьәләләр тураһында фекер алышҡанда хис-тойғоға ҡарағанда аң-аҡыл өҫтөнлөк ала. Ҡаһармандар маңлайға бәреп һөйләшә. Бындай ваҡытта сюжет-хәрәкәт сылбырына публицистик стиль бәлзәме лә өҫтәлә. Ваҡыт-ваҡыт фәнни стиль орлоҡтары ҡойолоп ала һымаҡ. Шулай ҙа улар үҙәк сылбырға ныҡлап нағышлана алмайҙар. Матур йәки нәфис әҙәбиәт стиле өҫтөнлөк ала. Был да – драматургтың стиль хосусиәтен аңлап яҙыу оҫталығы. Шулай ҙа әҫәрҙәрҙә – халыҡ теле ынйылары. Ынйылар драматургтың тел өлкәһендә булған яңы табыштары һөҙөмтәһендә алтынға әүерелә.

“Аҙ һүҙ – алтын, күп һүҙ – балтун” тигәнде йәнә ҡабатлайыҡ. “Балтун” булмаҫ өсөн тыныш билдәләренә лә етди иғтибар итә драматург. Күп урында ҡулланылған өс нөктәләр шуны аңлатып тора. Ә бит өс нөктәләрҙә, күҙгә күренмәгән фәрештәләрҙәй, тәрән фекерҙәр йәшеренә. Уларҙың бөтәһен дә яҙһаң, 40 битлек әҫәрең 80 битлек булырға мөмкин. Тимәк, был осраҡта тыныш билдәләре лә алтынға әйләнә. Халыҡ та шулай бит. Фекерен йә бөтөнләй йәшерә, йә әйтеп бөтөрмәй. “Тел төбөңдө аңламаным” тип әйтеү – шуның хәсиәте. Сәхнәлә ул әҫәр ҡаһармандарының хәрәкәте ( кәүҙә тотошо, атлап китеү, ҡул болғау, күҙ уйнатыу, уҫал йылмайыу, матур йылмайыу һ.б.) менән дә бәйле. Ә инде мәғәнәне тыныш билдәләре менән тәрәнәйтеү классик әҙәбиәттә лә бар. “Он – пришел” ти бер әҫәрендә М. Горький. Грамматик яҡтан ҡарағанда, бында һыҙыҡ ҡуйыу дөрөҫ түгел. Ә ҡуйған бит бөйөк яҙыусы. Һыҙыҡ бында оҙаҡ һағынып көтөү, инде осрашыу бәхете йылмайыу, шатланыу кеүек хис-тойғоларҙы белдерә. Һыҙыҡ ҡуйыуҙың хикмәтен, ысын асылын әҫәрҙе уҡып сыҡмайынса аңлап булмай. Драматургтың тыныш билдәләрен аңлау өсөн ҙур диҡҡәтлелек кәрәк. Пьесаларын уҡығанда ла, ҡарағанда ла аңлашыла улар. Сөнки, әйтелгәнсә, хәҙерге халыҡтың эстетик һиҙемләүе көслө. М. Горький әйткәнсә, тамашасы – иң көслө тәнҡитсе. Уның шулай икәнлеген хәҙер ныҡ аңланыҡ. Спектаклдең тамамланыуын һиҙһә, бәғзе тамашасы сығып шылыу яғын ҡайыра. Күптән түгел “Нур” театрында Ғәйетбайҙың “Һинән – фатир, минән – ир” тигән комедияһын ҡараныҡ. Зал шығырым тулы ине. Бына спектакль тамам. Сәхнәлә – уйнаусылар. Залда — тамашасылар. Сығып китеү тураһында берәү ҙә уйламай. Бөтәһе лә аяҡ өҫтө баҫты. Көслө ҡул сабыуҙар таһырлауы. Йәштәрҙең шатлыҡлы тантаналары, аҡҡоштар туйындағылай, моңло сыпрылдауҙар менән белдерелә. Ғәйетбай сәхнәгә саҡырылғас, көмөш тауыштар тулҡыны йәнә көсәйеп, сәхнә йөрәге менән тамашасылар йөрәге сәнғәти хис-тойғолар мөхәббәте ялҡынында ҡауышты. Ғәйетбайҙың башҡа сәхнә әҫәрҙәрен ҡарағанда ла ошондай уҡ мөҡәддәс илаһилыҡ күреп шатланғаным бар. Драматург-педагог, драматург-психолог, драматург-философ, драматург-сәнғәткәр булыуҙың асыл рухиәтелер был.

Былдай фекерҙе Наил Ғәйетбайҙың бер сәхнә әҫәренә филологик анализ яһап ҡына ла әйтеп була. Филологик анализдың мәғәнәһе әҫәрҙең тел, стиль (өслүб) үҙенсәлеге менән бәйле. Сәнғәти оҫталыҡ шул нигеҙҙә асыҡлана. Быньң өсөн драматургтың барлыҡ әҫәрҙәре йыйылмаһы тупланған ҡалын монографик хеҙмәт яҙырға кәрәк. Мәҡәләлә бөтә фекерҙәрҙе бергә туплап, синтезлап эш итергә тура килде. Күсерелмә мәғәнәлә әйтһәк, был диңгеҙҙән бер тамсы һыу алып күрһәтеү һымаҡ ҡына.

**Суфиян ПОВАРИСОВ,**
**филология фәндәре докторы,**
**Башҡорт дәүләт университеты профессоры.**

год
УЧИТЕЛЯ
2010

# МӘҒАРИФТЫҢ ЭЛЕККЕ ДАНЫН ҠАЙТАРАЙЫҠ

Рәсәй Федерацияһы Президенты Д. А. Медведев Федераль Йыйылышҡа 2009 йылғы Мөрәжәғәтендә былай тине: «Рәсәй мәғариф системаһын тергеҙеү яңы быуын профессиональ кадрҙар әҙерләүҙә хәл иткес роль уйнарға тейеш. Уның элекке ҡаҙаныштары бөтә донъяла танылыу алғайны. Бөгөн, ҡайһы бер ыңғай үҙгәрештәргә ҡарамаҫтан, мәғариф өлкәһендәге хәл яҡшыртыуҙы талап итә. Тураһын әйтергә кәрәк, беҙ алдынғы урындарҙан сигендек. Был конкурентлыҡҡа етди хәүеф тыуҙыра. Бынан тыш, мәғариф системаһы туранантура шәхесте, халыҡтың йәшәйешен формалаштыра, яңы быуын кешеләренә милләттең ҡиммәтле сифаттарын тапшыра». Был бурыстарҙы ғәмәлгә ашырыуҙа уҡытыусыларҙың хәл иткес роль уйнаясағына ышаныс белдереп, РФ Президенты 2010 йылды “Уҡытыусы йылы” тип иғлан иткәйне.

Рәсәй мәғариф системаһының юғарыла телгә алынған элекке ҡаҙаныштары, бөтә донъяла танылыу яулауы ҡайһы йылдарға тура килеүен асыҡлау өсөн, һуңғы йөҙ йылда илдә уҡыу-уҡытыу системаһының торошона ҡыҫҡа ғына булһа ла байҡау яһарға кәрәк. Батша Рәсәйе мәғариф өлкәһендә донъяла иң артта ҡалған илдәрҙең береһе булған. Быны раҫлаусы бик күп дәлилдәр килтерергә мөмкин булыуға ҡарамаҫтан, бер нисәһе менән генә сикләнәйек.

1914 –1918 йылдарҙағы Беренсе донъя һуғышы Рәсәй һалдаттарының белеме бик түбән булыуын күрһәтә. Немец һалдаттары иһә бөтәһе лә белемле була. (Германияла XIX быуат аҙағында гимназияларҙа дөйөм мәжбүри ете йыллыҡ уҡыу индерелә.) Англияның – 99, Францияның – 96,6, Италияның 70 процент һалдаттары уҡый-яҙа белгән. Рус һалдаттары араһында иһә ундайҙар 39 процент ҡына тәшкил иткән. (Урта Азия, Ҡаҙағстан, Төньяҡ һәм Алыҫ Көнсығыштың аҙ һанлы халыҡтары хәрби хеҙмәткә ылыҡтырылмаған. Улар ҙа хәрби бурыс үтәһә, күрһәткес күпкә түбән булыр ине.)

1910 йылда Дәүләт Думаһы балаларға дөйөм башланғыс белем биреү тураһында проект ҡабул итә, ләкин батша ҡарамағындағы Дәүләт Советы проектты кире ҡаға. 1913/1914 уҡыу йылында Өфө губернаһындағы гимназиялар һәм реаль училищеларҙа 4778 кеше белем алһа, шуларҙың тик 12-һе башҡорт, 23-ө татар булған. Губернала башҡорт, татар балаларына белем биреү ниндәй ҡыҙғаныс хәлдә булыуын түбәндәге һандар күрһәтә: 1914 йылда 1578 башланғыс дини мәктәп булып, уларҙа 72,7 мең ир бала уҡыған. 1578 мәктәптең 859-ы кешеләрҙең шәхси йорттарында бүлмә биләп эшләгән. Һуңғараҡ байыраҡ ауылдарҙа 30 кв. метрлы махсус биналар төҙөлгән. Дини башланғыс мәктәптәр дәүләттән бер ниндәй матди ярҙам алмаған, тик урындағы йәмәғәт сығымдары иҫәбенә йәшәгән.

Октябрь инҡилабына тиклем губернала 40-лап мәҙрәсә һаналған. Улар дин әһелдәре, уҡытыусылар, ғөмүмән уҡымышлы кешеләр әҙерләүҙә билдәле роль

уйнаған. Мәҙрәсә тамамлағандар журналист, яҙыусы булып киткән. Мәҙрәсәләр ҙә дәүләт ярҙамынан мәхрүм булып, уларға прогрессив ҡарашлы мосолман байҙары аҡса менән ярҙам иткән.

Октябрь революцияһынан һуң мәғариф системаһы тәрән үҙгәрештәр кисерә. Мәктәптәр, башҡа уҡыу йорттары РСФСР Мәғариф халыҡ комиссариаты ҡарамағына бирелә. Уҡытыу 1-се һәм 2-се баҫҡыс мәктәптәренә бүленеп алып барыла.

Башҡортостанда Совет власы тулыһынса 1919 йылда ғына урынлаша. Шул уҡ йылда Башҡорт АССР-ында 2486 беренсе, 54 икенсе баҫҡыс мәктәптәре асыу ҡарала. Беҙҙең төбәк Беренсе донъя һуғышынан иң ҙур зыян күргәндәр иҫәбенә ингәнлектән, урта мәктәптәрҙә уҡытыу өсөн башланғыс мәктәптәрҙә белем алған балалар, уларҙы уҡытыусылар етешмәгән. 1927 йылда тик икенсе баҫҡыс мәктәбе 25-кә ҡалып, уларҙы 492 бала, шул иҫәптән 5 башҡорт, 22 татар, 412 урыҫ, 53 башҡа милләт балалары, тамамлаған.

1930/1931 уҡыу йылынан башлап илдә дөйөм башланғыс белем биреү индереләү ғәҙәттән тыш ҙур роль уйнаған. Мәктәптәр, уҡыусылар һәм уҡытыусыларҙың һаны күпкә артты. Мәғарифтың артабан үҫеше ҡалаларҙа, эшсе ҡасабаларында дөйөм ете йыллыҡ (1937 й.), ил буйынса ете йыллыҡ (1948 й.), һигеҙ йыллыҡ (1958 й.) белем биреү тураһындағы закондарға бәйләнгән.

Уҙған быуаттың урталарында үҫешкән илдәр фәнни-техник революцияға аяҡ баҫып, фән туранан-тура етештереү көсөнә әүерелде. Ул йылдарҙа СССР эске тулайым продукт буйынса тик АҠШ-тан ғына ҡалышты.

ЮНЕСКО билдәләүенсә, беҙҙең ил мәғариф буйынса АҠШ һәм Канаданан ғына артта ҡалып, донъяла өсөнсө урынды биләне. Фәнни-техник прогресты тиҙләтеү өсөн бөтә йәштәргә урта белем биреү, юғары уҡыу йорттарына студенттар ҡабул итеүҙе күпкә арттырыу буйынса алдан мөһим саралар күрелде. 1966 йылда СССР Мәғариф министрлығы ойошторолдо, РСФСР Педагогия фәндәре академияһы эш башланы. Шул уҡ йылда союздаш һәм автономиялы республикалар министрҙарының, край һәм өлкә мәғариф бүлектәре мөдирҙәренең, педагогия институттары ректорҙарының, уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу институттары директорҙарының Бөтә Союз кәңәшмәһе уҙғарылды. Унда беҙҙең республиканан министр Ф. Х. Мостафина, Бөрө һәм Стәрлетамаҡ педагогия институттары ректорҙары К. Ш. Әхиәров, И. И. Насиров һәм мин, ул саҡта Башҡортостан Уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты директоры, ҡатнаштыҡ.

СССР мәғариф министры М. А. Прокофьев (ул быға тиклем РСФСР мәғариф министры ине – **С. Й.**) тәүҙә илдең киләсәктә үҫешендә бөтә йәштәргә урта белем биреүҙең ниндәй ҙур роль уйнаясағы тураһында тәрән йөкмәткеле доклад яһаны. Уҡытыуҙы урта белемгә күсереү өсөн түбәндәге сараларҙы күреү кәрәклегенә туҡталды:

– уҡыу йәшендәге бөтә балаларға һигеҙ йыллыҡ белем биреү;

– һигеҙ йыллыҡ белем алған уҡыусыларҙы өлкән кластарға, техникумдарға, киске мәктәптәргә ылыҡтырыуҙы күпкә арттырыу;

– мәктәптәрҙе тейешле белемдәре булған уҡытыусылар менән тәьмин итеү;

– уҡытыу программаларын камиллаштырыу;

– уҡыусылары күп булған һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙе урта мәктәптәргә әйләндереү, уларҙың матди-техник базаһын нығытыу.

«Был бурыстарҙы атҡарыу өсөн биш-алты йыл ваҡыт кәрәк буласаҡ, – тине М.А. Прокофьев, – шунан һуң ғына дөйөм мәжбүри урта белемгә күсеү тураһында закон ҡабул итергә мөмкин.

Йәштәргә урта белем биреү өсөн илдең күпселек ауыл-ҡалаларында тейешле шарттар тыуҙырылмағайны әле. Башҡортостанда ла, бигерәк тә ауыл ерҙәрендә, ошондайыраҡ хәл ине. Колхоздар һәм совхоздарҙың 70 процентында урта мәктәптәр юҡ, булғандары ла иҫкергән кулак йорттарында, мәсеттәр һәм сиркәүҙәрҙә көн күрә. Ауыл мәктәптәренең V – X кластарында эшләгән уҡытыусыларҙың тик 45,3 проценты ғына тейешле белемгә эйә. Был күрһәткес буйынса беҙ РСФСР-ҙа иң һуңғы урын биләйбеҙ икән. Һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙең һәр дүртенсе директорының, уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса һәр урынбаҫарҙың юғары белеме юҡ. Урта мәктәп директорҙары, уларҙың урынбаҫарҙары араһында ла ундайҙар байтаҡ. Биш мең самаһы ауыл уҡытыусыһы (күптәре ғаиләләре менән) – фатирһыҙ, сит кешеләрҙә бүлмә йә мөйөш биләп йәшәргә мәжбүр. Уҡыусыларҙың өлгәше түбән, 30 меңгә яҡыны класта икенсе йылға ҡалдырыла. Шул арҡала һигеҙ йыл элек уҡырға ингән балаларҙың 84,1 проценты ғына тейешле белем алып сыҡҡан. Урта белемле уҡыусылар 39,3 проценттан артмай.

1971 йылдың майында мине мәғариф министры итеп тәғәйенләнеләр. Быға тиклем КПСС-тың Өфө ҡала комитетында, Өлкә комитетта фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдиренең урынбаҫары булып эшләгәйнем. Яңы вазифала эшләү Мәскәүҙән, РСФСР мәғариф министры А. И. Даниловтан, бойороҡ алып ҡайтыуҙан башланды. Уға тиклем КПСС Үҙәк Комитетының фән һәм уҡыу йорттары бүлегендә РСФСР хөкүмәте рәйесе урынбаҫары В. И. Кочемасов менән һөйләшеү булғайны. Уларҙан әйләнеп килгәс, А. И. Данилов менән сәғәттән ашыу һөйләштек. Алдындағы таблицаға күрһәтеп, министр былай тине:

– Мәктәптәр һәм уҡыусылар иҫәбе буйынса Башҡортостан – РСФСР-ҙа иң ҙур республика. Һеҙҙә 4305 мәктәп, 868 мең уҡыусы бар. Балтик буйының өс республикаһы уҡыусыларынан саҡ ҡына кәмерәк.

– Артабан министр иғтибарымды икенсе таблицаға йүнәлтте:

– Ун биш союздаш республика араһында РСФСР – алтынсы урында. Минең хәлде лә аңлағыҙ. Беҙҙе кемдәр артҡа тарта? – тип ул тағы беренсе таблицаны күрһәтте. Унда күрһәткестәре РСФСР буйынса уртасанан түбән республикалар һәм өлкәләр исемлеге ҡыҙыл һыҙыҡ менән билдәләнгәйне.

– Ярҙам итербеҙ, үҙегеҙ ҙә тырышығыҙ. Яңы уҡыу йылы башында һеҙҙе коллегияла тыңларбыҙ. Проблемаларығыҙҙы хәл итергә булышырбыҙ, – тип кабинет хужаһы миңә бойороҡ тотторҙо ла эшемдә уңыштар теләп хушлашты.

Мәскәүҙән ҡайтҡас, мин иң элек КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары М. З. Шакировҡа инеп, Мәскәүҙә ишеткәндәремде һөйләнем. Башҡортостандың 46-сы урында булыуы уның кәйефен ҡырҙы. Идеология секретары Т. И. Ахунйәновты, фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире Д. Ш. Дәүләтбаевты саҡыртып, уларға бер аҙна эсендә етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, урта белем биреүгә күсеү буйынса биш йыллыҡ план әҙерләргә ҡушты.

План түбәндәге сараларҙы эсенә алды:

– йәштәргә урта белем биреүҙең биш йыллыҡ планын районларҙа һәм ҡалаларҙа төҙөп, район һәм ҡала Советтары башҡарма комитеттарында раҫлатырға;

– уҡытыу сифатын яҡшыртыу нигеҙендә икенсе йылға ҡалған уҡыусылар иҫәбен кәметергә, сәбәпһеҙ мәктәптән китеүҙе бөтөрөргә;

– уҡыусылары күп булған һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙе урта мәктәптәргә әйләндерергә, мәктәптәрҙең яңыларын төҙөргә;

– уҡытыу-тәрбиә эштәрен яҡшыртыу, ауыл уҡытыусыларына лайыҡлы йәшәү шарттары булдырыу мәсьәләләре буйынса КПСС-тың район һәм ҡала комитеттары секретарҙары эшен Өлкә комитет бюроһында, район һәм ҡала Советтары башҡарма комитеттары рәйестәре эшмәкәрлеген Министрҙар Советында тыңларға;

– 1971 йылдың авгусында мәғариф хеҙмәткәрҙәре активының республика кәңәшмәһен уҙғарырға. Мәғариф органдары етәкселәренән тыш, педагогия институттары ректорҙарын, иң яҡшы мәктәптәр директорҙарын, КПСС-тың район һәм ҡала комитеттарының идеология буйынса секретарҙарын, район һәм ҡала Советтары башҡарма комитеттары рәйестәре урынбаҫарҙарын, мәктәптәргә ҙур ярҙам күрһәткән колхоз, сәнәғәт предприятиелары етәкселәрен саҡырырға.

Алғараҡ китеп, шуны әйтергә кәрәк: был план һәм уның үтәлеүе мәғарифтағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә бик ҙур роль уйнаны. Беҙ РСФСР-ҙың уртаса күрһәткестәренән байтаҡ юғары күтәрелдек. 1971 йылдың сентябрь урталарында РСФСР мәғариф министры А. И. Данилов шылтыратып, яңы уҡыу йылының нисек башланыуы менән ҡыҙыҡһынды.

– Бер аҙнанан Г. П. Веселов (министр урынбаҫары, 1980 йылдарҙа – министр – **С. Й.**) бер нисә инспектор менән килеп, һеҙҙе коллегияға әҙерләйәсәк. Мәскәүгә килгәс, коллегияға тиклем миңә инеп сығығыҙ, – тип хушлашты ул.

Веселов бригадаһы беҙҙең министрлыҡтың, бер нисә ҡала һәм район мәғариф органдарының, педагогия училищеларының, мәктәптәрҙең эше менән танышты. Улар Башҡортостанда яңы уҡыу йылының уңышлы башланыуын билдәләп, тикшереү һөҙөмтәләрен республика етәкселәренә лә еткерҙе. Коллегия уҙасаҡ көн дә килеп етте. Министр эргәһенә инеп сыҡтым.

– Һеҙҙе беренсе тапҡыр тыңлайбыҙ, – тине А. И. Данилов. – Ниндәй проблемаларығыҙ бар, беҙҙән ниндәй ярҙам кәрәк – һис тартыныуһыҙ шулар хаҡында әйтегеҙ.

Коллегиялағы сығышымда мәктәптәрҙең эшендәге етешһеҙлектәр, уларҙы бөтөрөү һәм булдырмау өсөн ниндәй саралар күрелеүе, алдағы пландар хаҡында һөйләнем. КПСС Өлкә комитеты планын да телгә алдым. Ул коллегия ағзалары араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Сығышымды ошолай тамамланым:

– Мәктәптәрҙең эшендәге етешһеҙлектәр өсөн иң элек Башҡортостан министрлығы ғәйепле. Кадрҙар мәсьәләһенең хәл ителмәүендә РСФСР министрлығының да ярҙамы етешмәй. Республикала өс педагогия институты бар. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙа башланғыс класс уҡытыусылары, физкультура, рәсем, һыҙма, йыр белгестәре, балалар баҡсаһы тәрбиәселәре әҙерләнмәй. Башҡа предметтар буйынса ла уҡытыусылар етешмәй. Һәр 10 мең уҡыусыға иҫәпләгәндә, РСФСР буйынса педагогия институттарында 50 студент уҡый. Нишләп ул беҙҙә ике тапҡырға кәмерәк? Йыл һайын беҙгә үҙәк өлкәләрҙән өс йөҙҙән ашыураҡ йәш уҡытыусы килә. Ләкин күптәре төрлө сәбәптәр арҡаһында, өс йыл да эшләмәй, ҡайтып китә.

Коллегияның ҡайһы бер ағзаларына минең йомғаҡлау һүҙем оҡшаманы.

– Докладсы, – тине министрҙың беренсе урынбаҫары Н. А. Александров, – үҙенең эшендәге етешһеҙлектәрҙе беҙгә япһарырға маташты.

Уны министр бүлдерҙе:

– Николай Васильевич, мин Сабир Шәйәхмәтовичты иғтибар менән тыңланым. Етешһеҙлектәр өсөн, беренсе сиратта, Башҡортостан министрлығы ғәйепле, тине бит ул. Нишләп беҙ кадрҙар мәсьәләһен хәл итергә ярҙам итмәйбеҙ? Ни өсөн уҡытыусыларҙы урында әҙерләмәйенсә, ситтән ебәрәбеҙ? Йыһаншин дүртенсе генә ай эшләй. Уға күмәкләп ябырылһаҡ, ул күтәргән мәсьәләләрҙе хәл итә алмаясаҡбыҙ.

Министрҙың репликаһынан һуң коллегия ыңғай йүнәлеш алды. Коллегия ултырышы тураһында ентекләп яҙыуымдың сәбәбе шунда: ҡабул ителгән ҡарар

ысынлап та ҙур роль уйнаны. Үҙебеҙҙең педагогия институттарына студенттар ҡабул итеү арттырылды, белгестәрҙе бөтә предметтар буйынса әҙерләү юлға һалынды. Өфө педагогия институты ҡарамағына 5-се, 11-се мәктәптәрҙең биналары бирелде. Уларҙың уҡыусылары яңы төҙөлгән мәктәптәргә күсерелде. Өфө, Стәрлетамаҡ, Бөрө педагогия институттарына яңы уҡыу корпустары һалынды.

Йәштәргә дөйөм мәжбүри урта белем биреүҙе тормошҡа ашырыу өсөн партия һәм хөкүмәт үтә ҙур әһәмиәткә эйә булған ҡарарҙар сығарҙы: уҡытыусыларға һәм балалар баҡсалары тәрбиәселәренә хеҙмәт хаҡын арттырыу (1972 й.), йәштәргә урта белем биреүгә күсеүҙе тамамлау (1972 й.), ауыл мәктәптәренең эшләү шарттарын артабан яҡшыртыу саралары тураһында (1973 й.), уҡыусыларға белем биреүҙе һәм тәрбиәләүҙе камиллаштырыу, уларҙы хеҙмәткә әҙерләү (1977 й.), уҡыусыларҙы дәреслектәр менән дәүләт иҫәбенә тәьмин итеү (1977 й.). Ҡарарҙарҙы үтәү өсөн, әлбиттә, үҙәктә лә, урындарҙа ла тейешле саралар күрелде.

1974 йылда Өфөлә үткән мәғариф һәм ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәренең Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы ауыл уҡыусыларын хеҙмәткә әҙерләүгә бағышланғайны. Унда РСФСР-ҙың бөтә төбәктәренән 400 кеше ҡатнашты. РСФСР мәғариф министры урынбаҫары Г. П. Веселов, РСФСР ауыл хужалығы министры урынбаҫары И. С. Морозов, Башҡортостан мәғариф министры С. Ш. Йыһаншин конференцияла доклад менән сығыш яһаны. Форумда ҡатнашыусылар Батыр (Ауырғазы), Ергән (Мәләүез), Шемәк (Өфө), Үрге Йәркәй (Илеш), Бүреҡаҙған (Стәрлетамаҡ), Иҫке Ҡалмаш (Саҡмағош) мәктәптәрендә булып, мастерскойҙар менән, уҡыусыларҙы төрлө ауыл хужалығы һөнәрҙәренә әҙерләү менән танышты.

1975 йылда Башҡортостан Юғары Советы сессияһында «Республикала йәштәргә дөйөм мәжбүри урта белем биреүҙе тормошҡа ашырыу бурыстары» тураһындағы мәсьәлә ҡаралды. Доклад менән сығыш яһау миңә тапшырылып, мин унда күпселек ҡала һәм райондарҙа йәштәргә урта белем биреүҙәге уңыштар тураһында әйтеп үттем. Маҡтау һүҙҙәре бигерәк тә Өфө, Туймазы, Сибай, Салауат, Нефтекамск, Учалы ҡалаларына, Ауырғазы, Әбйәлил, Балтас, Борай, Кушнаренко, Саҡмағош райондары мәктәптәренә ҡарата әйтелде. Артта ҡалған ҡала һәм райондарҙың етәкселәрен иһә тәнҡитләргә тура килде. Мәғариф системаһын үҫтереүгә төҙәүселәр ҙә баһалап бөтөргөһөҙ өлөш индерҙе. Дүрт йылда (1971 – 1974 йй.) 97 мең уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәп биналары төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырылды. Бындай темпты Башҡортостандың күргәне юҡ ине.

Уҙған быуаттың 70-се, 80-се йылдарының беренсе яртыһында мәктәптәр дәүләт ҡаҙнаһы, сәнәғәт министрлыҡтары, ауыл хужалығы министрлығы (колхоздар, совхоздар) иҫәбенә төҙөлдө. Ҡаҙна иҫәбенә төҙөү планы ла йыл һайын 140 – 160 процентҡа үтәлеп килде. Был күрһәткес буйынса Башҡорт АССР-ы беренсе урындан төшмәне. Бөтә финанс сығанаҡтары иҫәбенә 1971 – 1984 йылдарҙа уртаса 22 меңдән күберәк уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәп биналары һалынды. Мәктәптәр төҙөү буйынса тәжрибәбеҙ РСФСР Мәғариф министрлығы тарафынан ике тапҡыр (1973, 1980 йй.) башҡа төбәктәргә лә таратты.

Ауыл уҡытыусыларына 500 мең кв. метр торлаҡ төҙөлдө. 1970 йылда 5 меңләп ауыл уҡытыусыһының фатиры булмаһа, 1984 йылда уларҙың иҫәбе 2800-гә ҡалды (күпселеге – үҙҙәренең ата-әсәләре ғаиләһендә йәшәгән йәш белгестәр). Бөтә мәктәптәрҙе тейешле белеме булған уҡытыусылар менән тәьмин итеүгә өлгәшелде. Ауыл уҡыусыларын хеҙмәткә өйрәтеү өсөн мәктәптәргә йыл һайын 74 «Беларусь» тракторы, 40 йөк машинаһы бирелде. Ауыл урта мәктәптәрендә уҡыусыларҙың етештереү бригадаһы ойошторолоп, улар 125 мең гектар

майҙанда йыл һайын 65–75 миллион һумлыҡ продукция етештерҙе. 1981 йылда комбайнсыларҙың ярҙамсылары булып эшләгән һигеҙ уҡыусы «Өлгөлө хеҙмәт өсөн» миҙалы менән бүләкләнде. Бөтә ҡалаларҙа, Илеш, Дүртөйлө, Ғафури, Яңауыл районларында производство һәм профессиональ йүнәлеш биреү комбинаттары асылды. Хәрби комиссариаттар, ДОСААФ, комсомол ойошмалары менән берлектә уҡыусыларҙы патриотик рухта тәрбиәләү, хәрби хеҙмәткә әҙерләү киң ҡолас алды. Урта мәктәптәрҙә өлкән класс уҡыусыларына башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәре индерелеп, хәрби кабинеттар булдырылды, атыу тирҙары төҙөлдө. Каникул ваҡыттарында хәрби-спорт уйындары ойошторолдо. Хәрби хеҙмәткә алынған йәштәрҙең 94 проценты урта һәм юғары белемле ине (хәҙер был турала асыҡ информация юҡ – **С. Й.**).

Уҡыусыларҙы кластан тыш төрлө түңәрәктәргә, физкультура-спорт секцияларына, музейҙар ойоштороу эшенә ылыҡтырыу, каникулдар мәлендә мәктәп эргәһендәге тәжрибә участкаларында эшләү, производство бригадаларын, ҡала уҡыусылары өсөн ял һәм хеҙмәт лагерҙары ойоштороу үҫмерҙәр араһында тәртип боҙоуҙарҙы, енәйәт ҡылыу осраҡтарын арттырмаҫҡа ярҙам итте (1971 – 1984 йылдарҙа был күрһәткес Рәсәйҙә ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа артты).

Беҙҙең мәктәптәрҙең эшен баһалаусы күрһәткестәр йылдан-йылға күтәрелде. 1978 йылда Бөтә Рәсәй уҡытыусылар съезында, РСФСР Мәғариф министрлығы докладында Башҡортостанды йәштәргә урта белем биреүҙең юғары күрһәткестәргә ирешкән (98,5 проценттан ашыуыраҡ) 12 төбәк иҫәбенә индерҙе. Башҡортостан 1980 йылда РСФСР-ҙың 73 төбәге араһында дүртенсе урынға күтәрелде. Беҙ Белгород өлкәһе, Мордва АССР-ы һәм Ставрополь крайынан ғына ҡалыштыҡ. 1981 йылдан был урындар иҡтисади зоналар буйынса билдәләнә башланы. Урал зонаһында беҙҙең республика йыл һайын беренсе урында торҙо.

Яуланған уңыштар өсөн республикабыҙға бер нисә тапҡыр, шулай уҡ байтаҡ районларға күсмә Ҡыҙыл байраҡтар тапшырылды. Йөҙҙәрсә уҡытыусылар, мәғариф органдары хеҙмәтсәндәре ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнде, күптәренә почетлы исемдәр бирелде.

1984 йылда 1984 – 1994 йылдарға иҫәпләнгән мәктәп реформаһы тураһында партия һәм хөкүмәт ҡарары ҡабул ителде. Уның проектын тәүҙә йыл буйы уҡытыусылар, ата-әсәләр, йәмәғәтселек ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тикшерҙе, үҙҙәренең тәҡдим-өҫтәмәләрен индерҙе. Уларҙың иң әһәмиәтлеләрен һайлап, Мәскәүгә ебәреп торҙоҡ. Реформа түбәндәге үҙгәрештәргә иҫәпләнгәйне: урта мәктәптәрҙә уҡытыуҙы 11 йылға еткереү, яңы предметтар индереү (ЭВМ, информатика), айырым предметтарҙы тәрәнерәк өйрәнеү өсөн факультатив дәрестәргә ваҡыт бүлеү, юғары класс уҡыусыларына дөйөм һөнәр биреү, профтехучилищеларҙың барыһын да урта белем биреүсе учреждениелар итеп үҙгәртеү, мәғариф системаһында эшләгән бөтә хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын байтаҡҡа арттырыу. Хатта ике кеше йөрөтөү өсөн (уҡыусы һәм инструктор) тракторҙар һәм автомобилдәр сығарыу ҡаралғайны.

Был реформаны тормошҡа ашырыу бурыстары, ғәҙәттәгесә, Бөтә Союз кәңәшмәһендә ҡаралырға тейеш ине. Нишләптер кәңәшмә ваҡытында башланманы, министрҙың урынбаҫарҙары ла борсоулы күренде. Уларҙың береһе: «Министр М. С. Горбачев эргәһендә», – тине. Кәңәшмә сәғәт ярымға һуңлап башланды. Үҙен һәр саҡ тыныс тотҡан мәғариф министры М. А. Прокофьев белдерергә тырышмаһа ла, кәйефе ҡырылғаны йөҙөнә сыҡҡайны. Горбачев менән нимәләр тураһында һөйләшеүенә бөтөнләй ҡағылманы. Бер-ике урында ҡыҙып та киткеләне. Кәңәшмәнән күңелһеҙ таралыштыҡ. Тиҙҙән министрҙың үҙ теләге менән эштән китеүе ишетелде. Һәр кәңәшмәлә уның ҙур ҡәнәғәтләнеү

менән: «Быйыл да беҙҙең уҡыусылар халыҡ-ара математика, физика, химия олимпиадаларында алтын, көмөш миҙалдарҙың күбеһен яуланы», – тигәне бөгөн дә хәтерҙә.

СССР мәғариф министры итеп Мәскәү нефть институтының нефть үткәреүсе торбалар кафедраһы мөдире С. Г. Щербаков ҡуйылды. Мәктәп эштәренән йыраҡ торған оло йәштәге кешегә, моғайын, яңы урында еңел булмағандыр. Реформа баштан уҡ һөрлөктө. Мәктәптәрҙе финанслау күпкә кәмене. 1984 йылдан компьютерҙар бүленә башлап, 1990 йылда улар менән урта мәктәптәрҙең 80 процентын тәьмин итеү ҡаралғайны. Компьютерҙар бөтөнләй бирелмәүгә ҡарамаҫтан, юғары кластарҙа уларҙы өйрәнеү индерелде.

М. С. Горбачевтың бер ниндәй әҙерлекһеҙ һәм программаһыҙ башланған «перспективаһы» илдә буталсыҡ тыуҙырҙы, баш-баштаҡлыҡҡа юл асты. Быңдай шарттарҙа эшләүҙең бер ниндәй ҡыҙығы ҡалманы. Тиҙҙән миңә 61 йәш туласаҡ ине. Ғариза яҙып, эштән китергә булдым. Ғаризамды ҡарағанда Өлкә комитеттың бюроһы миңә рәхмәт белдерҙе. Эшһеҙ ятҡы килмәне. Башҡортостан педагогия институтында (хәҙер М. Аҡмулла исемендәге педуниверситет – **С. Й.**) 14 йыл доцент булып эшләп, 75 йәшемдә ялға сыҡтым.

Мәғариф системаһында килеп тыуған ауыр хәл, реформаның тотҡарланыуы уҡытыусыларҙы, ата-әсәләрҙе, йәмғиәтте ҙур борсоуға һалды. Илдең юғары органдарына хаттар, ялыуҙар яуҙы. СССР халыҡ депутаттарының Юғары Советы үҙенең фән, мәғариф, мәҙәниәт, тәрбиә комитетына, мәғариф системаһын һаҡлап ҡалыу өсөн, мәктәптең закон нигеҙҙәре тураһында проект әҙерләргә ҡушты. Уның менән СССР Педагогия фәндәре академияһының мәктәптәр менән идара итеү һәм финанслау ғилми-тикшереү институты директоры, профессор П. В. Худоминский һәм уның урынбаҫары профессор Г. П. Давыдов шөғөлләнде. Проекттың милли мәктәптәр өлөшөн әҙерләгәндә мине лә саҡырҙылар.

Комитеттың кәңәшмәһе 1988 йылдың 16-17 апрелендә уҙҙы. Уның рәйесе Беляев, һис шикләнмәйсә, шуларҙы һөйләне:

– Ҙур ҡыйынлыҡ менән СССР Президенты М. С. Горбачевтың беҙҙе ҡабул итеүенә ирештек. Ул мәктәп мәсьәләһен сессияла күтәреүгә ҡаршы сыға. Аптырағас, ошондай дәлил килтерҙек: АҠШ-та мәктәп реформаһын Дж. Буш, Англияла – М. Тетчер, йәғни ил башлыҡтары етәкләй. М. Горбачев былай тип яуап бирҙе: «Буштың да, Тетчерҙың да проблемаһы – мәктәп кенә. Ә минең мәшәҡәттәр – мең». Бик ныҡыша торғас, мәктәп проектын ул сентябрь планына индерергә һүҙ бирҙе.

Г. П. Давыдовтың докладын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланды. Ләкин проект сессия ҡарауына сығарылманы. 1991 йылда үткән референдумда граждандарҙың 76 проценты СССР-ҙы һаҡлап ҡалыуҙы яҡлап тауыш биреүгә ҡарамаҫтан, шул йылдың ахырында уҡ СССР тарҡатылды. РСФСР Президенты итеп һайланған Б. Н. Ельцин беренсе указын мәғарифҡа бағышланы. «РСФСР-ҙа мәғарифты үҫтереү буйынса беренсе сираттағы саралар» тип аталды ул.

Указдың төрлө вәғәҙәләр биргән ете пунктының береһе лә үтәлмәне. Уҡытыусыларға, башҡа педагогтарға эш хаҡын сәнәғәттә эшләгәндәрҙекенә еткереү ҡаралғайны, ләкин уны үтәү йылдан-йылға кисектерелеп, ахырҙа указ Дәүләт Думаһының 2005 йылда ҡабул ителгән 122-се законы менән ғәмәлдән сығарылды. Йәштәргә урта белем биреү туғыҙ йыл уҡытыу менән сикләнде, ләкин уныһы ла үтәлмәне. Төрлө информация сығанаҡтары 2–4 млн. үҫмерҙең ҡараусыһыҙ, йортһоҙ ҡалыуын хәбәр итте. Уҡытыусыларға айҙар буйы эш хаҡы түләнмәне, уны төрлө тауарҙар, хатта араҡы менән түләү осраҡтары булды. Йәш белгестәрҙең яртыһы мәктәптә эшләүҙән баш тартты. Уҡытыусылар араһында

төрлө формалар алған ризаһыҙлыҡ акциялары уҙҙы. Етмәһә А.Чубайс мәктәптәрҙе, балалар баҡсаларын, башҡа уҡыу йорттарын хосусилаштырыу тураһында Дәүләт Думаһына закон проекты индерҙе. Депутаттар ҡаршы сыҡҡас, уны ҡарауҙы биш йылға туҡтаттылар.

Реформа йылдарында Рәсәйҙәге 16422 мәктәп һәм балалар баҡсаһының яртынан ашыуыраҡы ябылып, был хәл Башҡортостанды ла урап үтмәне. «Оптимизация» һылтауы менән уҡыусылары аҙ булған мәктәптәрҙе ябыу бөгөн дә дауам итә. Секцияларҙың, түңәрәктәрҙең етәкселәренә хеҙмәт хаҡы түләү туҡтатылды. Мәктәпһеҙ ҡалған ауылдар юҡҡа сыға. Халыҡтың кәмеүе бының менән дә бәйләнгән бит. Һуңғы йылдарҙа халыҡтың артыуы хаҡында һөйләйҙәр, ләкин Рәсәй Президенты ҡарамағындағы бала хоҡуҡтарын һаҡлау буйынса вәкил П. Астахов киреһен раҫлай: «Әле Рәсәйҙә мәктәпкәсә һәм мәктәп йәшендәге балалар 27,7 миллион, был иҫәп йыл һайын 300 меңгә кәмей. Артабан да шулай дауам итһә, 15 йылдан һуң балалар 22 миллионға ҡаласаҡ». Совет власы йылдарында РСФСР мәктәптәрендә уҡыған балалар 26–28 миллион тәшкил итә ине.

Уҡыусыларҙың кәмеүен РФ мәғариф министры А. А. Фурсенко ла раҫлай: 2006 йылда урта мәктәптәрҙе 1,3 миллион кеше тамамлаһа, 2012 йылда улар 700 мең генә буласаҡ. Тиҙҙән юғары уҡыу йорттарына студенттар ҡабул итеү проблемаға әйләнәсәк. 1991 йылдан алып мәғариф системаһында реформалар бер туҡтауһыҙ дауам итә. Йәмғиәтте ялҡытҡан «реформа» һүҙен хәҙер «модернизация»ға алмаштырҙылар. А. А. Фурсенко әле, 2005/2006 уҡыу йылынан башлап, уҡыу планына индерелгән предметтарҙың 25 проценты түләүле буласағын белдергәйне. Уларҙы өйрәнмәһәң, юғары уҡыу йорттарына инә алмайһың. Был «яңылыҡ» уҡытыусылар, ата-әсәләр, ректорҙар araһында, йәмғиәттә ҙур ығы-зығы тыуҙырғас, министр был тәкдименән баш тартырға мәжбүр булғайны.

Рәсәй Президентының «Рәсәйҙә мәғариф системаһының элекке ҡаҙаныштары бөтә донъяла танылыу яулауы»ның ҡайһы йылдарҙа булғанлығын әйтеп тороуҙың кәрәге юҡтыр, моғайын. Уны һәр кеше үҙе билдәләй ала. Үкенескә ҡаршы, «2010 – Уҡытыусылар йылы» мәғариф системаһында эшләгән кешеләргә шатлыҡтар килтермәне. Быға, бәлки, бөтә донъя көрсөгө лә ҡамасаулағандыр. Донъяның эре 20 иле араһында ла, БРИК ойошмаһында ла (Бразилия, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай) Рәсәй унан иң ҙур зыян күргән ил бит.

Мәктәптәрҙә берҙәм дәүләт имтиханы – БДИ (русса – ЕГЭ) индереү мәғариф системаһында эшләгәндәр араһында бәхәсте арттырҙы. Мәскәү дәүләт университеты ректоры В. А. Садовничий БДИ арҡаһында уҡыусыларҙың математиканан, рус теленән белемдәре күпкә түбәнәйеүен билдәләй. «Беренсе курс студенттарының яртыһынан ашыуы имтиханда алған юғары балдарын аҡлай алманы. Ҡайһы бер төркөмдәрҙә уларҙың 20 проценты ғына ыңғай билдәләргә лайыҡ булды. БДИ-ҙың мәғариф системаһын үтә ауыр хәлгә килтереү хәүефе янай», – тине ул быйыл 5 июндә «Эхо Москвы» радиоһы аша.

Рәсәй Фәндәр академияһы вице-президенты, академик, Нобель премияһы лауреаты, Дәүләт Думаһы депутаты Ж. Алферов БДИ-ға кире ҡарашын күп тапҡырҙар белдерҙе. Ул – Санкт-Петербургтағы А. Ф. Иоффе исемендәге Физика-техник институтының директоры ла. Институт эргәһендә уңышлы эшләгән лицей ҙа бар. «Рәсәй радиоһы» тапшырыуында абруйлы ғалим: «Үҙем дә, лицей уҡытыусылары ла БДИ-ға ҡаршыбыҙ, уны ҡулланмайбыҙ. Лицей Фәндәр академияһы ҡарамағында, Мәғариф министрлығына буйһонмай», – тип белдерҙе.

Дәүләт Думаһының иң әүҙем депутаттарының береһе, Рәсәй Хөкүмәтенең элекке финанс министры Оксана Дмитриева бер сығышында былай тине:

– Беҙҙә Рәсәйҙе Америка менән сағыштырырға яраталар. АҠШ Президенты Обама, модернизацияға күсеүҙең беренсе шарты – тестарҙан баш тартыу, тип иҫәпләй. Киләсәктә беҙ БДИ-ҙың ауыр һөҙөмтәләрен күрәсәкбеҙ әле.

Хәҙер бөтә Көнбайыш илдәре уҡыусыларҙың белемен тестар ярҙамында билдәләүҙән баш тарта. Быйыл математиканан 21 балл, рус теленән 36 балл (проходной балл) алған уҡыусыларға «өслө» билдәһе ҡуйылды. Экспертарҙың фекеренсә, 41 балдан кәм алған уҡыусыларҙың белеме ыңғай баһалана алмай. 21 балл – «берле» һәм «икеле», 36 балл «икеле» һәм «өслө» билдәләре араһындағы күрһәткес булырға тейеш. БДИ яҡлылар уның коррупцияға ҡаршы иң һөҙөмтәле сара булыуына ышандырырға тырыша, ләкин ысынбарлыҡ уның киреһен иҫбатлай. Санкт-Петербургтың 5-се ТВ каналының «Асыҡ студия»һы 29 июндә «ЕГЭ: без купюр» темаһына тапшырыу күрһәтте. Уны алып барыусы Роман Герасимов тапшырыуҙы ошолай тип башланы:

– РФ Эске эштәр министрлығы 2010 йылда мәғариф системаһында коррупцияның ике тапҡырға артыуы, йәғни 5,5 миллиард долларға үҫеүе тураһында белдерҙе. Уның артыуын күптәр БДИ менән бәйләй.

Тапшырыуҙа ҡатнашҡан юғары категориялы, өлкән йәштәге уҡытыусы Юлий Дымшиц та үҙенең фекерен әйтте:

– Быға ғәжәпләнерлек түгел. БДИ арҡаһында уҡыусыларҙың белеме күпкә кәмене. Улар күп ваҡыттарын БДИ-ға индерелгән һорауҙарға яуап әҙерләүгә сарыф итә. Программала ҡаралған материалдар үҙләштерелмәй, уларҙы системалы өйрәнергә, анализларға ваҡыт ҡалмай. Ата-әсәләр, беренсе сиратта байҙар, балаларының имтихандарҙы «уңышлы» тапшырыуы өсөн аҡсаларын йәлләмәй. Юғары уҡыу йорттарында ла ошондай хәл. Ҡайһы бер намыҫһыҙ уҡытыусыларҙың әҙерлеге түбән булған студенттарҙан имтихандарҙы нисек алыуҙары бер кемгә лә сер түгел.

Тапшырыуҙы алып барыусы Роман Герасимов шуны өҫтәне:

– Миңә Тамбов өлкәһенән ауылда йәшәгән туғаным шылтыратты. Унда яҡшы билдә ҡуйыу өсөн 15 мең һум алғандар. Ауыл ерендә был ҙур аҡса бит.

Байтаҡ урындарҙа ығы-зығы ҡупты. Бигерәк тә Ростов өлкәһенең Морозов районында. Бында рус теле уҡытыусыларынан 30 кеше, бер урынға йыйылып, кеҫә телефондары аша уҡыусыларына ярҙам иткән. Тик бушлай түгел. Был хаҡта гәзиттәр яҙҙы, Мәскәүҙең ТВ каналдары күрһәтте. БДИ арҡаһында көлкөлө хәлдәр ҙә килеп сыҡҡыланы. Уҡыусыларының иң юғары күрһәткестәре өсөн Ҡарасәй-Черкес Республикаһы министрын… эштән сығарыу хаҡында Мәскәү радиоһы хәбәр итте.

БДИ-ҙы яҡлап «Рособразнадзор» етәксеһе Глебова 26 июлдә «Рәсәй радиоһы»на интервью бирҙе. Шулай ҙа ул 2010 йылда инструкцияларҙы боҙоуҙың, апелляцияға биреүселәрҙең, ришүәт алыусыларҙың ике тапҡырға артыуын танырға мәжбүр булды. Уларҙы имтихан алыуҙың яңы формаһын ҡулланыу ифрат ҡатмарлы процесс икәнлеге, имтихан алыусыларға тәжрибә етмәүе менән аңлатты. Киләсәктә был етешһеҙлектәрҙе булдырмау өсөн тейешле саралар күреләсәгенә ышандырҙы.

БДИ яҡлыларҙың һәм уға ҡаршыларҙың бәхәсе туҡтамаясағы күренеп тора. Бөгөн ҡайһы яҡтың еңеренә аныҡ ҡына итеп бер кем дә яуап бирә алмаҫтыр, моғайын. 2011 йылдан мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт министрлыҡтарына

ҡараған учреждениелар тураһында яңы закон индереләсәк. Уға ярашлы, учреждениелар өс төркөмгә бүленә: ҡаҙнаныҡылар, йәғни тулыһынса ҡаҙнанан финансланыусылар, ҡаҙнанан өлөшсә финансланыусылар һәм автономлылар, йәғни үҙ аҡсаһына эшләүселәр. 2011 йылдың башынан, имеш, мәктәптәрҙең 25 проценты автономлы учреждениеларға әүереләсәк. Был закон хаҡында күп һөйләһәләр ҙә, уны аңлау ҡыйын ине. Мәскәү ТВ-центр каналы уға бер аҙ асыҡлыҡ индерҙе. «Халыҡ белергә теләй» тапшырыуында Дәүләт Думаһының иҡтисад һәм эшҡыуарлыҡ комитеты рәйесе Е. Федоровтың һәм мәғариф комитеты рәйесе урынбаҫары А. Смолиндың бәхәсе күрһәтелде.

Федоров һүҙен былай башланы: «Мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт министрлыҡтарына ҡараған учреждениеларҙа эшләгән хеҙмәткәрҙең эш хаҡын 20 мең һумға еткерергә кәрәк. Ләкин бының өсөн дәүләттә аҡса юҡ. Автономлы учреждениелар аҡсаны үҙҙәре эшләргә бурыслы. – Бындай мәктәптәрҙә аҡса эшләү алымдары нисек булырына Федоров бик томанлы яуап ҡайтарҙы: – Дәүләт органдары уларға ниндәй эштәр башҡарыу тураһында задание бирәсәк».

Смолин, был законды ҡаты тәнҡитләп, бындай ғәмәлдең башҡа бер илдә лә юҡлығын әйтте. Уҡытыуҙың бер өлөшө түләүле буласағын, бөтә ауырлыҡ аҙ эш хаҡы алған ата-әсәләрҙең елкәһенә төшәсәген иҫкәртте. Тапшырыуҙа ҡатнашыусыларҙың күбеһе Смолинды яҡланы. Фурсенко мәктәптәрҙе учреждениеларға әйләндереү ата-әсәләр өсөн отошло буласағына, уҡыусыларҙың белемен арттырыуға булышлыҡ итәсәгенә ышандырырға тырыша. Стандарт буйынса уҡыусы бер сит тел өйрәнһә, үҙ аҡсаһына уҡығандар ике, хатта өс тел өйрәнеү мөмкинлеге аласаҡ. Түләүле секцияларҙа, түңәрәктәрҙә уҡыусыларға белемдәрен киңәйтеү һәм тәрәнәйтеү өсөн шарттар тыуҙырыласаҡ. Эшләп алынған аҡса мәктәп файҙаһына ҡаласаҡ. Был аҡсаларға һалым һалынмаясағы, 2020 йылға тиклем льгота биреләсәге хаҡында хәбәр булды.

Уҡытыусыларҙың эш хаҡы тураһында ла бер нисә һүҙ әйтергә кәрәктер. Хәҙер бында төп ролде мәктәптә уҡыған балаларҙың иҫәбе уйнай. Ҡала һәм район үҙәктәрендәге күп һанлы уҡыусылары булған мәктәптәрҙә эшләгән уҡытыусыларҙың эш хаҡы байтаҡҡа артыуға ҡарамаҫтан, ул һаман түбән булып ҡала. Айырыуса уҡыусылары аҙ булған ауыл мәктәптәрендә.

«Эхо Москвы» радиоһы Өфөлә уртаса хеҙмәт хаҡының 20 мең һумдан артыуы хаҡында хәбәр итте. Нефть һәм газ тармағында эшләүселәр айына 60 мең һум алһа, уҡытыусылар – 12250 һум ғына. Башҡортостан Президенты Р. З. Хәмитов беҙҙә уҡытыусыларҙың эш хаҡы Рәсәй төбәктәре араһында 47-се, Волга буйы округында 6-сы урында булыуына ризаһыҙлыҡ белдереп, хеҙмәт хаҡы арттырыласағын әйтте. Рәсәйҙең 2011 йылғы ҡаҙна проектында уҡытыусыларға эш хаҡын арттырыу июнь-июль айҙарында ғына ҡарала.

2010 йылдың ғинуарында Милли мәғариф инициативаһы – «Беҙҙең яңы мәктәп» тураһындағы 83-сө ҙур күләмле закон ҡабул ителде. Уның йүнәлештәрен күрһәтеү менән генә сикләнәм:

– яңы уҡытыу стандарттарына күсеү;
– талантлы балаларға ярҙам итеү системаһын үҫтереү;
– уҡытыусылар корпусын камиллаштырыу;
– мәктәптең инфраструктураһын үҙгәртеү;
– уҡыусыларҙың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу;
– мәктәптәрҙең үҙаллылығын киңәйтеү.

«Беҙҙең яңы мәктәп» хаҡындағы законды һәр мәктәптең уҡытыусылар коллективы ата-әсәләр менән бергәләп, шулай уҡ мәғариф органдары хеҙмәткәрҙәренең тәрән итеп өйрәнеүҙәренә, унда күрһәтелгән йүнәлештәрҙе үтәү өсөн тырышып эшләйәсәгенә ышанғы килә. Законды уҡыусыларға еткереү ҙә файҙалы булыр, тип уйлайым.

РФ Хөкүмәте «Рәсәй Федерацияһында мәғариф» тигән яңы федераль закон әҙерләй. Ул тормоштағы ижтимағи-сәйәси, ә йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алып, хәҙерге модернизация шарттарына яраҡлаштырылған мәғарифтың ролен һәм функцияһын, уның төрлө баҫҡыстарында эшләгәндәрҙең бурыс-хоҡуҡтарын билдәләйәсәк. Әле ҡулланылған закондарҙы тикшереп, иҫкергәндәрен ғәмәлдән сығарыу, ҡайһыларын үҙгәртеү, яңыларын булдырыу ҡаралған. Закондарҙа ҡапма-ҡаршы урындар, ҡабатлауҙар байтаҡ, ә бына яңы шарттарҙа килеп тыуған хәлдәргә яуап юҡ. Шуға күрә баш-баштаҡлыҡтарға ла юл ҡуйыла. Мәктәптәрҙе ремонтлау, ҡорамалдар һатып алыу өсөн ата-әсәләрҙән аҡса йыйыла, уҡыусыларҙы мәктәпкә алған өсөн түләү талап ителә, уҡыусыларҙы законһыҙ мәктәптән сығарыу осраҡтары күҙәтелә, уҡытыусыларҙың эш хаҡы төрлө урындарҙа төрлөсә һ.б.

Был закон проектының концепцияһы төбәктәрҙең мәғариф органдарына, профсоюз комитеттарына еткерелде. Проектҡа өҫтәмәләр, үҙгәрештәр, тәҡдимдәр индерелеп, Мәскәүгә ебәреләсәк. Уларҙың әһәмиәтлеләре файҙаланыласаҡ. «Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында»ғы закон мәктәптәрҙең уңышлы эшләүе өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булған ҡануниәт нигеҙе булып хеҙмәт итәсәгенә, уҡытыусыларға, бигерәк тә мәктәп, мәғариф органдары етәкселәренә иң кәрәкле ҡуллама булырына ышанғы килә.

Хәҙер РФ Президенты Д.А. Медведевтың уңыштары элек бөтә донъяла танылыу алған Рәсәй мәғарифын тергеҙеү хаҡында ҡуйған бурысына әйләнеп киләйек. Уны үтәү еңел булмаясаҡ. 1952 йылда СССР мәғариф сифаты буйынса донъяла 3-сө урынды биләһә, Берләшкән Милләттәр ойошмаһы билдәләүенсә, 2009 йылда 41-се урынға тиклем тәгәрәгән. Д.А. Медведев ҡуйған маҡсатҡа ирешеү өсөн тейешле сараларҙы үтәү шарт. Беренсе сиратта – мәктәптәрҙе етерлек дәрәжәлә финанслау. Үткән быуаттың 50 – 70-се йылдарында беҙҙең илдә мәктәптәргә ҡаҙнаның 10 проценты бирелә торғайны. Һуңғы йылдарҙа ул 2-3 тапҡырға кәмене. Илдә прогрессив һалым индерергә ваҡыт еткәндер, моғайын. Ни өсөн миллиардерҙар ҙа, иң бәләкәй хеҙмәт хаҡы алғандар ҙа 13 процент түләй? Ниңә башҡа илдәрҙән үрнәк алмайҙар?! Швецияла иң байҙар килеменең – 57, Японияла – 50, Германияла, Ҡытайҙа – 45, Италияла – 43, Францияла – 40, АҠШ-та 35 процентын һалым итеп түләй.

Әгәр мәктәптәр етерлек финансланһа, «Беҙҙең яңы мәктәп» законын, тиҙҙән ҡабул ителәсәк «Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» законды тормошҡа уңышлы ашырыу мөмкинлеге тыуып, бер нисә йылдан Рәсәй мәғарифының донъяла алдынғы урындарҙың береһенә сығыуы ихтимал.

**Сабир ЙЫҺАНШИН,**
**1971–1985 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы**
**мәғариф министры, педагогия фәндәре кандидаты.**

## ЙОНДОҘЛО ҒҮМЕР



1928 йылдың 14 сентябрендә, ата-әсәһен шатландырып, ғаиләлә өсөнсөгә ир бала — тоҡомдо, исем-шәрифте һаҡлаусы донъяға килде. Олораҡ ике ҡыҙ — Асия менән Хәҙисәгә ҡусты булды. Малайға Авзалетдин тип исем ҡуштылар. Ғәрәпсә «өҫтөнлөклө», «бик яҡшы»ны аңлата. Исеме есеменә тура килеп, малай бик ҡыйыу һәм теремек булып үҫте. Әммә илдә бик ауыр саҡ: крәҫтиән хужалыҡтарын коллективлаштырыу башланып тора. Байыраҡ крәҫтиәндәрҙе кулакка сығарып, мөлкәтен тартып алалар. Бындай золом-йәбер Ғиззәтулланы ла урап үтмәне. Елембәт ауылының (хәҙерге Стәрлебаш районы) мәзинен өйөнән ҡыуып сығарҙылар, колхозға алманылар. Уға өй урынына землянка ҡаҙып инеүҙән башҡа сара ҡалманы. Стәрлетамаҡ ҡалаһында артелдә эшләгәндә бер ат һатып алғас, ғаиләнең хәле бер аҙ еңеләйҙе. Крәҫтиән өсөн ат — бик ҙур байлыҡ бит.

1932 йылда Ишембай ауылы янында нефтьятҡылығы асылғас, Ғиззәтулла барлы-юҡлы әйберҙәрен тейәп, шунда күсеп килде. Бер йыл кешелә фатирҙа торғандан һуң, таҡта өй әтмәләштереп сыҡтылар. Заманы өсөн бик үк таралмаған һөнәр — помидор үҫтерергә өйрәнеп алды Ғиззәтулла. Мең ярым төп үҫентегә Асия, Хәҙисә һәм Авзалетдин көн һайын һыу ташып һибә. Иртә көҙҙән уларҙы нефтселәргә һатып, өҫ-баштарын бөтәйтәләр, тамаҡ та туя. 1936 йылда ғаиләгә Вәсилә, һуғыш алдынан ғына Әксән дә өҫтәлде, Бөйөк Ватан һуғышы сыҡҡас, августа Ғиззәтулланы ла армияға алдылар. Тоҙға ҡытлыҡ башланғас, ауыл халҡы скважиналарҙың өҫкө ҡатламынан килгән тоҙҙо ҡайнатып алырға мәжбүр була. Ун йәшлек Авзалетдин, уны икмәккә алыштырыу өсөн, әсәһе менән арҡаһына тоҙ йөкмәп, Ырымбур өлкәһенең Шарлыҡ ауылындағы баҙарға йөрөй.

1942 йылдың көҙөндә аяғы ауыр яраланған Ғиззәтулла һуғыштан ҡайтҡас, тормош еңеләйгән кеүек була. Әммә ғаиләнең шатлығы оҙаҡҡа бармай — 1946 йылда әсәләре Мөьминә үлеп китә. Электр тогы һуғып, көҙөн Ғиззәтулла ла һәләк була. Ярай әле, был ваҡытта Асия — Стәрлетамаҡ педагогия училищеһын, ә Хәҙисә Ишембай нефть техникумын тамамлап өлгөрә. Авзалетдин иһә Өфө нефть институтының беренсе курсында белем алып йөрөй. Вәсилә менән Әксәнде балалар йортона бирәләр. Өсөнсө курстан һуң Авзалетдин йәй көндәрендә буровойҙа эшләп аҡса таба. Уҡыуҙар башланғас, иптәштәре менән дубитель заводында тал ҡайрыһы ла бушата. 1951 йылда институтын тамамлаған егетте «Башвостокнефтеразведка» тресына эшкә ебәрәләр.

...Урал тәбиғәте. Үркәс-үркәс тауҙар, мәңге йәшел ҡарағайҙар. Тауҙар араһынан боролоп-боролоп юл үтә. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш

районДарын Өфө ҡалаһы менән тоташтырған берҙән-бер юл була ул. Апрелево — шул тауҙар араһында ике рәт булып тау итәгенә ҡулайлашып ултырған ауыл. Көнсығыш осонан бер аҙ китһәң, күҙ йәшеләй йылтырап аҡҡан шишмәгә тап булаһың. Йәй көндәрендә уның һыуы бик һалҡын булһа ла, ҡыш көнө туңмай. Һыуы эсеүгә бик тәмле. Бына ошо шишмә тирәһендә 1951 йылда быраулау ҡоролмаһы ҡалҡып сыҡты. Разведкала өлкән инженер булып эшләгән Иҫәнғоловҡа ла был тирәгә йыш йөрөргә тура килә ине. Ә эшсе ғаиләләр ошо ауыл халҡы менән өйҙәш булып йәшәне. Авзал Ғиззәтовичты ла бер фатирға төшөрҙөләр. Хужабикә 45 — 50 йәштәр самаһындағы өс балалы тол ҡатын ине.

Эштән өшөп, арып ҡайтҡан Авзал, ашап-эскән арала, хужабикәнең оло ҡыҙына күҙ һалғылай. Төҫ-башҡа һылыу ғына йәш ҡатынға нисек күҙ һалмайһың? Егет кеше бит әле ул. Бына әле лә йәш ҡатын ҡаршы ултырып сәй яһай. Колхоз фермаһында сусҡа ҡарап ҡулдары һөйәлләнгән, үҙе яғымлы, серле ҡарап ала. Ябай ғына кейенгән, битенә бер ваҡытта ла крем, пудра теймәгән йәш ҡатындың йөҙө, буй-һыны егеттәрҙең иғтибарын ылыҡтырырлыҡ әле. Йәш ярымлыҡ балаһы булһа ла, сәскәгә оҡшата ине уны Авзалетдин. Тәбиғәттең үҙ ҡанундары бар бит. Орлоҡ ниндәй генә яҡшы, ауыр шарттарға сыҙамлы булмаһын, тупрағы насар булһа һәм ваҡытында ямғыр яуып тормаһа, үҫемлек тә шиңә. Был тәбиғәт ҡануны кешелек йәмғиәтендә лә осрай. Авзалетдин ҡаршыһында ултырған хужабикә ҡыҙы менән дә шундай уҡ хәл. Ул шиңмәһен өсөн, ошо матурлыҡты бүлешерлек иң яҡын кеше кәрәк.

Йәш ҡатын Авзалетдинды күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырыша кеүек. Ул — егет кеше, етмәһә — инженер. Ә ҡатын — сусҡа ҡараусы, бер балаһы бар. Өмөтһөҙ шайтан тигәндәй, йәш ҡатын өмөтөн өҙмәне. Авзалетдин иһә уның донъяла барлығын ашап-эскән арала ғына белде. Ишембайҙа бәләкәйҙән бергә уйнап, беренсе кластан бергә уҡыған Фирүзәһе бар бит. Йыш ҡына хат алышып торалар. Яратышып ҡауышыу — киләсәктә бәхетеңде дауам итеү тигән һүҙ. Авзалетдин быны бик яҡшы аңлай.

Бер көндө егет буровойҙан һуңлап ҡайтты. Иҫке роторҙың подшипнигы туҙып, шуны йүнәтеп оҙаҡлағайны ул. Өйгә инеү менән битенә йылы һауа килеп бәрелде, тәмле аш еҫе танауҙы ҡытыҡланы. Авзалетдин, эскәмйәгә ултырып, быймаларын систе лә мейес башына киптерергә ҡуйҙы. Хужабикә өйҙә юҡ ине, фермала ҡунырға ҡалған икән. Йәш ҡатын өҫтәлгә аш килтереп ҡуйғас, Авзалетдин, арығанлығын баҫыу өсөн, сумкаһынан бер ярты араҡы сығарҙы ла, ике стаканға тултырып ҡойоп:

— Әйҙәгеҙ, минең менән ашарға. Минең сумкала «күстәнәс» тә йөрөгән икән, — тине.

Ҡатын ҡаршылашып торманы, стакандың яртыһын эсеп тә ҡуйҙы. Өҫтәлгә сәй килтереп ултыртҡандан һуң малайы янына йоҡларға ятты. Араҡы эскәс, Авзалға бик рәхәт булып китте. Ашыҡмай ғына сәй эсеп, тәмәке тартты ла иҙәнгә йоҡларға ятты. Ныҡ ҡына арыуға ҡарамаҫтан, күҙенә йоҡо эленмәне. Тәүҙә буровой, артабан был айҙың планын нисек үтәү тураһында уйланды.

Бына бер саҡ ишек тауышы ишетелде. Күрәһең, йәш ҡатын тышҡа сыҡты. Уйҙары тарҡала төшкән Авзалетдин башын бороп ҡараһа, тәҙрәнән төшкән ай яҡтыһында аҡ ойоҡ кейгән ике аяҡ күҙенә салынды. Бәрәмәс, был Надяның аяҡтары бит. Ай яҡтыһында бик матур күренәләр. Йыраҡ та түгел, ҡулыңды яртылаш һуҙһаң, барып та тейә. «Был балтырҙарҙы бармаҡ осо менән булһа ла һыйпап ҡарарға ине. Нисек инде сит-ят ҡатын-ҡыҙ тәненә ҡул

тейҙерәһең? Шулай ҙа әкрен генә һыйпап ҡарайым әле. Юҡ, йә хужаһы әллә нәмә уйлап, тибеп ебәрер. Әллә, был егет бер ҡулы менән булһа ла балтырҙарымды һыйпап ҡуйһын, тип торамы икән?» кеүек әллә ниндәй уйҙар бөтөрөлдө егеттең башында. Бына ул ҡулын толоп аҫтынан сығарҙы ла балтырҙы һыйпаны, ә аяҡтар ҡуҙғалманы ла. Тимәк, был ризалыҡты аңлата. Егет балтырҙың береһен эләктереп, үҙенә табан тартты. Надя йомшаҡ ҡына: «Ярамай, ярамай», — тип ҡарағайны ла, Авзалетдин уны ысҡындырманы, хатта үбеп тә алды.

— Авзалетдин, Авзальчик, һиңә беренсе күреүҙән уҡ ғашиҡ булдым, — тип һөйләнә-һөйләнә, ҡатын уның үҙен ҡосаҡлап үбергә кереште. Араҡы үҙенекен эшләне. Ул кешегә күп уйланырға форсат ҡалдырмай шул. Ҡыйыу ҙа, бай ҙа, камил да булып китәһең. Был минуттар Надя өсөн ғүмеренең иң ләззәтле, иң камил минуттары, ә Авзал уның идеалы булып ҡалҡты. Уның өсөн хатта йәнен бирергә риза ине йәш ҡатын.

Сәғәт 7-лә Авзалетдин уянды. «Төшөммө был, әллә өнөммө, — тип уйланды. Иң яратҡан кешеһе — Фирүзәһенә хыянат итте бит. Ә уны араҡыға ғына һылтап булмай. —Атай мәрхүм уны бер ваҡытта ла эсмәгән. Улына ла васыят итеп ҡалдырғайны. Өшөп ҡайтҡас, эселде шул... Ну, был ҡатындар! Мәкерле йәндәр! Һеҙҙең мәкерегеҙ кемде генә юлдан яҙҙырманы ла кемдең генә башына етмәне».

Надежда иһә шатланды ғына. Ҡатындарға тәбиғәт үҙе һөйөргә, һөйөләргә һәләт биргәндер инде. Ана ул нисек йүгереп йөрөп Авзалға ашарға әҙерләй. Нисәмә ай ошонда фатир төшөп йөрөй, әммә бөгөнгө кеүек хәстәрлекте күргәне юҡ. Өҫтәлгә нимәләр генә ҡуйылмаған: тәмле борщ, тауыҡ ите, сәйгә ҡорт балы ла бар. Быларҙы ҡасан әҙерләп өлгөргән? Йәш ҡатын уны «өф» итеп кенә, нимәгә күҙе төшә, шуны алып бирергә әҙер тора. Иҫәнғолов иһә, киреһенсә, нисек тә был ҡатындан ҡотолоу юлын эҙләне. Әммә аяҡтары уны тыңламаны, йәш ҡатын янына алды ла килде. Фирүзәһе йыраҡ, ә был ҡатын уны иркәләй, ярата. Уның бөтә теләктәрен үтәргә генә тора. Хәйер, Авзалетдин да аҡрынлап уға өйрәнә кеүек.

Ул иптәштәре менән икенсе ауылға күсеп килгәс, Надежда ла эйәреп килеп, бергә йәшәй башланы. Ә өс айҙан һуң Авзалға ауырға ҡалғанын белдерҙе. Быныһы әсәгә шатлыҡ булһа, атай буласаҡ кешегә ҡайғы ғына өҫтәне. Ул Надянан арыныуҙан өмөт өҙмәне: биҙҙереү өсөн һуңлап та ҡайтҡыланы, байрамдарҙы ситтә ҡунаҡ итте. Ләкин маҡсатына етә алманы. Надя, һоро күҙҙәрен мөлдөрәтеп, уны ҡосаҡлап иланы илауын, әммә бер ауыр һүҙ әйтмәне. Кейем-фәлән алырға аҡса ла һораманы. Авзал ни теләй, шуны эшләп йөрөнө. Унынсы ай тигәндә ҡыҙ бала донъяға килде. Авзалетдин уны өҙөлөп ятаһа ла, әсәһен һөймәгәс, тәҡәтте эштә генә тапты. Ғаилә тормошон үҙ ағышына ҡуйҙы.

Йәш әсә иһә түҙемлеге, баҫалҡылығы менән алдырҙы. «Ничево, өйрәнер әле, сабыр булырға кәрәк», — тип уйланы. Хыялдары тиҙ тормошҡа ашты: ҡыҙ тыуып, бер нисә ай үткәс, никахҡа инделәр. Ҡыҙға «Иҫәнғолова Рима Авзаловна» тип тыуыу тураһында таныҡлыҡ алдылар. Надежда Федоровнаның сабырлығы, ирен хөрмәтләүе, уның хаталарын ғәфү итә белеүе ғаиләне нығытты, ғүмерлек итте.

— Һеҙҙе Шаим быраулау конторaһына директор итеп тәғәйенләргә булдыҡ. Нисек ҡарайһығыҙ, булдыра алырһығыҙмы? — тине бер саҡ «Төмәннефтегаз» берекмәһе начальнигы Арон Слепян.

Иҫәнғолов бындай тәҡдимде күптән көтөбөрәк йөрөй ине.

— Мин риза, — тип яуапланы ул.

— Эш яуаплы һәм почетлы. Себер — Башҡортостан түгел. Унда Ағиҙел буйындағы һандуғаслы туғайҙар юҡ, —Арон Маркович ҡаштарын йыйырҙы. — Шул тәбиғәт шарттарын еңеп сығырлыҡ инженерҙар, эшселәр кәрәк булаҫаҡ. Ғаиләң менән иртәгә үк самолетта Урайға осорға кәрәк. Ышанысымды аҡларһығыҙ, тип уйлайым. — Слепян хушлашты.

АН-2 самолеты аэропортҡа килеп төшкәс тә, пассажирҙар үҙ юлы менән ашығып, сумаҙандарын күтәреп таралыша башланы. Арттараҡ ҡалған бер ир генә аэродромды әйләнеп сыҡты ла вокзал яғына табан юл тотто. Урта буйлы, йыуантыҡ кәүҙәле, түңәрәк ҡуңыр йөҙлө был ирҙең бында беренсе тапҡыр килгәне һиҙелә. Әммә ул аэровокзалға инеп торманы, юл ыңғай бер ҡатындан нимәлер һорашты ла яҡындағы ҡасабаға юл тотто.

Бындағы йорттарҙың күбеһе щиттан эшләнеп, башы таҡта йәки шифер менән ябылған. Урам ике рәт булып теҙелгән ҙур-ҙур бер ҡатлы дүртәр фатирлы йорттарҙан тора икән. Түбәндә боролоп-боролоп йылға ағалыр инде — ҡар аҫтынан яр ситтәре күренеп тора. Яр ситләтеп ҡарағай урманы башлана. Алдараҡ тракторҙары, крандары менән база күренә. Боҙ ирегәндә көтөп, яр ситендә катерҙар ултыра. Һулдараҡ барак тибындағы оҙон йорт нефть разведкалау экспедицияһының базаһылыр, моғайын. Яңы килгән кеше туптура шул яҡҡа атланы.

Контораға инеп, директорҙың яңғыҙы икәнен белгәс, уның янына инде. Начальник бүлмәһе иркен. Иҙәнгә шаҡмаҡлы ленолиум түшәлгән. Стена буйында — оҙон өҫтәл. Ишеккә ҡаршы стена эргәһендә ике тумбочкалы өҫтәл артында йыуантығыраҡ кәүҙәле, оҙонсараҡ йөҙлө етәксе ултыра.

—Иҫәнғолов Авзал Ғиззәтович булам. — Килеүсе уң ҡулын һуҙҙы.

—Морозов Иван Федорович, — тип яуапланы начальник. — Себер бик киң, бөтәбеҙгә лә эш етерлек. Төҙөлөш өсөн урман да өҫкә ауып бара, — тине ул артабан һөйләшкәндә. — Ә нефткә килгәндә, Төмән өлкәһе нефть өҫтөндә йөҙә, тиһәң дә, хата булмаҫ.

Бер аҙҙан Морозов баш инженер менән баш геологты һәм бүлек етәкселәрен саҡырып, Иҫәнғолов менән таныштырҙы. Производство бүлеге начальнигы Баһауетдинов:

—Бырау лау контораһы килгәс, беҙгә ни эшләргә инде, Иван Федорович? — тигән һорау ҡуйҙы.

— Ҙур нефть ятҡылыҡтарын тапҡас, хужаларына тапшырырға. Төмән өлкәһе бик ҙур, ике Франция һыйырлыҡ. Беҙгә, разведчиктарға, эш етерлек, балаларыбыҙға ла ҡалыр әле,— тине Морозов. —Авзал Ғиззәтовичты эш тәжрибәһе, геологик ҡатламдар, хеҙмәтте ойоштороу — һәммәһе менән дә таныштырығыҙ.

Баш геолог бүлмәһенә ингәс, Иҫәнғолов, структура картаһын алып, нефть ятҡылыҡтарының майҙанын ҡарап, топографик карта менән сағыштырҙы.

— Ятҡылыҡтарҙың дүрттән өс өлөшө һаҙлыҡта. Унда нисек бырауларға? — тине ул, аптырап.

— Ничего, өйрәнерһегеҙ, — тине баш геолог. — Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй. Беҙ скважиналарҙы ҡыш, һаҙлыҡ туңғас, быраулаНыҡ. Яҙ, иретә башлау менән, ысҡынабыҙ. Бик оператив эшләргә кәрәк.

— Нефть ҡатламы ҡалынмы? —Иҫәнғоловты был да ҡыҙыҡһындырҙы.

—Егерме метрға етә. Урыны менән—егерме биш. Бындағы нефть Башҡортостан һәм Татарстан нефтенән күпкә сифатлыраҡ, көкөртһөҙ, — тине Сторожев.

Көндөң үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды Иҫәнғолов. Тик бына ҡайҙа ҡуныrға икәнен хәстәрләмәгән.

— Дөйөм ятаҡ йә ҡунаҡ йорто бармы? — тип һораны ул баш геологтан.

— Уныһын ғына табырбыҙ. — Күп тә үтмәне, Александр Афанасьевич ҡағыҙ тотоп килеп инде һәм техниктар ятағына алып барасағын әйтте. Үҙе лә шул яҡта тора икән.

Иртәгәһен иҡтисад һәм план бүлегендә булып, Иҫәнғолов экспедицияның ниндәй тармаҡтарҙан тороуы менән ҡыҙыҡһынды. «Ярайһы икән, — тигән һығымта яһаны ул, — меңгә яҡын кеше эшләй. Ундан ашыу катерлы йылға флоты бар. Бик күп ҡорамалдар вертолет менән ташылып, сығымдарҙың иң күбеһе транспортҡа китә, сөнки юл юҡ, гел һаҙлыҡ. — Таныша торғас, эш хаҡтарына ла барып етте. Быраулаусы айына — 430, уның беренсе ярҙамсыһы 360 һум ала. — Яҡшы, бындай хаҡ өсөн эшләргә була», — тигән уй килде.

Төшкө ашҡа Иҫәнғолов ашханаға йүнәлде. Апрель ҡояшы ҡарҙы нығ ҡына епшеткән, өй баштарынан тамсылар тама. Ашхана урман киҫеүселәрҙеке икән. Менюға щи, туҡмас, һөткә бешерелгән дөгө ашы, котлет, гуляш. Бөтәһе лә яңы иттән бешерелгән, икмәге лә тәмле генә.

Ул әйләнеп килгәндә, Баһауетдинов ҡағыҙҙар ҡарап ултыра ине. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас:

— Башҡортостандан күптән килдегеҙме? — тип белеште. — Унда тормош нисек? Һағындыра тыуған яҡтар. Радио аша Өфөнө тотоп та булмай. Үҙебеҙҙең йыр-таҡмаҡтарҙы тыңлаһаң ине.

Авзал Ғиззәтович, шаяртып:

— Башҡортостан бер ҡайҙа ла китмәгән, үҙ урынында. Яңауыл районы ла Башҡортостандың баш осонда ғына тора, — тине.

— Тыуған яҡҡа ҡайтып, туғайға сығып, хуш еҫле үлән өҫтөндә аунар инем. — Баһауетдинов көрһөндө. — Беҙҙең Яңауыл яҡтары, Беүә буйҙары үҙе ни тора!

Иртәгәһен Авзал Ғиззәтович леспромхоз участкаһы начальнигы менән төҙөлөш материалдары, уларҙы килтереү тураһында һөйләште, бүрәнәләр складына барып әйләнде. Өйөм-өйөм ағасты ҡар күмгән, күбеһе икенсе йәки өсөнсө сортлы. Леспромхоз вәкиле Геннадий Петрович менән ҡасабаның аэропорт яҡ осона сығып әйләнделәр. Аэропорттан һул яҡлап йылға аға. Төҙөлөш өсөн бында урын юҡ. Бер яҡ оста леспромхоз эшселәренең торлағы урынлашҡан. Кем нисек теләй — шулай төҙөгән. Матур итеп һалынғандары юҡ. Барыһы ла тип әйтерлек тәпәш, ҡапҡалары — кәртәнән. «Быларҙың етәкселәре шундай булғандыр инде,—тип уйланы Иҫәнғолов. — Перспективаны һиҙемләй белмәгәндәр». Ашхананан йыраҡ түгел теҙелгән стандарт йорттар матур күренә. Уларҙа йәшәүе лә рәхәттер. Икенсе яҡ остағы геология разведчиктарының йорттары ла бер иш — фин йорттары. Иҫәнғолов ҡасабаның икенсе осондағы ҡарағайҙар менән ҡапланған ҡалҡыулыҡты үҙ итте:

— Бына ошонда төҙөргә була.

Йыл аҙағына тиклем контораны ойоштороп бөтөргә кәрәк, ваҡыт бик аҙ ҡалып бара. Ятаҡҡа килгәс, ул дәфтәрен сығарып, ҡасабаның планын ҡарай башланы. «Экспедиция ятағынан алыҫ түгел бер йортҡа нигеҙҙе хәҙер үк һалырға кәрәк, — тигән уйға килде. — Леспромхоздың кирбес заводы янында техника йүнәтеү өсөн бина ла кәрәк буласаҡ. Төҙөлөш ағастары бында яҡын. Һыу юлы менән быраулау, токарь станоктары килергә тейеш». Материалдарҙы урынлаштырыу өсөн склад тураһында ла һөйләшеп килеште.

Иртәгәһен, эш тураһында белешеп, өс кеше килде. Өсөһөнән дә араҡы еҫе аңҡып тора.

— Беҙ Геннадий Петровичтың әйтеүе буйынса килдек, — тине оҙон буйлы өлкәнерәге. — Һеҙгә эшселәр, балта оҫталары кәрәк икән.

Авзал Ғиззәтович, ниндәй яуап бирергә быларға тигәндәй, аптырабыраҡ ҡалды. Әле эшкә инергә килгәндә лә араҡы еҫе аңҡытып йөрөгән кешеләрҙән нимә өмөт итәһең?

— Документтарығыҙҙы бирегеҙ! — Хеҙмәт кенәгәләрен ҡарап сығыу ҙа уны ҡәнәғәтләндермәне. Бер урында күп тигәндә бер йыл эшләгәндәр. Икеһе хеҙмәт тәртибен боҙған өсөн эштән ҡыуылған. Иҫәнғолов оҙаҡ икеләнде: «Алырғамы-юҡмы?»

— Һәр кем хеҙмәт тәртибен һаҡларға бурыслы. Эшкә эсеп килергә, эш ҡалдырырға ярамай. Ошондай шарттарға күнһәгеҙ, эшкә алам, — тине.

— Ничего, иптәш начальник, беҙ кисә леспромхоздан расчет алдыҡ. Шунан эстек инде. Башҡа улай булмаç. Тырышып эшләрбеҙ, — тиеште тегеләр.

Уларға эш урынын күрһәтеп һәм материалдар менән тәьмин итеп, Авзал Ғиззәтович Төмәнгә юлланды. Берекмә начальнигы менән һөйләшә торған бик күп мәсьәләләр килеп тыуҙы. Һәр эште үҙ ваҡытында башҡарырға тырышты ул, ашыҡты. Беренсе буровойҙы быйыл уҡ төҙөп, әҙәм заты йөрөмәгән Себер һаҙлыҡтары аҫтында ятҡан нефть байлыҡтарын үҙләштерергә кәрәк. Үҙе эшләп киткән «Башвостокнефтеразведка» тресынан юғары әҙерлекле эшселәр, тәжрибәле инженерҙар килеүенә ул ышана. Беҙҙең күп милләтле совет халҡы бер-береһенә ярҙам итеп өйрәнгән инде. Башҡортостанда нефть ятҡылыҡтары табылғас, Әзербайжандан бик күп тәжрибәле нефтселәр килде. Хәҙер Башҡортостанда үҙенең кадрҙары ла үҫеп сыҡты. Квалификациялы эшселәр, бик күп инженерҙар, техниктар илебеҙҙең төрлө мөйөштәрендә эшләй. Авзал Ғиззәтович дуҫтарына, таныштарына хат яҙҙы: килһендәр Себер нефть ятҡылыҡтарын үҙләштерергә. Пландары ҙур уның. Бөгөн 10 апрель, май аҙағына тиклем йөҙҙән ашыу эшсе алырға кәрәк. Ә бөгөнгә улар өсәү генә.

1964 йылдың йәйе лә килеп етте. Ҡайҙа ҡарама — һыу, һыу. Нишләгән был тәбиғәт? Урманда ҡар күптән иреп бөткән, ә йылғала һыу артҡандан-арта. Складтар бағаналар өҫтөндә ултырһа ла, иҙәндәрен һыу баҫҡан. Яр ситенә бушатылған торбалар ҙа һыу эсендә. Уларҙы машинаға тейәп, буровойға илтергә ине. Бына-бына ҡорамалдар, тракторҙар, машиналар тейәлгән икенсе баржа килергә тейеш. Уларҙы бушатырға урын әҙерләргә кәрәк. Авзал Ғиззәтовичтың эше көндән-көн тығыҙлана.

Икенсе баржа июнь урталарына килеп етте. 1500 тонналы судно Конда йылғаһын бөтөнләй тултырып тигәндәй килеп туҡтаны. Йөк бушатыуҙы вышкалар монтажлау цехы етәксеһе Виневҡа ҡуштылар.

Был эш өс көнгә һуҙылды. Унан ҡорамалдарҙы буровой ултырта торған урынға ташый башланылар. Бульдозер менән мүкте таҙартып, ҡырғыслап алдылар. Тракторҙың сылбыры ла күренмәй, бата ла ҡуя. Фундамент аҫтына өсәр ҡат бүрәнә теҙҙеләр. Хоҙайҙың рәхмәте, тәбиғәт бында ағасты мул үҫтергән.

Дүртенсе көндө вышканы йыйырға тотондолар. Төҙөлөш бик ҡыҙыу төҫ алды. Торлаҡ йорттар, сәнәғәт биналары, магазин, ашхана төҙөүгә бөтә көс йүнәлтелде. Шәмдәй матур ҡарағайҙарҙы урында уҡ йығып, ике фатирлы йорттар һалалар. Хәҙер Иҫәнғоловты төҙөлөш материалдары етешмәүе борсой. Бигерәк тә таҡта менән кирбес. Икешәр фатирлы һигеҙ йортто бөтөрөп киләләр, ләкин түбә, түшәм һәм иҙәнгә таҡта юҡ. Быраулау конторaһында ике йөҙләп кеше эшләй, барыһы ла фатирһыҙ. Бөтәһе лә вагондарҙа, палаткаларҙа

йәшәргә мәжбүр. Араларында ғаиләләре менән килгәндәр ҙә бар. Халыҡ көн һайын арта. Бөтә ҡасабаға — бер ашхана. 7-8 меңләп кешенең бөтәһе лә тиерлек шунда йөрөй. Барһаң, сәғәт ярым көтөргә кәрәк. Икмәк тә етешмәй, сөнки пекарня бик бәләкәй. Эшселәр араһында эскеселәр, хулигандар ҙа бар.

Авзал Ғиззәтович нефть һәм газ сығарыу идаралығы (НГДУ) начальнигы Журавлев менән йорттар төҙөү планын ҡарап, дүртәр фатирлы йорттарҙың нигеҙен билдәләне.

— Һеҙгә дүртәр фатирлы 28 комплект йорт килгән. Беҙҙең ике коллектив өсөн дә тәғәйенләнгән, —тине Иҫәнғолов. —Уларҙы тигеҙ итеп бүлешергә кәрәк. Эшселәр һанына бүлһәң, халыҡ бер сама тиерлек. Шулай булғас, ун дүртәр йорт тейә.

Журавлев сырайын һытты:

— Йорттар баржаларҙа бит. Уларҙы бушатаһы бар.

— Бергәләп бушатайыҡ. Тәүлек әйләнәһенә, — тине Авзал Ғиззәтович. — Аҡ төндәр башлана. Көндөҙ — эшселәр, ә төнөн инженер-техник хеҙмәткәрҙәр эшләр.

— Яҡшы. — Журавлев ҡаршылашманы. —Инженерҙарығыҙҙы бөгөн үк ебәрегеҙ, беҙ үҙебеҙ уларҙы ойошторорбоҙ.

Төҙөлөш барған урынға Шаим быраулау контораһының бар халҡы йыйылған. Ҡайһыһы таҡта өҫтөндә, ҡайһыһы бысылған бүрәнәлә, ҡайһыһы бүкәндә ултыра. Халыҡ алдында—бәләкәй генә өҫтәл һәм ултырғыс. Контораның йыһазы хәҙергә шул ғына. Тәүге йыйылышта һүҙ коллективтың бурыстары һәм тәртип тураһында барҙы.

—Иптәштәр, беҙ бында партиябыҙҙың, хөкүмәтебеҙҙең хәстәрлеге буйынса илебеҙҙең нефть байлыҡтарын арттырыу өсөн йыйылдыҡ,—тине Иҫәнғолов, һүҙ башлап. — Үҙегеҙ беләһегеҙ, хәҙергә йәшәү шарттары бик ауыр. Бер вагондың яртыһында икешәр ғаилә тора. Ашхана, магазиндар ҙа бик аҙ. Беҙҙең төп бурыс— тиҙ арала торлаҡ йорттарҙы төҙөп, быйыл 170 ғаиләне торлаҡ менән тәьмин итеү. Әлбиттә, тырышып эшләргә кәрәк. Материал менән тәьмин итербеҙ, эш хаҡын да түләрбеҙ. Икенсенән, беҙгә быйыл 5000 метр тоҡом быраулау планы бирелгән, йәғни өс скважина. Монтажсыларға кәмендә дүрт буровой ҡороу бурысы тора. Эш бик күп, тырышлыҡ, ныҡышмалыҡ кәрәк. Тәртип тураһында ла онотorға ярамай. Тырышып эшләүселәр менән бергә ялҡауҙар ҙа, эскеселәр ҙә юҡ түгел. Үҙҙәре эскәне етмәгән, иптәштәрен дә эйәртергә тырышалар. Ошо йыйылышта һайланасаҡ профсоюз ойошмаһы, иптәштәр суды, стена гәзите редакцияһы администрация менән берлектә тәрбиәүи эштәр алып барырға бурыслы. Язаға тарттырыу — һуңғы сара. Тәртип урынлаштырыу һәр эшсенең иптәштәрсә бурысына әйләнергә тейеш.

Артабан һорауҙарға күстеләр.

—Урайҙа бер генә мәктәп бар, ул ғына етмәҫ, —тине быраулаусы Рәхимов. — Ошо турала етәкселәр ни уйлай?

Һорауҙар күп булды. Ҡайһыларына яуап ҡайтарғанда Иҫәнғолов үҙе лә аптырашта ҡалды, сөнки бындай ҙур төҙөлөштө ул беренсе тапҡыр ғына ойоштора. Талант, һиҙгерлек, алдан күрә белеү һәләте кәрәк.

—Иптәштәр, һорауҙарығыҙ хаҡлы. Ҡайһы берәүҙәр беҙҙең төҙөлөш темптарына ышанып та етмәй, — тине ул, йомғаҡлап. — Мин уны һиҙеп торам. Берегеҙҙе лә көсләмәйем, кем кисен үҙенә торлаҡ төҙөргә теләмәй, һигеҙ сәғәт кенә эшләһен. Унынһы — һеҙҙең ихтыярҙа. Ә инде эшләгән кешегә бөтә шарттар тыуҙырырбыҙ.

Тубыҡҡа тиклем бата-сума, монтажсылар тәүге буровойҙы төҙөп бөтөрҙө. Эш ауыр барҙы, сөнки бөтәһе лә ҡул көсө, рычагтар ярҙамында башҡарылды. 20 тоннаға яҡын ҡорамалдар урынлаша торған үҙәк блокты ике метрға күтәреп ултыртыуы, 20 тонналыҡ лебедканы шул блок өҫтөнә мендереүе еңелдән булманы. Монтажсылар бригадиры Ваһапов, быраулау оҫтаһы Григорий Петров, баш механик Мансуров, баш инженер Шәмсетдинов, баш энергетик Владимир Комаров, монтажлау цехы начальнигы Юрий Винев иртә менән буровойҙы ҡарап йөрөй. Ҡабул итеү комиссияһы ағзалары улар, һәр нығытылған баҫҡысҡа, майҙансыҡҡа, болтҡа иғтибар итәләр. Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләренә яраҡлығын ҡарайҙар. Ауыр шарттарҙа монтажланһа ла, буровойҙың сифаты хәүефһеҙлек техникаһы йәһәтенән ышаныслы булырға тейеш.

Төшкә табан баш инженер, комиссия ағзаларын йыйып, етешһеҙлектәр тураһында һорашты. Улар күп түгел ине. Ул арала буровой янына машина килеп туҡтаны. Уның кабинаһынан сыбар фуражкаһын баҫыбыраҡ кейгән Иҫәнғолов ашыҡмай ғына төшөп, буровойға ҡарай атланы. Комиссия ағзалары ла уның артынан эйәрҙе. Контора директоры һәр ҡорамалды, уның ултырышын ентекләп күҙҙән үткәрҙе, сөнки яңы ерҙә тәүге буровой һәм уның уңышлы эшләүенән бик күп нәмә тора: эшселәрҙең хеҙмәт хаҡы, кәйефе, тәртибе. Шулай уҡ бөтә контораның абруйы һәм инженер-техник хеҙмәткәрҙәренең эшкә һәләте.

—Был мөйөштә брезент ни эшләп насар беркетелгән? — Иҫәнғолов ҡаштарын йыйырҙы. —Төҙәтегеҙ! Беренсе буровойҙы нисек монтажлаһағыҙ, шулай китер. Производство культураһы булырға тейеш. Бына иҙәндә бер сантиметр ара ҡалған.

— Хәҙер төҙәтербеҙ, хәҙер, — тине Винев.

— Шулай ҙа монтажсылар молодцы, һәйбәт эшләгәндәр, — тип ҡуйҙы баш инженер. —Шарттар ауыр бит.

— Уныһына һүҙ ҙә юҡ, тик бөтә нәмә сифатлы булырға тейеш, — тине директор. — Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, конференция үткәреп алайыҡ. Яҡты күҙҙә буровойҙы ебәрергә кәрәк.

Конференция ике сәғәттән ашыу барҙы. Һуңғы һүҙҙе Иҫәнғолов алды ла, күҙлеген күтәрә биреп:

— Күптәрегеҙ менән Башҡортостанда беҙ бергә эшләнек, —тип һүҙ башланы. —Һеҙҙең бригадаға иң почетлы, иң яуаплы эште башлап ебәреү йөкмәтелгән. Белеп тораһығыҙ: Себер нефть ятҡылыҡтарын бер ҡасан да булмаған тиҙлектә үҙләштерергә кәрәк. Мәҫәлән, биш —ете йылда. Ятҡылыҡтарҙың запасы буйынса донъяла Себергә тиңе юҡ. Эйе, тормош ауыр, әммә күбегеҙ Октябрь байрамы алдынан фатирлы буласаҡ. Бер-ике йылдан — бөтәгеҙ ҙә. Ауырлыҡтарҙы еңеү өсөн барығыҙға ла ныҡышмалы, түҙемле һәм тырышып эшләү кәрәк.

...1964 йылдың 2 авгусы. Теүәл 16 сәғәттә бөтә бригада буровойға йыйылды. Быраулау оҫтаһы Петров, быраулаусы Рәхимов, участка начальнигы Наил Сәлихов бөтә ҡорамалдарҙы яңынан ҡарап сыҡты. Бына Рәхимов насосты ебәреүгә сигнал бирҙе. Ротор янында торған Иҫәнғолов, Шәмсетдинов, Сәлихов һәм башҡалар быны шатланып ҡаршы алды. Был бит — нефть биреүсе беренсе скважинаға сигнал! Ротор зыр әйләнеп китте лә, квадрат күҙгә күренеп ер аҫтына инә башланы. Бригада ағзалары, конференцияла ҡатнашыусылар ҡул сабып, бер-берећен ҡосаҡлап шатлыҡтарын бүлеште. Квадратты бороп бөткәс, торба бырауын төшөрҙөләр. Квадрат ер тоҡомона тағы ла шәберәк инә башланы.

— Бында торбаларҙы ялғап ҡына өлгөр, бик шәп бора лаһа, — тине Петров, шатлығын йәшермәйенсә.

— Ер тоҡомо бында йомшаҡ, һаҡ булырға кәрәк. Емерелеп ҡуйыуы ихтимал, — тип иҫкәртте баш инженер.

Ул саҡта Петровтың Бөтә Союзға рекорд ҡуйырын кем белгән? 1501 метр тәрәнлектәге скважинаны 89 сәғәттә быраулааны ул.

Оло баржала брустан эшләнгән дүртәр фатирлы 28 йорт килеп етте. Эшселәр өсөн бик шатлыҡлы хәбәр. Был йорттарҙы йыйыу еңелерәк һәм тиҙерәк булыр, сөнки таҡталарына саҡлы комплектланған. Тәҙрә рамдары эшләп тораһы ла түгел.

— Эдуард Константинович, беҙгә нисә йорт бирәһегеҙ? — тип һораны Иҫәнғолов идаралыҡ начальнигы Журавлевтан.

— Хәҙергә әйтә алмайым. — Начальник сырайын һытты.

— Нисек инде әйтә алмайһығыҙ? — Иҫәнғолов ныҡышты. — Минеңсә, йорттарҙы бер тигеҙ бүлергә кәрәк.

Журавлев уның ҡылығын оҡшатманы. Бындағы ер байлығының да, төҙөлөш эштәренең дә хужаһы ул. Финанс та уның ҡулында. Ҡала төҙөлөшө лә, тормош кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеү ҙә уның эшмәкәрлегенә бәйләнгән. Иҫәнғоловтың тырышлығы, ҡыйыулығы Журавлевты көнләштерә, сөнки контора эшселәрен фатир менән тиҙерәк һәм күберәк тәьмин итһә, юғарылағы етәкселәр алдында үҙенең абруйы төшөүе ихтимал. Быны Журавлев бик яҡшы аңлай һәм шуның өсөн дә уның брус йорттарҙы быраулау конторалына биргеһе килмәй. Төрлө һылтау табырға тырыша.

Иртәгәһен причалда бик ҡыҙыу эш башланды. Бер башта — быраулау конторалының бригадаһы, икенсеһендә — НГДУ эшселәре. Кран, башҡа механизмдар ҙа юҡ. Һәр брусты ике кеше ике башынан тотоп, ике кешенең яурынына һалып тора.Ҡарағай брустар ярайһы ғына ауыр. Шулай ҙа йыр, шау-шыу, уйын-көлкө менән эшләйҙәр. Бер сәғәттән һуң — ун минут ял.

Төшкә табан улар янына Журавлев менән Иҫәнғолов килде. «Ай-һай, күп тейәлгән икән шул. 1500 тонналыҡ баржа, тимәк, шул уҡ сама ағас тигән һүҙ. Кеше башына көнөнә ун кубометр бушатҡанда ла, 150 кеше кәрәк булыр», — тип фекер йөрөттө Авзал Ғиззәтович.

— Быны беҙ ун көнһөҙ бушатып бөтөрә алмайбыҙ, — тине ҡаҡса йөҙлө, ҡыҫҡа буйлы эшсе. — Төшөп йөрөүе лә ҡыйын, текә.

— Текә? Унылын ҡарарға кәрәк. Бабкин! — тине Иҫәнғолов. — Ағас бар бит, шуны түшәгеҙ ҙә күтәрегеҙ. Шулай иткәндә, еңелерәк булыр. Тәүҙә эш урынын яҡшылап әҙерләргә кәрәк. Унан һуң ғына тотонорға.

Эшселәрҙе инженер-техник хеҙмәткәрҙәр алмаштырҙы. Быраулау конторалын — Иҫәнғолов, НГДУ-ныҡыларҙы Журавлев алып килде. Иҫәнғолов менән Феоктистов брусты күтәреп һалып тора, баш инженер Шәмсетдинов менән Комаров уларҙы, ҡулбаштарына күтәреп, баржанан төшөрә. Ҡурғаштай ауыр брус ныҡ итеп баҫһа ла, түҙергә тура килә. Бер саҡ бүрәнә күтәреп торған Чобиттың шытырлап салбары йыртылып китте.

— Ха-ха-ха! Иван Григорьевич, әллә борсаҡ ашын күберәк ашаныңмы? Һимереп салбарыңа һыймай башланың, — тип көлөштөләр.

— Көлөгөҙ әле көл. Минең хәтле ыштанығыҙ туҙғансы берегеҙ ҙә эшләмәй, — тип яуапланы Чобит. Оҫта һүҙле ул, бер ҙә юғалып ҡалмай. Оҙон буйлы, йоҡа кәүҙәле Комаровтан көлөп:

— Володя, мин һинең өсөн ҡурҡам, аяҡтарың бик нескә, бүрәнә күтәргәндә тегеләй ҙә былай бөгөлөп китә. Һынып ҡуймаһа ярар ине, — тине.

Йорттар өсөн урындар билдәләнгәс, төҙөлөш урындарына ташырға тотондолар. Тик Журавлев һаман да үҙенекен итә: быраулау конторалына йорттар ҙа,

урын да юҡ. Иҫәнғолов ярҙам һорап Төмәнгә берекмә начальнигына китте. Ул ҡайтҡансы төҙөлөш майҙанын һаҡлау өсөн, Чобит көн һайын иртә менән шунан йөрөп әйләнә. Журавлев менән мөнәсәбәттәр ҡырҡыу, үҙен аямай эшләй, ҡатышмаған ере юҡ. Ул яҡтан афарин, әлбиттә, тик бығаулау конторАһын ситкә тибә лә тора.

Бер көн шулай баржа менән алты вагон килгәс, «быраулаусыларға өс вагон бирергә кәрәк» тигәнгә лә Журавлев ҡаршы сыҡты. Шәмсетдинов вагондарҙы хәйлә менән алырға булды.

— Рафаиль Ханович, ғәҙел бүлешәйек, — тине ул НГДУ-ның баш инженеры Ханнановҡа. — Үткәнендә лә беҙгә һигеҙ вагондың икеһен генә бирҙегеҙ.

— Юҡ, бирә алмайбыҙ, үҙебеҙгә етмәй, — тип баш тартты Ханнанов.

— Ул ваҡытта тартып алабыҙ. Беҙҙең Башҡортостанда шундай йола бар. — Шәмсетдинов бирешергә теләмәне.

Күп тә үтмәне, ул йөк машинаһына һигеҙ ғаилә тейәп килтереп, дүрт вагонға урынлаштырҙы. «Әйҙә, хәҙер вагондарҙы баржанан бушатһындар инде».

...Августың эҫе көнө. Саҡ ҡына ел сыҡһа йә машина үтһә, урамда ҡом бураны уйнай ҙа китә. Ваҡ ҡына ҡом ҡолаҡ-танауға, күҙгә тула. Аэропорт янында КПСС-тың район комитеты секретары Плесовских, быраулау конторАһы директоры Иҫәнғолов, баш инженер Шәмсетдинов, участка начальнигы Сәлихов үҙ-ара һөйләшеп тора. Плесовских район тураһында һөйләй:

— Конда — Төмән өлкәһенең ҙур ғына районы. Иң ҙур леспромхоз да ошонда. Болансылыҡ совхозы, балыҡсылыҡ артеле бик яҡшы эшләй. Бына хәҙер ауыр индустрия вәкилдәре — һеҙ килдегеҙ. Нефть сәнәғәте үҫеү менән районДың йөҙө лә үҙгәрер, тип уйлайбыҙ. Беҙгә леспромхозда ағас эшкәртеү комбинаты төҙөргә кәрәк. Әрәм-шәрәм булмаһын.

— Эйе, — тип Иҫәнғолов уға ҡушыла, — тик бында тәбиғәт шарттары бик ауыр. Бигерәк тә юл булмауы. Юл — ул тормош, йәшәү сығанағы. Вертолет, самолет менән генә буровой ҡорамалдарын ташып булмай.

Ул арала ИЛ-2 самолеты аэропортҡа төшә башланы. Унан өлкә комитет вәкиле Севастьянов күренде, барыһы менән күрешеп сыҡты.

— Бына һеҙгә яңы тәжрибәле көс алып килдек, — тине ул. — Таныш булығыҙ: быраулау оҫтаһы Анатолий Шакшин, быраулаусылар Вәғиз Ғарифуллин, Илья Зарубин, Анатолий Процко, Григорий Нечепуренко һәм уларҙың ярҙамсылары.

Башҡортостан быраулаусыларының килеүе хөрмәтенә бәләкәй генә митинг ойошторолдо. Севастьянов тәүге һүҙҙе башланы:

— Иптәштәр, хөрмәтле дуҫтар. Күп быуаттар буйы йоҡоға талған Төмән ере уяна. Хәҙер ҙур нефть ятҡылыҡтарын үҙләштереү өсөн эшселәр генә түгел, хәстәрлекле хужалар ҙа кәрәк. Был почетлы бурысты һеҙгә тапшырабыҙ, хөрмәтле дуҫтар! Хәстәрлекле, һаҡсыл булығыҙ был байлыҡтарға!

Артабан Плесовских, Иҫәнғолов һөйләне. Яуап һүҙен Шакшин әйтте:

— Йылы ҡаршылағанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Ышанысығыҙҙы аҡларбыҙ.

Шакшин бригадаһы икенсе көндө үк баржанан кирбес бушатырға тотонДо. 800 тонналыҡ йөктө носилка менән бушаттылар. Бер пар бейәләй бер көндә туҙа. Әммә береһе лә һуҡранмай, эшләй генә бирә. Кирбестән һуң цемент килде.

Быраулау эштәренә бригада сентябрь аҙаҡтарында ғына тотона алды. Насостың клапандары әлдән-әле ашалып эштән сығып, уны йүнәтеүгә күп ваҡыт китте. Торбаларҙы төшөрөп, бер сәғәт самаһы эшләгәс, компрессор ватылды. Уны һүтеп бөтөүгә баш инженер Шәмсетдинов килеп етте.

— Әйҙәгеҙ, теге ярҙа компрессор бар, — тине ул. — Дизелист менән бер ярҙамсы бында ҡалыр. Һәр 15—20 минут һайын торбаларҙы ҡыбырҙатып торһондар, уларҙың скважина стенаһына йәбешеүе ихтимал.

Ул арала ҡараңғы ла төштө. Болттарҙы, гайкаларҙы һәрмәп һүтергә тура килде. Буровойға әйләнеп килгәнсе сәғәт ярым үтте. Шәмсетдинов компрессорҙы эшкә ебәргәс кенә ҡайтып китте.

Октябрь аҙаҡтарында һалҡындар төшөп, Конданың өҫтөн боҙ ҡапланы. Вахтаны нисек йөрөтөргә? Йоҡа ғына боҙ емерелеп, уның аҫтына китеүең ихтимал. Участка начальнигы Сәлихов әле бер, әле икенсе яҡҡа ҡарап торҙо ла:

—Йә, ниндәй кәңәш бирәһегеҙ, иптәштәр? Боҙ аша сығып булмай, вертолет юҡ. Вахталарығыҙҙың ашарҙарына ла бөткәндер, — тине.

—Наил Ғәбдрәхимович, беҙҙең һунарсылар былдай ваҡытта боҙ өҫтөнә ағас түшәй торғайны,— тип һүҙгә ҡушылды Бабкин. Ул — урындағы хант халҡының бындағы берҙән-бер вәкиле.— Шунан ағас буйлап сығалар ине.

Был эш менән Сәлихов үҙе шөғөлләнде.

—Таҡта ғына әҙерләп тороғоҙ. Һеҙҙең эш түгел был, — тип кенә ебәрҙе. Бер сәғәттән ул ярҙың икенсе яғында ине. Тәүәккәллек, батырлыҡ еңде. Вахта ағзаларын берәм-берәм ҡаршы яҡҡа сығарҙылар.

«Ҡайҙа нескә — шунда өҙөлә» тигән әйтем бар. Фатирҙар етешмәгәнлектән, йәйҙән үк «Комсомолец Алтая» исемле ҙур йылға пароходын ярға тарттырып, торлаҡ урынына файҙаланырға тура килгәйне. Һалҡындар төшкәс, уны пар менән йылыттылар. Бик һалҡын бер төндә пар торбаһы туңып, уны лампа менән иреткәндә стенаға ут ҡапҡан. Фанера стенаны тиҙ арала ялҡын ялмай. Ҡайһы берәүҙәр әйберҙәрен дә алып өлгөрмәй. Эштә булғандар эш кейеме менән генә тороп ҡала. НГДУ пароходта идараһының бер кабинетын урынлаштырғайны, ундағы документтар ҙа янып бөттө.

Бәлә яңғыҙ йөрөмәй икән— Октябрь байрамы алдынан асылырға әҙерләнгән магазин да янып юҡҡа сыҡты. Көйөнөстөң осо-ҡырыйы юҡ ине. Шулай ҙа йәйҙән нигеҙ һалынған йорттар төҙөлөп бөтөп, быраулаусылар өй туйлай башланы. Октябрь байрамы алдынан күбеһе ғаиләләрен алып килде. Монтажсылар, быраулаусыларҙың шатлығы эстәренә һыймай, бер-береһен ҡотлап ҡунаҡ булышалар.

Быраулау оҫталары Григорий Петров, Анатолий Шакшин, Сабит Йәғәфәров һәм башҡалар бруслы йорттарҙан фатир алып шатланды. Байрам алдынан барлығы 170 ғаилә торлаҡлы булды. Буйҙаҡтар өсөн ике дөйөм ятаҡ төҙөлөп, матур итеп йыһазландырылды. Һәр бүлмәлә радиоалғыс, шифоньер, карауаттар ҡуйылды. Быраулау конторaһы үҙенә клуб та төҙөп ҡуйҙы. Хәҙер Урайҙа — дүрт клуб. Леспромхозда — «Лесовик», нефть разведкалау экспедицияһында —«Геолог», төҙөүселәрҙеке —«Романтик», быраулаусыларҙыҡы — «Буровик». Быраулаусылар клубында үҙэшмәкәр түңәрәк бик яҡшы эшләне, башҡортса, татарса коцерттар аҙна һайын ҡуйылып, зал халыҡ менән тулы булды.

Иҫәнғолов, топография картаһын өҫтәлгә һалып, скважиналар урынлашҡан нөктәләрҙе ҡарап сыҡты. Баш инженер Шәмсетдинов, баш геолог Зацепиндар ҙа ошонда.

— Да, 70— 80 процент скважиналар һаҙлыҡҡа тура килә. Уларын ҡыш бырауларға тура килер инде, — тине директор.

— Буровой ҡорамалдарын файҙалы ҡулланыу өсөн хәҙер үк участкаларға бүлеп сығырға кәрәк, — тине Шәмсетдинов.

—Көндәр йылытыу менән уларҙы һаҙлыҡтан ҡоро ергә сығарырбыҙ. Сухой борҙа өс установка ҡалыр, Конданың теге яғында ҡалғанын монтажларға кәрәк булыр, — тине Иҫәнғолов.

Ниндәй генә быраулаусы яҡшы сифатлы долото тураһында хыялланмай икән? Әйтәйек, бер скважинаны быраулап бөтөргәнсе бер бырау еткерергә. Әммә ул һаман да хыял булып ҡала. Әле Шаим нефть ятҡылыҡтарында бер

скважина өсөн һигеҙ бырау тотонола. Был күп түгел, сөнки Башҡортостанда ун тапҡыр күберәк тотонола. Унда ер ҡаты таштарҙан да торһа, Көнбайыш Себерҙә иһә — нефть ҡатламына барып еткәнсе балсыҡ, ҡомло балсыҡ. Шуның өсөн бырауға насадка ҡуйып, тәжрибә үткәреп ҡарарға булдылар. Баш инженер Шәмсетдинов менән производство-техник бүлеге начальнигы Ханов Григорий Петров бригадаһына килеп еттеләр. Буровойҙы ебәрер алдынан бөтә ҡорамалдарҙы ҡарап сығып, хәүефһеҙлек техникаһының үтәлешен тикшерҙеләр. Етешһеҙлектәрҙе мастерға әйтеп, шунда уҡ төҙәттеләр.

Бырауласыларҙан Рәхимов, Костарев, Скрябин һәм башҡалар был яңылыҡты һынап ҡарарға һис һүҙһеҙ ризалашты. «Катер вахтаны ваҡытында йөрөтһөн генә», — тинеләр. Сөнки, ул йыш ҡына һуңлап килгәнлектән, вахтасыларға яр буйында көтөргә тура килә. 1501 метр тәрәнлегендәге скважинаны бырауылап, эксплуатация торбаларын төшөрөп цементлауға барлығы 89 сәғәт китте. Был Бөтә Союз рекорды ине. Конда йылғаһының һул яҡ ярындағы 1525 метрлы скважинаны Сабит Йәғәфәров бригадаһы иһә 66 сәғәттә бырауланы. Был да рекорд! Норма буйынса ун тәүлек бирелә бит. Был бырауылау өлкәһендә бер ҡасан да күрелмәгән тиҙлек булды.

1965 йылда Урай ҡасабаһы ҡала булып китте. Ханты-Манси милли округында нефтселәрҙең беренсе ҡалаһы ине ул. КПСС-тың ҡала комитеты, ҡала Советы башҡарма комитеты һәм башҡа ойошмалар барлыҡҡа килде. Партия ҡала комитетының беренсе секретары итеп башҡорт егете — инженер-бырауласы Наил Сәлихов һайланды.

Төҙөлөш алып барыу өсөн Башҡортостандан Шкапово тресының бер идаралығын ебәрҙеләр. Сәнәғәт объекттары, торлаҡ йорттар төҙөү башланды. Шул йылдың яҙында бырауылау конторалы директоры Иҫәнғоловтың тәҡдиме менән Урайға самолет менән алма үҫентеләре килтереп, халыҡҡа тараттылар. Шулай итеп, һалҡын Себерҙә лә алма ағастары үҫеп, емеш бирә башланы.

Ғөмүмән,1965 йыл ваҡиғаларға бай булды. 12 февралдә ВЛКСМ Үҙәк Комитеты Төмән өлкәһендә нефть һәм газ ятҡылыҡтарын үҙләштереүҙе Бөтә Союз удар төҙөлөшө тип иғлан итте. Йәйге каникулда Башҡортостан, Татарстан республикаларынан, Свердловск һәм Силәбе өлкәләренән бик күп студенттар килеп, төҙөлөштә әүҙем ҡатнашты. Улар ике ҡатлы йорттар, магазиндар, башҡа төрлө хужалыҡ объекттарын төҙөүҙә бик тырышып эшләне. Ваҡыты менән концерттар ҙа ҡуйҙылар.

Шаим бырауылау конторалы коллективы өс бригадаға 87 мең метр скважина бырауылап, СССР Нефть сәнәғәте министрлығында беренсе урынды яуланы. Коллективҡа министрлыҡтың күсмә Ҡыҙыл байрағы тапшырылды, эшселәр орден һәм миҙалдар менән бүләкләнде. Иҫәнғолов Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, бырауылау оҫтаһы Григорий Петров Ленин ордендарына лайыҡ булды. Бырауылау оҫтаһы Анатолий Шакшинға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеп, Ленин ордены һәм Алтын миҙал тапшырылды. Шул йылда уҡ улар СССР Юғары Советы депутаты итеп һайланды. КПСС-тың Урай ҡала комитетының беренсе секретары Наил Сәлихов Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде.

Хәҙер скважиналарҙы Урайҙан алтмыш саҡрымда бора башланылар. Унда эшләү өсөн шарттар бар: дөйөм ятаҡ, ашхана, ҡыҙыл мөйөш һ.б. Бүлмәләр ике-дүрт кеше торорлоҡ. Йомшаҡ карауат, ап-аҡ простынялар, яңы одеалдар, кейем-һалым өсөн көҙгөлө шифоньерҙар ҙа бар. Уҡыйым тиһәң, гәзит-журналдарҙы вертолет көн һайын килтереп тора. Ул турала профком рәйесе Ғабдрафиҡов, партком секретары Ғәлимовтар ваҡытында ҡайғырта. Көн һайын тиерлек кино була, хатта 30 — 40 кешелек коллектив өсөн көн аша мунса ла яғыла.

Көҙҙәрен вахтанан буш ваҡытта бөрлөгән, көртмәле, мүк еләге, бәшмәк йыйырға мөмкин. Балыҡсылар, һунарсылар өсөн дә хөрриәт. Балыҡ бында үҙе ҡабырға әҙер. Селәүсен булмаһа, тотҡан балығыңдың күҙен ҡармаҡҡа кейҙерәһең дә һыуға ташлайһың. Һунарсылар өсөн көҙөн ҡыр ҡаҙҙары мыжғып, йылға-күлдәрҙе тултырып йөҙә. Өйрәк, көртлөк, һуйыр атырға була.

Петров менән Шакшин бригадалары хәҙер Тетерев майҙанында эшләй. Шакшиндыҡылар 692-се скважинаны быраулап, икенсе урынға күсте. Бырауласы Процко иртә менән вахтаны Сарычевҡа тапшырып, вахта журналына рапорт яҙырға ултырғанда участка геологы Глазыриндың хәүефле яҙыуын күрҙе. «Был турала ҡайтыу менән етәкселәргә еткерергә кәрәк», — тине ул.

Йәкшәмбе булыуға ҡарамаҫтан, ул диспетчерскаяла ПТО начальнигы Ҡәҙим Хановты осратып, хәүефен еткерҙе.

— Ярар, төҙәтербеҙ. — Ханов ышаныслы яуапланы.

Ләкин ул буровойға инеп торманы. Бер заман нефть фонтаны ысынлап та урғыла башланы. Сарычев ике ҡулы менән башын тотто. Фонтанға яҡынлап та булмай. Тиҙ генә рация аша диспетчерға шылтыратты:

— Буровойҙа — асыҡ фонтан. Тиҙ генә етәкселәргә еткерегеҙ!

Процко дөрөҫ һиҙемләгән булып сыҡты. Сарычев, һис ни уйлап тормайынса, торбаны күтәреп ташлаған да вахтаһы менән ашарға китеп, скважинаны асыҡ ҡалдырған. Ике сәғәт тә үтмәне, еңел машинала Иҫәнғолов, ПТО начальнигы Ханов килеп етте. Буровой тирәләй әйләнеп сыҡҡас, Авзал Ғизҙәтович шуны аңланы: фонтан бик көслө бәрә. Шаим нефть майҙанының иң көслөятҡылыҡтарының береһе был. Нефть бында газ менән бергә килә.

—Патрубок менән планшайбаны килтерегеҙ! — тип бойорҙо Иҫәнғолов. — Бороп ҡарайыҡ.

Сарычев көслө баҫымлы фонтан аҫтынан директор һораған әйберҙәрҙе ҡоро ергә сығарҙы. Ләкин фонтанды туҡтата алманылар.

Иҫәнғолов ҡайтып, инженерҙар менән кәңәшләшергә булды. «Трест етәкселәренә лә еткерергә кәрәк,—тип уйланы. —Буровойҙы ныҡ ҡарауылларға, машина йә трактор менән яҡын килмәҫкә, ут тоҡандырмаҫҡа», — тип иҫкәртеп, юлға сыҡты. Баш инженер Шәмсетдиновтың юҡлығына көйөндө. Ул булһа, бәлки, былай килеп сыҡмаҫ та ине.

Егерме йылға яҡын быраулау менән шөғөлләнгән Иҫәнғоловҡа бер ваҡытта ла асыҡ фонтан менән эш итергә тура килмәгәйне. Инженерҙар, мастерҙар менән фонтанды туҡтатыу тураһында байтаҡ ҡына әңгәмә алып барҙылар, әммә бер ҡарарға ла килә алманылар.

Иртәнге 8-ҙә бөтә инженер-техник хеҙмәткәрҙәр конторала ине.

—Кемдең ниндәй планы бар, бирегеҙ бында, — тине директор ышаныслы тауыш менән. Уларҙы уҡып сыҡҡас, ПТО начальнигы Хановҡа дөйөмләштерергә бирҙе. — Һуңынан тағы бер ҡат ҡарап сығырбыҙ.

Артабан ул һәр кемгә бурыс ҡуйҙы, белеште, һорашты.

— Авария урынына эшселәрҙең теләк белдергәндәрен генә алырбыҙ, — тине ул, бәхәскә урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп.

Шакшин бригадаһынан бырауласы Григорий Нечепуренко, слесарь Владимир Журавлев беренсе булып үҙ теләген белдерҙе. Башҡа эшселәр ҙә бар ине, ләкин уларҙы алмаҫҡа булдылар, былай ҙа кеше етерлек ине.

Төн сыҡҡансы тирә-йүн нефть менән тулғайны. Скважина тамағына килеп ҡараһалар, тағы бер нәмә асыҡланды: нефть һурҙырғыс торбалар аша килмәй, тимәк, торбаларҙың аҫҡы осо тығылған. Төрлөсә ҡыландырып ҡаранылар,

тик һөҙөмтә булманы. Трестан да, «Главтюменгаз»дан да бер инженер ҙа юҡ. «Бындай мөһим эштә лә йөрөмәгәс, улар ниңә кәрәк икән?» —тип уйланы Иҫәнғолов.

Эшселәрҙе йыйып, ул былай тине:

—Иртәгә эште еңеләйтеү өсөн фонтан арматураһының аҫҡы өлөшөнә торбалар тоташтырырға кәрәк. Планшайбаны урынына ултыртҡанда, нефть ошо торбалар аша ағырға тейеш.

Ләкин көслө фонтан планшайбаны урынына ултыртырға мөмкинлек бирмәй. Шакшин болттарҙы алып күпер башына килеп еткәндә, кинәт ҡаты шартлау тауышы ишетелде. Буровойҙы төтөн, ут ҡапланы. Өҫтә торғандар ситкә йүгерҙе. Нефткә буялған плащтарына ут ҡапҡан, тын алып та, күреп тә булмай. Феоктистов, Яугилдин, Насировтарҙы тиҙ генә ут эсенән сығарып, плащтарын һалдырып, янғындан ҡотҡарҙылар. Директор урынбаҫары Чобит Яугилдинды күтәреп алып барғанда үҙе лә бер аҙ янған. 15 метрлыҡ күперҙең осона йүгергәндә «Горю!» тигән әсе тауышы ҡолаҡҡа һеңеп ҡалған. Күҙ алдында кеше яна, ярҙам итеп булмай — аҡырып иларлыҡ.

Буровой аҫтында ҡалған Усман Ғәйнуллин, Григорий Нечепуренко, Владимир Журавлевтар янып үлгәндер инде. Бәхетһеҙлек булғас була бит. Бер секундта ете кеше һәләк булды. Ете кеше! Иҫәнғолов, бөтә эшен ташлап, тиҙ генә Феоктистов, Яугилдин, Насиров һәм Чобитты «Тиҙ ярҙам» машинаһында дауаханаға оҙатты. Ул үҙе ни эшләргә лә белмәй, быуындары ҡалтырай. Янып үлгәндәрҙең кәүҙәләрен нисек булһа ла табырға тырышып, директор буровойҙа ҡалды. Дауаханаға оҙатылғандарҙан да Иван Чобит ҡына иҫән ҡалды. Иван Феоктистов, Рәйеф Яугилдин, Рафаил Насировтар вафат булды.

Төмәндән асыҡ фонтанды баҫтырыу буйынса белгес-геолог Николай Григорьев, янғын һүндереү командаһы начальнигы Николай Крючков самолет менән булһа ла һуңлап килде. 41 метрлыҡ вышканы ауҙарғас, фонтан тағы көсәйеп киткәндәй булды. Тирә-яҡты ҡара һөрөм ҡапланы. Буровой тирәләй урман, һаҙлыҡтағы мүк яна башланы. Григорьевтың күрһәтмәһе буйынса Урайҙан килгән ике бульдозер буровой тирәләй янған утҡа ҡәҫ өйә башланы. Был фонтандан аҡҡан нефтте быуырға мөмкинлек бирҙе. Ике һыу һиптергес менән скважина тамағындағы утты һүндерергә тырышыу һөҙөмтә бирмәне. Новосибирскиҙан килтерелгән турбореактив ҡоролманы файҙаланырға булдылар. Уның командиры Владимир Болдиндың һөйләүенсә, газ фонтаны 30 секундта һүндерелә икән. Инертлы газ менән уратылған ялҡын, кислород булмағас, һүнә. Тирә- яҡты ҡараңғылыҡ ҡаплай.

Яңы буровойҙы иҫкеһенән 600 метр самаһы алыҫлыҡта ҡора башланылар. Быраулау эштәрен Анатолий Шакшин бригадаһы алып барҙы. Процко, Вәғиз Ғарифуллин һәм тағы ике вахта эште ҙур яуаплылыҡ менән башҡарҙы. Ҡаты декабрь һыуыҡтары башланғас, быраулау контораһына НГДУ-ның техникаһы ла йәлеп ителде. Төмәндән «Төмәннефтеразведка» тресы управляющийы Миҙхәт Сафиуллин, уның урынбаҫары Николай Андропов һәм башҡа инженерҙар нисек итеп ауыш бырауларға өйрәтте. Декабрь урталарында скважина 1650 метр тәрәнлеккә етте. Эксплуатация торбаларын төшөрөп цементлау 40 градус һалҡында бик ауыр булды.

Иң һуңғы һәм йомғаҡлау операцияһы башланды. Ул нефть ҡатламына һыу ҡыуҙырып, фонтан скважинаһына еткереү һәм уны һыу менән тултырыуҙан ғибәрәт ине. Был эште «Главтюменгеология» менән «Главтюменнефтегаз» вәкилдәре Григорьев, Сергеевский һәм контораның баш инженеры Шәмсетдиновтар башҡарҙы.

Эш бик ауыр барҙы, төн дә көсөргәнешле үтте. Сергеевский Шәмсетдинов менән йә манометрға, йә янғынға ҡарап йөрөнө. Иртә менән Иҫәнғолов КПСС-тың Урай ҡала комитетының беренсе секретары Наил Сәлихов менән килеп төштө. Уңышһыҙлыҡ бөтәһен дә борсой. Бер саҡ ләүкелдәп һауаға осҡан ялҡын ҡапыл ғына һүрәнәйҙе. Ә бер нисә сәғәттән янғын урынына һыу парҙары, унан йылтырап һыу бөртөктәре урғыла башланы. Йылдар үтер, әммә Шаим нефтселәренең оло фажиғәһе һәм батырлығы Төмән нефтселәренең хәтерендә мәңге һаҡланыр.

Өс быраулау бригадаһы Анатолий Шакшин, Григорий Петров, Сабит Йәғәфәров етәкселегендә юғары күрһәткестәргә өлгәште, йылдан-йыл быраулау тиҙлеген арттырып, Бөтә Союзға рекорд ҡуйҙы. Йылына 40-ар мең метр скважина быраулланы улар. Иҫәнғолов коллективы алты йылдан ашыу СССР нефтселәре араһында беренсе булды. Шаим быраулау контораһы тәжрибә мәктәбенә әйләнде, СССР-ҙың төрлө өлкәләренән килгән быраулаусылар коллектив тәжрибәһе менән танышты, үҙҙәрендә ҡуллана башланы.

Авзал Ғиззәтович барлыҡ эшселәрен дә яҡшы белә. Уның буровойға килеүе үк эшселәрҙең кәйефен күтәреп ебәрә ине. Уның ныҡышмалылығы, инженерлыҡ эшмәкәрлеге быраулаусыларға бик оҡшай. Шаим быраулау контораһының эш тиҙлеге етәкселәрҙә коллективты Самотлор нефть ятҡылығын үҙләштереүгә ебәреү теләген уятты. Сөнки Самотлорҙа скважиналар бындағыға ҡарағанда ун тапҡырға күберәк нефть бирә ине.

1971 йылдың апрелендә «Главтюменнефтегаз» идаралығы начальнигы В. Муравленко Шаим быраулау коллективын Самотлорға күсереү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуя. Директорға коллективты Самотлорға күсергә өндәү еңел булманы, сөнки Урайҙа бөтәһе лә яҡшы фатирҙарҙа йәшәй, балалар баҡсаһы бар. Ә Нижневартовскиҙа иһә тағы вагон-торлаҡтарҙан башларға тура киләсәк. Шулай ҙа өс быраулау бригадаһы, ярҙамсы цехтар, идара аппараты — бөтәһе лә яңы урынға күсергә ризалашты.

Шул уҡ йылда, һыу юлы асылғас, Урайҙан 10 мең тонна йөк, йәғни 60 вагон-торлаҡ яңы урынға китте. Бөтә йөктө тейәү-бушатыуҙы коллектив үҙ көсө менән башҡарҙы. Октябрҙә Григорий Петров бригадаһы беренсе скважинаны быраулай башланы. Ул йылды быраулау планы 117 процентҡа үтәлде. Был күсенеү мәшәҡәттәрен иҫәпкә алмайынса ҡуйылған план ине. Һигеҙенсе биш йыллыҡтың (1966—1970) һөҙөмтәләре буйынса быраулау идаралығы начальнигы Иҫәнғолов Авзалетдин Ғиззәтулла улы Ленин ордены менән бүләкләнеп, «Нефть сәнәғәтенең отличнигы» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды.

Һөҙөмтә буларaҡ еңеү килде. 1973 йылда Петров бригадаһы 93 мең метр быраулап, Бөтә Союз рекорды ҡуйҙы. Шакшин бригадаһы — 80023, Йәғәфәровтыҡы 66926 метр скважина быраулланы. Самотлор нефть ятҡылыҡтарында беренсе тапҡыр ошондай һөҙөмтә ине был. «Юбилейный» мәҙәниәт йортонда Нижневартовск ҡалаһы хакимиәте тарафынан ойошторолған митинг булып, Петров бригадаһының Бөтә Союзға ҡуйылған рекордына арналды. Быраулау оҫтаһы Григорий Петровҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында СССР Юғары Советының Указы еткерелде. Геройға Алтын йондоҙ миҙалы һәм Ленин ордены тапшырылды. Быраулаусы Рәхимов Ленин ордены алды. Бригаданың башҡа эшселәренән 24 кешегә хөкүмәт наградалары тапшырылды.

Авзал Иҫәнғоловҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен һуңыраҡ бирҙеләр. Ул илебеҙҙең иң юғары наградаһына лайыҡ булды. Өс вышка монтажлау

бригадаһын бергә ҡушып, эреләтеп, уға етәксе итеп Иҫәнғолов Татарстан нефтсеһе Йәдкәр Ваһаповты ҡуйҙы. Был яҡшы башланғыс ине. Бригадир Татарстанда, алдынғы технологиялар ҡулланып, буровойҙар монтажлауҙы яҡшы үҙләштергән. Бригада бер уҡ ваҡытта өс, дүрт урында эшләне. 60-сы йылдарҙа бер буровой монтажлауға 18 — 20 көн китһә, 70-се йылдарҙа 3,3 көн дә етә ине.

Ваһапов бригадаһы Көнбайыш Себерҙә йылына 100 буровой монтажлап, 1971 йылда бригадир Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен яуланы. Сабит Йәғәфәров 1964 йылдан өсөнсө быраулау бригадаһы мастеры булып эшләне. Ул быға тиклем Башҡортостандың Яңауыл районында нефть разведкалау быраулаусыһы булған икән. Яңы бригаданы юлға һалыуы еңелдән булманы уға. Эшкә уңған, тырыш мастер, һәр эшсе менән уртаҡ тел табып, бригаданы алдынғылар рәтенә сығарҙы. 1968 йылда ул «СССР нефть сәнәғәте отличнигы» знагы, 1970 йылда Ленин ордены менән бүләкләнде, 1971 йылда «СССР-ҙың почетлы нефтсеһе» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. 1975 йылда Самотлор нефть ятҡылыҡтарын үҙләштереүҙәге уңыштары өсөн Йәғәфәровҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән юғары исем бирҙеләр. Ул Төмән өлкә Советы депутаты итеп тә һайланды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Сабит Йәғәфәров 1981 йылдың 16 июнендә автомобиль фажиғәһенә эләгеп һәләк булды.

Шулай итеп, Авзал Иҫәнғолов етәкселек иткән коллективта биш Социалистик Хеҙмәт Геройы үҫеп сыҡты. Быңдай хәл бер ҡасан да булмаған. Ул — быраулау идаралығы начальнигының оҫта ойоштороу һәләте, инженер-техник белеме һөҙөмтәһе. 1965—1975 йылдарҙа Иҫәнғолов коллективы СССР Нефть сәнәғәте министрлығында йыл һайын алдынғы урындарҙы биләне. 1965 йыл йомғаҡтары буйынса коллективҡа СССР Нефть сәнәғәте министрлығының күсмә Ҡыҙыл байрағы тапшырылды. Шаим быраулау контораһының эш алымдары 1971 йылда КПСС Үҙәк Комитетында хупланып, коллективтың эш тәжрибәһен Бөтә Союз нефтселәренә пропагандаларға тәҡдим ителде. Ҡаҙағстандан, Украинанан, Белоруссиянан, Сахалиндан, Томск һәм башҡа өлкәләрҙән бик күп делегациялар килде. Хатта Канаданан һәм Американан да ҡунаҡтар булды.

Ҡайҙа ғына эшләһә лә, Авзал Ғиззәтович эшенә бик етди һәм яуаплы ҡараны, ғаиләһенә лә бик иғтибарлы булды. 1976 йылда ҡатыны менән «көмөш туй»ҙарын үткәрҙеләр. Улар бик татыу, мөхәббәтле йәшәне. Надежда Федоровна фельдшерҙар техникумын тамамлап, шәфҡәт туташы булып эшләне.

1998 йылдың сентябрендә Авзал Ғиззәтулла улы Иҫәнғоловҡа 70 йәш тулыу айҡанлы ҙур тантанала Төмән өлкәһе губернаторы урынбаҫары В. Медведев, Ханты-Манси автономиялы округы губернаторы урынбаҫары Н.И. Добрынин ҡатнашып, тәбрикләү хаттары тапшырҙы. Байрамда Төмән өлкәһендә күп йылдар уңышлы эшләгән социалистик хеҙмәт батырҙары ла ҡатнашты һәм юбилярҙы ихлас тәбрикләне.

Иҫәнғоловтар ғаиләһендә ике бала үҫеп, һәйбәт тәрбиә алды. Римма һәм Салауат Төмән индустриаль институтын уңышлы тамамлап, инженер булып эшләйҙәр. Үҙҙәренең ғаиләһе бар.

**Яҡуп ШӘМСЕТДИНОВ,**
**һуғыш һәм хеҙмәт ветераны.**

## Ә ҺЕҘ ВАҠЫТЛЫ МАТБУҒАТҠА ЯҘЫЛДЫҒЫҘМЫ?

Стәрлебаш районының Табылды ауылында йәшәүсе Әнүәр ағай Яхин, ғәҙәттәгесә, 2011 йылдың тәүге яртыһына сентябрь башында алған пенсияһына уҡ яҙылып ҡуйған. Ғинуар башынан «Ағиҙел» журналы, «Башҡортостан», «Аҙна» һәм район гәзиттәрен ауыл почтальоны уның өйөнә алып киләсәк. «Мин «Ағиҙел»де күптән алдырам, һәр номерын тегеп барам. Балалар ҡайтһа, улар ҙа уҡый», — тине миңә Әнүәр ағай телефон аша һөйләшкәндә. Ауылдашым оло кеше инде, хәҙер туҡһанды ҡыуалай. Мин уның менән 1970 йылда урта мәктәпте тамамлағас, колхоз фермаһында бергә башмаҡтар ҡарағайным. Ғөмүмән, йор һүҙле, күтәренке күңелле кеше ул Әнүәр ағай. Мине, әлбиттә, ауылдашымдың аҙ-маҙ пенсияһына ҡайһы бер милләттәштәребеҙ кеүек бер-ике түгел, ә дүрт баҫма алдырыуы бер аҙ ғәжәпкә ҡалдырҙы. Иҫәпләп ҡараһаң, почта бүлексәһе урынлашҡан Күндрәк, Табылды, Үрге һәм Түбәнге Шәкәр ауылдарында барлығы биш«Ағиҙел», алты «Башҡортостан», ("Йома" сығарылышы - 32), 22 «Йәшлек» гәзиттәре алдыралар. Өс башҡорт ауылын эсенә алған Түбәнге Аллағыуат почта бүлексәһенә лә «Ағиҙел» журналы ни бары өс дана килә.

Елембәт ауылы хакимиәтенә ҡараған ауылдар — Стәрлебаш районында башҡорттар тупланып һәм иң күп йәшәгән төбәк. Бында 400-гә яҡын башҡорт ғаиләһе иҫәпләнә. 218 пенсионерҙы ла иҫәпкә алып, 1230 кеше йәшәй. Хакимиәт башлығы А. Хәсәновтың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Елембәт, Һарайҫа, Өмөтбай, Бүләк ауылдарына бөгөн *ике дана «Ағиҙел», туғыҙ — «Аманат», һигеҙ — «Аҡбуҙат», 15 — «Башҡортостан уҡытыусыһы», 19 — «Башҡортостан ҡыҙы», бер дана «Ватандаш»* журналы килә. *Гәзиттәрҙән «Башҡортостан» — алты, «Йәшлек» — 36, «Йәншишмә» — 41.*

Башҡорттар тупланып йәшәгән икенсе төбәк — Иҫке Ҡалҡаш ауыл хакимиәтенә Яңы Ҡалҡаш, Байым ауылдары инеп, уларҙа меңгә яҡын кеше көн итә. Хакимиәт башлығы Ф. Ҡотлошиндың һүҙҙәренә ҡарағанда, почта бүлексәһенә бөтәһе 194 башҡорт баҫмаһы килә. Шул иҫәптән — икешәр «Ағиҙел» һәм «Ватандаш», дүртәр — «Башҡортостан уҡытыусыһы» һәм «Шоңҡар» журналдары, алты дана «Йәшлек», туғыҙ — «Башҡортостан» һәм биш «Аҙна» гәзиттәре. Стәрлебаш районында 22 дана «Ағиҙел» журналы менән бергә һигеҙ дана «Казан утлары» ла тарала.

Ә хәҙер Дәүләкән районы менән ҡалаһына киләйек. Үҙәк почта бүлексәһенән алынған мәғлүмәттәр буйынса, 2010 йылдың икенсе яртыһында тотош ҡала менән районға 32 дана «Ағиҙел», 46 — «Ватандаш», 18 — «Шоңҡар» журналдары, 239 — «Башҡортостан», 213 — «Йәшлек», 208 «Аҙна» гәзиттәре алдыралар. 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәтәре буйынса 12 меңләп башҡорт йәшәгән төбәк өсөн был һандар ҡаҙаныш түгел. Ҡаҙанғол ауылы почта бүлексәһендә әлеге көндә биш «Ағиҙел», икешәр

«Ватандаш» һәм «Һәнәк», өсәр «Шоңҡар» һәм «Башҡортостан ҡыҙы» журналдары килә. Гәзиттәрҙең дә күләме бик аҙ. Шул уҡ ваҡытта саф башҡорттар йәшәгән был төбәктә алты дана «Республика Башкортостан», өс — «Өмет» һәм ике «Атна» гәзиттәрен уҡыусылар ҙа бар.

Ваҡытлы башҡорт матбуғатын алдырыусылар һуңғы йылдарҙа байтаҡҡа кәмене. Быйың сәбәбе, әлбиттә, күп, һәм улар матбуғаттың йәмғиәттәге роле ҡырҡа үҙгәреү менән бергә халыҡтың финанс мөмкинлектәре тарайыуға ла тығыҙ бәйле. Телевидениеның һәм Интернеттың, ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, ваҡытлы баҫмаларҙы ҡыҫтай, тигән фекере менән килешеүе ауыр, сөнки был төшөнсәләр һис кенә лә сағыштырырлыҡ түгел. Уларҙың йөкмәткеһе менән бергә уңайлыҡтары ла бер төрлө түгел бит.

Элекке колхоз һәм совхоздар юҡҡа сығыу менән ауыл ерендә килем мәсьәләһе ярайһы ҡатмарлашты. Мәҫәлән, Стәрлебаш районында ауылда йәшәгән кешеләрҙең айлыҡ килеме уртаса 2,5 — 3 мең һум тирәһендә тирбәлә. Ә бит был сумманың да ваҡытында бирелмәүе йәки натуралата түләнеүе ихтимал. Тап шул арҡала ауылда йәшәүселәрҙең байтағы, төшөмлөрәк эш эҙләп, ҡалаларға, хатта Себер тарафтарына сығып китергә мәжбүр. Ундайҙарҙа, билдәле, гәзит-журналға яҙылыу ҡайғыһы юҡ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был ҡатлам йылдан-йыл артып, батша Рәсәйендәге кеүек, зимагорҙарҙы күпләп барлыҡҡа килтерә. Уның кире эҙемтәләрен — ғаиләләр тарҡалыу, никахһыҙ балалар тыуыу һ. б. — йәмғиәт оҙаҡламай үҙ елкәһендә татый ҙа башлар.

Ваҡытлы баҫмаларҙың кәмеүенең тағы ла бер сәбәбе үрҙә телгә алынған Әнүәр ағай кеүектәрҙең хәҙер олоғайыуы, ә йәштәрҙең гәзит-журналдар уҡымауы менән бәйле. Был, әлбиттә, улар телевидение менән Интернетҡа өҫтөнлөк бирә, тигәнде аңлатмай. Ауыл ерендә һуңғылары бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Был тәңгәлдә һүҙҙе, моғайын, рухи мәҙәниәттең һайыға барыуы, мәҙәни ихтыяждарҙың матди бөтөнлөк алдында төҫһөҙләнеүе тураһында алып барыу дөрөҫөрәктер.

Ваҡытлы матбуғат та СССР тарҡалып, КПСС йоғонтоһонан арынғандан һуң оло үҙгәреште кисерҙе. Етәкләп йөрөтөүгә, күрһәтмәләр үтәүгә күнеккән баҫмалар ҡырағай баҙар шарттарында үҙ проблемалары солғанышында юғалып ҡалды. Күптәр, бигерәк тә беҙҙең Башҡортостандағы гәзит-журналдар, рәсми органдар ҡанаты аҫтына инеүҙе хуп күреп, йөкмәткеләрен етәкселәр кәйефен күтәрерҙәй материалдар менән тултырып, уҡыусылары алдында абруйын төшөрҙө. Ә тормоштоң аяуһыҙ ысынбарлығы ваҡытлы матбуғат биттәрендә һүрәтләнгәндән байтаҡҡа айырыла.

Башҡорт баҫмаларының матди хәле, әлбиттә, реклама алыу мөмкинлектәренең сикләнеүе менән дә аңлатыла. Уҡыусыларҙың башлыса ауыл ерендә йәшәүе, финанс ҡыйынлыҡтары кисереүе был хәлде тағы ла ҡатмарлаштырҙы. Был йәһәттән баҙар иҡтисады бирәсәк әсе емештәрҙең "тос" уңышы алдараҡ булыуы ла ихтимал.

Ҡайһы бер коллегаларыбыҙ араһында башҡорт баҫмаларының тиҫтәләрсә мең данаға еткән көндәрен иҫкә төшөрөп, бөгөнгө хәл өсөн үкенес белдергәндәр ҙә осрай. Донъя ныҡ үҙгәрҙе бит, йәмәғәт! Элекке СССР ғына түгел, хатта элекке Рәсәй менән элекке Башҡортостан да юҡҡа сыҡты. Быны яңыраҡ оло йәштәгеләр мәсьәләһен Дәүләт Советы ҡарауына ҡуйған Рәсәй Федерацияһы Президенты Д. Медведев та таныны.

Бөгөн ваҡытлы баҫмалар тиражын арттырыу өсөн ауылдар буйлап йөрөп яҙылырға өндәү генә етмәй. Кешеләр хәҙерге аҡса ғали йәнәптәренә ҡытлыҡ кисергән мәлдә иң элек матди мохтажлыҡтарын ҡәнәғәтләндереүгә өҫтөнлөк

бирергә мәжбүр. Был йәһәттән өс ай йәйге температура 30 градустан юғары торған үтеп барыусы йыл был мохтажлыҡтарҙы тағы ла көсәйтә. Тимәк, йәмғиәттең социаль хәле яҡшырыу менән ваҡытлы баҫмаларҙы алдырып уҡыусыларҙың күберәк булыуы араһында уртаҡлыҡ бар.

Башҡортостанда, 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, 1,2 миллиондан ашыу башҡорт теркәлгән. Ә бына башҡорт баҫмаларының дөйөм тиражы 120 мең самаһы ғына. Мәҫәлән, иң күп таралған «Башҡортостан» гәзитенең дөйөм тиражы (әлбиттә, «Йома» сығарылышы иҫәбенә) 33 мең, «Йәшлек»тең — 15,4 мең, «Киске Өфө»нөң —6 мең, «Ағиҙел»дең — 3,7 мең, «Тамаша»ның —2,6 мең, «Шоңҡар»ҙың — 6,6 мең һ.б. Ун башҡорттоң бер баҫма алдырыуы, — әлбиттә, XXI быуат өсөн бик күңелһеҙ күренеш.

Баҙар иҡтисады ҡанундары буйынса, үҙ көнөн үҙе хәстәрләй алмағандар өсөн бер генә юл бар — ябылыу. Тик хатта ил иң ауыр мәлдәр кисергән 20-се йылдарҙа башҡорт журналы «Ағиҙел»де асыу өсөн саралар күрелгән икән, бер быуат та үтмәҫтән ҡапма-ҡаршы йөкмәткеле икенсе сара күрелеүҙе бер нисек тә аҡлап булмай.

Был башҡорт йәмәғәтселегенә өсөн буласаҡ ауыр юғалтыуҙың Рәсәйҙең донъя илдәре араһында абруйы төшөү кеүек күҙгә бәрелеп бармаған яғы ла бар. Ғөмүмән, милли баҫмаларҙы нәшер итеүҙең бығаса кәрәге булмаған йәки иҫкергән тип иҫәпләнгән юлдарына ла мөрәжәғәт итергә кәрәктер. Мәҫәлән, баҙар иҡтисадына ярашлылары. Батша Рәсәйендә мосолман байҙары үҙ аҡсаһына меңләп баҫма нәшер иттергән. «Ваҡыт» гәзите, «Шура» журналы, «Сүкеш», «Ҡарсыға», «Сиңерткә» кеүек баҫмалар башҡорт һәм татар халыҡтары вәкилдәре араһында мәғрифәт эштәре алып барған. Мәскәү һәм Петербург меценаттары Морозовтар, Коноваловтар, Гучковтар һ.б. рус мәҙәниәте үҫешенә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ.

Ҡайҙа һуң бөгөнгө Тасимовтар, Рәмиевтар, Хөсәйеновтар, Ҡорбанғәлиевтар, Рәсүлевтар? Ни өсөн улар үҙ халҡы мәҙәниәтен үҫтереүгә өлөш индермәй? Әлбиттә, дәүләт яғынан ниндәйҙер ым-хәрәкәт булмай тороп, уларҙың был эшкә тотоноуына өмөт итеүе лә ҡыйын. Шул уҡ ваҡытта рус олигархтарының, бер ниндәй ым-хәрәкәт булмай тороп, Бөйөк Британияла гәзит һатып алыуҙары Рәсәй йәмәғәтселегенә өсөн сер түгел.

Ваҡытлы матбуғат — үҙенсәлекле тауар. Уны көндәлек ҡулланыуҙа булған икмәк, ит йәки һөт менән сағыштырыу урынһыҙ. Ләкин алға ҡарап йәшәгән йәмғиәт — һүҙ башҡорт йәмғиәте тураһында бара — башҡорт баҫмаларынан тороп ҡалһа, ул тулы ҡанлы, йәғни XXI быуат йәмғиәте лә булырға хаҡлымы?

Милли матбуғаттың дәүләт ярҙамынан тыш финанс хәлен яҡшырта алмаяғағы бөгөн шик тыуҙырмай. Был нәшриәт өлкәһендә ниндәйҙер ташламалар, даими спонсорҙар табыу буйынса ниндәйҙер булышлыҡ, Рәсәй почтаһы менән бәйләнешкә инеп, баҫмаларҙы күберәк таратыу буйынса хеҙмәттәшлек кеүек булып күҙ алдына баҫа.

Граждандар һуғышы йылдарында Ҡыҙыл Армия пропагандистары тарафынан сығарылған «А ты записался добровольцем?» тигән саҡырыуҙы башҡорт матбуғатын уҡыусылар өсөн «Ә һеҙ башҡорт баҫмаларына яҙылдығыҙмы?» тип үҙгәртеп әйтке килә. Актуаллек дәрәжәһе бер үк кимәлдә бит.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

## АҪАБАЛАР ҺӘМ АКСАКОВТАР

Сергей Аксаков беҙгә күренекле урыҫ яҙыусыһы булараҡ билдәле. Унын тыуған яғы Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө иҫәпләнә. Шуға ла хөкүмәтебеҙ уның абруйлы исемен мәңгеләштереү буйынса ҙур эштәр башҡарҙы һәм башҡара: Рәсәй Федерацияһы кимәлендә премия булдырылды, йорт-музейы эшләй, әҫәрҙәре ҡайтанан баҫыла, һәйкәл ҡуйылды, йыл һайын Аксаков көндәре үткәрелә һ.б. Ҡыҫҡаһы, оло талантттың исемен мәңгеләштереү өсөн мөмкин булғандың барыһы ла эшләнә.

Әйткәндәй, Аксаковтар Өфөгә килгәнсе үк, уның боронғо ата-бабалары төрки донъяһы менән тығыҙ бәйләнеп, уларҙың тамырҙары төрки халыҡтарына барып тоташа. А. Халиҡовтың «Болғар-татар сығышлы 500 урыҫ фамилияһы» (Ҡазан, 1992 й.) китабына күҙ һалайыҡ. Унда, төрлө сығанаҡтарға һылтанып, Аксаковтарҙың сығышы былай күрһәтелә: «XV быуат урталарында Аксаковтарға Клязьма йылғаһы буйындағы Аксаков ауылы бирелә. XV быуат аҙағында Новгородҡа күсерәләр». Был Аксаковтарҙың нәҫел башы Иван Аксак (ейәндәре Шаҙра Иван менән Обляз Иван) Иван Калитала мең башы Юрий Грунктың ейәненең улы була (Зимин, 1980 й, 154 – 161- се биттәр).

Бәрхәт китабында (БК II, 296-сы бит, №169) яҙылғанса, «Аҡһаҡ» ҡушаматлы Иван Федоров Алтын Урҙанан сыҡҡан Вельямин улы булған (Веселовский, 1974 й., 11-се бит). Аксаковтар Литвала ла йәшәгән. Улар унда XIV быуат аҙағында барып сыҡҡан булырға тейеш (W, D. 1986 й, 22-се бит). Аксаковтар араһында яҙыусылар, ғалимдар бар. Улар Воронцовтар, Вельяминовтар менән туғанлыҡта…»

Ләкин мин был яҙмала уның Мең ырыуы халҡы «Аҡҫаҡау баяр» тип йөрөткән яғына туҡталмаҡсымын. Мәҫәлән, хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылы башҡорттары хәтеренә Аксаковтар нәҫеле яҙыусы булараҡ та, йәмәғәт эшмәкәрҙәре булараҡ та билдәле түгел (уның яҙыусы икәнен хәҙерге йәштәр генә белә), оло йәштәгеләр уны «Аҡҫаҡау баяр» тип кенә йөрөткән. Әле лә уның һәм атаһының ҡасандыр биләгән ерҙәрен «Аҡҫаҡау яғы» тип атап йөрөтөүселәр бар. Маҡсатым да Муса башҡорттары менән Сергей Аксаковтың атаһы Тимофейҙың, унан һуң килеүселәрҙең боронғо бәйләнешен күрһәтеү ине.

Башҡорттоң ере ете ҡат, тип һөйләй торғайны бабайҙар. Әкиәттәгесә ете ҡатмы икән ни, тип аптырай торғайным. Әлбиттә, уның әллә нисә ҡатлы икәнен картуф баҡсаһы артындағы соҡорҙан күргән бар ине: тәүҙә

– ҡара тупраҡлы ер, артабан – ҡыҙыл мәте, һары балсыҡ, ҡырсынташ… Һуңыраҡ өләсәйемдән «Шәйбәк соҡоро» тигән риүәйәтте ишеткәс, «ете ҡат»тың ни икәне аңлашылды. Баҡһаң, беҙ аҫаба булғанбыҙ икән. Тимәк, ергә хужа. Шәйбәк тигән бер ялҡауыраҡ ауылдашыбыҙ, ерен урыҫтарға ҡуртымға биреп, ҡыш буйы шуның аҡсаһына көн иткән. Бер саҡ был бер үк ерҙе Подлубово урыҫына ла, Биштәкә мишәренә лә, Сихон сыуашына ла файҙаланырға биргән, имеш. Былар яҙ сәсергә килеп, баҫыуҙа осрашҡан, ти. Ыҙғыш киткән. Аптырағас, Шәйбәкте саҡырғандар. Тегенеһе, көлөп: «Әйҙә, сәсегеҙ, барығыҙға ла етер. Башҡорттоң ере ете ҡат ул», – тигән. Аҙаҡ үҙен туҡмап, соҡорға ташлап киткәндәр. Шунан һуң соҡорҙо «Шәйбәк соҡоро» тип атай башлағандар.

Шуға оҡшаш хәл Муса ауылы башҡорттары менән Тимофей Аксаков араһында ла була. Алпауыт арзан ғына хаҡҡа аҫабаларҙан 6626 дисәтинә ер һатып ала. Тик ул ер 1764 йылдың 17 мартында Мерәҫ, Муса һәм Ҡужаҡ Бикмәтовтар етәкселегендәге Тимкә, Һалйоғот, Ҡыйышҡы ауылдарының башҡорт типтәрҙәренә ҡуртымға бирелгән икән. (1926 йылғы халыҡ иҫәбен алыу алдынан Үҙәк статистика идаралығы СССР халыҡтары исемлегенән типтәрҙәрҙе һыҙа. Шулай ҙа был иҫәптә типтәрҙәрҙе күрһәтергә булалар. Башҡаса «типтәр» исеме милләт ҡатлам булараҡ ҡулланылмай. Тарихи башҡорт типтәрҙәренең әлеге өс ауылы халҡы «татар» булып китә.)

Типтәрҙәр иһә был ерҙәрҙе «мәңгелеккә» һатылған тип бара. Шулай итеп, типтәрҙәр менән Муса аҫабалары һәм Аксаковтар араһында тиҫтә йылдарға һуҙылған бәхәс башлана. Башҡорт ерҙәрен килмешәктәргә бүлеү өсөн ойошторолған махсус комиссияла «О наделении землей припущенников д. Мусиной Минской волости Уфимского уезда» тигән «эш»те икегә бүләләр. Яңыһын комиссия ағзаһы подполковник Соколов алып барып, ул «эш» әле лә Үҙәк архивта һаҡлана. Подполковник иң элек Муса башҡорттарының ерҙәре тураһында документтар, хәбәрҙәр туплай. Ошонда яҙыусы Аксаковтың атаһының был ерҙәргә ҡағылышлы документтары ла һаҡлана. Мәҫәлән, Соколов 1850 йылдың 20 февралендә Өфө өйәҙе судына мөрәжәғәт итә. (Ул саҡта Сергей Аксаковҡа 59 йәш була.) *«…Не состоялось ли решения по делу производящему в Уфимском Уездном суде о спорной земле, проданной вотчинниками той волости помещику Аксакову, на которой по припуску первые переселены деревни: Тимкино, Сальзегутово, Киишки…»*

Был низағлы ер тураһында яҙыусы аҙаҡ «Детские годы Багрова внука» тигән китабында ла яҙа. «…*Был һүҙҙән мин шуны аңланым: атайым башҡа башҡорттар, беҙ ер һатып алғандары түгел, үҙҙәренеке тип һанаған ерҙәрҙе алған. Шуға был ерҙәрҙән ике ауылды ҡыуырға кәрәк. Ыҙанлау булғас, бөтәһе лә низағ иғлан итер, шуға тиҙерәк бер нисә крәҫтиән ғаиләһен бында күсерергә кәрәк… Әсәйемә элек тә был һатып алыу оҡшамай ине. Сөнки ер ҙур ҡыйынлыҡтарһыҙ һәм тиҙ арала беҙҙең ҡарамаҡҡа күсә алмай ине: ике килмешәк ауылы – Ҡыйышҡы һәм Иҫке Тимкә – халҡы йәшәй ине. Дөрөҫ, уларҙың килешеүҙә күрһәтелгән ваҡыттары үткәйне. Тик башҡа ергә күсереүе бик ҡыйын.*

*Бынан да бигерәк, әсәйемә һатыусы башҡорттарҙың үҙ-ара талашыуы, һәр береһе үҙен ысын хужа, ә башҡаны алдаҡсы тип атауы оҡшамай ине…»*

Мусаларҙан низағлы ер алғас, Тимофей Аксаков тиҙ арала бер ауыл ҡороп, урыҫ крәҫтиәндәрен күсереп ултыртырға ҡарар итә. Был ауылды ул улы, буласаҡ яҙыусы Сергей исеменә «Сергеевка» тип атай. Шулай уҡ Аксаковтарҙан Николай тигәне лә ауыл ҡора – уны «Николаевка» тиҙәр. Ләкин Сергеевка ауылы оҙаҡ йәшәмәй, башҡорт типтәрҙәре ныҡышыраҡ була һәм төпләнгән урындарынан тиҙ генә күсеп китергә теләмәй, төрлө урындарға мөрәжәғәт итә.

Тәүҙә Өфө өйәҙе суды тарафынан, мусаларҙың ерҙәрен Тимофей Аксаковҡа һатыуы дөрөҫ, тип табылып, типтәрҙәрҙе башҡа ергә күсерергә ҡарар итәләр. Әммә һуңғылары быны менән килешергә теләмәй, 1846 йылдың 15 октябрендә суд ҡарарына ялыу бирә. Тик граждандар судының Ырымбур палатаһында ла эште тиҙләтергә ашыҡмайҙар. Был юлы ла тағы Аксаковтың хаҡлығы танылып, ерҙе уға ҡайтаралар. Типтәрҙәр хәҙер Рәсәй императоры Николай Павловичтың үҙенә үтенес яҙа. Был, билдәле, уларҙың еңеүенә килтерә.

Әммә быға тиклем, башҡорт ерҙәрен артабан үҙләштереү, үҙҙәрен ерһеҙ ҡалдырыу маҡсатында, хөкүмәт ҡарар сығарған була. Шул ҡарар булмаһа, бәлки, Аксаковтар һатып алған ерҙәрендә тороп та ҡалыр, бөгөн Ҡырмыҫҡалы районында яҙыусы нигеҙ һалған Сергеевка ауылы ла булыр ине. 1832 йылдың 10 апрелендәге ҡарарға ярашлы, типтәрҙәргә 20-шәр, ә дәүләт крәҫтиәндәренә 10-ар дисәтинә ер ҡарала. Дәүләт крәҫтиәндәрен төрлө урынға, мәҫәлән, «буш» урындарға күсереп ултыртыу мөмкинлеге тыуа. Аҫабаларҙың хоҡуҡтары тағы ла ҡыҫҡара төшә, ҡаҙна ҡарамағына күскән «буш» ерҙәр иһә арта. Тап шундай маҡсат менән, подполковник Соколов йыйған документтар буйынса, 1851 йылдың 28 июнендә яңы ҡарар сығарыла. Унда мусаларҙың 1814 йылда алпауыт Степан һәм Михаил Угличиндарҙың икеһенә 1711 дисәтинә 511-әр сажин ер һатҡанлығы, Аксаковтар алған 6625 дисәтинә 1634 сажиндың бәхәсле булыуы күрһәтелә. Әйткәндәй, Угличиндар биләмәһе лә низағлы һанала. Быларҙан тыш, мусалар ҡарамағындағы «файҙалы» һәм «файҙаһыҙ» 25 767 дисәтинә 2180 сажин ер иҫәпләнә. VII рәүиз буйынса, Мең олоҫонда 65 аҫаба, 944 башҡорт типтәре, мишәр һәм типтәр, 401 дәүләт крәҫтиәне була. Шулай итеп, Муса аҫабалары 25767 дисәтинә ерҙәренән 65 ир-атҡа бүленгән 2600 дисәтинәгә генә ҡарап ҡала, йәғни һәр аҫаба 40-ар дисәтинә менән «бәхилләтелә». Башҡорттарҙы шулай еңел генә Иван IV заманынан уҡ танылып, ваҡыт уҙыу менән грамоталана килгән ерҙәренән «законлы рәүештә» ҡолаҡ ҡаҡтыралар. Уларҙан килмешәктәрҙе килешеү буйынса индергән ерҙәренә хоҡуҡ та тартып алына, «буш» ерҙәре бөтөнләй ҡалдырылмай. Ошо указ нигеҙендә генә мусаларҙан 23167 дисәтинәнән ашыу ер тартып алына! Ул саҡта башҡорт халҡының баш күтәрерлек тә, үҙ ерен дауларлыҡ та көсө ҡалмаған була, быуаттар буйы барған көрәш уларҙы тамам ҡаҡшата.

Муса башҡорттарының Угличиндар, Аксаковтар ерҙәре менән башы буталғаны етмәгән, яңы мәшәҡәт өҫтәлә – «артыҡ» ерҙәр ҡалмай. Ошоларҙан

файҙаланып, типтәрҙәр батшаға хат яҙа ла. 78 йылға, йәғни ике-өс быуынға һуҙылған тартҡылашҡа шулай нөктә ҡуйыла. Сенат типтәрҙәрҙе элекке ерҙәрендә ҡалдырырға, ә Аксаковтарға Муса башҡорттарының 6626 дисәтинә ерен башҡа урындан бүлеп бирергә ҡарар сығара. Башҡорт түрәләре бының менән ризалашмаһа, уларҙы «ызыскано бы к тому другие способы» менән ҡурҡыталар.

Сенат ҡарарынан һуң был ерҙәргә үҙҙәре хужа икәнен тойоп, типтәрҙәр Аксаков күсереп ултыртҡан крәҫтиәндәрҙең китеүен, тирә-яҡтағы яландарҙың ҡайтарылып бирелеүен талап итә башлай. Ялан кәртәләрен емерәләр, ужым баҫыуҙарына малдарын ҡыуалар. Был турала документтар бик күп һөйләй. Уларҙан Аксаков крәҫтиәндәренең Рыбная Слобода тигән ауылдары булғанлығы ла күренә. Моғайын, һуңғы йылдарҙа ғына төҙөлгән булғандыр, сөнки элекке документтарҙа ул теркәлмәгән.

Аксаковтың ышаныслы кешеһе 1868 йылдың 4 октябрендә яҙған документтан өҙөк килтерәм: «*…башкиры деревень Киишковы, Кабаковский волости, в следствие, будто бы, объявленного им указа Правительствующего Сената об отказе Аксакову во владению землею д. Николаевке, не дозволяют ему – Аксакову, напаривать озимого и ярового поля и пускают туда свой скот…*»

Был ыҙғыш Аксаковтар ауылдарын күсергәнсе дауам итә. Әлбиттә, мусалар Аксаковҡа «буш» ерҙәренән ер бирә. Хәҙерге Аҡкүл ауылы шул биләмәләргә ҡарай. Ләкин һуңғараҡ Аксаковтар ерҙе Табын башҡорттарынан да ала. Улары Ҡырмыҫҡалы ауылынан бер нисә саҡрым ғына алыҫлыҡта. Аксаково ауылы әле лә бар, тик ул Өфө ҡалаһының Киров районы һәм Ҡырмыҫҡалы халҡының коллектив баҡсалары ҡамауында ҡалған. Әйткәндәй, Аксаковтар Бәләбәй яғында ла күпләп ер биләгән, унда ла ауылдары бар. Ләкин Аксаковтарҙың бер нисә туған булып, шуларҙан тармаҡланыу ихтималлығын да онотorға ярамай.

Иҫке Муса ауылында йөҙйәшәр бабай – Заһиҙулла Нурғәлиев тигән кеше була торғайны. Үҙе күптән мәрхүм булһа ла, һөйләгәндәрен бик күптәр иҫләй. Мәҫәлән, мәрхүмә Өммөгөлсөм өләсәйем: «Зәйҙүш ҡарт, йәшерәк сағында, Аҡсаҡ баярҙа күпмелер күсер булған. Ул ҡараңғы таңнан пар атлар егеп китер ине ҙә кисен әйләнеп тә ҡайтыр ине. Үҙе Аҡкүлгә алып барып, Аҡсаҡ баярны ҫыу кертҡән. Таҫтамал тотоп тора инем, тәне ап-аҡ ине, ти ине мәрхүмкәй. Атлары вәт шәп ине»,– тип һөйләй ине.

Ҡайһы Аксаковта ул күсер булғандыр, ләкин мусаларҙың – аҫаба башҡорттарҙың күҙелендә уларҙың барыһы ла – баяр, алпауыт. Ғөмүмән, урыҫҡа күренекле булған, уларҙың баҫып алыу сәйәсәтен дауам иткән бар шәхестәр ҙә тиерлек бер ҡатлы башҡорттоң ерен арзан хаҡҡа алдап-йолдап һатып алыусы баяр булып ҡалған: Аксаковтар, Татищевтар, Булгаковтар, Тевкелевтар һ.б.

**Рәлис УРАҘҒОЛОВ.**

## *Илен һаҡлаъан – ирәйеп йәшәгән*

Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда Ғәле техникумдың өсөнсө курсында уҡый ине. Фашистарҙың ҡапыл һәм йылдам һөжүме арҡаһында бер-бер артлы ауыл-ҡалаларыбыҙ дошман ҡулына эләкте, ә һуғышҡа әҙерлеге самалы булған Ҡыҙыл Армия айҙар буйы сигенде. Тиҙҙән Ленинград ҡамауҙа ҡалды, Мәскәү һәм Сталинградты обороналау өсөн оҙайлы, күп ҡорбандарға торошло көрәш дауам итте.

Фронт хәбәрҙәре студенттарҙың күбеһен ҡәнәғәтләндермәй ине; улар совет ғәскәрҙәренең техникаһы, көсө була тороп, сигенеү сәбәбен аңламаны. Үҫмер егеттәр, ут менән уйнама, үҙең янырһың, тигән халыҡ мәҡәлен иҫенә төшөрҙө, ҡорал алып, дошманды тетеп ташлағыһы килде. Техникумды тамамларға йыл тирәһе ҡалыуға ҡарамаҫтан, ҡәбәхәттәргә ҡарата ташҡан нәфрәте Ғәлене үҙ теләге менән һуғышҡа китергә әйҙәне, һәм ул бығa иреште. Тиҙҙән Силәбе өлкәһенә ебәрелеп, Троицкиҙа элемтәсе һөнәрен үҙләштергәндән һуң, ун һигеҙен саҡ тултырған егет ҡамауҙағы Ленинград ҡалаһының Жданов исемендәге парк майҙанына десант составында төшөрөлдө. Уны элемтә бәйләнешенең взвод командиры итеп тәғәйенләнеләр. Ғәленең ауыр, ҡурҡыныс, оҙайлы хәрби хеҙмәте ана шулай башланып китте.

Ленинградтағы ҡот осҡос күренештәр йәш һалдатты шаҡ ҡатырҙы. Һуғыш сирҡанысын татымаған, тәжрибәһе етмәгән Ғәле Йосопов, сатнама һыуыҡтан, аслыҡтан күҙ алдында һәләк булған меңәрләгән ҡала халҡының ғазабын күреп, үҙен дә юғалып ҡалғандай хис итте. Ҡайҙа ла – ярым емерек йорт йәки башҡа ҡаралтылар, ығы-зығы килгән хәрби техника һәм ғәскәр, үҙәккә үтеп шом һалған сирена тауышы. Ләкин ҡәтғи һуғыш талаптары үҙенекен итә: тиҙҙән һалдат ошо күренештәрҙе ғәҙәти хәл кеүек күрә башлай.

Һуғышта хәлдәр тиҙ үҙгәрә. Ғәле Йосопов Ленинград һәм Волхов фронттарының ҡушылыуына шаһит була, һуңынан фашистарҙы 2-се удар армия составында ҡыйрата. Был көндәрҙе яугир әле лә онотмай. Окоп ҡаҙа башлау менән күберсеп батҡаҡлы һаҙ һыуы өҫкә күтәрелә. Түшәлгән ылыҫ ботаҡтарынан да әллә ни файҙа юҡ – барыбер һыу үткәрә.

– Дөрөҫөн әйткәндә, Ленинград янында фашистар бик ҡаты һуғышты,– тип дауам итә һуғыш ветераны. – Хәл йыш ҡына ҡул һуғышына, йәғни штык менән ҡара-ҡаршы алышыуға етә торғайны. Ошондай бер ҡул һуғышы мәлендә фриц менән бер-беребеҙгә бер үк мәлдә сәнсешкәнбеҙ. Төпөш, йыуан дошманға штык һонғанды иҫләп ҡалам, шул уҡ саҡта үҙем дә иҫте юғалтҡанмын. Фашистың штык осо (уларҙыҡы бысаҡ кеүек ике ҡырлы ине) янбаш һөйәгенә төртөлөп һынған. Һуғыш туҡталғас, металл киҫәген ялан госпиталендә ярып алдылар.

Яугир икенсе бер ваҡиғаны ла хәтерендә һаҡлай. Бер мәл эргәһендәге күләүеккә дошман яғынан ырғытылған оҙон һаплы граната килеп төшә. Сос

яугир тиҙ генә гранатаны эләктерә һалып, кире дошман окобына ҡарай ырғыта. Ләкин ул көндө Ғәлене хәүеф-хәтәр һағалаған: ҡорһағына граната ярсығы инеп ултырып, тағы ла госпиталдә ятырға тура килгән.

«Дошманға үлем сәсһәң, еңеү урырһың» тигән боронғолар. Бер алыш хаҡында яугир ошолай хәтерләй:

– Иртәнге етелә йөҙәр миномет, төрлө системалы һәм калибрлы орудие ут яуҙыра башланы. Уға һауанан бомбардировщиктар ҙа ҡушылды. Бер аҙҙан күккә ракеталар сөйөлөп, танкылар һөжүме рөхсәт ителеүен иҫкәртте. Ҙур тиҙлектә туҙан борҡотоп, ут сәсеп килгән «тимер дейеүҙәр» артынан пехотаға ла күтәрелергә ваҡыт етте. Бер-бер артлы «Алға, атакаға!» тигән бойороҡтар яңғыраны. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ ғәскәр тегенән дә, бынан да күтәрелеп, ата-ата алға ташланды. Немецтарҙың иң шөрләгәне – ҡул һуғышы башланды.

Ә һуғыш яланындағы хәл һөйләп аңлатмаҫлыҡ буталышты хәтерләтте: дошман позицияларына ут ҡойоно – снарядтар, бомбалар яуҙы. Ҡайҙалыр ары, ҡара төтөн бағанаһы күтәреп, нимәлер янды, самолеттар, танкылар геүләне, пулемет-автоматтарҙан пулялар зыңланы... Тауышҡа тонған ҡолаҡтар йүнләп ишетмәне. Ә беҙ тик алға, дошман окоптары тарафына, ашыҡтыҡ. Ҡаршылашҡан, яраланған фрицтарҙы дөмөктөрәбеҙ, ғәйрәтләнеп, соҡор-саҡыр аша һикергеләп, траншеяларға етәбеҙ. Күҙемә аҡ-ҡара күренмәй, канауға мәтәлләп килеп төштөм. Тирә-йүндәге снаряд шартлауынан мәхлүк немецтар аңшайып боҫҡан. Атмайҙар. Үҙем: «Мәүләм! Ҡотҡар был мәхшәрҙән!» – тип мығырҙандым да йәнә дошмандарға ташландым...

Ҡолағыма «Алға!» һүҙе салына. Янымдағы яуҙаштарымдың кәмеүен шәйләйем. Тик әле туҡтарға мөмкинлек юҡ. Хатта үлем хаҡындағы уйым онотолдо. Бер нәмәгә ҡарамай, һуңғы нығытмаларға – блиндаж, дзоттарға яҡынлайбыҙ, гранаталар ташлайбыҙ. Бер-бер артлы шартлау яңғырай. Көслө һөжүмебеҙ иҫ китмәле мәшхәр ҡуптарҙы. Эстонияның баш ҡалаһы Таллинды беҙ шулай азат иттек.

Ғәле Ғәйфулла улы артабан Польшаны азат итеүҙә ҡатнаша. Һуғышты 2-се Белорус фронты составында Германия ерендә тамамлай. Яҙмышы уны Алыҫ Көнсығыштың Амурҙағы Комсомольск ҡалаһына илтә, унан Мәскәү өлкәһенә килтереп, уйламағанда Финляндияла хеҙмәт иттерә.

«Батыр яраһыҙ булмаҫ» ти халыҡ мәҡәле. Йосопов өс тапҡыр яраланып, госпиталдә дауалана, ҡулына ҡорал тотор хәлгә еткәс, йәнә һуғышырға тотона. Әллә нисә тапҡыр контузия ала, ләкин бирешмәй, һаман сафта ҡала. Күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Ғәле Йосопов II дәрәжә Ватан һуғышы, III дәрәжә Дан ордендары, «Батырлыҡ өсөн», «Хәрби батырлыҡ өсөн», «Германияны еңгән өсөн» миҙалдары менән наградлана.

Әңгәмәне Дан ордены һәм «Батырлыҡ өсөн» миҙалы ҡайһылайыраҡ тапшырылыуы тарафына йүнәлтәм. Яугир аҙыраҡ уй ебен төйнәне лә күргәндәрен, башынан уҙғандарын тәфсилләп һөйләп алып китте:

– Белоруссия ерендә булды был хәл. Траншеялар ҡаҙып нығытылған позициянан арттараҡ урынлашҡан күҙәтеү пункты менән элемтә булдырыу бурысы миңә йөкмәтелде. Ара – саҡрым ярым тирәһе. Ҡуҙғалыуыма эңер төшә башланы. Ҡараңғыға ҡалмаҫҡа тырышып, янып-бешеп, йүгерә-атлай барабан сымымды һуҙам. Әлбиттә, маскировка кәрәклеген дә иҫтә тотам. Асыҡ ерҙе үтеп, ҡатнаш ағаслыҡҡа яҡынлашам. Унда дошман булыры башыма инеп тә сыҡмай, үҙемде иркен тотам. Ҡапыл ҡаршыма ҡыуаҡлыҡ араһынан дөбөр-шатыр танк килеп сыҡмаһынмы! Абайлабыраҡ ҡараһам – немецтыҡы. Ышанып етмәй, ҡапылғара туҡтап ҡалдым. Уңарсы эргәмдән бер нисә пуля шыйлап уҙҙы. Күҙ асып йомған арала ергә ауҙым, йәнәһе, үлдем. Ә үҙем билемдәге ҡайышҡа

нығытылған гранатаны ысҡындыра һалдым. Танк бик аҡрын алға шыуыша. Тулҡынланыуҙан тәнем эҫеле-һыуыҡлы, йөрәк ярһып тибә. Ҡурҡыуҙан түгел, сөнки ниндәйҙер тупаҫлыҡ ҡатыш күңел күтәренкелеге һиҙәм. Әйтерһең, үлем миңә түгел, ә дошмандарға, тонналаған немец броняһы эсендә ултырғандарға, янай.

Ара ун метрҙай ғына ҡалғас, тешемде ҡыҫып, гранатамды тимер һөлдәгә ырғыттым да үҙем ергә һеңдем. Тоноҡ шартлау тауышы ишетелде лә тынлыҡ урынлашты. Танк сылбыры өҙөлгән сүрәттә лә, уның эсендәге дошмандар сығыр ҙа үҙемә ташланыр, тип борсолоп ятыуымды беләм. Ахырҙа башымды ҡалҡытып ҡараһам, танк люгы эсендә йылт-йылт килеп ут йылмылдай. Баҡһаң, башняның люгы миңә тиклем үк аҡтарылған да минең гранатам нәҡ ана шул асыҡ урынға төшөп шартлаған. Хәҙер әйт инде, ғәжәп хәл түгелме был күренеш?

Ана шулай көтмәгәндә башҡа һыймаҫлыҡ хикмәттәргә юлығырға тура килә һуғыш ҡырында. Мин дә уйламаҫтан фрицтарҙы дөмөктөрҙөм, өҫтәүенә «Батырлыҡ өсөн» миҙалы менән наградландым! Орденға килгәндә иһә, һуғыш тамамланыр алдынан Одер йылғаһы аша сыҡҡанда, фашист пулеметсыһын дөмөктөргән өсөн бирҙеләр. Дан орденын алыу былай булды. Һуғыш ғәрәсәтенең иң ҡыҙған һәм иң ауыр осоронда, әйткәндәй, бына-бына тамамланыу алдында, беҙҙең 2-се Белорус фронтына Берлиндың төньяғынан һөжүм иткән дошман ғәскәренә ҡаршы тороу бурысы йөкмәтелде. Был ваҡытта 1-се Белорус һәм 1-се Украин фронттары ғәскәрҙәре баш ҡалала урам һуғышы менән мәшғүл ине. Майҙың дүрте ине булһа кәрәк. Төн. Һалҡын ел иҫә. Һауала йыртыҡ-йыртыҡ ҡара-һоро болоттар йөҙә. Ә немец, өңө ҡыйрала барыуын күрһә лә, нығыша, һуңғы көсөнә ҡаршылаша. Одерҙың теге ярынан был яҡ ярҙың тетмәһен тетә: артиллерия утына тота һәм өҙлөкһөҙ пулеметтан металл ямғыры яуҙыра. Баш күтәрерлек әмәл юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, бар көсөбөҙҙө ашығыс рәүештә һал һәм кәмәләр әҙерләүгә һалабыҙ. Асылда эшебеҙ шөйлә насар түгел.

Төн урталарына әҙерлек эштәрен тамамлап, йөҙөү ҡорамалдарын көс-хәлгә һөйрәп йылғаға төшөрәбеҙ һәм, ишкәктәр, таҡта киҫәктәре менән тырыша-тырмаша ишеп, ҡаты ағымға ҡаршы көрәшәбеҙ. Шулай ҙа шәп ағым үҙенекен итте – күпмелер булһа ла аҫҡа табан тартты. Ниһайәт, дошман позицияһы урынлашҡан йылға ярына яҡынлайбыҙ. Ҡараңғылыҡтан файҙаланыу ҙа әллә ни һөҙөмтә бирмәй, сөнки әленән-әле һауаға осоролған ракеталар яҡтылығы ҡамасаулай. Фашистар беҙҙе күреп, туранан-тура тоҫҡап ата.

Бына һал-кәмәләр ярға килеп терәлә. Алыш бик ҡаты бара. Был мәлдә мин элемтәсе тип кенә тормайһың, иптәштәрең ни менән мәшғүл – һин дә шуны үтәйһең. Әммә һөжүмдең әрнеүле ауырлыҡтарын еңер өсөн ныҡышмалылыҡ һәм тәжрибә кәрәк. Шуларҙы иҫеңдә тотһаң, һис шикһеҙ уңышҡа ирешәһең. Ә беҙҙә, оҙон һуғыш юлы уҙған яугирҙарҙа, был талаптарҙы аңлағандар хәҙер бихисап. Тап шул арҡала ҡотороноп ут яуҙырған фашистарға беҙ ҙә көс һәм таһыл ысулдарын отошло ҡулланабыҙ.

Еүеш ҡырсынташ һәм батҡаҡлы соҡор-саҡыр, бөткөһөҙ таҡта, бүрәнә киҫәктәренә эләгә-йығыла алға, пулеметсы яғына, ынтылабыҙ. Эргәнән йүгергән иптәштәремдең ыһылдап йығылғанын һиҙәм, тик туҡталырға ваҡыт юҡ – үҙеңдең йәнең ҡыл өҫтөндә...

Иңкәйә биреп, пулеметсыға яҡынлашам. Ятҡан урыны билдәле – балсыҡ өйөмө артында. Тимәк, дошманды тик граната менән шартлатып юҡ итергә мөмкин. Хәҙер шыуышыуға күстем. Бына граната ырғытырлыҡ ҡына ара ҡалды. Ҡәһәрең, нәҡ ошо мәлдә һул яҡ бот итен пуля семтеп үтте. Был еңел яра ине. Шулай ҙа миңә уңыш йылмайҙы: «Һуғыш бөтөүен аңламайһыңмы, ахмаҡ!» – тип үҙ алдыма мығырҙандым да бар көсөмә гранатаны өйөм артына ырғыттым.

Ахыры, фриц суҡынды – атыу туҡталды. Ул арала башҡалар ҙа мөһим позицияны ҡулға төшөрҙө. Ҡапыл тынлыҡ урынлашты һәм шунда уҡ лейтенант Фроловтың көр тауышы яңғыраны:

– Иптәштәр, Берлинға еттек! Бына ул, алдыбыҙҙа – Гитлерҙың өңө. Беҙ еңдек! Ура-а-а!

Иҫән ҡалғандар командир «ура»һына дәррәү ҡушылды...

Гвардия лейтенанты Ғәле Ғәйфулла улы Йосопов тыуған яғына 1948 йылдың июнендә генә әйләнеп ҡайта. Шул уҡ йылда Нәжибә исемле ҡыҙ менән ғаилә ҡора. Улар ике бала тәрбиәләп үҫтерәләр, уҡытып, башлы-күҙле итеп, үҙ ғаиләләрен ҡорорға ярҙамлашалар.

Хәрби инвалидлыҡта булыуына ҡарамаҫтан, элекке яугир хаҡлы ялға киткәнсе эшләй, йәмәғәт эштәренән дә ситләшмәй. 1950 йылдан алып бөгөнгө көнгә тиклем коммунистар партияһы ағзаһы. Һуғыш ветеранына РФ президенттары Б. Н. Ельциндан, В. В. Путиндан, БР Президенты М. Ғ. Рәхимовтан ҡотлау телеграммалары килгән.

Әңгәмә барышында ул фронтта райондаштарын, хатта ауылдаштарын осратыуы тураһында иҫләп алды. Баҡһаң, ул Байрамғол егете Исмәғил Ғәйнуллинды тап иткән, ә Шауляй янында ауылдаштары Ниғмәт Зөлҡәрнәев менән Хәбировты осратҡан. Сит тарафтарҙа, етмәһә, һуғыш мәлендә таныштар менән осрашыуҙан да ҡыуаныслы күренеш бармы?!

– «Гитлерҙы дөмөктөрөп, илебеҙгә ҡайтып зат-зәүерҙе күрә алырбыҙмы?» – тигәйнек осрашҡан саҡта. Шөкөр, барыбыҙға ла Башҡортостаныбыҙға ҡайтырға насип итте, – ти ветеран.

«Илен һаҡлаған – ирәйеп йәшәгән» тигәндәр. Ысынлап та, Ғәле Ғәйфулла улының һуғыштан һуңғы ғүмере эшлекле хеҙмәттә уҙҙы. Тормошонан ҡәнәғәт, үҙен бәхетлеләр рәтенә индерә.

– Теләгем шул: йәш быуын беҙ күргән-кисергәндәрҙән фәһем алһын, тыныс тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшәһен ине. Илдә һәр саҡ тыныслыҡ булһын!

## *Хатҡынаҡайы ҡайтты…*

Муса гүзәл тәбиғәтле Елмерҙәк тауы араһындағы Айыс атамалы бәләкәй генә ауылда тыуа. Тыңлаусан, әҙәпле, ололар әйткәненә иғтибарлы, белемгә ынтылыусан был малай ғаиләлә ете баланың иң олоһо була. Тау-ташлы ҡаяға үрмәләп, иҫерткес хуш еҫле яландарҙы гиҙеп, тешкә үтмәле шишмә һыуын, ҡымыҙ һәм буҙа һемереп уҙа уның ҡайғыһыҙ үҫмер сағы. Бер үк ваҡытта һәләтле, отҡор егет ауылда оҫта мандолинасы булып таныла. Урта хәлле донъя көткән атаһы Кинйәғәли уның белемгә ынтылышын хуп күреп, етенсе синыфты тамамлағас, уҡытыусылар әҙерләү курсына бирә.

Муса тәүҙә Инйәрҙә, унан Сермәндә белемен камиллаштыра. Әлбиттә, ул осорҙа белемле уҡытыусы-тәрбиәселәр һанаулы ғына. Тиҙҙән егетте Хәйбулла районына эшкә ебәрәләр, ул башланғыс мәктәпкә мөғәллим итеп тәғәйенләнә. Ләкин ыратҡан эше менән оҙаҡ шөғөлләнергә яҙмай, халыҡ араһында ихтирам ҡаҙанып өлгөргән йәш мөғәллимде 1940 йылда хәрби хеҙмәткә саҡыралар. Хеҙмәте Польша ерендәге Белосток ҡалаһы эргәһендә икәнен хат аша белдерә һалдат. Хат ҡағыҙының матур поляк дәфтәре икәнлегенә лә һоҡланып ҡуя хатта. (Мөғәллим булараҡ, ҡағыҙҙың сифатына диҡҡәтле баһа биреүелер, күрәһең.)

Хаттан аңлашылыуынса, Совет-герман килешеүенә ярашлы, Писсы, Нарва, Висла йылғалары һыҙығына тиклем (Керзон линияһы) Ҡыҙыл Армияның күпмеләр ғәскәре Польшаның сикләнгән ере майҙанында торған. Муса Кинйәғәли улының миһырбанлы кеше булыуын яҙған хаттары асыҡ күрһәтә. Матур итеп теҙелгән хат юлдарындағы һәр һүҙенән иғтибар һәм ихтирам бөркөлә. Ул яҡындарының,

ауылдаштарының тормошо һәм сәләмәтлеге менән ҡыҙыҡһынған. Сөнки уға бөтәһе лә яҡын һәм ҡәҙерле, шул сәбәпле үҙен борсоған хәлдәр хаҡында ла төпсөнгән. Муса һеңлеһе Шәмсүнәнән мандолинала уйнарға өйрәнеүен үтенә, шул уҡ ваҡытта уйын ҡоралына һыу тейҙерә күрмәүен иҫкәртә.

Хаттарҙың йөкмәткеһенән күренеүенсә, уның кешеләр менән аралашыусан булғаны күҙгә ташлана. «Ун бер кешегә хат яҙып һалдым, әле тағы алты таныштарыма ебәрәһе бар. Юлбарыҫтан, Ноҡаттан, Хоҙайбирҙенән хат килеп тора», – тигән юлдар бар хатында.

...Ҡулыма таушалған, күп йылдар уҙыуҙан һарғайған, хәрефтәр аныҡлығын юғалта төшкән, бөкләнгән урындары теткеләнгән ике хатты алам. Улар йыраҡ ара уҙып, Польшанан Башҡортостандың урман-таулы төбәк ауылына килгән. Ул саҡта әле илебеҙҙә тыныс тормош булып, совет иле халҡы ҡайғы-хәсрәтһеҙ көн күргән, оҙаҡламай дәһшәтле һуғыш тоҡанырын күптәр күҙ алдына ла баҫтырмаған. Минең ике туған ағайым Муса ла хәрби хеҙмәтен теүәл үтәп, иҫән-һау иленә, ғәзиз туғандары янына ҡайтып, яратҡан ҡыҙына өйләнеп, балалар үҫтереп, оҡшаған эшен уңышлы дауам итеп, бәхетле тормошта ҡыуанып йәшәрен күҙ алдына баҫтырып хыялланғандыр...

Ирекһеҙҙән, сит яҡтан ҡәҙерле хатын тыуған еренә оҙатырға уйланып-ҡыуанып ултырған ағайымды күҙ алдына баҫтырам. Кинәт күҙҙәремә йәштәр эркелә, күңелем тулыша, бошоноу хисе уяна. Хәтерҙе яңыртыу маҡсатында 7-се «Книга памяти Башкортостана» китабының 319-сы битен асам. Унда: «Сафиуллин Муса Киньягалиевич, родился 1921 г. в деревне Аисово, Белорецкого района БАССР. Рядовой, стрелок. Пропал без вести в июне 1941 г.» – тиелгән. Тимәк, саҡ егерме йәше тулған Муса ағай һуғыштың иң ҡыҙыу утына эләккән. Ә үкенесле хәбәрһеҙ юғалыу билдәһеҙлеге ата-әсә өсөн күңел ғазаплағыс хәсрәткә һала, өмөтләнеп көтөргә мәжбүр иттереп йонсота. Уйлаһаң, көтөүҙән дә аяныс хәл бармы икән? Бәлки, барҙыр. Тормош ағымы ниндәйен генә ауыр хәлдәр алдына килтереп баҫтырмай әҙәм балаһын. Тик уларҙың күбеһе хәстәрлек һөҙөмтәһендә яйлап үтәлә килә. Ә бына хәбәрһеҙ юғалғандарҙы ғүмер баҡый ҡасандыр ҡайтырына өмөтләнеп көтөүе, ай-һай, көткәндәргә генә билдәлелер. Ундайҙарға Хоҙай сабырлыҡ бирһен!..

**Исмәғил ҒИМРАНОВ.**
**Учалы ҡалаһы.**

## *Йөрәк аша үткән яҙмыш*

Әлеге һүрәтләмәбеҙ геройы тураһында уйланыуҙар, ҡағыҙға төшөрҙән күпкә алда, күңел дәфтәренә теркәлгәйне. Дүртөйлө районы мәктәптәрендә директор вазифаһында ғына ла дүрт тиҫтә йылға яҡын эшләп, ғүмере буйына йөрәген балаларға биргәне, күп Маҡтау ҡағыҙҙары, социалистик ярыштарҙа еңеүҙәре һәм һигеҙенсе тиҫтәне егеттәрсә етеҙлек менән атлап сығып, һаман да шулай кинәнеп, күңел дәрте менән тормош һуҡмағынан атлап килеүе өсөн генә лә түгел. Уның ғүмере – кешелә кешелеклелек сифаттары ни дәрәжәлә була алыуының сағыу бер үрнәге. Яҙмышы һәләтле яҙыусы йәки режиссер күҙенә эләкһә, әҫәрҙең бына тигәне ижад ителер ине…

Үзбәк Мостафинға бала саҡтың оҙон-оҙағы түгел, ҡыҫҡа ғынаһы ла эләкмәгән. Һуғышҡа тиклем үк, 1937 йылдың сатнама һалҡын декабрь төнөндә, етеһе лә тулмаған Үзбәк атаһы янында мышнап ҡына йоҡлап ятҡанда, ғаилә башлығы Хажғәлиҙе урынынан һөйрәп торғоҙоп алып китәләр. Башҡаса малайға атаһын күреү бәхете теймәй. Әсәһенең – итәк тулы бала менән ҡалған 38 йәшлек Рәҡиәнең михнәт сигеүҙәре ана шунан башлана ла инде. Башта Хажғәлиҙең тунын

алып сығып китәләр, унан һуң алты баланың тамағын туйҙырыусы теген машинаһына ла сират етә. Ул машинаны барыһы бергә илашып-ялбарып алып ҡайтыуҙарын әрнеп хәтерләй Үзбәк ағай. Ярай, юҡлығына түҙер ҙә инең – нахаҡ һүҙ, яуызлыҡ менән йәнде телгеләүҙәргә нисек түҙергә?!.

– Октябрь байрамы. Беҙҙең Венеция ауылында демонстрация бара, – тип йыраҡ үткәндәге ауыр иҫтәлектәрҙе барлай хеҙмәт ветераны. – Ул ваҡытта демонстрациялар бәләкәй генә ауылдарҙа ла үткәрелә торғайны. Бала-саға ҡала буламы һуң – беҙ ҙә колонна сафында! Беренсе класҡа төшмәгәнмен әле. Әммә оҙаҡ йыуана алманым: колхоз председателе күҙенә салыныуым булды, минең өсөн демонстрация ла тамамланды. Елкәмдән эләктереп алып, көрткә сөйҙө был мине. Илап ҡайтып киттем. Синыфҡа ҡаршы элемент икәнлегемде аңлап түгел, әлбиттә, – ауыртыуҙан ғына булғандыр.

Үҙ ғаиләһенең "халыҡ дошманы" мөһөрө менән көн күрергә мәжбүр иткән золомдоң сәбәбен Үзбәк Хажғәли улы ауылдаш-замандаштарының сәйәси наҙанлығынан ғына күрә. Мөмкинлек буламы һуң! Һуғыш бара бит. Хәйер, уға һылтаныуҙан ғына ла тормош еңеләймәй. Һәр ғаиләлә балалар уҡырға тырышып ята. Үҙ теләге көслө булғанға һәм әсәйҙәре өгөтләгәнгә генә түгел, бәлки, аталары васыят итеп әйткән өсөн ярһып, сат йәбешеп уҡыйҙар. (Аҡ гвардиясыларға ҡаршы көрәшеүсе Чеверев отрядына үҙ теләге менән ҡушылған ағалы-энеле Фәйзрахман менән Хажғәли Мостафиндар тураһында тыуған яҡ тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар Әксән Сәлимовтың "Дүртөйлө ерендә" китабынан уҡып белә.) Венециялағы башланғыс мәктәпте тамамлағас, район үҙәгендәге икенсе баҫҡыс мәктәпкә йөрөйҙәр. Йәйәүләп кенә бара алһаң – бер хәл, арала әллә ҡайҙарғаса йәйелгән Ағиҙел бар бит әле. Паромсының кәйефенә тура килергә өйрәнеү Үзбәк ағайҙың хәтерендә иң ауыр фән булып уйлып ҡалған, сөнки "халыҡ дошманы" балаһы менән иҫәпләшеп тороу юҡ: кем нисек әйтһә – шуныҡы дөрөҫ.

Егеттең уҡытыусылыҡ һөнәрен һайлауы көтмәгәнсәрәк була. Армия йәшенә етеп килеүсе йәш-елкенсәк хәрби комиссариат юлламаһы буйынса Дүртөйләнән Бөрөгә рентген үтергә килә. Ана шунда рентген кабинаһы ишегенә йәбештерелгән иғлан Үзбәктең яҙмышын хәл итә лә инде. Бөрө уҡытыусылар институтының ҡабул итеү комиссияһы яҙып элгән була уны. "Ҡайттым, әсәй менән кәңәш иттем, һөйләштек. Сохари киптереп, бер аҙ бәрәңгелер, ярмалыр йүнәтте лә, бисмиллаһын әйтеп, ул мине юлға оҙатты", – тип хәтирәләрен яңырта Үзбәк Хажғәли улы.

Әсәһенең балаларын уҡытырға нисек тырышыуы тураһында һөйләгәндә, әңгәмәсемдең күҙҙәре йәшләнә. Ҡазан финанс институтының беренсе курсын тамамлаған ҡустыһы Әнфәк яҙған хатты әле булһа һүҙмә-һүҙ хәтерләй ул. Һаман шул хәйерселек инде. Егеткәй уҡыуын ташлап, тамаҡ туйҙырырҙай урын эҙләмәксе. Көндө төнгә ялғап колхоздың иң ҡара эшендә йөрөгән әсәләре, үтескә аҡса алып, район үҙәгенә килә. "Улымды ебәрә генә күрмәгеҙ, һыйырымды һатып булһа ла уҡытырмын" тип ректор исеменә хат оҙонлоғо телеграмма һуға.

Алыҫ Көнсығышта үткән хәрби хеҙмәт йылдары танкист Мостафиндың бөгөнгөләй күҙ алдында. Улай ғына да түгел, илле өс йыл бергә йәшәү дәүерендә ҡатыны Фәриҙә апай ҙа уның хеҙмәттәштәренең исем-фамилияларын ятлап бөткән. "Йәһүд Трахтенберг, украин Григоренко, сиған егете Запоро бер туғандар кеүек булдыҡ. Һуғышыу түгел, бер-беребеҙгә ҡырын да ҡараманыҡ. Хәҙер генә ул бер икмәкте ашап, бер ерҙә үҫкәндәр казармаға һыйыша алмай", – тип әсенә элекке танк командиры, һәм беҙҙең әңгәмә яй ғына Мостафиндарҙың ғаилә педсоветына әүерелә бара. Быныһы ла – улар өсөн ғәҙәти хәл. Фәриҙә Фәйез ҡыҙы күптән инде өйгә ҡосаҡ-ҡосаҡ дәфтәр күтәреп ҡайтмаһа ла, Үзбәк

Хажғәли улы төндәрен мең дә бер директор хәстәрен күңелдән барламай ғына йоҡлап китергә өйрәнһә лә, һөнәри фекер алышыуҙар туҡталып ҡала алмай…

1953 йылда Үзбәк Мостафин районда иң йәш мәктәп директоры була. Армиянан йөрөп ҡайтҡас “рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы “тигән йәнә бер һөнәр алған 24 йәшлек Үзбәкте Яңы Уртай ете йыллыҡ мәктәбенә директор итеп тәғәйенләйҙәр. Йәшлек шауҡымылырмы, һәр эштә ҡул арты еңел була етәксенең – коллектив менән эшләүгә яңылыҡ индерһенме, мәктәп, бала, ата-әсә бәйләнешенә ҡағылышлы ниндәй ҙә булһа педагогик “йомаҡ” сисһенме! Райондың күп кенә мәктәптәрендә эшләй ул, хеҙмәт юлының байтағы Көшөл мәктәбендә үтә. Уҡытыусы яҙмышына партком секретары булып эшләү ҙә ялғана. Әйткәндәй, бынһы Мостафиндың үҙе өсөн дә көтөлмәгән хәл була.

– Иҫке Солтанбәк мәктәбендә эшләгән саҡ. Температура менән ауырып ятам. Ҡапҡа төбөнә Әминев машинаһы килеп туҡтаны, – тип хәтерләй Үзбәк ағай. – Ундай саҡта күңелгә яҡшы уй килмәй, сөнки бала саҡтағы хәлдәр күңелдән юйылмаған әле. Әхмәт Ғатаевичтың шоферы килеп инде: “Саҡырта”, – ти был. Минең хәл мөшкөл икәнлекте күреп тора – кире китте, әммә бер аҙҙан әйләнеп тә килде. Ана шулай бюллетендә килеш Карл Маркс исемендәге колхоздың партком секретары булып ҡуйҙым. Ете йыл эшләнем. Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһенә лә барылды, миҙалдар алып ҡайттыҡ. Күңелле йәшәнек”.

Әле лә мәшәҡәттәр етерлек. Мостафиндар ғаиләһендә көн яңылыҡтар тыңлауҙан башлана. Унан һуң Ҡырғыҙстандағы сыуалыштар, Мексика ҡултығында йәйелгән нефть табы, егерме беренсе быуатта һәләк булған, ҡыйырһытылған, өйөнән ҡасҡан балалар тураһында фекер алышыуға күсәләр. Ғөмүмән, балалар тураһында һүҙ сыҡҡанда ғүмере буйына шулар тип йән атҡан, намыҫ бизмәнен алға ҡуйған был икәүҙең уҡытыусы тойомлауы эшкә ҡушыла. Олатаһы һәм өләсәһе янына Иванай ауылына ашҡынып торған биш йәшлек Илһамдарының ана шул күңел торошон һиҙеүе түгелме икән? Бында уның һәр уйлағанын ысынға алып, ҙур ихласлыҡ менән уйынға ҡушыла торған ҡәҙерле кешеләре бар шул.

– Баланың ни эшләргә белмәй торған буш ваҡыты булырға тейеш түгел, – тип ҡәтғи һығымта яһай Үзбәк Хажғәли улы. – Тик кенә ултырған баланы ҡайҙа күргәнегеҙ бар? Ата-әсәһе, уҡытыусылары юл күрһәтмәй икән, быны башҡалар эшләйәсәк. Ҡайһы бер “аҡыл биреүселәр”ҙең әйләнеп тә ҡарамай, йүгерә-йүгерә ҡасырлыҡ булыуын әйтеп торорға ла түгел. Өйөр-өйөр наркомандар, эскеселәр ҡайҙан килә? Ата-әсәләре иҫән була тороп, балалар дәүләт тәрбиәһендә үҫә. Әсәйем мәрхүмә тормош ғазаптарынан тонсоғор хәлгә еткәндә лә беҙгә елямғыр тейҙермәне. Улай ғынамы, һуғыш осоронда ҡустыһының ҡараусыһыҙ ҡалған ике балаһын да үҙебеҙгә алып ҡайтты.

Үзбәк ағай өсөн “тыуған ил” төшөнсәһе “үҙ өйө”нә һәм “ер сиге”нә бүленмәй, ул һәр нәмәне үҙ йөрәге аша үткәрә. Элеккенән ҡалған ғәҙәте.

**Зөлфиә Мөхәмәтйәнова.**
**Дүртөйлө районы.**

## *Ниндәй ул башҡорт эшҡыуары?*

«Ағиҙел» журналында эшҡыуарҙар тураһында әҫәрҙәрҙе ҡыҙыҡһынып уҡып барам.

Эшҡыуарлыҡ – үҙгәртеп ҡороуҙар емеше. Йүнселдәр тиҙ арала үҙ эшен яйға һалды, башҡаларға ла эш урыны булдырҙы. Ғаиләһенә әҙәмсә йәшәргә, ял итергә, балаларын уҡытырға, һаулыҡ нығытырға мөмкинлек таптылар.

Үкенескә ҡаршы, Башҡортостанда, Рәсәйҙәге һымаҡ уҡ, бындайҙар күп түгел.

Йылдан-йыл халыҡтың ярлыларға һәм байҙарға айырылыуы арта бара. Бының сәбәптәре бихисап. Йәмғиәттә был ҡатлам кешеләренә, көнләшептерме, ҡара яғыу ғәҙәти хәлгә инеп бара.

Башҡорт әҙәбиәтендә лә күҙәтелә был. Мәҫәлән, Хәйҙәр Тапаҡовтың «Ағиҙел» журналында (2010, № 1) баҫылып сыҡҡан «Ҡурсаҡ» хикәйәһенә туҡталайыҡ. Хикәйәлә уңышлы эшҡыуар, бай бисәнең тормошо йәмһеҙ итеп һүрәтләнә. Элек яҙыусылар ниндәйҙер мөхит кешеләре тураһында яҙыр алдынан уларҙың тормошо, йәшәйеше менән таныша ине, хатта ижади командировкалар ҙа ала торғайнылар. Х. Тапаҡовтың иһә эшҡыуарҙар тормошон бөтөнләй белмәүе һиҙелә. Уның уйынса, эшҡыуарҙар бай йәшәү өсөн бөтә кешелек сифаттарын юғалтырға мәжбүр.

Хикәйә ҙур ҡалала йәшәүсе бай бисәнең яңғыҙлыҡ тойғолары, хатта үҙ-үҙенә ҡул һалыу уйҙары менән башлана. Әйтергә кәрәк, был – эшҡыуарҙарға бөтөнләй хас булмаған сифат, улар һәр ваҡыт эш, осрашыуҙар менән мәшғүл. Сирләп китеү ҙә уларҙың эше өсөн ҙур ҡаршылыҡ.

Артабан автор бай бисәнең был тойғолары ҡайҙан килеп сығыуын бәйән итә, уның бөтә тормошон күҙ алдына баҫтыра. Героиня маҡсатына ирешеү өсөн үҙ тәне менән һатыу итеүсе фәхишә, енси ҡәнәғәтлеккә туймаған кәнтәй хәлендә күрһәтелә.

Бәлки, Совет власы ваҡытында ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ үҙ тәне ярҙамында ниндәйҙер мәсьәләне хәл итә алғандыр, ләкин бөгөнгө көндә эште бындай юл менән хәл итеү мөмкин түгел. Бөтә проблемалар аҡса ярҙамында ғына хәл ителә. Урта йәштәрҙәге ҡатын-ҡыҙ тураһында һүҙ ҙә юҡ. Түрәләр һәм чиновниктар яҡшы белә: аҡсаң булһа, йәш ҡыҙҙар муйыныңа тәлгәше менән аҫылынасаҡ.

Уйнашлы тормош менән йәшәп ятҡан бай бисә ҡапыл ғына үҙенең водителенә ғашиҡ була. Әммә яратҡан кешеһе менән булыр урынға, уға үс итеп, икенселәр ҡосағына уны үҙенең «Волга» машинаһында йөрөттөрә. Автор уйлауынса, «Волга» – иң шәп маркалы машина. Был ябай ғына факт та авторҙың тормошто белмәүен күрһәтә. Ысынлап та, ниндәй уңышлы бизнесмен «Волга» машинаһына ултырһын?!

Бай бисәнең ҡарауға алған ҡыҙы үҫеп етә, ябай милиционерға ғашиҡ була һәм ауырға ҡала. Әсәгә ҡыҙының ваҡытһыҙ, уның ҡарашынса, эшкинмәгән ираттан ауырға ҡалыуы оҡшамай һәм ул баланан ҡотолоуҙы талап итә. Ҡыҙы был тәҡдимдән ҡырҡа баш тарта. Әммә бай бисә барыбер үҙенсә эшләй:табиптан«Бала зәғиф, башында һыулы шеш бар» тип әйттереп, аборт яһата. Бында ла автор эшҡыуарҙарға хас булмаған нәмәләр уйлап сығара. Аҡсаға ҡытлыҡ кисермәгән кешенең ейән һөйөү хыялы булырға тейеш. Атаһы милиционермы, инженермы, һатыусымы, әллә ябай эшһеҙ кешеме – уныһы мөһим түгел, тик атай буласаҡ кеше һау-сәләмәт, эсмәгән, наркоман булмауы кәрәк. Ғөмүмән, аборт – эшҡыуарҙар араһында башҡа һыймаҫлыҡ күренеш. Улар түҙемһеҙләнеп ейән йәки ейәнсәр тыуыуын көтә. Балалар бит уларға ғаиләнең киләсәге генә түгел, уларҙың ғүмере буйы башҡарған эшен дауам итеүсе лә. Ә бына олатай, өләсәй була алмау – ҙур ҡайғы.

Әҫәр аҙағында Х. Тапаҡов героиняһының үҙ хаталарын, аҙғынлығын аңлауын, үҙгәрергә теләүен, халыҡ әйтмешләй, иманға килеүен һүрәтләй. Ул автобус туҡталышы яғына атлай. Йәнәһе лә, яҡшы кешеләр тик дөйөм транспорта ғына йөрөй, ә үҙ машинаһында түгел. Ярай әле, аттарҙа йә үгеҙҙә түгел.

Башҡорт эшҡыуарҙары тураһында әҙәби әҫәрҙәр бына шундай кимәлдә.

**Радик ВАХИТОВ.**

# *Әҙәби-мәҙәни мөхит*

***

19-20 октябрҙә Белорет төбәгендә Башҡорт әҙәбиәте көндәре булып үтте. Сарала Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры, ошо төбәктән БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Рауил Бикбаев, Башҡортостандың халыҡ шағиры Тимер Йосопов, шағир Зөфәр Вәлит, Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты Зөлфиә Ханнанова, тәржемәсе, Яныбай Хамматовтың ҡыҙы Гүзәл Яныбай ҡыҙы, шағир Дамир Шәрәфетдинов ҡатнашты. Улар ҡала башҡорт гимназияһында, педагогия лицейында, интернат-гимназияла, райондың Шығай, Сермән, Татлы, Инйәр ауылдарында халыҡ менән осрашты.

Әҙәбиәтте үҫтереү йәһәтенән төбәктә бөгөн байтаҡ эштәр башҡарыла. Белоретта шиғриәт буйынса "Ағиҙел өҫтөндә йәйғор", проза өлкәһендә эшләүсе авторҙар өсөн Яныбай Хамматов исемендәге, публицистика өлкәһендә ижад итеүселәр өсөн Григорий Белорецкий (Ларионов) исемендәге әҙәби премиялар булдырылған. Өс баҫмала: башҡортса "Урал" гәзитендә, рус телендә "Белорецкий рабочий" гәзитендә һәм металлургия комбинатының баҫмаһы булған "Металлург" гәзитендә әҙәби әҫәрҙәр даими бирелеп бара. Һәммә ерҙә лә әҙиптәрҙе ихлас күңел, яҡты йөҙ менән ҡаршы алып, үҙҙәренең ҡаҙаныштары, тарихы, бөгөнгө хәлдәре тураһында һөйләнеләр, һорауҙар бирҙеләр. Әңгәмәләр ваҡытында халыҡтың әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныуы, ундағы яңылыҡтар менән хәбәрҙәр булыуын күреү һөйөнөслө.

***

Бөрйән районында Башҡорт әҙәбиәте көндәре уҙҙы. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ҡәҙим Аралбай, шағирҙар Фәнил Күзбәков, Таңһылыу Ҡарамышеваға Яҙыусылар берлегенең урындағы ағзалары Айһылыу Ғарифуллина, Инсур Артур ҡушылды. Әҙиптәр Байназар, Нәби, Иҫке Собханғол, Әбделмәмбәт, Килдеғол ауылдары халҡы менән осрашыуҙарҙа шиғырҙар уҡыны, рухиәт, әҙәбиәт, ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу мәсьәләләренә ҡағылды. Сара сиктәрендә 60 йәше тулыу айҡанлы шағир Сәрүәр Ғәләүетдиновтың тыуған ауылы Ҡолғанала әҙәби-музыкаль кисә ойошторолдо. Яҡташтары, ҡәләмдәштәре, ижадын яҡын күреүселәр әҙипкә ихлас ҡотлау-теләктәрен йыр-моң, бейеү, шиғри юлдар аша еткерҙе, иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы.

***

Ҡазан ҡалаһында Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры, башҡорт һәм татар әҙәбиәттәре классигы Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 130 йыл тулыуға арналған "Мәжит Ғафури мираҫы һәм хәҙерге заман" тигән темаға Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙҙы. Уны Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһының Ғ. Ибраһимов исемендәге Тел, әҙәбиәт һәм сәнғәт институты ойошторҙо.

Конференцияны институт директоры, филология фәндәре докторы, профессор, ТР ФА мөхбир ағзаһы К. М. Миңнуллин инеш һүҙ менән асты. ТР Дәүләт Советы Рәйесе урынбаҫары Римма Ратникова, Татарстан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Илфаҡ Ибраһимов ҡотлау һүҙҙәре әйтте. Йыйында төрлө тарафтарҙан килгән 40-лап ғалим доклад менән сығыш яһаны.

Конференцияла Башҡортостандан саҡырылған профессор Әхмәт Сөләймәнов, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ирек Кинйәбулатов, Ғафури районы хакимиәтенең бүлек етәксеһе Ғәлинур Ҡалмурзин,

М. Ғафуриҙың Өфөләге йорт-музейы директоры Фәнис Янышев, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры директоры Рәйес Исмәғилев, М. Ғафури исемендәге мәҙәниәт фонды советы рәйесе Люциә Камаева ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

***

Өфөлә Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында күренекле башҡорт яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Һәҙиә Дәүләтшинаның тыуыуына 105 йыл тулыуға арналған күргәҙмә асылды.

Сарала шағирҙар Ҡ. Аралбай, И. Кинйәбулатов, Р. Шәкүр, Г. Юнысова, яҙыусылар Т. Ғарипова, Ф. Мырҙаҡаев, Ф. Янышев, яҙыусының туғаны М. Сынбулатова, Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһындағы Һ. Дәүләтшина музейы етәксеһе, Һ. Дәүләтшина ижадына арналған фотоальбомды төҙөүсе Г. Ҡаҫҡынова, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте директоры урынбаҫары Ғ. Ғәлимова, БР-ҙың халыҡ артистҡаһы Ф. Килдейәрова сығыш яһаны.

Һ. Дәүләтшинаның бюсын асыу ҙа ҙур ваҡиға булды. Уны Сибайҙа йәшәүсе скульптор Хәйҙәр Ғарипов ижад иткән. Кисәне Милли әҙәбиәт музейы директоры Г. Моратова алып барҙы, Ф. Мостафина исемендәге 20-се гимназия уҡыусылары Һ. Дәүләтшина әҫәрҙәрен сәхнәләштергән өҙөктәр күрһәтте.

***

Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында вуздың Башҡортостан уҡытыусылар институты сағындағы студенты, ошонда педагог, шағир Хаким Ғиләжев менән "Ашҡаҙар" әҙәби түңәрәген ойоштorған, ошо уҡ исемдәге ҡулъяҙма журналдың мөхәррире булған Ноғман Мусин менән осрашыу уҙғарылды. Тәүҙә Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһына академияның музейҙарын, заманса кабинеттарын күрһәттеләр. Ҡала уҡыу йорттары, йәмәғәтселек ойошмалары вәкилдәре менән шығырым тулы залда хөрмәтле ҡунаҡтың биографияһы фотоэкрандан күҙалланды, уның әҫәрҙәренән Стәрлетамаҡ дәүләт драма театры артистары инсценировкалар уйнап кинәндерһә, студенттар иһә бына тигән концерт номерҙары менән һоҡландырҙы. Һуңынан һәммәһе лә күренекле яҙыусының һағышлы, иҫтәлектәргә бай фәһемле сығышын тыңланы.

***

Өфө "Нур" дәүләт татар театрының ҙур залында "Алтын тирмә" өлкә-ара милли театрҙар фестивале сиктәрендә "Ҡыңғыраўҙар сыңы" тип исемләнгән балалар музыкаль театрҙары фестиваленең һуңғы туры үтте. Сараны БР-ҙың Мәҙәниәт министрлығы, Өфө ҡалаһы ҡала округы администрацияһының сәнғәт һәм мәҙәниәт идаралығы, "Нур" дәүләт татар театры ойошторҙо.

Спектаклдәр ике көн дауамында "Нур" театрының бәләкәй залында, фестивалде тантаналы ябыу тамашаһы театрҙың ҙур залында уҙҙы.

Фестиваль сиктәрендә шулай уҡ театр коллективтарының етәкселәре һәм режиссерҙары өсөн Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, РФның атҡаҙанған артисы, БР-ҙың халыҡ артисы, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы доценты Әхтәм Абушахманов, композитор, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ғ. Сәләм исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты Нур Дауытов, РФ һәм БР композиторҙары ағзаһы, "Рампа" журналының музыка күҙәтеүсеһе Лилиә Латипова, Башҡортостандың Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының рус труппаһы режиссеры Мөсәлим Күлбаев ҡатнашлығында семинар-практикум ойошторолдо.

***

Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге премияһы йәмәғәтселек тормошонда әүҙем ҡатнашҡаны һәм «Әсәйемдең аҡ күлдәге» исемле проза китабы өсөн яҙыусы Хәйҙәр Тапаҡовҡа бирелде. Элегерәк был премияға әҙибә Зөһрә Фәйзуллина, скульптор Хәйҙәр Ғарипов, А. Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры етәксеһе Дамир Ғәлимов лайыҡ булғайны.